Рәүеф НАСИРОВ

# ҠЫЛЫС ҠЫНДА КИЛЕШӘ





НАСИРОВ Рәүеф Хәй улы,
Башҡортостан Яҙыусылар союзы ағзаһы, Рәсәй Федерацияһының һәм Башҡортостан Республикаһының атҡаҙанған мәҙәниәт хеҙмәткәре.

Рәүеф НАСИРОВ

# ҠЫЛЫС ҠЫНДА КИЛЕШӘ

*(Тарихи очерктар. Публицистика)*

Өфө, 2000

Китап спонсорҙар ярҙамында нәшер ителде

**Рәүеф НАСИРОВ**

**Ҡылыс ҡында килешә.** Тарихи очерктар. Публицистика. Өфө: полиграфия комбинаты нәшриәте, 2000. — 256 бит.

Башҡорт халҡы, яҙмышын тулыһынса Рәсәй менән бәйләгәс, уның бөтөн һуғыштарында ла ҡатнашмайынса ҡалмай. Кәрәккәндә лә, кәрәкмәгәндә лә. Хатта алдан сапҡан, беренсе булып барып үлгән. Уның яугирҙары араһында Муса Мортазин, Әмир Ҡарамышев, Миңнигәле Шайморатов, Александр Матросов-Шакирйән Мөхәмәтйәнов кеүек аҫыл ир-егеттәре лә баштарын һалған. Автор, әлегә тиклем билдәле булмаған, йә иһә бик аҙ билдәле булған архив документтарына таянып, Рәсәйҙең төрлө төбәктәрендә барған һәм ысын ғәрәсәтте хәтерләткән ҡан ҡойоштар хаҡында бәйән итә һәм үҙ уҡыусыларына: етмәҫме инде, мәғәнәһеҙ дау-яуҙарға ҡыҫылмайыҡ, халҡыбыҙҙы ҡырҙырмайыҡ, тип өндәшә.

ISBN 5-85051-163-6

© Рәүеф Насиров, 2000

# Шәхес яҙмышы — ил яҙмышы

*Әҙәбиәтебеҙ, мәҙәниәтебеҙ тарихында борон-борондан уның төрлө-төрлө өлкәләрендә берҙәй уңышлы һәм емешле эшләгән әҙиптәр аҙ булмаған. Үҙҙәренең күп тармаҡлы эшмәкәрлеге менән улар фән тармаҡтарында ғына түгел, ә ғөмүмән йәмғиәтебеҙҙә яңыса аң-ҡараш формалашыуына, милли үҙаң үҫешенә булышлыҡ иткән шәхестәр. Шундай әҙиптәр хаҡында һүҙ барғанда, мин йыш ҡына Рәүеф Насиров эшмәкәрлеген иҫкә төшөрәм һәм уйға ҡалам: кәсеп-һөнәре менән кем һуң ул Рәүеф Насиров? Тарихсымы, фольклорсы, әҙәбиәтсе ғалиммы (ә бит уның яҙғандары унда файҙаланылған материалдың яңылығы, фәнни нигеҙле булыуы менән исем-дәрәжәле ғалимдар яҙыуы кимәлендә, хатта артығыраҡ булмаһа), яҙыусымы, ил өйрәнеүсеме, журналистмы?*

*Ошо юлдарҙы яҙған көндәрҙең береһендә юлымда Рәүеф Насиров үҙе осраны, мин уға уйлап йөрөгән һорауҙарымды бирҙем: үҙегеҙҙе ниндәй һөнәр кешеһе тип иҫәпләйһегеҙ, тинем. Әҙип оҙаҡ уйланып торманы, тыйнаҡ ҡына итеп: “Мин — журналист”, — тип яуап бирҙе. Миңә ҡалһа, Рәүеф Насиров — бер үк ваҡытта журналист та, ҡыҙғаныսҡа ҡаршы, рәсми исем-дәрәжәһе булмаған ғалим да, яҙыусы ла.*

*Бына әле минең алдымда уның “Китап” нәшриәтендә 1997 йылда баҫылып сыҡҡан “Уҙамандарҙы эҙләйем” исемле китабы. Әлегәсә йә бөтөнләй билдәһеҙ, йә аҙ билдәле булған күпме мәғлүмәт тупланған унда! Әҙәбиәтебеҙ, мәҙәниәтебеҙ тарихында баһалап бөтмәҫлек хеҙмәт күрһәткән Мифтахетдин Аҡмулла, Зәйнулла Рәсүлев, Фәтхелҡадир Сөләймәнов, Булат Имашев, Хәбибулла Ғәбитов, Нуриағзам Таһиров, Ғайса Рәсүлев кеүек әҙиптәрҙең тормош юлы, эшмәкәрлеге тәү башлап Рәүеф Насировтың тынғыһыҙ эҙләнеүҙәре арҡаһында киң йәмәғәтселеккә таныш булды. Уларға Октябрь революцияһынан һуң тәүге йылдарҙа Башҡортостан автономияһы өсөн көрәшкән Шәриф Манатов,*

*Зәки Вәлиди, Бәхтегәрәй Шәфиев, Хафиз Ҡушаев кеүек эшмәкәрҙәр хаҡындағы тикшеренеүҙәрҙе лә өҫтәһәң, уларҙы яҙыу өсөн ни хәтле ваҡыт, көс, тырышлыҡ һалынғанлығын аңлауы ҡыйын түгел.*

*Әле минең өҫтәлемдә Рәүеф Насировтың "Ҡылыс ҡында килешә" тигән очерктар китабының ҡулъяҙмаһы ята. Уның менән танышып сыҡҡас, авторҙың тикшеренеү-төпсөнөүенә, яҙыу маһирлығына тағы бер һоҡланып ҡуйҙым. Халҡыбыҙ тарихында әлегә тиклем аҡ тап булып ҡала килгән күпме шәхестәр, илебеҙ, еребеҙ-һыуыбыҙ яҙмышына бәйле күпме ваҡиғалар унда сағылыш тапҡан.*

*Китап уҡыусыны уйланырға мәжбүр итерлек тарихи очерктарҙан һәм публицистик мәҡәләләрҙән төҙөлгән. Шуныһы күҙгә ташлана: әҙип халҡыбыҙҙың тарихындағы ҡайһы бер ваҡиғаларҙың төбөнә төшөргә, уларҙың асылын яңыса баһаларға ынтыла, әммә үҙенең ҡарашын, һүрәтләнгән ваҡиғаларға булған мөнәсәбәтен башҡаларға тағырға тырышмай, уларҙы тик уйланырға ғына саҡыра. Бына, мәҫәлән, китапты башлап ебәреүсе "Гелән атлығып тороу кәрәкме?" исемле мәҡәлә. Моңһоу уйҙарға һала ул. Ысынлап та, башҡорттар, Рәсәйҙе һаҡлайым тип, ни өсөн ғәскәр туплап, күпме ҡорбан килтереп яуға ашҡынып торған да, был ҡаһарманлыҡты кем баһалай белгән? Бер уйлаһаң, ҡайҙа ғына аяҡ баҫмаған башҡорт батыры! Порт-Артурҙан Парижғаса, Петербурҙан Аҡмәсеткә, йә булмаһа Мәрмәр диңгеҙенә хәтле һуҙылған башҡорт яугирҙарының аяҡ эҙҙәре. Рәсәй батшалығы тарафынан быуаттар һуҙымында ҡырылған, йәберләнгән халыҡ ни өсөн шул Рәсәй тип яуға атылған? 1812 йылғы Ватан һуғышын ғына алып ҡарайыҡ. 1662, 1682, 1705, 1735, 1755, 1773 йылдарҙа үҙенең ер-һыуы, дине-иманы өсөн яуға күтәрелеп тә меңәрләгән аҫыл-аҫыл ирҙәре аҫылған-киҫелгән, меңәрләгән ауылдары ут-көлгә әйләндерелгән халыҡ, ни өсөн һуң 1812 йылда, үҙе теләп полктар төҙөп, Рәсәй өсөн яуға ташлана? Дан өсөнмө, мал өсөнмө? Аҡыл етмәй. Ҡайҙан килә был яугирлыҡ? Нимә ул: халыҡтың тәбиғәте шулаймы, бер ҡатлылыҡмы был, батырлыҡмы? Китаптың бөтә йөкмәткеһе менән әҙип ана шулар хаҡында уйлана, беҙҙе лә уйланырға мәжбүр итә.*

*Рәүеф Насиров үҙенең был китабында борон-борондан Рәсәй батшалығы үткәргән колониаль сәйәсәттең совет осоронда, айырыуса уның тәүге йылдарында, дауам ителеүен әлегәсә киң билдәле булмаған архив материалдарына нигеҙләнеп раҫлай. Тарих төпкөлөнән килгән башҡорт ерҙәренә урынлашҡан күпме ҡала, заводтарҙың, башҡорттарҙан тартып алынып, Силәбе өлкәһенә*

*бирелеүе, егерменсе йылдарҙа Поленов башкиҫәрҙәренең башҡорттарҙы аҫып-киҫеп, тиҫтәләгән ауылдарҙы үртәүе шуны раҫламаймы ни? Тик совет осоронда тарихи Башҡортостан территорияһы әллә нисә өлкәгә, республикаға бүленеп бирелә түгелме? Һөҙөмтәлә хәҙерге Башҡортостан картаһы эт талаған кәзә тиреһен хәтерләтә: унан да умырып алғандар, бынан да. Иң ҙур умырыу Златоуст, Миәс төйәген Силәбегә айырып алғанда була.*

*Рәүеф Насиров бындай күренештәрҙең халыҡ ижадында ла сағылып ҡалыуын раҫлай. Күп кенә йыр, бәйеттәрҙә башҡорттарҙың үҙҙәренең тыуып үҫкән ерҙәренән ҡыуылып китеүҙәре хикәйәт ителә. Был хаҡта "Ҡалды ла, ау, беҙҙең еребеҙ" кеүек мәҡәләлә бик матур әйтелгән.*

*Шуны айырып әйтергә кәрәк: әҙип үҙенең әҫәрҙәрен тик тарихи документтарға ғына нигеҙләнеп яҙа. Миҫал өсөн "Дау дауыл тыуҙыра" тигән мәҡәләне генә килтерергә мөмкин. Айын, көнөн күрһәтеп тигәндәй, унда ғибрәтле ваҡиғалар бәйән ителә.*

*Рәүеф Насиров эҙләнеү-төпсөнөүҙәренең мөһим бер үҙенсәлеге шунда: ил, ер-һыу яҙмышын, тарихыбыҙҙың берсә сағыу, берсә фажиғәле биттәрен ул айырым шәхестәр тормошон һүрәтләү аша күрһәтә. Шул рәүешле беҙ революциянан һуң, башҡорт ғәскәре менән Маньчжурияға хәтле сигенеп, 1945 йылда әсирлеккә эләккән Ғәбделхәй Ҡорбанғәлиевтың, башҡорт ҡатын-ҡыҙҙарынан тәүге журналист һәм дәүләт эшмәкәрҙәренең береһе Рабиға Ҡушаева, Муса Мортазиндың көрәштәше Әхмәҙи Мамилин кеүек шәхестәрҙең фажиғәле яҙмышы менән танышабыҙ. Бөйөк Ватан һуғышы ҡаһарманы, Берлин рейхстагына тәүге флагты элеү эшендә ҡатнашҡан һәм үҙҙәренә лайыҡ баһалау алмаған Исхаҡ Ғөмәров менән Ғази Заһитов яҙмышы ла ана шундай фажиғәле яҙмыштарҙың дауамы түгелме ни? Фәһем алырлыҡ, уйланырлыҡ мәғлүмәттәр бихисап был китапта.*

*Был китаптың халҡыбыҙҙа милли үҙаң үҫеүенә, формалашыуына булышлыҡ итәсәге бәхәсһеҙ.*

**Салауат ГАЛИН,**
**филология фәндәре докторы.**

# I. Гелән атлығып тороу кәрәкме?

Бер ҡорҙа төрлө милләттәрҙең, шул иҫәптән башҡорттарҙың да холоҡ-фиғеле хаҡында бәхәс ҡуҙғалып, кемдер, “башҡорт ни, маҡтансығыраҡ та ул”, тигән һүҙ ысҡындырҙы. Аптырап киттем. Һуңынан был хәбәрҙе һынамаҡҡа мин икенсе берәүгә еткерҙем. Үҙ ҡарашын ошолай белдерҙе быныһы: “Маҡтаныуҙа мин артыҡ хилафлыҡ күрмәйем. Кеше ғүмер баҡый йәберләнеп, баҫылып йәшәһә, үҙен-үҙе раҫлайым тигән булып, маҡтанырға тотона бит. Милләт тә шулайҙыр. Башҡа сараһы юҡ”.

Раҫ һүҙҙәр. Психологик аҙым ғына был.

Маҡтаныуға, дөрөҫөрәге, ғорурланыуға килгәндә, улай итерлек нәмәләр ысынлап та күп беҙҙең. Һүҙебеҙ — хәрби хеҙмәтебеҙ тураһында.

Башҡорт яугирҙарының борон-борондан үҙҙәрен аямауы, һуғышҡанда сая, батыр һәм мәргән булыуҙары, иптәштәрен яу ҡырында ҡалдырмауы яҡшы билдәле. Был фекерҙе беҙ Рәсәй илендәге иң күренекле етәкселәр иҫтәлектәрендә лә осратабыҙ. Улар булмыштары менән сабыр, талымһыҙ һәм сыҙамлы булыуҙары менән айырылып торған һәм Рәсәйҙең бөтөнһөҙ һуғыштарының ҡайһыһында ғына ҡатнашмаған.

Беҙ, мендәрсә башҡорттоң бөйөк Рәсәйгә ошолай хеҙмәт күрһәтә алыуы менән ғорурланып, уртаҡ Ватаныбыҙҙы ҡурсаланыҡ, тип, маһайынҡырап йәшәнек. Патриотизм тигән төшөнсә лә шулдыр, тип белдек. Әммә рустар менән бер ҡатар ҡан ҡойоп йөрөһәк тә, дан-шөһрәттәрҙең ҙурыраҡ өлөшө уларға бирелде, юғары дәрәжәләргә лә улар үрләтелде. Беҙ быны ла шулай булырға тейеш тип иҫәпләнек. Һуңғы утыҙ-егерме йылда ғына күҙебеҙ асыла төштө шикелле: борон башҡорттоң бынамын тигән батырҙары ла, ҙур-ҙур ғәскәрҙәр туплай алырлыҡ абруйлы шәхестәре, оло яуҙарға әйҙәп йөрөтөрлөк сардарҙары ла булғанын аңлап, хайран ҡалдыҡ. Баҡтиһәң, архивтарҙа быны дәлилләрлек документтар ҙа һаҡланған булып сыҡты һәм ошо нигеҙҙә тарихи романдар ҙа тыуа башланы.

Ләкин былары — тарихыбыҙҙың алғы яғы, биҙәкле фасады, матур йөҙлөгө генә. Беҙ, ошо гүзәл күренеш ҡаршыһында албырғап, үрҙә бәхәс башлап ебәргән кеше әйтмешләй, ысынлап та артығыраҡ маҡтана башланыҡ буғай. Алыҫҡараҡ, киләсәккә төбәлгән юлдарҙы күҙҙән ысҡындырабыҙ һымаҡ. Данлы үткәндәребеҙҙе баһалағанда тулы объективлыҡтан ситләшәбеҙ кеүек, тырышлыҡтарыбыҙҙың кире яҡтары ла булыуына күҙ йомабыҙ, “хәрбилегебеҙҙән” саҡ ҡына ситләшеп, сит дәүләттәр менән һөйләшеп киле-

шерлек халыҡ дипломатияһы булғанмы, булмаһа, ни өсөн булмаған — ошо хаҡта уйланмайбыҙ. Ә үткәнебеҙҙе, үҙ холҡобоҙ, үҙ тотошобоҙҙо тәнҡит күҙлегенән үткәреп, ошо мәсьәләләрҙе ныҡыраҡ өйрәнеү өсөн ваҡыт килеп етте һымаҡ.



Һүҙҙе ошо юҫыҡҡа күсереү өсөн тарих үҙе лә аҙыҡ бирә. Ул аҙыҡтың береһе шул: Башҡортостан Рәсәйгә ҡушылғас та, аҡ батша башҡорттоң "тыңлаусан" булырға тейешлеген өҙлөкһөҙ хәтергә төшөрөп торған,



Башҡорттар һуғыш юлында (В. О. Орловский картинаһынан).

әммә уның оло һуғыштарҙа ҡатнашыуын һис талап итмәгән. Хатта XVI быуаттың икенсе яртыһында — XVII быуаттың тәүге өлөшөндә башҡортҡа ҡарата ярайһы уҡ киң күңеллелек тә күрһәткән. Һәр

хәлдә, унан исем өсөн генә тиерлек яһаҡ түләтеп, башҡорттарҙы төрлө сапҡынсыларҙан ҡурсалап торасағын белдергән. Ошо осорға ҡағылышлы ҡайһы бер яҙма ҡомартҡылар бына ни һөйләй.

“Башҡорттар рус подданствоһын үҙҙәре теләп алды. Улар йыл да ҡаҙнаға ҙур булмаған яһаҡ түләргә, 90 тинлек бер батман (8 бот. — **Авт.**) бал һәм 80 тинлек төлкө йә иһә 40 тинлек һыуһар тиреһе биреп торорға һүҙ биргән (Витевский В. Н. “Неплюев и Оренбургский край в прежнем составе до 1758 г.” т. 1. Казань. 1897 г.).

Ырыуҙар араһында Мәскәү батшаһына һуңыраҡ баш эйеп килгән Урал аръяғы башҡорттары ғына ҡырыҫыраҡ мөнәсәбәт тоя. Башҡортостандың Өфө яҡ өлөшөндә яһаҡ ырыу йә иһә йорт биләгән ерҙең майҙанына ҡарап түләнһә, Себерҙә (Урал аръяғында. — **Авт.**), ул, мәҫәлән, һәр кешенән йыйып алынған һәм улар тапшырған ҡиммәтле йәнлек тиреләре дәүләт бюджетының мөһим статьяһы булып иҫәпләнгән” (Карамзин Н. М. Указ., Соч., т. 10, С. 17).

Тарихи ғәҙеллек булһын тиһәк, шуны ла иҫтән сығарырға ярамай: батша һәм уның санауниктары тултырған документтарҙа башҡорттарҙың үҙ ерҙәренә булған хоҡуҡтарының тейелгеһеҙ икәнлеге ҡат-ҡат телгә алына. Мәҫәлән, 1794 йылдың 4 ғинуарында Өфө наместнигы А. Пеутлинг һәм генерал-прокурор А. Самойлов, башҡорттар менән мишәрҙәр араһында килеп тыуған бер бәхәскә биргән аңлатмала, башҡорт депутаттарының фекеренә таянып, уларҙың ерҙәренең мәңге тейелмәҫлеген һәм был ерҙәрҙең быуындан-быуынға күсә килеүен танырға мәжбүрҙәр. “1800 йылдың 16 июле — Ырымбур губерна идаралығының Башҡортостандың төрлө төркөмдәренә идара итеү мәсьәләләре буйынса запискаһында” (“Материалы по истории Башкирской АССР”, т. 5, стр. 579) бына ни тиелә: “Элек туранан-тура тартып алынған Ырымбур ерҙәре башҡорттарҙыҡы булырға тейеш. Хәҙер губернала йәшәгән халыҡтар араһында уларҙан да олораҡы юҡ, башҡалар иһә асылда башҡорт ерҙәренә килеп төпләнгән килмешәктәр генә. Башҡорттар Рәсәй подданствоһына яҙылған саҡта Иван Васильевич батшанан үҙ ерҙәренә грамота алғандар”. Шунда уҡ: “Башҡорт халҡы бында (Ырымбурҙа. — **Авт.**) төп халыҡ булып һанала. Рәсәйгә ул VI—X быуаттарҙан билдәле. Рәсәй подданствоһын ул Иоанн Васильевич батшалыҡ иткән ваҡытта, Ҡазан еңелгәндән һуң, дүрт йыл үткәс алған. Уларға аҡсалата яһаҡ һалынып, йыл һайын 2054 һум 70 тин йыйып торолған, уларға түләүһеҙ Илек тоҙон алып торорға һәм үҙ ерҙәрен биләргә рөхсәт ителгән...”

Рус хакимиәте башҡортҡа мөнәсәбәтен ҡасан һәм ни өсөн үҙгәртеп ебәрә һуң? Бәлки, бында төп сәбәптәрҙең береһе башҡорт халҡының үҙендә яталыр? Ни өсөн тигәндә, Үҫәргән, Тамъян, Ҡып-

саҡ, Бөрйән шәжәрәһендә әйтелә бит: “Еребеҙ, динебеҙ тураһында килештек, башҡорт мосолмандарын бер ҡасан да башҡа диндәргә инергә өндәмәҫкә, беҙҙең ғөрөф-ғәҙәттәрҙе боҙмаҫҡа, башҡорттарҙың әрмегә хеҙмәт итергә **атлығып торасағы** тураһында килештек”.

Атлығып торасағы... И, был ауанлыҡ! Күрәһең, рус хөкүмәте башҡорттоң бер ҡатлылығын аңлап ала. Тиккә түгел, 1734—1736 йылдарҙа Башҡортостанды һәм артабан Ҡаҙағстанды яулап алырға йыйынған һәм Ырымбур ҡалаһын төҙөүгә проект әҙерләгән И. Кирилов нимәгә таянып эш итергә уйлай? Беренсе сиратта башҡорттарҙың үҙҙәренә. Уларҙың араһынан эшсе көсө табырына ла, башҡорт һәм мишәрҙәргә ниндәйҙер яңы яһаҡ уйлап табып, уларҙың үҙҙәренән (ҡаҙнанан түгел) аҡса йыйып аласағына ла шикләнмәй ул. Йәл, башҡорт быны әлегә аңламай, алдын-артын уйламай, тоғролоҡ күрһәтеп, ярарға тырышып, батшаға биргән вәғәҙәһен үтәүен генә белә һәм бер яуҙан икенсеһенә саба. Ул бер-бер артлы тоҡанып ҡына торған Рәсәй һуғыштарында һаман ҡорбандар була, ә рус батшаларының артабан ни ҡылырға йыйынғанын башына ла килтермәй (әллә белергә лә теләмәй?). Хәйер, батша санауниктары үҙ маҡсаттарын дәүләт сере итеп һаҡлай белә.

Беренсе ҡарамаҡҡа, артыҡ бер нәмәгә лә дәғүә итмәгән кеүек ҡыланған властарҙың төп уйы йәшерен булып сыға. Бер осорҙан икенсе осорға саҡ-саҡ ҡына яңыра килгән рәсми документтарҙы сағыштырһаң, шундай фекергә киләһең: уларҙың теле, стиле ҡоролана, йөкмәткеһе ҡырыҫлана бара. Аҡрынлап төшөнәһең: батша үтә лә шәфҡәтле булып тойолған хакимдарҙың сәйәсәте киләсәк көндәргә төбәлгән булған. Урыҫ түрәләренең ҡомһоҙлоғо, туя белмәйенсә һаман көнсығышҡа ынтылған юлдарында Башҡортостан ифрат та уңайлы плацдармға әүерелә. Хәҙер инде ҡайһы бер документтарға: “Башҡорттар хеҙмәт итергә, илдең көнсығыш сиктәрен һаҡларға, походтарҙа ҡатнашырға үҙҙәренә йөкләмә алды”, — тип яҙып ҡуйылыуы ла аңлашылды. Шулай итеп, рус дәүләте түләүһеҙ-ниһеҙ, бер ниндәй ауырлыҡ күрмәйенсә, бынамын тигән атлы ғәскәргә хужа булып ала. Етмәһә, башҡорттоң үҙ иҫәбенә аҫыралған ғәскәргә.

Батша, тархан, старшиналарҙы ҡупайтып, башҡортто үҙ уҡ-һаҙағы менән ҡоралландырып, һуғыш асып, унда ла, бында ла алдан саптыра. Шул уҡ ваҡытта ул, башҡорттар ғәскәрҙәрен самаһыҙ арттырып, бик үк көсәйеп китмәһен, тип тә ҡурҡа. Тикмәгә түгел, аҙағыраҡ, кантон системаһы индерелгәс тә, Ырымбур губернаторҙары башҡорт ғәскәрҙәренә етәкселек итерлек айырым идаралыҡ та булдырмай, офицерҙарын да үҫтермәй. Рәсәй сит илдәр

менән ыҙғышһа, башҡорттарҙан полк-полк ғәскәр йыйҙырта, ә көсөргәнешлектәр һүрелә башлаһа, улар таратыла. 1822 йылда, мәҫәлән, Ырымбур хәрби губернаторы башҡорттарҙан 15 полк төҙөү тураһында план йөрөтә, ләкин проект бойомға ашмай, башҡорт егеттәрен сик буйын һаҡларға ғына ебәрәләр, Башҡорттарҙың берҙәм, бер ҙур хәрби берәмек булып тороуынан шөрләп, 1830-сы йылдарҙа башҡорт ғәскәрен бөтөнләй таратырға һәм уларҙы ҡәҙимге крәҫтиәндәргә әйләндерергә булалар. Халыҡ йырҙарында башҡорт һалдаттарының остазы, дуҫы һымағыраҡ данланған В. А. Перовский ҙа шул проектты яҡлай. Был ҡырын эште 1863 йылда Александр II ахырынаса тамамлап ҡуя.

Был йәһәттән Ырымбур губернаторы И. О. Куристың сенаторҙар М. Г. Спиридонов менән И. В. Лопухинға (1800 йылда) ебәргән хатынан алынған бер өҙөк асыҡ миҫал. "...Шул уҡ ваҡытта башҡорттарҙың үҙҙәренә генә түгел, ғөмүмән, башҡаларға ла файҙа килтереүе мөмкин, — тип фараз итә ул. — Үҙҙәре йәшәгән ерҙәрҙе һатып, ошо киңлектәрҙе тарайтһалар, малсылыҡтан баш тартмайынса, күберәк байрам кәйефе индергән йәйләүҙәрен бөтөрөп, игенселек менән шөғөлләнһәләр, ваҡыт үткәс, үҙҙәре лә урыҫҡа әйләнер ине" (Материалы по истории Башкирской АССР, т. 5, стр. 587).

Нимә теләгәнен яҡшы белә Курис. Был теләккә, әлбиттә, башҡортто "кафыр" итеп күрергә хыялланған батша ҡанат ҡуйған. Тарихи документтар менән танышырға тотонһаң, бындай оятһыҙлыҡтарҙы күп осратаһың.

Урыҫ санауниктарының яңы, "үҙләштерелгән" урында үткәргән сәйәсәтен 1820 йылдарҙағы Генеральный штаб документтарынан да күрергә була. Мәҫәлән, генерал-губернатор, императорға Ырымбурҙа Епископ кафедраль соборы асылыуы тураһында хәбәр иткәндән һуң, шуны яҙа: "Ырымбур губернаһында йәшәгән 53 мең мәжүси типтәрҙәр араһында христиан динен таратыу өсөн был (собор. — **Авт.**) ҡулайлы буласаҡ". Артабан ул башҡорт халҡының көнкүреше менән танышыуы һәм 800 мең кешенең, бай ерҙәр биләп тә, фәҡир булыуы, идаралыҡ эштәренең баштан уҡ яңылыш ойошторолоуы, ә бының сәнәғәттең үҫеүенә ҡамасаулауы тураһындағы фекерҙәре менән уртаҡлаша. Ырымбур казак ғәскәрҙәре милкенә бирелгән Магнит тауының — тау сәнәғәтен, башҡорт ерҙәренең һәм Урал аръяғы далаларының алтын сәнәғәтен, Ырымбур яҡтарының йылҡысылыҡты һәм, ғөмүмән, малсылыҡты үҫтереү өсөн мөмкинлектәре ифрат ҙур булыуын да хәтергә төшөрә ул. Һәм, ошонан сығып, генерал-губернатор Орскиҙан алып Уральск нығытмаларына һәм артабан Һыр-Дарья һыҙығында һалынған поч-

та юлын 1-се фортҡа тиклем дауам иттереү тураһында юллай ("Центр. военно-исторический архив. д. № 15, лл. 15—18).

Күренеүенсә, һүҙ Башҡортостанды баҫып алыу һәм киләсәктә Урта Азияға ҡул һуҙыу тураһында бара

Үрҙә иҫкә алынған И. О. Курис хатында Ырымбур ҡалаһына аҙыҡ-түлекте 150 саҡырымдан һәм унан да алыҫыраҡ урындарҙан ташыуҙың ауырға төшөүе, ҡалалағы ҡоролмаларҙың иҫкереүенә, ә яңы төҙөлөш алып барыу өсөн эшселәрҙең юҡлығына зарлана һәм һүҙ ыңғайында, үҙе лә һиҙмәҫтән, Рәсәйҙең ошо тирәләге сәйәсәтен асып һала. "Нәғеҙ ҡырғыҙҙар сигендә хәрби крепость итеп нигеҙләнгән Ырымбур губерна ҡалаһы, — ти ул, — эске ҡалалар һәм ауылдарҙан юрамал ҙур аралыҡта тора һәм, үҙеңдә даими рәүештә күп ғәскәр тотмаһа ла, бер ниндәй ҙә файҙа күрмәй..." (Материалы по истории Башкирской АССР, т. 5, стр. 287).

Алыҫта зыян күреп йәшәлһә лә, хәрби ҡәлғә һәм ғәскәр тоторға тура килә, тигәнде аңлатамы был һүҙҙәр? Бында күренекле Америка ғалимы С. Доннелли яһаған һығымталарға мөрәжәғәт итеү урынлы. "Аҡса етмәү сәбәпле, күп һанлы колониаль халыҡтарға һалынған яһаҡтарҙан килгән түләүҙе ҡаҙнаға индереү бик кәрәк ине, — ти ул. — XVIII быуатта Урал төбәгенең минерал байлыҡтарын тартып алыу барған һайын мөһимерәк роль уйнаны. Модернизация башлаған дәүләт өсөн был аҙым иң өҫтөнлөклө яғы менән айырылып торҙо... Европа илдәренең Азия менән сауҙа итеүендә аралашсы булырға хыялланыу ҙа бик көслө дәлил ине. Ә инде ул осорҙоң хөкүмәт санауниктарына килгәндә, улар өсөн Рәсәй сиктәрен һаҡлауҙан да ҙурыраҡ сәбәп булманы. Ситтән күҙәтеүселәргә был дәлил бер үк инандырырлыҡ та түгелдер, бәлки, әммә Рәсәй үҙ эсендәге сит дәүләтте ярғылап, бигерәк тәрән үтеп ингәйне. Урыҫтарҙың Башҡортостанға ҡарата дәғүәләре булһа ла, эш шулай килеп сыҡты: асылда улар Башҡортостанды уның үҙ халҡынан "һаҡланы" (Алтон С. Доннелли, Завоевание Башкирии Россией, 1552—1740. 1995, стр. 115—116).

Әгәр бында автор "Башҡортостан" исеме аҫтында уның тархан һәм старшиналарын (улар менән уртаҡ тел тапҡан урыҫ түрәләрен дә ситтә ҡалдырмайынса. — **Авт.**) күҙ уңында тотҡан булһа, Башҡортостанды талау кем файҙаһына булғанлығын аңлауы һис тә ҡыйын түгел. Башҡортостан илен үҙ рәғиәһенә алған Мәскәү шарттары уның феодалдарына ла ярап төшә. Түрәләр шуны тиҙ төшөнөп ала: улар урыҫ батшаһынан аҫаба ерҙәргә грамота эләктерәләр икән, был биләмәләрҙе улар кемгә теләй, шуға бүләк итә ала. Өҫтәүенә, тарханлыҡ та тейһә, яһаҡ түләүҙән бөтөнләй ҡотола.

Бәлки, шуның өсөндөр ҙә Мәскәү батшаһына ебәргән ғариза хаттарының күбеһендә хөкүмәт алдында ярамһыкланыу ауаздары ишетелеп ҡуя. Быға бер генә миҫал — 1793 йылда башҡорт депутаттары Әмирхан Абызаев менән Әбделйәлил Солтановтың “әбей” батша Екатеринаға ебәргән үтенес һорауы. Депутаттар, башҡорттарҙың һәр өс йорттан бер кешенең хеҙмәткә алыныуына зарланғандан һуң, хатка ошондай һүҙҙәр яҙа: “...Шәфҡәтле бөйөк государыня! ...Беҙҙең халыҡ, бәләкәйенән олоһона тиклем, һәр ваҡыт, хатта ҙур һуғыштарҙа ла Рәсәй киңлектәрен һаҡлау өсөн үҙ ғүмерҙәрен бирергә әҙер” (Материалы по истории Башкирской АССР, т. 5, стр. 567).

Бындай түбәнселекле мөрәжәғәттәрҙе архив материалдарында йыш күрергә мөмкин. Әммә ялбарыулы һорауҙар үтәлмәй, киреһенсә, йылдар үткән һайын башҡорт ерҙәрен тулыһынса йолоп алыу, уны дөйөм Рәсәй хужалығы әйләнешенә индереү сәйәсәте көсәйә. Бының сағыу миҫалы — башҡорт халҡын тамам буйһондороу һәм даими контроль аҫтына ҡуйыуҙы күҙҙә тоткан кантон системаһын булдырыу. Пермь һәм Ырымбур губерналары, 16 кантонға бүленеп, башҡорт һәм мишәрҙәр хәрби сословиеға индерелә. Был яңылыҡты ҡулланыу һәр башҡорт, мишәр ауылында нисә йән булыуын, казак ғәскәренә күпме кеше ебәрергә тейешлектәрен белеп тороу мөмкинлеген тыуҙыра. Ул ғына түгел, губернатор, йыл һайын 4 меңдән ашыу башҡортто ҡаҙна эшендә файҙаланабыҙ, ә йәш үҫмерҙәрҙе һөнәр биреү өсөн уҡырға ебәрәбеҙ тип, асылда уларҙы ҡол хәлендә тота. Башҡаса әйткәндә, Башҡортостанда кантон идаралығын булдырыу, хәрби-полиция хакимлығын урынлаштырыу батша хөкүмәтенең колониаль сәйәсәтен тормошҡа ашырыуҙың иң ышаныслы сараһына әүерелә.

Батша, Башҡортостанды уратып, ҡәлғәләр һалдыра башлай. Ул ҡыҫҡа ғына ваҡыт эсендә Башҡортостандың көнсығышында (Үрге Йайыҡ һыҙығында) И. И. Неплюевтан 16 редут, 9 нығытма төҙҙөртә. 1835 йылда быға тағы яңы нығытмалар өҫтәлеп, Уйск һыҙығы барлыҡҡа килә. Артабан Себер нығытмалары һалына башлай. Ләкин Рәсәй хакимдарына был да аҙ тойола, һәм Ырымбур генерал-губернаторы императорға хат ебәрә. Ул Башҡортостан территорияһында Верхнеуральскиҙан алып Урал тауҙары аша Стәрлетамаҡҡа сауҙа юлы һала башлауҙары, ләкин 1835 йылда, аҡса етмәү сәбәпле, төҙөлөш эштәренең туҡтап ҡалыуы тураһында иҫкә төшөрә лә, эште тамамлап ҡуйыу өсөн, Һамар юлына бүленгән аҡсаны Стәрле юлын төҙөү өсөн күсереүен һорай. “Бында ике нәмәне хәл итәбеҙ, — ти ул. — Береһе — кәрәк була ҡалһа, ғәскәрҙәрҙе туп-тура, крайҙың уртаһынан ебәрә алабыҙ, юғиһә,

хәҙер бөтә ғәскәрҙәр ҙә губернаның ике осонан — төньяҡ һәм көньяҡ өлөштәрен уратып йөрөй" (ЦВИА, д. VII. 29, лл. 50—52).

Бына шулай, ғәскәрҙәрҙе үткәреү өсөн, Башҡорт иле арҡыс-торҡос телгеләнә башлай. Ә ҡасандыр "башҡорттарҙың хеҙмәт итеүе-итмәүе уларҙың үҙҙәренең иркендә" тигән вәғәҙәләр XIX быуат башында бөтөнләй юҡҡа сығарыла һәм император "шәфҡәтлелеге" икенсерәк төҫ ала. Хәйер, Рәсәй властары быға тиклем дә "ҡаты ҡуллылыҡ"ты күрһәтеп алғылай. Мәҫәлән, Ырымбур Губерна идаралығы запискаһынан күренеүенсә (Материалы по истории Башкирской АССР, т. 5, стр. 582), ихтилал күтәргән башҡорттарға ҡарата сығарылған Указда ошондай саралар ҡаралған: "1. Заводтарҙа эшләгән һәм болаларҙа ҡатнашҡан башҡорттарҙы тотоп, үлем язаһына дусар итергә, ә башҡаларын һөргөнгә оҙатырға. 2. Бурлыҡта тотолған һәм хеҙмәткә яраҡлы башҡорттарҙы Остзея гарнизон полктарына алырға, ә яраҡһыҙҙарын, язанан үткәргәс тә, Рогервикка һәм ер һөрөргә Остзей ерҙәренә ебәрергә. 3. Ғәскәри мишәрҙәрҙе башҡорттарҙан айырырға һәм хеҙмәттәге тоғролоҡтары, башҡорттарға ҡаршы булғандары өсөн, уларҙың ихтилалдарына ҡушылмағандарын иҫәпкә алып, уларға мәңгелеккә башҡорт ерҙәрен бирергә: беренсе старшиналарға — 200, есаул, писарь һәм сотниктарға 100-әр дисәтинә ер бирергә..." Хәҙер инде Ырымбур һәм Себер нығытмаларын һаҡлау, шулай уҡ Рәсәйҙең башҡа илдәргә ҡаршы алып барған һуғыштарында ҡатнашыу башҡорт һәм мишәрҙәрҙең үҙҙәренә алған төп йөкләмәһе булып килеп баҫа. Тағы бер аҙ ваҡыт үтеп, ихтилалдар туҡтатылғас, уларҙың кире эҙемтәһе булараҡ, башҡорт ерҙәрен генераль межалау йәки талау-таратыу эштәре йәйелдереп ебәрелә. Өҫтәүенә, башҡорт командалары тураһында "атайҙарса" хәстәрлек күрелеп, дала уртаһында Каруанһарай ҡалҡып сыға. Ләкин бында ла, ғәйәт ҙур төҙөлөштә, башҡорт һәм мишәрҙәрҙән 1836 йылда — 1613, 1839 йылда — 1504, 1840 йылда 4046 кеше эшләй. Башҡорттарҙың "изге йорто", ә дөрөҫөрәге, Рәсәй хөкүмәтенең колониаль сәйәсәтенә бер һәйкәл пәйҙә була.

Һуңғы осорҙа сыҡҡан баҫмаларҙа, Каруанһарай йәмәғәт эштәре менән Ырымбурға килеүсе башҡорттар туҡталып китеү өсөн төҙөлгән, тигән фекер үткәрелә. Әммә В. Перовскийҙың отчеттарына ҡарағанда, иң тәүҙә башҡорт ғәскәри дворы тураһында һүҙ бара, ә Каруанһарай, шулай уҡ ғәскәри оҫтаханалар, йәмәғәт кибеттәре һәм, ниһайәт, канцелярия, ҡарауыл йорто һәм мәсет — барыһы ла ошо дворға индерелә. Тимәк, уның тәғәйенләше лә беҙ уйлағанса уҡ түгел, ә икенсерәк. Генерал-губернатор В. А. Перовский башҡорт Каруанһарайын төҙөүҙе бөтөнләй беренсе планға ҡуймаған. Быны ул "бер һылтау ғына" тип атай. Аҡса тупларға

сығарып ебәрелгән мулла төҙәлөш башлау өсөн “иғанә йыйырға һәм шул уҡ ваҡытта үҙ диндәштәрен халыҡ араһында таралып киткән имеш-мимештәрҙең ялған булыуын аңлатырға тейеш була. Йәнәһе лә, урыҫ дәүләте мосолмандарҙы һис тә суҡындырырға йыйынмай, бының кәрәге лә юҡ, ә киреһенсә, ғәскәри йорт тирәһендә ҙур мәсет төҙөргә рөхсәт итә. Ошо һүҙҙәрҙе үҙенең өгөт-нәсихәт фәтүәһе менән мөфтөй ҙә раҫлай”.

Каруанһарай төҙөлөп бөткәс тә тап ошо ҡоролмалар тупһаһынан, урыҫ ғәскәрҙәренә эйәреп, башҡорт командалары алыҫ походтарға йүнәләсәк. Үтә лә сәйер хәлгә барып эләгә беҙҙең ата-бабалар: әле генә үҙ азатлыҡтары өсөн көрәшеп йөрөгән уҙамандар, хәҙер килеп, Рәсәй экспанцияһына булышлыҡ итергә тотоноп китә.

Хәйер, башҡорттар элеккесә эске хеҙмәттә булыуҙарын да дауам итә әле. Айырым Ырымбур корпусы штабы мәғлүмәттәренә ҡарағанда, 1836 йылда линия хеҙмәтендә булған башҡорттарҙың һаны 4470-кә барып етә (Ырымбур, Уральск, Ставрополь казактары — 1337 кеше); яңы төҙөлгән линияла башҡорттар — 2668 (Ырымбур казактары — 1100); төрлө этаптарҙа һәм эске командаларҙа: башҡорттар — 715, Ырымбур казактары — 1160 кеше. Сит яҡтарҙа хеҙмәт итәләр: Ырымбур ғәскәрҙәре — Ҡазанда, Пермдә, Вяткала — 990 кеше; Уральск ғәскәрҙәре — Мәскәүҙә, Белоруссияла, Ҡазанда, Санкт-Петербургта — 1058 кеше; ә башҡорт һәм мишәр ғәскәрҙәре — Бессарабияла — 1750 кеше (ЦВИА, д. IX 29, лл. 271—273).

Күренеүенсә, һәр урында ла башҡорттар күпселекте алып тора.

1836 йылда Башҡорт ғәскәрҙәре һәм мишәрҙәр Бессарабиянан ҡайтып төшә. Хәрби идаралыҡтың хәбәр итеүенсә (Шунда уҡ, 136—154-се биттәр), илдәренә ҡайтҡан 8, 9, 11-се башҡорт полктарының тышҡы ҡиәфәте (кейем-һалымы) бик хөрт була. Шулай ҙа урындағы командование уларҙың хеҙмәт итеүенән бик ҡәнәғәт ҡала. Ләкин, 8—9-сы полктарҙың хеҙмәт урындары һаулыҡ өсөн ифрат зарарлы булғанлыҡтан, үлем-китем бик күп теркәлә. 4 йылдан да кәмерәк ваҡыт эсендә бында 1180 кешенән — 320, йәғни һәр дүртенсе, хатта унан да артығыраҡ кеше үлә.

Шул хәтлем меҫкен хәленә төшә башҡорт: ҡасандыр оборона ҡоролмаларын төҙөүгә ҡаршы булып баш күтәргән кешеләр, хәҙер килеп, шул нығытмаларҙы үҙе дауам итә. Ни өсөн?

Генерал-губернатор В. Перовский отчеттарынан күренеүенсә, Кама буйындағы иҫке линияларҙы һүҙыу ҙа дауам итә. 1835 йылда башланған ер эштәрен 150 башҡорт башҡара. Бейек валдан һәм тәрән урҙан (соҡорҙан) торған нығытмалар Ильинск ҡәлғәһендә 680, Никольск отряды торған ерҙә 450 сажинға еткән (сажин — 2,134 метр). Император ғәли йәнәптәре бойороғо буйынса, 1837

йылда Орск ҡәлғәһенән 45 саҡырым алыҫлыҡта, Урал һыҙығы (яңы һыҙыҡ) буйлап икенсеһен төҙөргә тотоналар. 2-се редуттан башланып киткән валдың бейеклеге 6 футҡа (фут — 30.5 см), киңлеге — 9, соҡор тәрәнлеге 6 футҡа еткерелә. Ғәйәт күп физик көс талап иткән был эштәрҙе лә башҡорттарға йөкмәтәләр (ЦВИА, д. 1129, С. 21—22). Ә Силәбе ҡәлғәһен һалыуҙа башҡорттарҙың йәлләте булып танылған А. Тевкелевҡа Себер даруғаһының арҙаҡлы старшиналары Таймас Шаимов, Ураҙай, Ҡотоҡайҙар ярҙамлашып йөрөй. Был юхалыҡты нисек аңларға?

Эйе, Рәсәй империяһы нәфсеһен туйҙыра алмай. Уның ас ҡарашы хәҙер Урта Азияға төбәлгән. Сөнки бында алыш-биреш итергә, Коканд, Хиуа һәм Бохара баҙарҙарын яулап алып, шунан ғына ҙур табыш сығарырға мөмкин. Ә Урта Азияға йоғонтоно Ырымбурға һәм башҡорттарға таянып ҡына көсәйтеп була. Шул ғына эште еңеләйтмәксе: сираттағы ҡорбан итеп һайланған Ҡаҙағстанда хан власы көсһөҙ була һәм, шунан файҙаланып, унда урыҫ санауниктары үтеп инә башлай. Ләкин күберәк ғәскәр ебәрмәйенсә һәм власты тулыһынса үҙ ҡулыңа алмайынса тороп, маҡсатҡа әллә ни ирешеп булмаясаҡ.

1825 йылдың 27 июнендә үк әле Император ғ.й. эргәһендә Азия эштәре буйынса төҙөлгән комитет үҙенең ултырышында сит ил эштәре министрлығы управляющийының тәкдиме менән Ырымбур губернаторы ебәргән хатты тикшерә. Губернатор Бохараға тип сығып киткән урыҫ сауҙагәрҙәренә ниндәйҙер ҡоралды отрядтың һөжүм итеүе, тауарҙарын талап алыуы тураһында хәбәр итә. Был фәҡәт Хиуа ғәскәрҙәренең эше, тип зарлана ул. Ырымбурҙан килгән был хәбәрҙе ҡарағандан һуң, Комитет ағзалары шундай фекергә килә: ысынлап та, бындай таланыу, ҡыйратылыуҙар бигерәк йышайып китте. Тимәк, хиуалыларҙы ҡорал ярҙамында ғына аҡылға ултыртырға кәрәк. Хиуа тирәһендә тик шунда ғына тыныслыҡ урынлашасаҡ, ә унан да мөһимерәге — бөтә Ҡырғыҙ урҙаһы баш эйеп киләсәк. Сөнки урҙаны фәҡәт Хиуа ҡуҙғытып, ҡотортоп ята. Шуға күрә Хиуаға кисекмәҫтән хәрби отряд сығарып ебәрергә кәрәк. Әгәр Рәсәй ғәскәре, тейешенсә ҡоралланып, походтан уңышлы йөрөп ҡайтһа, был Ҡырғыҙстанды буйһондороу юлында етди аҙым булыр ине, ти Комитет санауниктары. Бының отошло яғы тип шуны ла аңға һалып ҡуйырға кәрәк: беҙ, Хиуа ханлығын, уның мотлаҡ Рәсәй рәғиәһендә буласағы тураһында ҡаты иҫкәртеп, уға һабаҡ бирергә тейешбеҙ. Шунда ғына Урта Азия халыҡтары баҫылыр һәм уларҙа Рәсәй менән бәйләнешкә инеү теләге уяныр, сөнки сауҙа эштәрен йәйелдереп ебәреү өсөн Рәсәй генә мөмкинлек тыуҙырасаҡ, уларҙы ҡанат аҫтына аласаҡ, тигән һығымта яһай Комитет.

Хиуаны яулап алыуҙы маҡсат итеп ҡуйған урыҫ дипломаттары, үҙ ниәттәрен мөмкин тиклем уңышлыраҡ атҡарып сығыу өсөн, кисекмәҫтән разведка ебәреп, артиллерия һәм тотош ғәскәр үтерлек юлдар эҙләргә тейеш.

Азия эштәре буйынса төҙөлгән Комитет "дело"һына ҡарағанда, Хиуа сәфәренең планы иң юғары даирәләрҙә эшләнә, раҫлана. Походта кемдең кемгә буйһонасағы, ҡайһы министрлыҡ күпме аҡса бүләсәге, отрядҡа ниндәй һәм күпме ҡорал биреләсәге — барыһының да тәфсилләп теҙелеүе Урта Азияға ҙур һөжүм әҙерләнеүе тураһында һөйләй.

Шулай ҙа Рәсәй етәкселеге планды халыҡҡа фаш итмәйенсә генә тормошҡа ашырмаҡсы. Был хаҡта проектҡа индерелгән айырым пункттар һөйләй:

"1. Хиуаға барышлай, Каспий һәм Арал диңгеҙҙәре араһындағы ерҙәргә разведканы Ембен юлбаҫарҙарын эҙләгән кеүегерәк башҡарырға.

2. Был экспедицияны Үле Ҡултыҡты күҙәтәсәк диңгеҙ экспедицияһы менән берләштерергә, ҡултыҡта ҡоро ер отряды килеп һыйынырлыҡ ныҒытма төҙөргә..."

Бында шуны аңлатып китергә кәрәк: Хиуа ханы Мөхәммәт Рәхим вафат булғас, был вазифа уның өлкән улы Аллағолға күсә. Аллағол иһә ағаһын, ҡамасауламаһын тип, Ҡырғыҙ далаларына ҡыуып ебәрә.

Комитет ағай-эне араһында килеп тыуған ыҙғышты үҙ файҙаһына ҡулланмаҡсы була һәм йәшертен генә шундай тәкдим индерә:

"3. Хиуаның яңы ханын һуңғы ваҡиғалар тураһында тиҙерәк аңлатма бирергә мәжбүр итергә, бының өсөн, Рәсәй уның ғәфү үтенеүен ҡабул итмәйәсәк тип, таможня начальствоһы аша хәбәр тараттырырға.

4. Шул уҡ маҡсатта Ырымбур хәрби губернаторына, хандың ҡыуып ебәрелгән ағаһын хөрмәт менән ҡаршы алыуҙы ҡушырға.

5. Грамота һәм бүләк итеп дүрт ат килтергән Бохара илсеһенә бында инергә рөхсәт итергә һәм, унан Хиуа менән Бохара араһындағы мөнәсәбәттәрҙе ныҒыраҡ һорашып, уны, Рәсәй Бохара ханын яҡламаясаҡ, тип ышандырырға..." (ЦВИА, д. 1129, с. 7—10).

Бына шундай яуыз юлдар эҙләй Комитет. Бәләкәйерәк халыҡтарҙы бер-береһе менән һөсләп һуғыштырып, шунан файҙа күреп ғәҙәтләнгән батша санауниктарының был этлектәрҙә кешегә ышаныусан башҡорттарҙы ла файҙаланыуы бер ҙә ғәжәп түгел.

Хиуа походы хаҡында Үҙәк Хәрби тарих архивында материалдар етерлек. Унда обер-квартирмейстер полковник Дандевиль командалығында Айырым Ырымбур отрядының Каспийҙың көнсығыш

яр буйын һәм Красноводск ҡултығын картаға төшөрөп сығыуы, тағы бер ҙур дәрәжәләге офицер етәкселегендәге төркөмдөң хәҙерге Перовский фортынан алып Биш Мазар һаҙлығына тиклем 350 саҡырымлыҡ араны байҡауы тураһында әйтелә. Биш Мазарҙа яңы нығытма төҙөргә планлаштырып ҡуялар. Шунда уҡ 1-се ранглы капитан Бутаков һыу буйлап Көнгрәдкә тиклемге араны һәм Аму-Даръя тамағын тикшереп сыға. Был эштәр барыһы ла хәүефхәтәрһеҙ башҡарыла.

"Красноводск ҡултығын баҫып алып, Яңы-Даръяла нығытма төҙөү һәм, Һыр-Даръя буйлап юғары күтәрелеп, элекке Коканд ҡоролмалары урынына Джулек нығытмаһын булдырыу тураһында һеҙгә, Император ғәли йәнәптәренә, доклад яһау өсөн мин хәрби министрға хат ебәрәсәкмен, — тип белдерә Ырымбур генерал-губернаторы В. А. Перовский (Генераль штаб департаменты фонды, 15-се дело, 20—21-се биттәр).

Генераль штаб төҙөгән планды ғәмәлгә ашырыуҙа, ябай тел менән әйткәндә, батша ғәскәренең язалау (каратель) отрядында, үкенескә ҡаршы, башҡорт егеттәре лә ҡатнаша. Үҙәк хәрби тарих архивында һаҡланған Айырым Ырымбур корпусы ғәскәрҙәре ведомосына ҡарағанда (дело 1129, с. 45), 1836 йылда "дала"ға (Урта Азия йүнәлешенә тип аңларға кәрәк. — **Авт.**) барлығы 2130 ғәскәри ебәрелә: Урал ғәскәренән — 930 кеше, хәрби артиллерия казак бригадаһынан — 2, Ырымбур ғәскәрҙәренән — 200, Башҡорт ғәскәрҙәренән 1000 кеше. Ҡораллы көстәр биш төркөмгә бүленеп, башҡорттар 31 өлкән офицер һәм 40 урядник етәкселегендә Бурһыҡ сүллегендәге "бурҙарҙы" эҙләп йөрөй.

Быныһы — тәүге сығыш. 1838 йылдан алып, Англия, Урта Азияға үҙенең йоғонтоһон көсәйтеп, бындағы халыҡтарҙы Рәсәйгә ҡаршы ҡоторта башлай. Быға яуап итеп, Ырымбур генерал-губернаторы В. А. Перовский 1839 йылдың ноябрендә 5 мең кешелек отряды һәм 12.5 мең дөйә менән Хиуаға ҡаршы ҙур поход ойоштора. Ләкин ҡыштың бик ҡаты тороуы, күҙ асҡыһыҙ бурандар күтәрелеүе сәбәпле, яу сабыу бик уңышһыҙ тамамлана, ғәскәрҙәрҙең күбеһе һәләк була. 14 йыл үткәс, Урта Азия ханлыҡтары өҫтөнә Рәсәй йәнә барып ябырыла. Генерал-губернатор, шул уҡ ваҡытта Айырым Ырымбур корпусы командующийы В. Перовский, башҡорт халҡының да, аттарының да ауырлыҡтарға бик түҙемле икәнен белгәнлектән, уларҙы тағы үҙе менән алып китә. Генерал-губернатор, Хиуаны баҫып алып, унда урыҫ консулын ултыртып ҡуя. Артабан Һыр-Даръя буйлап күтәрелә һәм Семипалатинскиҙан Верныйға (Алма-Ата) тиклем хәрби нығытмалар теҙмәһен булдыра — был инде Урта Азияны ахырынаса буйһондороу өсөн уңайлы шарттар тыуҙырасаҡ. Ә башҡорттар уға һис тә кәрәкмәгән был һуғыш-

тан ниндәй файҙа күрә һуң? Бер ниндәй ҙә. Киреһенсә, Хиуа, Аҡ мәсет яуҙарында 3700 башҡорт егете ҡатнашып, уларҙың ике меңе (!) ятып ҡала.

Артабан да күпме сетерекле хәлдәргә юлығасаҡ әле башҡорт яугирҙары! Хиуанан һуң өс йыл үтеүгә, улар Финляндия сигенә оҙатыласаҡ. Рәсәй ғәскәрҙәре Ҡырымда ауыр хәлгә тарығас, шунда ашығасаҡ. Ниһайәт, Граждандар һуғышы осоронда — тағы ҡыйралыш. Бында шуны ғына иҫкә алыу етә: башҡорттарҙан 6 йәйәүле уҡсы полк, 2 атлы полк, 1 запас полк йөрөй (Иң күп яугир Ялан кантонынан — 955 кеше, Тамъян-Ҡатайҙан — 775, Ҡыпсаҡ-Иҙрүҙән — 757, Дыуан кантонынан 644 кеше алына). Уларҙың күпмеһе ҡорбан булып ятып ҡала — был билдәһеҙ.

1918—20 йылдарҙа ла, унан һуң да башҡорт иле, полк-полк, хатта дивизиялар ойоштороп, уландарын төрлө яуҙарға оҙата тора. Совет осоронда беҙ, күберәк В. И. Ленинға һылтанып, был яуҙарҙы "һәр власть үҙен ҡурсалай алырға тейеш", тип аҡларға тырышасаҡбыҙ. Шул уҡ ваҡытта уларҙың хатта иң һуңғылары — Афған, Чечня һуғыштарының да төп маҡсатын, күпме ҡорбан килтергәнебеҙҙе белмәйәсәкбеҙ.

Бына ошонда, халҡыбыҙҙы һаҡлап алып ҡалыу өсөн, ил ағалары һәр осорҙа ла ныҡлап уйланырға тейеш ине. Хәйер, быға айырым ынтылыштар булмаған түгел. 1737 йылдың июлендә әле, Йосоп Арыҡов етәкселегендәге ихтилалдың иң ҡыҙған мәлендә, Бәпәнә Төрөпбирҙин, Аҡай мулла, Юлдаш Һөйәрембәтов кеүек старшиналар һәм батырҙар ҡатнашлығында Барын Табын ырыуының Кинйәкәй ауылында (хәҙерге Учалы районы) ҙур кәңәшмә уҙғарылып, унда бер генә мәсьәлә ҡарала: восстаниены артабан да дауам итәбеҙме, әллә халыҡты бөтөнләй ҡырҙырып һалып ҡуймау өсөн, уны туҡтатабыҙмы? Ни тиклем генә хурлыҡлы булмаһын, абруйлы етәкселәр, үҙҙәренән күпкә ҡеүәтлерәк урыҫ ғәскәре алдында ҡорал һалырға, тигән фекергә килә. Дөрөҫ ҡарармы был, хатамы? Һәр кеше төрлөсә уйлай. Әммә мәсьәләне ян-яҡтан үлсәп ҡарау кәрәклеген күҙҙә тотҡанда, Кинйәкәй кәңәшмәһе беҙҙең өсөн бер оло һабаҡ булып тора. Ҡылыс күтәреп сыҡмау, ә һөйләшеп килешеү халыҡ аңына тәрән үтеп инмәгәнлектән, ул милли сәйәсәт кимәленә тиклем үҫмәй. Халыҡ дипломатияһы үҫешмәгәс, һуғыштар артабан да тоҡанып ҡына тора.

Халыҡтың яңы быуыны өлгөрөп еткән һайын атҡа атланыу һәм Рәсәй һуғыш башлаған һайын яу сабыу кәрәк булғанмы? Был бик бәхәсле һорау һәм ул төрлө яҡлап уйлауҙы талап итә.

Милли армия төҙөү һәм һуғыштарҙа ҡатнашыу-ҡатнашмау проблемаһын хәл итеүҙең иң дөрөҫ юлы Башҡорт автономияһын төҙөгән саҡта төҫмөрләнә. I Башҡорт ҡоролтайы ҡабул иткән

ҡарарҙа сит ил территорияларына дәғүә итмәү, Рәсәй башлаған һуғыштарҙа ҡатнашмау — төп пункттарҙың береһе булып тора. 1917 йылдың 20 декабрендә булып үткән III Ҡоролтай ҙа быны яҡлап сыға. Башҡорт ғәскәрен төҙөүҙең маҡсатын һәм, Башҡортостанда йәйелеп киткән үлтереш-талашыуҙарҙан ҡотолоу юлдарын күрһәтеп, Башҡорт Мәркәз шураһының 1-се фарманында (уға Ш. Манатов, З. Вәлидов һәм бүлек мөдирҙәре ҡул ҡуя) бына ни тиелә: "Берҙән-бер сара: ере, милке булған һәр ялпының вә милләттең һәр ҡайһыһының үҙен ҡарауы, үҙ тормошон, ҡанын, йәнен, хәлен, ерен үҙе һаҡлауылыр һәм Башҡортостан ялпыһының бөтөн власты үҙ ҡулына алыуылыр". Артабан фарманда, Мәркәз шураһы ерле автономияны тормошҡа ашырыу өсөн һәм, ҡайҙа кәрәк, шунда уның именлеген һаҡлау өсөн хәрби көстәр булдырырға йыйына, тиелә. "Матур Башҡортостан үҙ елкәһендә ике партияның һуғышын күтәрә алырмы? — тигән һорау ҡуйыла Ҡоролтай мөрәжәғәтендә. — Шул арҡала Башҡортостан ғәскәренең бер яғы икенсе яғы менән һуғышырмы? Юҡ, был эш булырға тейеш түгел. Сөнки беҙ большевик та түгел, меньшевик та түгел, беҙ башҡорт ҡына. Беҙҙең талашлы эштәрҙә эшебеҙ юҡ".

Башҡорт Мәркәз шураһы илдә ҡуйырып киткән талаш-ыҙғыштарға ҡыҫылмаясағы тураһында бер нисә тапҡыр белдереү яһай. Әммә Башҡортостанға көсләп таҡылған шарттар арҡаһында һәм ул аяуһыҙ һуғыш уртаһында тороп ҡалыу сәбәпле, халыҡ тағы һәләкәткә дусар ителә. Ырымбурҙан Силәбегә ҡасып китергә мәжбүр булған Вәлиди хөкүмәте 1918 йылдың июнендә башҡорт ғәскәрен ойоштороу буйынса мобилизация иғлан итә. Ҡыҫҡа ғына ваҡыт эсендә Арғаяш, Тамъян-Ҡатай, Ялан-Ҡатай кантондары, Златоуст, Троицк өйәҙҙәре иҫәбенә 6 йәйәүле, 2 һыбайлы, 1 запас полк төҙөлөп, ут эсенә ташлана. Тағы яңы ҡыйралыш...

Шулай итеп, автономия иғлан иткән саҡта башҡаларға ҡыҫылмау, һуғыш тоҡандырмау, ә үҙеңде генә һаҡлау кеүек изге маҡсаттар өҫтөнлөк алһа ла, һуңыраҡ, республика башлығы итеп ҡуйылған Муса Мортазин да шул уҡ идеяларҙы алға һөрөп, Үҙәк властарға бер нисә проект индерһә лә, өмөттәр аҡланмай. Хатта аҙаҡтан, совет осоронда ла, башҡорттар, рус генералдарына буйһоноп һәм "интернациональ" бурыстарын үтәп, үҙ мосолмандарына ҡаршы ла ҡорал күтәрәсәк. Бына ошолай, ике-өс быуат элек башланған агрессив сәйәсәттән беҙ һис баш тарта алмайбыҙ. Ә быны бер аҡыл эйәһе лә хупламай.

Мәшһүр рус яҙыусыһы В. П. Астафьев, мәҫәлән: "Мин һуғыштан да әшәке нәмәне белмәйем, Аллаһы тәғәләнең яза биреүе ул, — ти. — Донъяла 15 мең тапҡыр һуғыш булған, 3 миллиард кеше

ятып ҡалған. Беҙ асылда кеше һөйәктәре, мәйеттәр араһында йәшәйбеҙ".

Мәйеттәр араһында ғынамы! Чечня һуғышын алып барған генералдарҙың телевидение экрандарындағы йөҙҙәренә генә ҡарағыҙ: бөтөнләй бит өмөтһөҙ ҡараштар, боҙ булып ҡатҡан күҙҙәр. Эйе, кисәңге таныштарыңды үлтереүҙе һөнәр итеп алыуҙан рух бөтәймәй шул. Ул һына ғына. Бөгөн үҙенең тиңен, яҡынын атып үлтергән әҙәм ҡәҙимге кеше сифаттарын кире тергеҙгәнсә, ыҙғарланған мендәрсә күңел яралары уңалғансы, әле күпме ваҡыт үтәсәк! Бына ҡайҙа ул беҙҙең юғалтыуҙарыбыҙ.

Ошо йүнәлештә уйлай китһәң, ҡасан беҙ үлтереш, ҡоралды алыштарҙы данлауҙы туҡтатып, һуғышҡа ерәнеү тәрбиәләй башларбыҙ икән, тигән һорау тыуа. Үткәндәребеҙгә ғәҙел һәм ҡаты баһа бирмәйенсә, тарих алдында тәүбәләр ҡылмайынса тороп, был юлға күсә алмаҫбыҙ, ахырыһы. Ләкин ир-егеттәребеҙҙе кәрәккәнгә лә, кәрәкмәгәнгә лә, йөҙәрләп-меңәрләп ғазраил бысағы аҫтына ташламау яғын бөгөн үк ҡайғырта алмайбыҙмы ни? Беҙгә бер ниндәй хәжәте булмаған Чечня һуғышына башҡорт егеттәрен ебәрмәйенсә, тик торғанда 110-дан ашыу уландарыбыҙҙы үлтертмәй алып ҡалырға әмәлебеҙ етмәй инеме? Етә, дөрөҫөрәге, етер ине, әгәр үҙаллыбыҙ, суверенлыбыҙ тип күкрәк һуҡҡан республика үҙенә тейешле (хәрби өлкәлә) закон сығарһа һәм уны әҙәп һаҡлап ҡына тормошҡа ашырһа.

Оло фажиғәләргә юл ҡуймау өсөн, милләтебеҙҙең үрсеүе һәм артабан да йәшәүе өсөн нимә кәрәк? Иң тәүҙә, моғайын, һәр кем ҡабул итерлек идеялыр. Уның ниндәй рәүештә булыуы мөмкин? Бәлки, был фекергә Әхмәтзәки Вәлиди тәкрар иткән "Беҙ ҡыҙылдар ҙа түгел, беҙ башҡорттар ғына" тигән ҡараш яҡындыр?

"Ватандаш" журналының 1998 йыл февраль һанында Бөрө дәүләт педагогия институты уҡытыусыһы, тарих фәндәре кандидаты Рияз Мәсәлимов "Милли идеология зарурлығы" тигән ҙур публицистик мәҡәлә баҫтырып сығарҙы. Унда йәш ғалим: "Көс ҡулланыу үҙе үк көс ҡулланыуҙы тыуҙыра, — ти. — Беҙҙең быуын үҙ милли идеологияһына эйә буласаҡ. Ул — суверенлы милли демократик дәүләт идеологияһы — көс ҡулланмаусы милләтселек булырға тейеш. Көс ҡулланмаусы милләтселек күберәк кешенең яҡшы яҡтарына иғтибар бирә, һәр милләттең үҙ аллы үҫеүенә булышлыҡ итә һәм ысын интернационализм формалаштырыуға килтерә". Бөгөн республика халыҡтарының 21,9 процентын ғына тәшкил иткән башҡорттар, үҙҙәренең "һуғышсанлығы"нан, хәрбилегенән баш тартып, тыныс юлды һайлаһа ғына милләт булараҡ үҙен һаҡлап алып ҡаласаҡ, тигән фекер үткәрә ул.

Аҡыллы һүҙгә яуап юҡ.

*1998 й.*

## II. “Ҡалды ла, ау, тыуған еребеҙ”

Был яҙмаларҙы башлағанда уҡ бер уй килеп тыуҙы: беҙ үҙебеҙҙе, башҡорт халҡының эшселәр синыфы Бөйөк Октябрь социалистик революцияһынан һуң ғына барлыҡҡа килгән, тип ышандырып килдек. Беҙҙең аң шулай бик аҡрын үҫешкән инде ул, тип, үҙебеҙҙе-үҙебеҙ алданыҡ. Асылда бит бөтөнләй икенсе күренештәр булған.

*Иҙел башы — Ирәмәлтау,*
*Иҙел башы — Ирәмәлтау,*
*Яйыҡ башы — Ялпантау,*
*Әйҙең башы — Һарыһаҙ,*
*Уйҙың башы — Ҡараташ.*
*Мейәс башы Уралтау...*
*Әй, Уралым, Уралым,*
*Уралып ятҡан Уралым...*

Күп ваҡыт үтеп китте инде Хаммат ағай Ураҙаевтың (хәҙер мәрхүм) һамаҡлап бәйет әйтеп ултырғанына, әммә йырлағаны һаман ҡолаҡ төбөндә. Ул ҡарашын ерек, талдар ышығында моңайып ағып ятҡан Уй һыуына텍ләгән дә шиғыр юлдарын бер епкә теҙә лә теҙә:

*Был донъяла Урал тигән тауҙар бар,*
*Уңғыл да соңғол булһа ла,*
*Йәйләй торған ере бар.*
*Урал тигән тауында*
*Һәр төрлө януары бар.*
*Айыу, төлкөләре бар,*
*Кейек, боландары бар.*
*Ҡалды ла беҙҙең Уралыбыҙ,*
*Ҡалды ла беҙҙең йөрөгән Уралыбыҙ, ау...*

Ошо һамаҡлауҙа күңелде арбағаны, әллә күпме һорауҙар тыуҙырғаны — күптән үк таныш булған атамаларҙың яңғырап-яңғырап китеүе:

*Сәрнәкәү тигән тауы бар,*
*Сәрнәкәү тигән тауы бар,*
*Ҡырмыҫҡалы тигән күле бар.*
*Асылыҡҡа уның балығы бар,*
*Дауалыҡҡа уның һөлөгө бар...*

Сәрнәкәү тауы, Ҡырмыҫҡалы күле. Улар Учалы районының Мулдаш ауылы эргәһендә генә. Ә Көсөк ауылы янында Ямансура үҙәнен, урман уртаһынан ағып ятҡан Айыуҡойоһон күрергә мөмкин. Тимәк, йыр ҙа шул тирәлә тыуған.

Күҙҙәрен йомоп, әҫәрләнеп һамаҡланы Хаммат ағай. Әммә хикәйәләүенең ахырында уның тауышына борсолоу ауаздары килеп ҡушылды. Хатта һыҡтау ишетелеп ҡалған һымаҡ булды:

*...Ҡалды ла беҙҙең Уралыбыҙ,*
*Ҡалды ла уйнап-көлөп*
*йөрөгән еребеҙ, ау!*

Бер аҙҙан ҡарттың тауышы тағы тынысланды, һәр өнөндә наҙ, иркәләү яңғыраны:

*Йылға буйҙары емешле,*
*Тирәһе алтын-көмөшлө.*
*Һыуҙарын эсһәң, бал кеүек.*
*Урап ятҡан ерҙәре —*
*Бар ҙа улар хан кеүек..*
*Байыу менән көн тыуыр,*
*Иртә бешер еләге,*
*Айыуҡойоһоноң үҙә*
*Ташҡойоһоноң там*
*Ямансура үҙәге...*
*Яҙ ғына малдың ятышы.*
*Көҙ генә малдың көйөшө.*

Һәм тағы иңрәү:

*Ҡалды ла беҙҙең тыуған илебеҙ,*
*Ҡалды ла беҙҙең йөрөгән еребеҙ!..*

Йыраусының тел төбө илен ташлап киткән халыҡ фажиғәһен тасуирлай түгелме? Ошо шикләнеүҙе раҫлағандай, ҡарт та:

— Мейәс эргәһендәге Буҙғын яланын беләмһең? — тип һорап ҡуйҙы.

Эйе, Буҙғын яланын да, уға ҡушып, рус промышленнигы Иван Лугининдың бөтә Миәс буйҙарын башҡорттарҙан тартып алыуын да ишеткән бар ине. Шуға күрә мин, был хаҡта артыҡ һүҙ ҡуйыртмайынса ғына, ҡайҙа киткән һуң ул халыҡ, тип ҡыҙыҡһындым.

— Урал аҫтына, — тине Хаммат ағай.

Урал армыттарының көнсығыш битләүҙәрен, туғай-болондарын біләп йәшәгән хәҙерге Учалы халҡы Златоуст арьяғын шулай “Урал аҫты” тип йөрөтә.

*...Бауыры тейһә, мал сумар,*
*Ике яғы иң тумар.*
*Мейәс беҙҙән ҡала ла,*
*Мейәстең киң яланы.*
*Хөкөм сығып ҡыуылып,*
*Алтын сыҡты йыуылып,*
*Ҡалды ла беҙҙең тыуған еребеҙ,*
*Ҡалды ла беҙҙең тыуған еребеҙ, ау.*
*Сабыу-сабыу сапҡанын,*
*Беҙгә ҡаршы атҡанын,*
*Тимер ҡалҡан алға алып,*
*Уҡ-йәйәне ҡулға алып,*
*Баҫҡын башын киҫтек беҙ,*
*Хөкөм сыҡҡас, киттек беҙ.*
*Сыңғыр-сыңғыр сыңлатып,*
*Мөңгөр-мөңгөр мөңрәтеп,*
*Ҡатын-ҡыҙҙы һырҡыратып,*
*Бала-саға сырҡыратып,*
*Илебеҙҙән киттек беҙ,*
*Еребеҙҙән киттек беҙ...*
*Әле шулай һөйҙәшеп*
*Әле былай һөйҙәшеп,*
*Сыйырсыҡтай эркелешеп,*
*Ҡара ҡаҙҙай теҙелешеп,*
*Арғымаҡтай ат менеп,*
*Ҡамсыны ҡулға алып,*
*Дуҫ-иштәрҙе янға алып,*
*Ҡымырышып ятҡан ил инек, беҙ, ау,*
*Ҡымырышып ятҡан ил инек.*
*Ҡалды ла беҙҙең тыуған илебеҙ, ау.*
*Ҡалды ла беҙҙең һөйгән еребеҙ, ау.*

Бәйет бик оҙонға оҡшай. Уның бер өҙөгөн ҡасандыр миңә халыҡ ижадын өйрәнеүсе, Һөйөндөк һигеҙ йыллыҡ мәктәбе уҡытыусыһы Шәүкәт Ғайсин да яҙып ебәргәйне. Был хаҡта район гәзитендә һәүәҫкәр йырсы, фольклорсы Спартак Ильясов та яҙып сыҡты.

— Элегерәк ҡарттар уны ярты сәғәт буйы әйтә торғайны, — ти ул. — Унда “Ер кендеге — Ирәмәлтау”, “Имсәктән һурған шифалы һөт һымаҡ һыуыбыҙ” кеүек юлдар ҙа бар ине.

Спартак Ильясовтың да, ошо уҡ мәсьәләне өйрәнгән журналист Сәлимйән Бәҙретдиновтың да фекеренсә (“Ҡасҡын” бәйете тураһында ул Илсеғол ауылы кешеһе Ырыҫ Бикбулатовтан

ишеткән), унығ геройҙарының береhе һәм бәйетте сығарыусы Әбләкән ҡарт булырға тейеш. Шуны раҫлап, улар тағы бер нисә строфа өҫтәй:

*Балыҡтары төкәште,*
*Тәкәләре һөҙөштө.*
*Уның ҡанын кем йыуҙы?*
*Аҡ һаҡаллы ҡарт йыуҙы.*
*Туҡһанға еткән Әбләкән т*
*Еңен төрөп, шул йыуҙы.*
*Эй, Мейесте, Мейесте,*
*Мейесте һыуын кем эсте?*
*Туҡһанға еткән Әбләкән ҡарт —*
*Туңҡайып ятып, шул эсте.*

Ырыҫ Бикбулатовтың уйынса, ҡасҡындарҙың илен ташлап китеүе ошо төбәктә яуызлығы менән танылған, 4-се кантон начальнигы Төхфәттең (ул 1800 йылдарҙың башында йәшәгән) исеменә барып тоташа. Ул, аҡсаға ҡыҙығып, ҡасҡындарҙың ер-һыуын һата, ә үҙҙәрен казактар ярҙамында йәшәгән урындарынан ҡыуа. "Халыҡ уға ләғнәт-ҡарғыш яуҙырып, бәддоға ҡылып китә", — тип яҙа С. Бәҙретдинов.

Был ысынбарлыҡҡа оҡшай. Ә уларҙың киткән урынын асыҡлап булырмы? Асыҡланһа, бәлки, бәйеттең аҙаҡҡы өлөшөн дә берәйһенән табып булыр?

Кәңәш ҡорған аҡһаҡалдар бәйеттә һүҙ Ҡыйғы, Салауат районы яҡтары тураһында бармаймы икән, тигән фекер әйтте.

Был фараз ысын булып сыҡты. Хаттар яҙыша торғас, ептең бер осо күренде: Златоуст ҡалаһынан төньяҡтараҡ Каскиново тигән ауыл бар икән. Унда ситтән күсеп килгән халыҡ йәшәй тип, миңә Силәбе өлкәһенең Ҡуса район гәзите редакцияһынан хәбәр иттеләр.

* * *

Поезд, төн ҡараңғылығын йырып, Урал армыттары бейеклегенә үрмәләй. Вагон тәгәрмәстәре, суйын юлдарҙы шаулатып, саҡырым артынан саҡырымдарҙы һанай. Тыҡылдаған тауыш аҫтында сәсәндең һамағы ҡайтанан ишетелә башлай:

*Ҡалды ла беҙҙең тыуған илебеҙ,*
*Ҡалды ла беҙҙең йөрөгән еребеҙ, ау...*

Төн. Бирҙәүеш станцияһы. Силәбе поезынан төшөп, Ҡуса ҡалаһына барыу өсөн электричкаға күсеп ултырылһа ла, башта уҡ тыуған бер уй һаман ҡотолтмай: йәберләүҙәрҙән, кәмһетелеүҙәрҙән

ҡасып китерлек ер булғас, был яҡтар әле лә ҡараңғы, урман да һаҙлыҡмы икән?

Быны дөрөҫләгәндәй, Бирҙәүештә вагонға шаулашып бер төркөм йәштәр килеп тулды. Яурындарында — оло-оло рюкзак, төрөп бәйләнгән резина кәмәләр... “Ҡайҙа китеп бараһығыҙ?”— “Ҡуса яғына”. “Туристармы әллә?”— “Эйе”.

Тимәк, туристар барыр ер булғас, ысынлап та, һаңғырау яҡтыр.

Юҡ, әҙәм бармаҫлыҡ түгел ине был яҡтар, ә киреһенсә, Урал тауҙары өҫтөндә бытырҙашып йәш ҡалалар үҫеп сыҡҡан. Барып төшкән Злоказово станцияһы ла ҙур ғына ҡасабаға тиңләнә икән. Көн әле яҡтырмаған. Өҫтән ямғыр быҫҡаҡлап торһа ла, вокзал йортонан алыҫ түгел ниндәйҙер предприятиеларҙың барлығы төҫмөрләнә. Ҡасабанан ҡырға таш юл алып сыға. Үрҙәрәк урман хужалығы күренә, унда — бөткөһөҙ ағас өйөмдәре, тракторҙар, крандар...

Злоказовоны артта ҡалдырып, шаулап ятҡан йылға шарлауығын ҡурҡа-ҡурҡа үтеп киткәс, сауҡалыҡ ҡырыйынан тау түбәһенә артылыу менән үк өйҙәр теҙмәһе килеп баҫты. Ауыл уйпат урында урынлашҡан. Бирге оста яңы ғына һалынған бер нисә кирбес йорт, мәктәп, төҙөлөп ятҡан контора күренә.

Ҡаршыла тауға күтәрелеп килгән бер ҡатын күренде. Бик иртәләүенә ҡарағанда, һауынсыға оҡшай.

— Һаумыһығыҙ, — тим, руссалап. — Был ниндәй поселок?

— Ҡасҡын ауылы, — ти ҡатын башҡортса (Тимәк, Каскиново тигәндәре беҙҙеңсә “Ҡасҡын” булып сыға!) — Кемгә килеп ултыраһығыҙ?

— Миңә Хәлимулла мулла кәрәк ине. Ундай кеше бармы?

— Бар, бар. Өйҙә булырға тейеш. Бөгөн бит байрам, ветеран тип, совхоз үҙәгенән саҡырып килгәйнеләр. Китмәгәндер әле.

Ҡатын Хәлимулла Хәмиҙуллиндың өйөн нисек табырға өйрәтте лә юлын дауам итте. Күңел күтәрелде: килеү бушҡа булмаҫҡа тейеш. Шуға өмөтләнеп, бик иртә булһа ла, Хәлимулла ағайҙың ҡапҡаһын шаҡыйым.

Сал сәсле, һикһән йәштәрҙәге ҡарт булып сыҡты ул. Хәрбиҙәрсә етеҙ. Таң ҡунағына аптыраманы, халҡыбыҙға хас ихласлыҡ менән, әйберҙәрҙе ҡулдан алып, төпкө бүлмәгә алып инде, ҡарсығына сәй ҡайнатырға ҡушты. Беҙҙең хәбәр төйнәлеп тә өлгөрмәне, ишек асылды һәм унда бер ҡыҙ күренде. Клуб мөдире икән. Хәлимулла ағайҙы, автобус ебәргәндәр тип, ашыҡтырырға тотондо. Әммә ҡарттың алыҫтан килгән кешене яңғыҙ ҡалдырғыһы килмәне.

— Ауылығыҙҙың тарихын белергә ине, уны ни өсөн Ҡаҫҡын тинеләр икән? — тип, мин яйлап ҡына һораштыра башланым.

— Беҙ ҡайҙандыр Миәс яғынан килгәнбеҙ шикелле, — тине ҡарт. — Ололар шулай һөйләй торғайны. Йәшерәк саҡта ундай хәбәрҙәргә иғтибар итәһеңме ни. Эш тә эш менән мәшғүл булдыҡ.

— Шул хаҡта күберәк һөйләрлек кешеләр юҡмы ауылда?

— Юҡ. Бында ла, Петрушка менән Туҡтарҙа ла.

— Ә улары ниндәй ауыл?

— Шул уҡ Миәс яғынан килгәндәр. Тик был яуында нисек үтәһең Туҡтарға? Бик кәрәк икән, мин һине Бибикамал Жиянбаеваға алып барайым.

* * *

— Әйҙәгеҙ, үтегеҙ. — Күптән көткән кеүек ҡаршыланы беҙҙе Бибикамал әбей.

Ике бүлмәле өй, иҙәндәре һап-һарыға буялған. Төпкө бүлмә уртаһында өҫтәл күренә. Бер яҡ мөйөштә телевизор, ҡаршыға ҙур келәм эленгән — һәммәһе лә хәҙергесә. Әбей, ҡунаҡтарға һынсыл ҡарап, өҫтәл янынан урын күрһәтте. Йомошобоҙҙо һөйләп бирҙек. Эште оҙаҡҡа һуҙмаҫ өсөн, Учалы яҡтарында табылған бәйеттән өҙөктәр уҡып ишеттерҙек: “Ҡалды ла беҙҙең Уралыбыҙ, ҡалды ла беҙҙең Уралыбыҙ...”

Бибикамал апай, яңағын усына ҡуйып, бик ихлас тыңланы. Һамаҡтың һәр юлын раҫлаған һымаҡ, эйәк ҡағып ултырҙы. Ахырҙа баш сайҡаны ла: “Эй, бахырҙар, йөрәккәйҙәрем!”— тип, яулығының осо менән күҙҙәрен һөртөп алды.

Хискә тиҙ бирелеүсе ҡарсыҡ икән: халҡының шундай бәләҡазаға осрауына күпме ваҡыттар үтеп киткән, ә ул ата-бабаларының зарын бөгөнгөләй үҙенеке итеп күрә. Эш илауҙан ары китмәҫ ахырыһы, тигән шик тыуҙы. Хәбәр ҙә икенсегә күсеп китте. Әбей, алғы бүлмәгә сығып, ҙур сумаҙанын асып, бороңғо яҙыуҙар алып килде. Ләкин беҙҙең әңгәмәгә ҡағылышлы бер нәмә лә юҡ ине унда. Өҫтәлгә самауыр ултырғас ҡына, ул баҫылып, әңгәмәне үҙ яйына борҙо.

— Атайым мәрхүм, Жиянбай Байегетов, былай һөйҙәй торғайны. Имеш, беҙҙең тыуған яҡтарҙа ифрат бай алтын сыҡҡан. Өй түрҙәре лә сағылташтан булған икән. Быны беҙҙең халыҡ үҙе белмәгән, наҙан ине бит, ә урыҫ байы күреп ҡалған. Күргән дә быларҙы ҡыуған. Беҙҙекеләр ҡара урманға ҡасҡан. Ҡасҡас та шунда уҡ ултырмағандар урман араһына. Баутин күперен, бәлки, беләһеңдер? Ана шунда, һыуға яҡын булыр тип, Әршә буйына туҡталғандар. Тик, ни ғәләмәттәндер, быларҙың бер-бер артлы ба-

лалары үлә башлаған. Шөбһәгә төшкән халыҡ. Урын килешмәне, тип, тағы ҡуҙғалғандар. Ә тирә-яҡ урман да урман икән. Аптырашып торғанда быларға Ҡолбаҡ, Арыҫлан ауылдарынан ярҙам ҡулы һуҙып килгәндәр. Рәхмәт төшкөрҙәре. Был ауылдар Ҡыйғы яғында. "Әйҙә, беҙҙең янғараҡ һырығығыҙ", — тигәндәр. Риза булмаған ҡарттар. "Юҡ, беҙ урман яҫҡанабыҙ", — тигәндәр.

— Нимә була ул, яҫҡаныу?

— Бәй! Үҙ телеңде белмәйһеңме ни? — Бибикамал апай шелтәләп ҡарап ҡуйҙы. — Урмандан файҙа күреп, солоҡ менән шөғөлләнеп йәшәргә булғандар инде.

— Тимәк, төп шөғөлдәре бал ҡорто үрсетеү булған?

— Эйе. Ана, һеҙҙең Учалы яғында ла Балбыҡ тигән ауыл бар шикелле? Шул "бал бығып ятты" тигәндән алынған ул. Урманы күп булған.

"Һе, Балбыҡтың ни ҡарағай урманы юҡ таһа, әллә ҡырып бөтөрҙөләрме икән, — тип уйлап ҡуйҙым. — Хәҙер ҡола яланда, ҡом тауҙары араһында йәшәгән балбыҡтар был хаҡта үҙҙәре лә белмәй, "балбыҡ" һүҙен ҡайһылай ғына сурытып аңлатмайҙар!"

— Робинзондар тип йөрөттөләр беҙҙе, уныһы ни тигәнде аңлаталыр, — тип дауам итте әбей. — Килгәс-килгәс, ни ҡылһындар, ваҡ ҡына итеп өй һалырға тотонғандар. Ярлы булғас, өйҙәренең ниндәй булыуын күҙ алдына килтерәһеңдер... Халыҡтың бер аҙы Әйҙең ҡушылдығы Әҙәм йылғаһының ике яғына бүленеп ултырған. Тағы ла бер төркөмө Атламыш буйын һайлаған.

*Әҙәм тигән һыуығыҙҙы*
*Ер межаһы итербеҙ,*
*Атламыш тигән һыуығыҙҙы*
*Атлап сығып йөрөрбөҙ.*
*Ҡайһылары һөйөнә,*
*Ҡайһылары көйөнә,*
*Ҡайтып кермәй өйөнә...*

— Ә ни өсөн ҡайтып кермәй?

— Һуң, сит яҡтарҙы ерһенмәгәндәр инде. Тиҙ генә өйрәнеп буламы ни? Еңел булмағандыр ҡара урман төпкөлөндә көн итеүҙәре... Ә беҙҙең Көсөк ауылы тирәһенән килеүебеҙ дөрөҫ. Унан дүрт-биш саҡырым ситтәрәк Ҡасҡынбай тигән ауыл барҙыр. Унда хәҙер Ленинск алтын приискыһы шикелле. Ауылдарының исемен юғалтмаҫ өсөн бындағыһына ла Ҡасҡын тип ҡушҡандар. Тора-бара, тупаҡ башлы өйҙәренә төкәтмә һуҡтыра башлағандар — урман эргәлә генә бит. Транса ярып, заводтарға ағас һатҡандар. Шул дәүерҙән бер таҡмаҡ та ҡалған:

*Мырҙаларҙың ашағаны —*
*Көн дә көн дә аҡ ҡалас,*
*Аҡ ҡаластан артыҡ ине*
*Урмандарҙағы ағас.*
*Аҡса бөттө, урман китте,*
*Мырҙа йөрөй, зарҙанып.*

Сер түгел, Ҡуса яғына сәйәхәт ҡылыуҙың бер маҡсаты — бәлки, һүҙ башында килтерелгән бәйеттең авторын асыҡлап булыр, тигән уй ине. Әммә бына әле, әңгәмәбеҙ тегеләй ҙә, былай ҙа боролған арала, Бибикамал әбейҙең, уңайын тура килтереп, һамаҡлап ултырыуын күргәс, шундай уй тыуҙы: ул авторҙың исемен билдәләүе мөмкинме икән? Бәлки, ул шиғыр юлдарын алдыбыҙҙа ултырған Бибикамал әбей үҙе йә иһә халыҡ тарихын, уй-хыялын үҙ күңеле түрендә йөрөткән башҡа Жиянбаевалар сығарғандыр? Аҙмы ни нескә, һиҙгер йөрәкле кешеләр халыҡ араһында!

...Ҡасҡындарҙың хәҙерге Учалы районының төньяҡ өлөшөнән күсеп китеүҙәренә хәҙер инде бер ниндәй ҙә шик ҡалманы. Тик бына тәғәйен генә нисәнсе йылдарҙа “эркелешеп” юлға сыҡҡан улар? Бибикамал Жиянбаеваның ишетеүенсә, быға 200—300 йыл булып килә. Былай булһа, ул Башҡортостанды колонияға әйләндерә башлаған дәүергә тап килә. Ләкин халыҡтың һуңыраҡ та, XIX быуатта ла, күсеп китеүе йәки ҡасҡындар тулҡынының тағы ҡабатланыуы ихтимал.

Был фекерҙең дөрөҫлөгө Ҡуса районынан Миәскә килгәс тә раҫланды.

* * *

Бына Жиянбаева әйткән Ленинск ҡасабаһы. Ул хәҙер Силәбе өлкәһенең Миәс районына инһә лә, Учалы районы менән сиктәш кенә, Мулдаш ауылы эргәһендә. Икегә бүленгән ҙур ауыл. Береһен — Иҫке, икенсеһен Яңы Ленинск тип йөрөтәләр. Алтын приискыһы күптән инде ябылған, ләкин быуаттар буйына хазина алынған эҙҙәр һаҡланған.

— Старателдәр шулай тырышҡандыр инде? — Автобуста йәнәш һелкенеп барған оло йәштәрҙәге кешегә, уны нисек тә булһа һүҙгә ылыҡтырыу уйы менән әйтелгән был һорауға, ул теләр-теләмәҫ кенә:

— Һуң! — тине.

Ишеткән бар: утыҙынсы йылдарҙа, ошонда, Ирәмәл йылғаһын быуып, тәүге алтын драгаһын төшөргәндәр.

— Ә Ташҡутарған йылғаһы ҡайҙа, алыҫмы?

— Тегендәрәк, түбәсектәр артында. Ирәмәл кеүек үк, ул да Мейәс йылғаһына барып ҡушыла.

— Ә Ҡасҡын ауылы? Шул тирәлә булырға тейеш, тигәйнеләр миңә?

— Ҡасҡын түгел, Каскиново. Уны беҙ әле генә үтеп киттек. Өй нигеҙҙәрен шәйләмәнеңме ни?

Тимәк, дөрөҫтө һөйләгән Бибикамал Жиянбаева: Каскиново — урыҫсаһы, башҡортсаһы — Ҡасҡын. Ошо ауыл менән бәйләнеше булған бер хәтирә бар. Ул элегерәк Туңғатар ауылының Йәрмөхәмәтов Абдулланан яҙып алынғайны:

“Ҡасҡын ауылының бер әбейе өйрәк таҙартып торған, имеш. Ҡоштоң бүтәгәһен ярып ебәрһә, күҙҙең яуын алып торған таш килеп сыҡҡан. Ташты кешеләргә күрһәтһә, уның алтын икәнен белеп ҡалғандар.

Шунан һуң ҡара балсыҡты елгә елгәреп ҡарайҙар — бында ла алтын күренә. Шул ерҙә кейеҙ аша һыу ағыҙып, балсыҡты йыуа башлайҙар. Хазина күп сыға. Был хәлде урыҫ байҙары белеп ҡала. Улар Ҡасҡын ауылына нигеҙ һала, алтын йыуырға тотона. Ғәскәр килтерәләр. Алтын сыҡҡан ерҙә приискы төҙәлә.

Совет власы башланғас, был ерҙе Ленинск приискыһы тип атайҙар...”

Билдәле булыуынса, Миәс эргәһенән хәҙерге Учалы районы территорияһында алтмыш-етмеш километр самаһы инеп киткән “Алтын үҙәк” рус промышленниктарының иғтибарын XIX быуаттың башында уҡ үҙенә тарта. 1820 йылдарҙа Мулдаштан дүрт-биш километр ғына ситтә, Ташҡутарған йылғаһында, ысын-ысындан алтын биҙгәге башлана. Бында, ер ҡыртышын йыртып, йөҙ бот ҡомдан бер ботҡа тиклем сағылташ йыуалар. Уралдың даны бөтә Рәсәйгә тарала, Петербургҡа ишетелә. Ташҡутарған буйҙарын күреү өсөн 1824 йылда батша Александр I сәйәхәткә сыға, килеп, йылға буйында ярты сәғәт кенә самаһы эшләп, 8 ҡаҙаҡ алтын йыуып ала. Рудникка Царево-Александровский исемен бирәләр, тиҙҙән йәнәшәлә тағы ла Царево-Николаевский приискыһы асыла (хәҙерге Ленинск).

Ташҡутарған, Ирәмәл йылғаларының (Миәстең ҡушылдыҡтары) алтынға ғәжәп бай булыуын күрһәтеү өсөн шуны ғына әйтеү ҙә етә: тиҫтә генә ярым йыл эсендә бында 6500 килограмм ҡиммәтле металл йыуып алына. Ә 1842 йылда Рәсәйҙе яңы сенсация шаулата — бында ике бот ете ҡаҙаҡтан да ауырыраҡ йәки донъяла әлегә тиклем ишетелмәгән иң ҙур самородок табалар. Ташҡутарғандың даны оҙаҡ ваҡыттар һүнмәй. Бында рудник артынан рудник асыла, табыш зонаһы Учалы яғына ҡарай һаман киңәйә бара.

Башҡортостан ере бүләк иткән шундай мул байлыҡҡа батша ғаиләһе, уның әрәмтамаҡтары затлы кейемдәргә төрөнә, улар бутал

һауыттарҙан ашай. Алтын байлыҡ символына, бөтмәҫ ҡеүәт-ҡөҙрәт билдәһенә әүерелә. Ә инде уны эҙләүселәр, шахталарҙан сығарыусылар яфа сигеүҙәрен, әҙәм ышанмаҫ шарттарҙа эшләүҙәрен генә белә. Эш шарттарының ниндәй булыуын күрһәтеү өсөн урындағы бер миҫалды килтереү ҙә етә.

Мулдаҡай ауылы старателе Һиҙиәт Исхаҡовтың (1877 йылда тыуған) шундай иҫтәлеге һаҡланған. "Мин ун ике йәшемдән алтын йыуҙым, — тип һөйләгән ул. — Мулдаҡай приискыһына Миәстең Захар һәм К. (кампанияһы) хужа булды. Управляющий Звалев тигән әҙәм ине. Улар Бөрө, Минзәлә, Бәләбәй, Өфө өйәҙҙәренән каторжниктар ҡыуып килтерҙе... Забойҙа 12—20-шәр сәғәт эшләнек. Ҡыңғырау тауышы менән генә йөрөнөк: эш урынына — ике звонок, сафҡа баҫыу өсөн — өс звонок. Әгәр ҙә сафҡа ун сажин ғына барып етмәһәң дә, шунда уҡ стражниктар тотоп алыр ҙа, хөкөмгә биреп, һөргөнгә оҙатырҙар ине".

Миәс ҡалаһының тыуған яҡты өйрәнеү музейында сиркәү әһелдәре тәфсилләп яҙып барған ҡалын ҡулъяҙма китап табылды. Улар ҡасан, ҡайҙа ниндәй ваҡиғалар булғанын түкмәй-сәсмәй теркәп барған. "1881 йылдың авгусында Миәс промыслаларында контракт буйынса эшләгән башҡорттар стачка күтәрҙе, — тиелә ошо ҡулъяҙманың бер битендә. — 800-гә яҡын кеше рудниктарҙан ҡасты, башҡалары араһында болалар башланды, уны баҫтырыу өсөн Ҡундырау станицаһынан казактар командаһы саҡырылды. Өйәҙ исправнигы ла килеп етте. Башҡорттар ризаһыҙлыҡтарының сәбәбе итеп аҙыҡ-түлектең насар булыуын күрһәтте".

Баш күтәргән халыҡ приискы йорттарын, келәттәрҙе яндыра. Башҡорт эшселәренең сығышын урыҫ эшселәре лә яҡлап сыға. Бунттың киңәйеүенән, уға алтында эшләгән башҡа милләттәрҙең дә ҡушылыуынан ҡурҡа төшкән властар киҫкен саралар күрергә мәжбүр була.

Бола баҫтырыла, күп тотҡондар саф аша үткәрелеп, һыйғыр сыбыҡ менән һуҡтырыла.

Башҡорт эшселәре араһындағы болалар хаҡында Силәбе өлкәһе архивында ла мәғлүмәттәр бар икән. Бына уларҙың 1881 йылдың июль айындағы ваҡиғаларға ҡағышлы береһе.

Ырымбур жандарм идаралығы начальнигы полиция департаментына 25 июлдә түбәндәгеләрҙе хәбәр итә: "Контракт буйынса эшләгән башҡорт эшселәренең үҙ белдектәре менән эш ҡалдырыуы һуңғы осорҙа көсәйҙе. Ул, Мулдаҡай приискыларында башланып, башҡаларына таралды... Эшселәрҙең талабын ҡәнәғәтләндереү урынына, Мулдаҡай дистанцияһы управляющийы Аблин уға мөрәжәғәт иткән башҡорттарҙы иң әшәке һүҙҙәр менән әрләй.

Шундай һүҙҙәрҙе ишетеп асыуҙары ҡабарған башҡорт эшселәре, 200-ләгән кеше, эш ҡоралдарын ташлап, 22 июндә Миәс заводына килде.

Мулдаҡайҙарға Ильинка приискыһы (ул да Учалы районы территорияһында. — Авт.) эшселәре эйәрҙе, унан 17 кеше ҡасырға йыйынғайны, ләкин үҙ ваҡытында тотолдо. Исправник Үрге Миәс, Көмәс, Орловка, Ильинка приискылары эшселәрен тынысландырып өлгөрөүгә 1 июлдә Ирәмәл приискыһында сыуалыштар башланыуы тураһында хәбәр килде. Баш управляющий ошо приискыға барырға сыҡҡас, юлда уға 100-гә яҡын кеше тап була, улар ҡысҡырынып алға барыуҙарын дауам итә...

Ирәмәл приискыһындағы сыуалыштар күрше Ильинка приискыһына күсте. Ундағы эшселәр ҙә, башҡаса эшләмәйбеҙ, тип ҡысҡырып һәм көрәк һаптары менән ҡоралланып, приискынан сығып китте. Уларҙы туҡтатып булманы... 2 июлдә Ильинканың 145 эшсеһе Миәстә туҡтатылды. Ирәмәл эшселәре иһә Златоустҡа йүнәлде: уларҙы туҡтатырға тип телеграф аша әмер бирелгәйне, ләкин ҡасҡындарҙы тоторлоҡ түгел ине".

Ҡасҡынлыҡтың сәбәбе — социаль ғәҙелһеҙлек, батша хөкүмәтенең, капиталистарҙың ябай хеҙмәтсәндәрҙе иҙеүе, төрлө яҡлап кәмһетеүе. Ҡасҡынлыҡ — ҙур тарихи төшөнсә, уны рус дәүләте тормошонан айырып ҡарап булмай.

Тимәк, үрҙәге бәйеттең ижад ителеүе лә бер Ташҡутарған тирәһе өсөн генә әһәмиәте булған ваҡиға түгел. Ул тотош башҡорт халҡы тарихының бер битен, революцияға тиклемге эшселәр тормошон сағылдырған реаль күренеш.

*1988 й.*

## III. Баймаҡтағы ҡанлы енәйәт

Беҙҙең тарих ғилемендә, 1918 йыл башында Башҡортостанда булып үткән ваҡиғаларҙың сәбәптәрен аңлатҡанда, бик үк ғәҙел булмаған ҡараштың нығыныуына юл ҡуйыла. Ҡайһы бер тарихсылар, ә уларға эйәреп, журналистар бер үк хәбәрҙе ҡабатлай: йәнәһе лә, Башҡорт хөкүмәте төҙөлөү менән үк большевиктар башҡорт халҡына ҡаршы ҡанлы һуғыш асып ебәргән. Ысынбарлыҡтан ситтәрәк яткан, нахағыраҡ һүҙҙәр тип ҡабул итергә кәрәк быны. Ни өсөн тигәндә, беҙ Башҡортостан автономияһын юллап Петроградҡа барған Ш. Манатовтың В. И. Ленин менән осрашыуын, һуңғыһының башҡорт милли-азатлыҡ хәрәкәтенә дөйөм алғанда ыңғай мөнәсәбәт белдереүен, артабан Милләттәр эштәре буйынса Халыҡ комиссары И. Сталиндың да Башҡортостан етәкселәрен — шул уҡ Ш. Манатовты, М. Мортазинды, мәҫәлән, — йәберләтергә бирмәүен (тәүге осорҙа, әлбиттә) яҡшы беләбеҙ. Быны онотһаҡ, тарихи ысынбарлыҡҡа күҙ йомоу булыр ине.

Икенсе яҡтан, Башҡорт милли-азатлыҡ хәрәкәте етәкселәре лә Совет власына ҡаршылыҡ күрһәтмәй, үҙенең нейтралитет тотасағы тураһында бер нисә тапҡыр белдерә.

Тотош алғанда, ике яҡ та бер-береһен аңлап эшкә тотона һымаҡ башта. Әммә 1918 йылдың февраль башында үҙ-ара мөнәсәбәттәр кинәт үҙгәреп китә. Кемде ғәйепләргә бында: башҡорт "милләтселәр"енме, әллә большевиктарҙымы? Туранан-тура тегеләрҙе лә, быларҙы ла түгел. Ысынлап та ҡанлы һуғыштарға барып еткән ваҡиғаларҙың төбөнә төшөп ҡарағанда, конфликттарҙың башында әлегә хәтле тылҡып киленгән синфи ҡаршылыҡтар түгел, ә борон-борондан килгән милли ыҙғыштарҙың, айырата татар колонистарының башҡорттарға азатлыҡ бирмәҫкә тырышыуын күрәһең. Был яуызлыҡты хәҙер йәшермәйенсә әйтергә кәрәк.

Шул уҡ фекерҙе 1926 йылда Муса Мортазин да ҡурҡмайынса белдерә: "Бына Ырымбурҙы Ҡыҙыл гвардия биләй. Мосолмандарҙың Ырымбурҙағы өлкә Мосолмандар комитетында кисә генә дошман булып йөрөгән кешеләр (граждандар ҙа, хәрбиҙәр ҙә) шунда уҡ уның "дуҫтар"ына әүерелде, — ти ул. — Улар, беҙ казактарҙы ҡоралһыҙландырҙыҡ, ҡоралдарын Ҡыҙыл гвардияға тапшырҙыҡ, тип яр һалды. Үҙҙәренең төп маҡсатына — Башҡорт автономияһын юҡ итеүгә ирешеү өсөн, улар башҡорттарҙы әҙәрлекләргә, уларҙы Ҡыҙыл гвардия хеҙмәткәрҙәре алдында Дутовтың союздаштары итеп ошаҡларға тотондо... Кесе Ҡоролтай Ҡыҙыл гвардияны һәм Советтарҙың граждандар власы вәкилдәрен

тәбриклəп ҡаршы алһа ла һəм, ғөмүмән, Совет власына ыңғай мөнәсәбәт белдерһә лә, татар ойошмаларының баҫым яһауы арҡаһында башҡорттарҙың ҡайһы бер күренекле хеҙмәткәрҙәре ҡулға алынды... Тиҙҙән, башҡорттарҙың милли үҙбилдәләнеш өсөн хәрәкәте — тамырынан контрреволюцион хәрәкәт ул, тигән хәбәр таратылды" (М. Мортазин. Әҫәрҙәр, Өфө, "Китап", 1994, 71-се бит.).

Был ифрат сетерекле мәсьәләгә Әхмәтзәки Вәлиди тағы ла аныҡыраҡ асыҡлыҡ индерә: "Ғәскәребеҙгә сабыр һәм һаҡ эш итергә кәңәш биреп, Советтарҙың тәкдиме буйынса, яндарына барып килеү өмөтө менән Ырымбурға киттек. Цвиллинг (Ырымбур Хәрби-революцион комитеты рәйесе. — **Авт.**) бик ихтирамлы күренде. Бер нисә мәжлескә саҡырҙылар. Был мәжлестәрҙә иҫке Дума ағзаһы булған татарҙар Кәлимулла Хәсәнов менән Борһан Шәриф большевиктар янында иҫке дуҫтары кеүек урын алған һәм беҙгә ҡарата бер прокурор кеүек ҡылана ине. Биш көн ваҡыт үтте. 3 февраль көнө беҙҙе ҡулға алдылар. Ҡулға алыусылар татар һалдаттары ине, улар беҙгә Советтар исеменән эш итеүҙәрен белдергән ялған ҡағыҙ күрһәткәс, төрмә начальнигы: быларҙы ҡулға алыу тураһында беҙгә приказ килмәне, ваҡытлыса ғына алып ҡалам, тине... Һуңынан аңлашылды, был хаҡта: "Ҡалалағы Мосолман Хәрби комитетының талабы буйынса улар тарафынан ҡулға алынған башҡорттарҙы совет төрмәһенә бикләүгә рөхсәт бирелде", — тип яҙҙылар (Зәки Вәлиди Туған. "Иҫтәлектәр", Өфө, "Китап", 1994, 221—222-се биттәр.).

Артабан: "Бер көндө минең янға Мөхәммәт Таһиров тигән йәш кенә татар егете килеп инде. Күҙҙәренә йәш алып, ул түбәндәгене һөйләне: "Остазым, беҙ һеҙҙе ҡурҡытыр өсөн һәм башҡорттар үҙаллылыҡ идеяһынан баш тартһын, тип кенә ҡулға алдыҡ. Ләкин эш яман төҫ алды (Шунда уҡ, 223-сө бит.).

Башҡорт хөкүмәтен ҡулға алыу 1918 йылдың 4 февраленә ҡараған төндә була. Ә бер ай үтеүгә беҙ шул уҡ хаинлыҡтың дауамына шаһит булабыҙ: Башҡорт хөкүмәте тарафынан Таналыҡ-Баймаҡ төбәгенә командировкаға ебәрелгән Ғимран Мағазовты (отряд башлығы), Ғабдулла Иҙелбаевты ҡулға алалар. Был юлы ла башҡорт халҡын күрә алмаған татар һәм рус шовинистары, "большевик" битлеге кейеп, этлектәрен ҡыла. Ошо мәсьәлә буйынса хәҙер тарих ғилемендә тарихсылар М. М. Ҡолшәриповтың "З. Валидов и образование Башкирской Автономной Советской Республики", С. Ф. Ҡасимовтың "Автономия Башкортостана" тигән һәм ваҡиғаларҙы дөрөҫ баһалаған хеҙмәттәре бар. Ләкин уларҙың фекерҙәре киң ҡатлам уҡыусыларға барып еткән тип әйтеп булмай

эле. Башҡорт халҡының бөтә бәләһе — В. И. Ленин иҫкәртеүенсә, бер юлы ике милләт тарафынан иҙелеүендә һәм ошо колониаль сәйәсәттең эленән-эле реаль тормошта ҡалҡып сығыуында. Беҙ алған миҫалда ла, әгәр татар шовинистары ошаҡлашмаһа, Башҡорт хөкүмәте Дутов яҡлы булды, тип алдашып йөрөмәһә, әгәр С. М. Цвиллинг уларға ышанмаһа, Үҙәк менән кәңәшләшһә, Әхмәтзәки Вәлидиҙе һәм уның арҡадаштарын төрмәгә ябып ҡуймаһа, бәлки, Вәлиди ҙә Силәбегә ҡасмаҫ һәм Колчак яҡлы ғәскәр йыйып йөрөмәҫ ине. Юҡ, эш бөтөнләй икенсе юл ала. Аптырағанда ахмаҡка ла "ағай" тиерһең. Тап шул юҫыҡка этәрә башҡорт зыялыларын Цвиллинг та. Быны беҙ 1918 йылда нәшер ителгән "Башҡорт", "Башҡорт тауышы", "Башҡорт хөкүмәтенең теле", "Вестник Башкирского правительства" тигән гәзиттәрҙең айырым-айырым һандары менән танышҡанда ла күрәбеҙ. Ундағы күпселек мәҡәләләрҙең авторы — күренекле шағир һәм журналист Хәбибулла Ғәбитов булыр. Беҙ һүҙебеҙҙе ул ҡалдырған яҙмаларға таянып алып барасаҡбыҙ.

Башҡортостан хөкүмәте, ойошторолоуының тәүге көндәренән үк милли ғәскәр төҙөү сараларын күрә башлай. Ошо маҡсат менән, шулай уҡ алтын приискыларын, Мокрушин тигән байҙың араҡы заводын конфискациялау һәм аҡса туплау өсөн, атлы һәм йәйәүле — барлығы 70 һалдаттан торған отряд йыйып, Баймаҡҡа сығарып ебәрелә. Әхмәтзәки Вәлидов уға баш итеп Ғимран Мағазовты тәғәйен итә. Ә Әмир Ҡарамышевҡа буйһонғандар — һыбайлылар. Был икәүгә бер нисә көндән һуң, пехота менән етәкселек итәсәк Ғабдулла Иҙелбаев килеп өҫтәләсәк.

## Ғабдулла Иҙелбаев

**Белешмә өсөн:** "Батша хөкүмәте, тормошон яҡшыртыу юлдарын белмәһен тип, башҡорт халҡын ҡараңғылыҡта тотто. Ләкин башҡорттар араһында мәғрифәтле кешеләр ҙә осрай ине. Улар күп түгел, бармаҡ менән генә һанарлыҡ. Уларҙың араһына Ҡазан университеты студенты Ғабдулла Сәфәрғәли улын да индерергә мөмкин.

Мин уны күптән беләм инем. Ул Ырымбур өйәҙе Бошман-Суун-Ҡараҡыпсаҡ волосы Теләүембәт ауылында тыуған. Башланғыс белемде Ҡазан мәҙрәсәһендә алған, унан Ырымбурҙың 1-се ирҙәр гимназияһының 3-сө синыфына кергән. Гимназияла уҡыған йылдарҙа күргән кешеләр уны һис онота алмайҙыр: һомғол кәүҙәле, күңелсәк егет һәр ваҡыт гимназистарҙың иғтибар үҙәгендә ине. 1914 йыл ул Ҡазан университетының медицина факультетына ба-

рып инде. Лэкин бер йыл үткәс, врачка ҡарағанда юристың үҙ халҡына күберәк файҙа килтереүе мөмкин тип, юридик факультетҡа күсте. Эйе, ул юриспруденцияны ярата ине. Унан тыш, ораторлыҡ менән мауыға башланы. Был һәләте ошо факультетта оҫта лекторҙарҙы тыңлағанда уянды шикелле. Ҡыҫҡаһы, Ғабдулла үҙенең бөтә һәләтен тыуған халҡын төрлө ҡомһоҙҙар, эшҡыуар ҡоҙғондар тырнағынан йолоп алырлыҡ фәнгә арнарға ҡарар итте. Әммә уға был хыялын тормошҡа ашырырға насип булманы.

Башланып киткән һуғыш уны университеттағы уҡыуынан китергә мәжбүр итте һәм ул прапорщик дәрәжәһендә Көньяҡ-көнсығыш фронтҡа барып эләкте. Ул хат яҙырға ратманы — шуға күрә мин уның хәрби тормошо хаҡында бик аҙ беләм. Ғабдулла фронтта поручик званиеһында хеҙмәт иткән. 1917 йылдың ҡышында башҡорт федералистары исемлеге буйынса Ырымбур губернаһынан Ойошторою Йыйылышына делегат булып һайлана. Һәм бына ул 1918 йылдың ғинуар аҙағында, юлда төрлө мәшәҡәттәр күрә-күрә, саҡ Ырымбурға килеп етте. Мәшәҡәттәр тигәнем шунан ғибәрәт: офицер документтары менән юлда йөрөү бик хәүефле ине. Тотһалар, Линч хөкөмөн көт тә тор. Ырымбурға килгәс тә, ул, юлда бик йонсоһа ла, иртәгеһенә үк Вәлидов менән Баймаҡҡа сығырға тейеш ине...

А. Перетц."

**Артабан:** Ғ. Иҙелбаевтың 1918 йылдың мартында ҡыҙылдар һорау алғанда биргән яуаптарынан: "Мин Симферополдә хәрби докторлыҡ хеҙмәтендә инем. Унда инҡилабтан өс-дүрт ай һуң килеп урынлаштым... Симферополдә ваҡытымда Ырымбурҙағы Башҡорт мәркәз шураһы тарафынан, Ырымбур губернаһы башҡорттары исеменән Учредительный Собраниеға минең кандидатурам уҙғанлығы белдерелеп, телеграм килде. Унда мине туҡтауһыҙ Ырымбурға килеп етергә ҡушҡайнылар. Юлдар тәртипһеҙ булыу сәбәпле, ашығып сыҡһам да, Ырымбурға килеүем оҙаҡҡа һуҙылды. Ғинуарҙың 17—18-ҙәрендә генә килеп еттем. Мин килгәндә, башҡорт отряды күптән инде сығып киткәйне. Әхмәтзәки Вәлидов килгән көн үк, отрядҡа килеп ҡайтыр өсөн бергә Ырымбурҙан сыҡтыҡ. Отрядты Иҙелбай ауылындалыр тип уйлаһаҡ та, Ҡыҙырша ауылына китеп өлгөргәнгә күрә, артынан Ҡыҙыршаға киттек. 20 ғинуарҙа башҡорт отрядына барып ҡушылдыҡ.

Ә. Вәлидов менән башта сыҡҡанда маҡсатыбыҙ отрядта ҡалыу түгел, бәлки кире Ырымбурға ҡайтыу ине. Лэкин Әхмәтзәки Вәлидов, мине ике-өс көнгә отряд янында ҡалдырып, үҙе ҡайтып китте. Әхмәтзәки үҙе Өфөгә китә ҡалһа, ҡайтып килгәнсә урынында тороуҙы миңә тапшырғанға күрә, ике-өс көндән һуң миңә Ырымбурға

ҡайтырға кәрәк ине. Фәҡәт отряд башлығы иптәшем Мағазов мине ебәрмәне. Шул ҡалғандан һуң нисә мәртәбә ҡайтырға теләһәм дә, Мағазов урынымдан бушатманы.

Мин килгәндә башҡорт отрядында Бриц тигән офицер юҡ ине. Шуның менән бергә, Мокрушин заводындағы араҡы ла һатылып бөткәйне. Аҡсаһы ла алынғайны. Минең отрядҡа килеүем ошо рәүештә..."

"Башҡорт хөкүмәтенең теле" тигән гәзиттә өҙөп-бүлгеләп бирелгән мәҡәләләрҙән күренеүенсә, башҡорт отряды, Ҡыҙырша ауылында бер-нисә көн торғас, Баймаҡтан 30 саҡырым самаһындағы Юмаш ауылына килеп урынлаша. Ошо ауылдан Ғ. Мағазов Ғабдулла Иҙелбаев менән Әмир Ҡарамышевты Баймаҡ эшселәренә делегат итеп ебәрә һәм үҙҙәренең бында ни өсөн килгәндәрен аңлатырға ҡуша.

Делегаттар Баймаҡҡа килә. Улар большевиктар власын таныуҙарын, большевиктар менән аңлашып йәшәйәсәктәрен белдерә. Баймаҡ эшселәре лә, отрядтың тотҡан юлын белгәс, ризалыҡ күрһәтеп, үҙҙәренең отряд менән ҡулға-ҡул тотоношоп барасаҡтарын вәғәҙә итә. Отрядты Баймаҡта урынлаштырыуҙа ярҙамлашырға әҙер икәнлектәрен дә белдерә.

Делегаттар, Юмаш ауылына ҡайтып, Ғ. Иҙелбаевҡа эшселәрҙең бер ниндәй ҙә ҡамасаулыҡ яһамаясаҡтарын, киреһенсә, төрлөсә булышлыҡ итергә әҙер тороуҙарын бәйән итә. Шундай ҡыуаныслы хәбәр алғас, отряд Юмаштан Баймаҡҡа йүнәлә. Уны эшселәр тантаналап ҡаршылай, фатирҙарға урынлаштыра.

Һуңғараҡ, Иҙелбаевтан һорау алғанда, ҡыҙылдар командиры уға бәйләнә:

— "Баймаҡ эшселәренә ультиматум биргән һин түгелме һуң?

Яуап:

— Минең ультиматум биргәнем юҡ. Баймаҡҡа хәбәрһеҙ, туранан-тура ғәскәр менән килгәндә, арала аңлашылмауҙан күңелһеҙ ваҡиғалар сығып китеүенән ҡурҡып, башта эшселәр менән һөйләшеп, маҡсатыбыҙҙы аңлаттыҡ. Был аңлашыу өсөн отряд тарафынан ебәрелгән вәкилдең береһе мин инем. Рабочийҙар, Баймаҡҡа башҡорт отрядының килеүенә ризалыҡ белдереп, һалдаттарыбыҙға үҙҙәре казармалар әҙерләп бирҙе..."

Х. Ғәбитовтың "Башҡорт хөкүмәтенең теле" тигән гәзиттең 1918 йылдың 20 авгусында баҫылған мәҡәләһенән: "...Иртәгеһенә йоҡонан тороу менән ашығып-бошоғоп сәй эстем дә (Иҙелбай ауылында. — Авт.) Баймаҡҡа киттем. Мин барғанда Ҡарамышевтың йорто эргәһендә халыҡ тулы, арлы-бирле ат өҫтөндә сабып йөрөгән кешеләр мәж килә ине. Ҡарамышев минән, отрядты ҡаршыларға

бараһыңмы, тип һорауына ҡаршы, мин: әгәр минең барыуымды ләзем (кәрәк) тип тапһағыҙ, мин шунда ғына ҡаршы алырмын, тип яуап бирҙем.

Һуңра ул бер төркөм атлы ғәскәр менән мөһабәтле рәүештә сығып китте. Өҫтәрендә, елберҙәп, йәшел флаг күңелдә әллә ниндәй йәшерен көстәрҙе уята ине.

Бер-ике сәғәттән һуң ете-һигеҙ санаға тейәлгән вә барыһына ла чубата ат егелгән отряд башында йөрөүсе кешеләр килеп төштөләр. Уларҙың яндарында, оҙата килеүсе ил ағалары ла булған кеүек, аттарының кикеленә өкө таҡҡан, конвой хеҙмәтен башҡарып килеүсе 10—15 атлы егеттәр ҙә бар ине. Отрядтағы һалдаттар бер аҙ һуңлап килде. Мағазов, иҫәнләшкәс тә, мине Иҙелбаев менән таныштырҙы. Урта буйлы, киң күкрәкле, шоморт ҡара сәсле, түңәрәккә маил (тартым) аҡ йөҙөндә уйнаған үткер ҡара күҙҙәргә малик (хужа) Иҙелбаевтың сын мәғәнәһе менән башҡорттарҙың елкәһенә атланып ултырған ҡара көстө алып ырғытасаҡ ғиур (гаюр — ғәйрәтле) егет икәнен аңланым...

Отряд башлыҡтарына тип әҙерләнгән өйгә кергәс, Мағазов оҙата килеүселәрҙән олораҡ ил ағаларын саҡырып алды. Өҫтәл түңәрәгендә ултырыусыларҙың ҡайһыһы отрядҡа муфҡит (уңыш) теләй, ҡайһыһы большевиктарҙан зарлана, таланған, тартып алынған мал вә нәрһәләрен һанай ине. Мағазов уларға: “Тиҙҙән сәхрә суды төҙөйбөҙ, ил талаусы хандарға тейешле хөкөм ителер”, — тип яуап бирә ине. Һуңра Баймаҡта тороусы рустарҙан күп кеше килеп, большевик исеме менән йәберләүселәр күбәйгәнен вә бәғзе сауҙагәр рустарҙың лавка вә магазиндарына ҡарауыл ҡуйҙылар, Тәшүишле (ҡурҡынысłы) хәбәр таратыуҙа ғәйепләнгән алты-ете башҡорт большевигы тәүҡиф ителде.

Баймаҡта әхүәл бер аҙ тынысланғас, отряд хозурында сәхрә суды асылып, хөкөм эштәрен тикшереү өсөн Мөхәмәтдин Әҙһәмовты тәғәйен иттеләр.

Баймаҡ тирәһе рәтләнеп, халыҡ тынысланһа ла, йырағыраҡ урындарҙа буржуйҙарҙы талау дауам итә, көн дә әллә нисә ғариза, бик күп кешеләр килә ине. Шуға күрә, әтрафҡа йөрөп килеү өсөн подпоручик Бейешев менән отрядтағы имамды командировать иттеләр. Баймаҡ тирәһендәге волостарҙан отряд файҙаһына көн дә иғәнә итеүселәр килә, килеүселәрҙең күбеһе отрядтағы һалдаттарҙың бәғзеһен ебәреп, хәмлисәтлерәк егеттәрҙе алыуҙы түшә итеп китәләр ине...”

Бер-ике көн торғас, Баймаҡ приискыһы управляющийы Ғ. Мағазовҡа 6 приискыны ла бирергә ризалығын белдерә. Ләкин приискыларҙың Франция, Англия ширкәте тарафынан асылғанлығы һәм

уларҙың акционерҙар йәмғиәте ҡулында булыуы асыҡланғас, Мағазов алтын приискыларын алыуҙан ваз кисә һәм бар көсөн башҡорттар араһында талау, үлтереүҙәр менән шөғөлләнгән бандаларға ҡаршы йүнәлтергә ҡарар итә. Шул рәүештә бер нисә көн уҙғас, — тип яҙа Х. Ғәбитов, — мин Ырымбурға китмәксе булдым. Мөхәмәтдин Әҙһәмов та минең менән бергә бармаҡсы ине. Ләкин Мағазов, Ырымбурға телеграм бирҙем, шуға яуап килгәс ҡайтырһығыҙ, сөнки һиңә, бәлки, минең менән Верхуралға барырға тура килер тип, мине туҡтатты".

"Баймаҡ рабочийҙары менән татыу булып, отряд башлығы ғөмүми эштәрҙе кәңәш менән алып барғанға күрә, рабочийҙар менән ҡатнаш йыш-йыш ҡына собраниелар яһайҙар ине. Шул собраниеларҙың береһендә рабочийҙар үҙҙәренән дә отряд төҙөүҙе талап итәләр һәм Орскиҙан ҡорал — мылтыҡ, патрондар — килтереү өсөн тип, 2 мең һум аҡса һорайҙар. Рабочийҙарҙың был теләктәре ҡабул ителеп, 2 мең һум аҡса бирелә.

Ошо аҡсаны алғас та рабочийҙар 15 ылау менән Орскиҙан ҡорал һәм патрондар килтереп, сығарған ҡарарҙары буйынса отряд төҙөйҙәр. Һуңра шул уҡ отряд Ҡыҙыл гвардияға әйләнеп китте..."

...Ошонда мәҡәләне өҙөп, был кешеләрҙең тағы ниндәй эштәр менән шөғөлләнгәнен ҡыҫҡаса ғына һанап китәйек: канцелярия урынлашҡан Кабанов йортонда Мағазов халыҡтан килгән төрлө ғаризалар менән таныша, нимәләр эшләргә кәрәклеген билдәләй. Иҙелбаев менән Ғәбитов, Мағазов янына инеп, халыҡтан йыйылған 80 мең һум аҡсаны ҡабат-ҡабат иҫәпләп, тейешле документ тултырып, 60 меңен ваҡытлыса йәшереп тороу өсөн Бөрйән волосы Юмаш ауылы старшинаһы Һибәтулла Сәйджәғәфәровҡа тапшыра. Шунан, өсәүләп мәсеткә барып, хөкүмәт исеменән халыҡ алдында вәғәз һөйләйҙәр, ҡайһы бер утарҙарға контрибуция һалыу, ундағы урыҫтар менән нисегерәк һөйләшеү тураһында кәңәшләшәләр.

### Әмир Ҡарамышев

Тағы Хәбибулла Ғәбитов иҫтәлегенә әйләнеп ҡайтайыҡ: "...Иртәгеһенә Иҙелбаевтар янына ҡунырға барам, иптәштәрем килергә ҡушты, эш бик күп, янybыҙҙа ят, тип әйтәләр, тип, нәрһәләремде санаға тейәнем дә Баймаҡҡа киттем. Барһам, Иҙелбаев менән Мағазов вә бер нисә башҡа кеше ултыра ине. Әмир Ҡарамышевты ауырый, Сөләймән Әҙһәмов өйөндә ята, тинеләр. Иҙелбаев менән икәүебеҙ уның хәлен белергә киттек. Әҙһәмов торған йорттоң парадныйын барып ҡаҡтыҡ. Өй хужаһы ишек асты.

Беҙ кергәндә Ҡарамышев стенанан йөҙөн беҙгә табан әйләндереп ҡараны ла Иҙелбаевҡа:

— Кисәге мин яҙған телеграмды ебәрҙегеҙме? — тип соал (һорау) бирҙе. Уның телеграмы миңә мәғлүм булмағанға күрә: “Ниндәй телеграм, ҡайҙа ебәрәһегеҙ?” — тип һораным. Әмир:

— Кисә һин киткәс, Ырымбурҙан Мосолман инҡилаб комитеты (ревком) менән Цвиллинг исеменә Иҙелбаев һәм минең тарафтан ультиматум рәүешендә бер телеграм яҙылғайны. Мәсүдәһен уҡып күрһәтәйем әле, тип, миңә сирек табаҡ аҡ ҡағыҙға яҙылған телеграмды уҡый башланы. **Аңлатма:** Баҡһаң, Ырымбурҙағы татарҙарҙың инҡилаб комитеты тарафынан Башҡортостан предпарламенты ағзалары туҡиф (ҡулға алынып) ителеп, хөкүмәт башына Ғабдулла Дәүләт тигән бер әҙәм ултырған икән. Был инде беҙҙең мөҡәддәс идеалыбыҙға оролған “зәрбә”нең (бер һуғыу) иң һуңғыһы, иң әсеһе булды, тип, икәүһе лә баштарын түбән һалындырып, тәрән хәсрәт һулышы алды. Миңә лә был хәбәр йәшен уты кеүек тәьҫир итте. Ғ. Иҙелбаевтан телеграмды һорап алдым. Унда түбәндәге һүҙҙәр яҙылғайны: “Оренбургским Мусульманским революционным комитетом арестованы контрреволюционеры, члены предпарламента Башкурдистана, нижеследующие лица: З. Валиди, Мутин, Мрясов, Гаитбаев, Ягафаров; в Москву телеграфировано арестовать Манатова. Председатель рев. совета Башкурдистана Г. Давлет”. Ә Ҡарамышев яҙған телеграмдың мәғәнәһе түбәндәгесә ине: “Ырымбур. Мосолман Хәрби инҡилаб комитетына. 24 сәғәт эсендә хаҡһыҙ туҡиф ителгән кешеләребеҙҙе ҡотҡармаһағыҙ, Башҡортостан хозуры эсендәге сит халыҡтарға һуғыш иғлан итәсәкбеҙ. Башҡортостан хөкүмәтенең кавалерийский отряд командиры Әмир Ҡарамышев.”

Үҙе ауырып ятҡан кешене борсоу булмаһын тип, һаҡлыҡ менән генә:

— Иптәш Әмир! Мөҡәддәс һуғыш иғлан итеүҙе ниндәй мәғәнәлә алғанһығыҙҙыр, быныһы миңә ҡараңғы. Ләкин был телеграмға мин бер аҙ тәғжәб иттем. Әүлә беҙҙә көс юҡ. Икенсе: беҙ әле һуғыш иғлан итеү дәрәжәһендә үк татарҙар менән боҙолошҡаныбыҙ юҡ, — тинем.

— Мин был телеграмды хәҡиҡәткә һуғыш иғлан итеү нисбәте менән биргәнем юҡ. Татарҙарҙы тәшвишкә (ҡурҡыуға) төшөрөп, мәхбүстәребеҙҙе азат иттереү уйы менән генә бирҙем. Быға ҡәҙәр башҡорттарға ҡаршы Хәрби комитет башындағы кешеләрҙе татарсылар ҡотортоп килде. Был туҡифта ла уларҙың бармағы уйнағаны билдәле. Үҙ арабыҙҙа ҡан түгеү кеүек күңелһеҙ ваҡиға булмаһын, эште ҙурға ебәрмәйек, тип, бәлки, мәхбүстәребеҙҙе (әсирҙәрҙе) азат итерҙәр, тине.

Ғабдулла Иҙелбаев:

— Мин дә яҙғайным. Мағазов, икебеҙҙең телеграмды ҡарап уҙғас, һинекен (хәтерҙә ҡалмаған — әллә Ғабдулланыҡымы?) ебәрергә булды, — тине.

Шул уҡ көндө Мағазов, Тубинск приискыһына барып, бәғзе бер мәсьәләләрҙе хәл итеп ҡайта ла ундағы рустар менән аңлашыу өсөн Иҙелбаев менән Ғосман Йәһүҙинды сығарып ебәрә. Әмир Ҡарамышев ауырып ятҡан еренән тороп, Эшселәр советына йүнәлә. Хәбибулла Ғәбитов иһә, халыҡ ифрат зарланған Баймаҡ төбә шураһы рәйесе Аҡтаевты саҡыртып алып, ҡаты ғына һөйләшеп ала, яҡын арала йыйылыш үткәрергә ҡуша. Ҡарамышев, эшселәр янынан ҡайтып, уларҙың Ырымбурҙағы тотҡондарҙы сығарырға ярҙамлашырбыҙ, тигән вәғәҙәләрен килтерә. Ғ. Иҙелбаев та рухланып ҡайтып инә.

— Рустар бик алҡышлап ҡаршы алды, — ти ул. — Ғәскәри хеҙмәт бәнде (бәйле) әйтеп алған башҡорт эшселәренә, башҡа эшселәр менән бер рәттән тигеҙ хаҡ бирергә булдылар. Рустар менән башҡорттар араһында сыҡҡан низағты бөтөрҙөм".

Артабан киске сәғәт 10-дарҙа канцелярияға Эшселәр советы ағзалары килеп инә. Улар, Мағазов, Ҡарамышев, Иҙелбаев менән бергәләп, айырым бүлмәгә инеп китәләр. Ике сәғәт самаһы һөйләшеп ултыралар, әммә Ғәбитов әңгәмәнең ни хаҡында барғанын әйтә алмай. Иҙелбаевтың ғына ауыҙ эсенән бер татар кешеһе хаҡында һөйләнеүен генә ишетә. "Мин шул кешегә — Мөнтәй Ғәлиҙең улы Закирға — шөбһә менән ҡарайым. Араны шул бутап йөрөмәһә ярар ине", — тип борсола ул.

"Әмир Ҡарамышев ғәҙәтенсә моңландырып йырларға башланы", — тип яҙа Ғәбитов.

"— Әйҙә, Ғәбитов, һин дә ҡушыл әле, "Мәҙинәкәй"ҙе йырлайыҡ, — тине. Ҡарамышев менән икәүләп дуэт йырлай башланыҡ. Мағазов менән Иҙелбаев ара-һара беҙҙе күтәреп ебәрәләр".

"Ошо осорҙа Ҡыпсаҡ кантонлығына йыйылып төҙөлмөш "Башҡортостанды ҡотҡарыу комитеты" тарафынан ебәрелгән Ғәзиз әфәнде Әлмөхәмәтов Баймаҡҡа килеп еткән булһа ла, рабочийҙар илә аралары яҡшы булыуына алданып, элекке хәрәкәттәрендә дауам итә бирәләр — Баймаҡтан таралып, ваҡытлыса эште ташлап тороп, баш һаҡлау сараһына керешелмәй — Ырымбурҙан Зәки әфәнделәр ебәргән Татлыбаев ни эшләптер Баймаҡҡа барып етә алмай ҡала. Орский тимер юлындағы Ҡыуандыҡ станцияһынан дүрт-биш саҡырым йыраҡлыҡта Иҙелбай ауылындағы Башҡорт хәрби шөбһәһенән (бүлегенән) 300 винтовка, бер аҙ патрон килтерү өсөн 11 кеше ебәрәләр. Ләкин уларҙы, Сүкәрә тигән утарҙан

үтеп барған саҡта, Ырымбурҙан Мосолман (татарҙар) Хәрби инҡилаб комитеты тарафынан йүнәлтелгән отряд тотоп бикләп ҡуя. Был хәбәрҙе ишетеү менән үк, Әмир Ҡарамышев 25 егетен атҡа атландыра. Алда хәүефле хәлдәрҙең буласағын белһә лә, ул, бахыр хәлендә ҡалыу ярамай, оло идеяға табынған кешеләрҙә ҡурҡыу булырға тейеш түгел, ҡуйған маҡсатыбыҙға тоғро булырға, "әмәл"гә керешкәндә әжәлгә төкөрөп ҡарау фарыздыр, ти.

"Башҡорт бәхете менән шаярыусылар күп булды. Беҙ дошмандарыбыҙ менән иҫәпләшә алырбыҙ, ышанығыҙ: бындай хаин, ҡара көстәр беҙҙең үткен пуляларыбыҙ менән һуғарылырға тейеш!" — Был да башҡорт сардары Әмир Ҡарамышевтың һүҙҙәре.

"Шул китеүенән мин уны башҡаса күрә алманым. Шул айырылыу мәңгегә айырылышыу булған икән", — тип үкенес белдерә үҙенең иҫтәлектәрендә Хәбибулла Ғәбитов.

"Мағазов миңә, — ти ул артабан, — Юлыҡ йәрминкәһенә барып, халыҡҡа бер аҙ исах биреп ҡайтһағыҙ яҡшы булыр ине, тип үтенгәнлектән, шул көндө үк китергә булып ат һораттым. Сөнки күңелһеҙ тормош эсендә ваҡыт уҙғарыу шул ҡәҙәр ауыр ине, миңә ниндәй ҙә булһа бер йомош табып, шул ауырлыҡтан ҡотолоу мәғлүб ине.

Баймаҡтан Юлыҡ ауылы 40 саҡырым йыраҡлыҡта, Юмашта ат алмаштырғанда, өс-дүрт сәғәттә еңел етеп була. Шуға күрә тиҙ генә ат алдырҙым да, Ғабдулла Иҙелбаев, Ғимран Мағазовтар менән хушлашып, ултырып киттем.

1-се Бөрйән волосының правлениеһында ат алмаштырып, Юлыҡҡа киттем. Кескенә — етем ваҡытымдағы михнәт дәүерҙәрен уҙҙырған был ауылды күреү, әлбиттә, миңә тәрән мөхәббәт, ҡайнар-тәмле тойғолар бағышлай ине...

Юлыҡ ауылында һатыу иткән Юмаш ауылының Ғабдулла Солтанғәлиевҡа барып төштөм. Отряд имамы менән подпоручик Әхмәҙулла Бейешев Сәйджәғәфәров йортонда, тинеләр. Солтанғәлиев мине өйгә алып керҙе. Унда имам менән подпоручик Бейешев ҡунаҡта ултыралар ине. Уларҙың килеүенә йәрминкәләгеләр шатлыҡ белдергәндәрен һөйләнеләр, сөнки әтрафта (тарафта) фронттан ҡайтыусы большевиктар йәрминкәгә һөжүм итергә булғандар икән. Отряд тарафынан кеше килгәнен ишеткәс, батырлыҡ итә алмай, һөжүмдән ваз кискәндәр.

12 февраль. Юлыҡ йәрминкәһенең ахырҙары ине. Ул көн Ғабдулла әфәнделә ҡунырға булып, халыҡ менән һөйләшеүҙе 13 февралгә ҡалдырҙым. Сельский халыҡты сәғәт көндөҙгө 12-ләрҙә йыйнарға вәғәҙә бирҙе. Иртәһенә подпоручик Бейешев вә отряд имамы менән йәрминкәгә сыҡтым. Баҙарҙың һыртҡы яғына бер өҫтәл ҡуйғайнылар. Халыҡ шул урынға йыйыласаҡ икән. Беҙ барғанда

халыҡ ул хәтле күп юҡ ине. Һуңра күбәйҙеләр. Юлыҡ имамдарынан Шакиржан ахун илә Ғәбделбарый Сәләховтар ҙа бар, халыҡ та йыйылғандан-йыйыла бара. Әтрафтан килеүсе рустар ҙа байтаҡ бар ине.

Мин, Ырымбурҙағы мәхбүстәребеҙҙең хаҡһыҙ туҡиф ителеүҙәрен һәр төрлө юлдар менән халыҡҡа аңлатып, шул турала берәр ҡарарға килеүҙәрен әйтеп, үҙ тарафымдан һәр волость йыйылышын Ырымбур виләйәт комиссары исеменә, предпарламент ағзаларын арестовать итеүенә ҡаршы протест телеграмма ебәрергә йәки делегат арҡылы паразитлыҡ белдерергә ҡуша инем.

Йыйылған халыҡ, шул йөмләнән Юлыҡ татарҙары ла, Башҡортостан эштәренең көтөлмәгәндә бер рәүештә күңелһеҙ хәлгә төшөүенә тәьсиф (ҡайғыға төшөү) биан иттеләр. Ғөмүмә халыҡта башҡорттарҙың тотҡан юлдарынан мәмнүн (риза) булғанлыҡ күренеп тора ине.

— Телеграмды ниндәй мәғкүмдә бирәйек? Кемдән яҙҙырайыҡ, һеҙҙә үрнәге юҡмы, ниндәй адрес менән ебәрәйек? — тип, йыйылған халыҡ төрлө сөүәлдәр бирә башланылар. Подпоручик Әхмәҙулла Бейешевтан телеграм биреүгә, тик алда үҙ-ара бер аҙ аңлашып алырға булдылар. 13 февралдә Үҫәргән волосы яғынан килеүсе бер әҙәм, Ырымбурҙан бер полк татар ғәскәре сыҡҡан, башҡорт отряды менән һуғышырға киләләр, тип хәбәр таратыуы сәбәпле, уны алдырып һорашырға тура килде.

— Ырымбурҙан ниндәй ҙә булһа бер ғәскәр сыҡты. Мосолман Хәрби комитеты сығарған, тиҙәр. Үҫәргән кантоны Ҡыуатов, ҡурҡып, өйөнән сыға алмай ята, — тине ул кеше.

Мин шул һүҙҙе ишеткәс тә, нисек булһа шулай итеп, Баймаҡҡа ҡайтырға ашыҡтым. Тиҙерәк иптәштәргә шул хаҡта еткерәһем килде. Күңелгә әллә ниндәй шөбһәләр тула, күкрәк ҡыҫыла ине.

Бейешев менән отряд имамы:

— Әтрафтан бик күп ғаризалар бар. Шуларҙы бергә барып тикшереп киләйек. Баймаҡҡа ҡайтып, барыбер хәҙер эшләрлек ашығыс эш юҡ. Һин бөгөн бында ҡун, иртәгә бергә Түңгәүер волосы аша сығып китербеҙ, — тинеләр.

Фәҡәт миңә теге кешенән ишеткән күңелһеҙ һүҙ ныҡ тәьҫир иткәнгә күрә, бер ҡайҙа ла барыу ихтималым юҡ ине. Бейешевҡа имам әфәнде менән бергә барырға ҡуштым да үҙем ашығып Баймаҡҡа киттем".

"Иҫке хисап менән февралдең 16-һында Мағазов, йыйылыш яһап, зинданға ябылған кешеләр хаҡында хаҡиҡи хәлде бәйән итеп доклад бирер өсөн Петроградҡа юрист Ғабдулла Иҙелбаевты делегат итеп ебәреүҙе тәҡдим итә. Йыйылыш, тәҡдимде бер ауыҙҙан

ҡабул итеп, Халыҡ комиссарҙары башлығы Ленин, Сталиндарға һәм Мосолман комиссариатына доклад биреүҙе йөкмәтәләр. Ғабдулла әфәндегә башҡорт отряды исеменән мандат биргән шикелле, Баймаҡ Эшселәр советы исеменән дә мандат яҙҙырып биреүҙе муафиҡ (кәрәкле) күрәләр; Эшселәр советы ағзалары мандат яҙҙырып биреүҙе өҫтәренә ала. Ләкин, башҡорттар исеменән Мағазов яҙған мандатты Эшселәр советы ағзалары һорап алып, үҙҙәре тарафынан яҙыласаҡ мандатты шуның мәғмүһенсә (мәғәнәһендә) яҙырға булалар. Ғабдулла әфәнде юлға кәрәк нәмәләрен әҙерләп бөткәс, 17 февралдең иртәнге сәғәт 9-ҙа китергә булып, ат әҙерләтә.

Шул уҡ көндө (16 февраль) киске сәғәт 10-да Иҙелбаев әфәнде телефон аша совет ағзаларынан Мағазов яҙған мандатты, шулай уҡ Эшселәр советы тарафынан яҙылғанын да, килтереп биреүҙәрен һорай. Ләкин совет ағзалары ул көндө өлгөртә алмағанлыҡтарын, һәр хәлдә Иҙелбаевтың китеүенә әҙерләп ҡуясаҡтарын белдерә. Ул көн шуның менән тамам булып, Мағазов вә иптәштәре йоҡларға ята".

## Вәхшилек

...Февралдең 17-һенә ҡараған төндә, сәғәт 4-тә, бер ни тоймай йоҡлап ятҡан Мағазов, Иҙелбаев һәм уларҙың иптәштәренең өйҙәрен ҡоралл кешеләр уратып ала. Был ҡурҡыныс хәлде һиҙеп, һикерешеп торалар, кейенергә тотоналар. Эштең насар икәнлеге беленә. Ҡарамышевтың отряды янда юҡ, уға хәбәр итеп булмай. Уратып алған ғәскәргә үҙҙәренең генә ҡаршы тора алмаясағы көн кеүек асыҡ. Шуға күрә береһе лә ҡорал күтәреп маташмай, тик нисек тә йәшеренеп сығып, баш ҡотҡарыу яғын хәстәрләй. Әммә ҡасып ҡотолорға һис бер юл юҡ, шуға күрә, Мағазов менән Иҙелбаевтан башҡалар ҡаршылыҡһыҙ шунда уҡ әсирлеккә бирелә. Икенсе квартирҙа торған ете поляк офицеры башта ҡаршылашып ҡарай, ләкин берәүҙәре яраланғас, ҡорал ташлай. Йоҡлап ятҡан йәйәүле башҡорт отряды һалдаттары ла, һис тә ҡаршылашмайынса, йоҡоларынан тороп, әсир бирелә. Таң ата. Ә Ғимран Мағазов менән Ғабдулла Иҙелбаев юҡ та юҡ. Көндөҙгө сәғәт ун берҙәрҙә генә бер мәрйә уларҙың һарай башында, бесән араһында ятҡандарын күреп ҡала, барып әйтә. Шул урында Иҙелбаев менән Мағазовты ҡулға алалар.

Барлыҡ һалдат, уларҙың башлыҡтары хәбес ителеп бөткәс, Эшселәр советы был ябылыуҙарҙың сәбәбе уларҙа булмайынса, ә Ырымбурҙағы Мосолман Хәрби инҡилаб комитетының мәслихәте (кәңәше) һәм һорауы буйынса эшләнгәне, ошо хаҡта виләйәт ко-

миссары Цвиллингтың ебәргән телеграмын килтереп уҡыйҙар. Тимәк, өйҙәрен ҡамап алып ябып йөрөүселәр Баймаҡтың үҙендә төҙөлгән Ҡыҙыл гвардия, Эшселәр советы икәне мәғлүм була. Һуңыраҡ һалдаттарҙы айырым, офицерҙарҙы айырым йорттарға бикләп ҡуялар.

Сүкәрә утарында тотолоп ябылған кешеләрҙе ҡотҡарырға тип киткән Ҡарамышевҡа был хәбәр ишетелеү менән үк кире әйләнеп ҡайта һәм, Баймаҡ тирәһендәге башҡорттар менән кәңәшләшкәндән һуң, кешеләребеҙҙең ябылыуы тағын да шул Ырымбурҙа йөрөгән бер груһ халыҡтың Цвиллингҡа тәьҫире аша булғанын биан итеп, мәхбүстәрҙе ҡотҡарырға өндәй. Һәм бик тиҙ арала Баймаҡ тирә-яғындағы Бөрйән, Үҫәргән башҡорттары, йыйналып, ҡулдарына һуйыл, ҡороҡтар алып, Ҡарамышев менән бергә Баймаҡты уратып алалар. Биш-алты мең самаһы атлы халыҡ тарафынан Баймаҡтың ҡулсаға алыныуын күргәс, эшселәр хәбестәге Иҙелбаев һәм Мағазовтарға кереп эштең яйын һөйләй, тотҡондағы кешеләрҙе ҡотҡарырға килгән халыҡҡа ҡаршы торорға мөмкин булмаһа ла, шул уҡ әсирлектәге кешеләрҙе бирмәҫ өсөн үҙҙәре лә үләсәктәрен һәм үҙҙәренә нәүбәт еткәнгә ҡәҙәр бик аҫтындағы кешеләрҙе барыбер иҫән ҡалдырмай үлтереп бөтәсәктәрен белдерәләр. Тотҡондар, был хәбәрҙе алғас, "кешенән тартып алдырырлыҡ ҡәҙәр ҡурҡырлыҡ беҙҙең эшләгән енәйәтебеҙ юҡ, беҙ быға риза түгел, ҡаршылаширға юл ҡуймайбыҙ", тип, Ҡарамышевҡа хат ебәрәләр.

Шулай итеп, Ырымбур төрмәһендәге Зәки Вәлиди әфәнделәргә ҡарата насарлыҡ эшләтеүҙән һаҡланып һәм Ҡырым, башҡалар башына килгән бәләләрҙе Башҡортостан башына ла килтермәү өсөн һәм ғөмүмән Башҡортостанды һәләкәттән ҡотҡарыу хаҡына үҙҙәрен ҡорбан итергә булалар. Хаттарында барлыҡ ҡоралдарын эшселәргә бирергә, йыйылған халыҡты таратып ебәрергә, әгәр мөмкин булһа, солох ысулын ҡулланып ҡына сығарып алыу юлын ихтыяр итергә ҡушалар.

Тотҡондарҙың хаты Ҡарамышевҡа барып етеү менән үк барыһы ла бойомға ашырыла. Эшселәр менән аңлашып, ябылмыш кешеләрҙе ҡотҡарыу эшенә тотоналар. Эшселәр советы менән халыҡ тарафынан һайланған 30 вәкил бергә йыйыла, совет тотҡондарҙы сығарырға ризалығын белдерә. Ләкин тап ошо ваҡытта 6 башҡорт егете Үвәрғыш приискыһында урыҫ эшселәре араһында сыҡҡан низағты баҫырға барған 12 ҡыҙыл һалдатты, мылтыҡтарын тартып алып, ултыртып ҡуя. Һәм Баймаҡта бикләнгән кешеләрҙе сығармай тороп, беҙ ҙә быларҙы бирмәйбеҙ, тип белдерә. Шуға күрә әсирҙәрҙе бик аҫтынан сығарыу кисектерелә. Эшселәр, ҡулға алынған

һалдаттар хаҡында берәй хәбәр алмай тороп, Баймаҡ мәхбүстәрен сығармаҫҡа ҡарар итә.

Башҡорттар тарафынан ябылған 12 ҡыҙыл урыҫтың хәлен белгәс, һөйләшеү яңынан башлана. Ләкин шул арала Ырымбурҙан сыҡҡан Ҡыҙыл гвардияның Баймаҡҡа яҡынлашҡан хәбәре алына. Шунда уҡ йыйылыш таралып китә. Тотҡондарҙың яҙмышы киләсәккә ҡалдырыла...

Февралдең 21-нән 22-һенә (иҫкесә) ҡараған төндә Ҡыҙыл гвардиялылар, Баймаҡҡа килеп етеп, барлыҡ ҡоралдарҙы үҙ ҡулдарына ала. Һуңынан, бөтөн һиәттәре (делегацияһы) менән тотҡондар янына барып кереп, аҡсаларын, һәр төрлө ҡорал, кейем кеүек әйберҙәрен һорай башлайҙар...

Беҙ юғарыла, Ғимран Мағазовты ҡулға алғас, ҡыҙылдар отряды командиры Барановтың уға биргән бер нисә һорауына туҡталып киткәйнек инде. Артабан уны нисек итеп поляк офицерҙарының башҡорт отрядына килеп инеүе ҡыҙыҡһындыра (Мәҡәләнең был өлөшөн беҙ шул ваҡиғаларҙы үҙ күҙе менән күргән Хәбибулла Ғәбитов иҫтәлегенә таянып яҙабыҙ. — **Авт.**).

"— Был поляк офицерҙарын ҡайҙан алдың, уларға жалованье кем тарафынан бирелә, күпме бирелә? — тип һорай Баранов Мағазовтан.

— Улар Ырымбурҙан беҙҙең менән бергә сыҡтылар, — ти Мағазов. — Жалованье беҙ бирәбеҙ, айына 500-әр һум алалар.

— Поляктар барыһы ла ғаҡыс әл-инҡилабсылар бит. Һеҙ баштан уҡ контрреволюционерҙарҙы үҙ янығыҙға йыйнарға тырышҡанһығыҙ. Дутовтың яҡын иптәштәренән барыһы ла һеҙгә ҡушылған...

— Беҙ уларҙы ғаҡыс әл-инҡилабсы тип алманыҡ. Беҙгә иптәш, ғәскәр өйрәтеүсе кәрәк булды. Шуға күрә хеҙмәт итергә теләүсе офицерҙарҙың килгән берәһен ҡайтарманыҡ. Берәһе беҙгә килеп ҡушылһа ла, 4—5 көн торғандан һуң китте.

— Берәһе ҡайҙа китте? Уны ниңә атманығыҙ? Һеҙ уға 20 мең һум аҡса биреп, ҡоралды һалдаттарығыҙ менән оҙатҡанһығыҙ бит?

— Мин уға 4 мең биреп торҙом. Сөнки беҙҙең менән эшләр тип уйлағайным. Ләкин ул ҡайҙалыр китеп юғалды. Беҙ белмәйбеҙ: ғәскәр-ҡорал биргәнем юҡ.

— Һуң ниңә аттырманың?

— Һис бер гонаһһыҙ кешене нисек аттырайым? Уның беҙгә зарары теймәне.

— Улай булғас, һеҙҙең ғаҡыс әл-инҡилабсы икәнегеҙҙе күрһәтер өсөн, бынан да артыҡ бер дәлилдең хәжәте юҡ. Сөнки берәһе

Дутов менән Архангельскийҙың ҡулға-ҡул тотошоп эшләгән иптәше. Һеҙ уны юрый ҡасырып ебәргәнһегеҙ!

— Һеҙ был турала яңылышаһығыҙ, мин Бриц хаҡында бер нәмә лә белмәйем.

— Офицер погондарығыҙ ҡайҙа, хәҙер миңә тапшырығыҙ!..

Ғ. Мағазов кескенә күн сумкаһынан ҡул аҫтындағы барлыҡ офицерҙарҙың погондарын сығарып бирә. Юлыҡ ауылындағы мөғәллимә тарафынан ебәк менән ҡайып, йәшел тауарға уҡ-йәйә һүрәте төшөрөлгән, отрядтағы һалдат, офицерҙарға махсус эшләнгән погондарҙы ҡыҙылдар башлығына бирә. Погондарҙың һәммәһен тикшереп сыҡҡас, ҡулындағы исемлек буйынса офицерҙарҙы һораша. Һорау бөткәс, револьвер-штыктар беҙгә таба хәрәкәт итә башланы, ти Х. Ғәбитов. Баш өҫтөбөҙҙән уҙған пулялар, һыҙғырып, стенаға кереп юғала ине...

Икенсе яҡтан һуҙылған һикелә ситтән ятыусы Мөхәмәтдин Әҙһәмов ине. Нәүһәт уға килеп етһә лә, ғәскәри түгеллеген белгәс, уның янындағы Ғабдулла Иҙелбаевтан һорашырға тотондолар.

Ғ. Иҙелбаев, Мағазовҡа ҡаршы ҡулланған ҡаты мөғәләмәне күргәнлектән, кинәт ҡурҡыуға төшөп, ҡалтырай башланы. Мин уны йыуатырға, күңеленә батырлыҡ керетергә тырыштым.

Иҙелбаев фамилияһын ишетеү менән ҡыҙылдар:

— Бына-быча, беҙгә иң кәрәк кеше ошо. Беҙ уның кәүҙәһен миллионға турап, йәһәннәмгә ырғытырға тейеш!.. — тип һөйләнә-һөйләнә, алдыбыҙға килеп теҙелделәр. Револьвер, штыктар Ғабдулланың киң күкрәгенә таба йүнәлгәндәр ине.

Ҡыҙылдар башлығы аҡырған тауыш менән түбәндәгесә һорай башланы:

— Һин кемһең?!

— Иптәштәр...

— Беҙ иптәш түгел һиңә, бысыратма беҙҙең исемебеҙҙе!

— Господа...

— Господалар дәүере уҙған хәҙер, беҙ господа түгел, пролетариат!

— Иптәштәр...

— Икенсе мәртәбә әйтәм, бысыратма беҙҙең исемдәребеҙҙе!

Ике мәртәбә револьверҙан атып ебәрҙеләр.

— Һуң һеҙҙе кем тип өндәшәйем?

— Фамилиябыҙ менән әйт, беҙ... һиңә иптәш түгел!

— Ғәфү итегеҙ, мәрхәмәт итеп әйтһәгеҙ ине: һеҙҙең фамилияғыҙ нисек?

— Федоров (иптәштәре уны Баранов тип өндәшәләр, ниңәлер ул фамилияһын "Федоров" тине.)

— Федоров! Кем икәнемде аңлатыу өсөн зинһар миңә оҙонораҡ һөйләргә ирек бирһәгеҙ ине. Мин үҙемде аҡларға йәки ғәйебемде йәшерергә тырышасаҡ түгелмен. Фәҡәт ваҡиғаны асыҡ рәүештә һеҙгә төшөндөрөргә теләйем.

— Һөйлә, ләкин бик оҙаҡҡа һуҙма. Беҙ бында ҡош йыры тыңларға килгәнебеҙ юҡ!

Иҙелбаев үҙенең нисек итеп Симферополдән Ырымбурға, унан Баймаҡҡа килеүе, ғәйепләрлек бер нәмә лә ҡылмауы, барыһын да Баймаҡ эшселәренең ризалығы менән эшләүе хаҡында һөйләй.

Артабан Баранов Ғәбитовтан һорау ала, ләкин уның хәрби кеше булмауын күргәс, тиҙ туҡтай. Унан, поляк офицерҙары бикләнгән урынға барып, уларҙы туҡмарға тотоналар. Поляктарҙың бәғзеләре документтарын сығарып бирһә лә, уларҙы ҡарап та тормайынса, йыртып ырғыталар.

— Һеҙҙе кем саҡырып килтерҙе бында? Башҡорт егеттәре, бәлки, халҡын бәхетле итер өсөн йөрөй торғандыр. Һеҙ кем өсөн йөрөйһөгөҙ? Һеҙҙең башҡортка ниндәй мөнәсәбәтегеҙ бар? (Кеҫәһенән алтын сығарып) Бына һеҙҙе нимә саҡырып килтергән. Беҙҙең рустарҙа бер мәҡәл бар: "Урал бөтөн Россияны туйҙырған һөтлө һыйыр". Һеҙ, польшалылар, был мәҡәлде ишетмәһәгеҙ ҙә, беҙ, рустар, яҡшы беләбеҙ. Әгәр һеҙ ысынлап та ҡаһарман булһағыҙ, ниңә үҙ Польшағыҙға хужа булмай, бында, башҡорт еренә килдегеҙ?

Поляк офицерҙарын тағы ла приклад менән туҡмап, һанап сыҡҡас:

— Беҙ һеҙҙе үлтерергә килдек, 12 кеше икәнһегеҙ, ун икегеҙгә 12 пуля, 5 сәғәтлек ғүмерегеҙ ҡалды, — тинеләр ҙә сығып киттеләр.

Беҙ тауыш-тынһыҙ ғына урындарыбыҙға яттыҡ. Ғабдулла һаман ҡалтырана ине. Ул: "Бөттө баш!" — тине лә башҡа бер һүҙ өндәшмәне, төндө йоҡлай алмай, хоҙайҙың таңын күҙебеҙҙе асҡан көйө ҡаршыланыҡ.

22 февраль иртәнге 5-тәрҙә Ғабдулла Иҙелбаев:

— Әйҙәгеҙ, тороп, һис булмаһа сәй эсеп алайыҡ, — тине.

Барыбыҙ ҙа, тороп кейенә башланыҡ. Нәүбәт менән бер генә сүмес ярҙамында йыуыныу оҙаҡҡа тартылды буғай. Сәй эсергә өлгөрмәнек. Ҡыҙылдар ябырылып килеп тә керҙе. Араларынан береһе иптәштәренә беҙҙең кейемдәребеҙҙе һалдырып алырға ҡушты. Артында торған рабочийҙарға ҡарап:

— Бынан алынған ғаниәмәттәрҙе һеҙгә өләшеп бирәбеҙ. Быларҙың малдары һеҙгә, йәндәре беҙгә булырға тейеш, — тине.

Сәғәт 10-дарҙа хәрби совет асып, хөкөмгә алырға килделәр. Башта Ғимран Мағазовты, һуңра Ғабдулла Иҙелбаевты, унан һуң

поляк офицерҙарынан Козловскийҙы алып киттеләр. Иптәштәребеҙҙе берәмләп алып китә торалар, ләкин яңынан килтермәйҙәр ине. Иң аҙаҡтан ун бер кешенән икәү генә ҡалдыҡ. Ниһайәт, Мөхәмәтдин Әҙһәмовты алып киттеләр. Мин яңғыҙым ултырып ҡалдым. 10—15 минуттан миңә лә ике һалдат килде. Ишектән сыҡҡанда береһе приклад менән һуғып йыҡты. Бүрегемде алып кейеп, бер-ике аҙым атларға өлгөрмәнем, тағын һуғып йыҡтылар. Суд йортона барып еткәнсе, шул картина тиҡрар итте. Мин барып кергәндә, Мөхәмәтдин айырым бер бүлмәлә ултыра ине. Янында бер төркөм рабочийҙар күренә. Улар беҙҙе мәсхәрә итеп көлә ине.

Хөкөм тамам булғас, сәғәт 11-ҙә Ҡыҙыл гвардиялылар менән эшселәрҙең ҡатнаш йыйылыштары булды. Төштән һуң сәғәт 3-тә эшселәр һәм ҡыҙыл гвардиялыларҙың айырым-айырым йыйылыштары булып, мәхбүстәрҙән ете кешене атырға, биш кешене ҡалдырырға ҡарар бирәләр. Мәхбүстәрҙән Ғабдулла әфәнде Иҙелбаев менән Ғимран әфәнде Мағазовты, биш полякты атырға хөкүм итеп, ике поляк, өс башҡортто азат итәләр. Атҡан ваҡытта ҡотҡарыла торған кешеләрҙе лә ҡарап торорға мәжбүр итәләр.

...Башта офицерҙар менән бергә ябылып, һуңра азат ителгән 50—60 ҡәҙәр башҡорт һалдаттары ауылдарына таралып ҡайтҡанда, 10 һалдатҡа урыҫ ауылдары аша ҡайтырға тура килә. Федоровский атлы бер утарҙан үтеп барғанда, әлеге 10 башҡорт һалдатын рустар тотоп ябып ҡуялар. Бер-ике көндән 16 ҡыҙыл гвардеец, бер башҡорт ауылын таларға барышлай, шул уҡ утарҙан уҙа. Утар рустары мәхбүстәрҙе ҡыҙылдарға күрһәткәс, ҡыҙыл гвардиялылар башҡорт һалдаттарына өйҙәренә ҡайтырға ҡуша. 10 һалдат юлға төшә. Утарҙың урамынан сыҡҡанда уларға йүгерергә бойоралар. Һалдаттар йүгерә башлай. Ҡыҙыл гвардиялылар арттарынан атырға тотона...

Шулай итеп, Баймаҡ фажиғәһе 5 поляк, 12 башҡорт егете — барлығы 17 кешенең ҡаны менән тамамлана.

Мағазов, Иҙелбаев туғандар! Аҡ идеяғыҙ юлында ҡорбан булған олуғ йәндәрегеҙ тыныс булһын! Һеҙҙең ҡәберҙәрегеҙ, инҡираҫы менән күптән хөкөм ителеп ҡуйылған ярлы, мәзлүм 2 миллион башҡорт халҡының донъяла мөстәҡил йәшәйәсәгенә рәһин булһын!

Ваҡиғаның эсендә булыусы: Ғәбитов.
*1918, 16 (29) июль*".

# IV. Өҙөлгән моң

*Ҡаһарманлыҡ аңҡытҡан,*
*Ғәйрәт менән дан тотҡан,*
*Үрҙән ҡырға һикереп,*
*Оса сапҡан дөлдөлдәй.*
*Һин бер асыл ир инең,*
*Ил бәхетенә ант иткән...*

Беҙ 1918 йылдың көҙөндә Шәйехзада Бабич ижад иткән шиғырҙан бәләкәй генә өҙөктө иҫкә төшөрҙөк. Шағир уны кемгә бағышлаған, кемде күҙ уңында тотҡан? Һүҙ башҡорт халҡының һөйөклө улы, милли-азатлыҡ хәрәкәте етәкселәренең береһе Әмир Ҡарамышев хаҡында бара.

Әмир Ҡарамыштың биографияһы әлегә аҡ ҡағыҙға төшөрөлмәгән. Асылда уның тормошона ҡағылышлы тәүге мәғлүмәттәр менән беҙ Әхмәтзәки Вәлидиҙең "Хәтирәләре" донъя күргәс кенә таныша алдыҡ. Ошо энциклопедик әҫәрҙән бер өҙөк килтерәйек. "Әмир минең йәшлек дуҫым ине, — ти автор. — Ул беҙҙән ете саҡырым алыҫлыҡтағы Маҡар ауылынан... Ҡарамыштар булмыштары менән идеалистар һәм үтә ҡыйыу кешеләр булды. Мөхтәр, Ғәни тигән офицер туғандары бар ине. Тағы бер ағаһы, Гәрәй Ҡарамышев, бөкөрө, беҙҙең менән хөкүмәт эшендә эшләне" (Зәки Вәлиди Туған, "Хәтирәләр", М., 1997, 153-сө бит).

1996 йылда ошо ҙур нәҫелдән булған уҡытыусы Зөфәр Ҡарамышев та үҙҙәренең ырыу шәжәрәһен баҫтырып сығарҙы ("Шоңҡар", № 5). Унан күренеүенсә, был заттың төптәге тамыры Юрматы ырыуының XVI быуат уртаһында йәшәгән Ҡармыш тигән кешенән башланып китә. Ул Аҡ батшанан тархан дәрәжәһе алыуға ирешкән. Ә инде тархан исемен күтәргәс, ул рус ғәскәрҙәре алып барған һуғыштарҙа ҡатнашырға тейеш булған. Зөфәрҙең XVII быуатта йәшәгән бабаһы ла Ҡармыш исемен йөрөткән һәм ул Азов походынан ҡатынлыҡҡа төрөк ҡыҙын алып ҡайтҡан.

Шәжәрәлә теркәлеүенсә, Ҡармыштың улдары түбәндәгеләр: Аҡбулат, Бикбулат. Аҡбулаттың улы Аҡкүбәк, ә уның улдары: Байслан менән Иҙелбәк. "Байслан, йорт старшинаһы булараҡ, Швецияға ҡаршы алып барылған яуҙа ҡатнаша һәм күрһәткән батырлығы өсөн полководец Кутузовтан бүләккә һабы биҙәп эшләнгән ҡылыс ала. Был ҡомартҡы уның бүләһе Солтангәрәйҙә һаҡлана һәм һуңынан быуындан-быуынға тапшырыла.

XIX быуатта Урта Азия походтарында башҡорт ғәскәрҙәренә командалыҡ иткән Йософ майор ҙа (ҡайһы бер сығанаҡтарҙа — генерал-майор) ошо нәҫелдән. Йософтоң өлкән улы Сәлимгәрәй ҙә

офицер була. Ул, Ырымбур кадет корпусын тамамлап, Маҡар волосы старшинаһы булып тора; кескәй улы, Батыргәрәй, Ҡазан уҡытыусылар семинарияһында уҡып сығып, хәлфәлек итә. Уның дүрт балаһы була. Өлкән улы — күренекле дәүләт эшмәкәре Мөхәмәтгәрәй Ҡарамышев — Башҡортостан Совнархозы рәйесе вазифаһына тиклем үрләй. Һөнәре буйынса уҡытыусы. Батыргәрәйҙең икенсе улы — 1892 йылда тыуған Әмир.

Уҡып, һуңынан ротмистр чины алған Әмир Стәрлетамаҡ өйәҙ полицияһы начальнигы булып хеҙмәт итә һәм 1917 йылда ошонда Башҡорт автономияһы өсөн башланған милли хәрәкәткә ҡушылып китә.

Әмир Ҡарамышевтың биографияһын тулыландырырлыҡ мәғлүмәттәр 1918 йылдың 20 августында сыҡҡан "Башҡортостан хөкүмәтенең теле" гәзитендә лә килтерелә. Күренекле шағир һәм журналист Хәбибулла Ғәбитов, мәҫәлән, уға бына ниндәй баһа бирә: "Бороңғо ҡаһарман бабаларыбыҙҙың йәдкәре булмаҡ донъяға килгән Ҡарамышевтың рухы, йөрәге сабый саҡтан уҡ мәғлүм: уның бөтөн уйыны — ҡурғаштан уҡ, мылтыҡ, ҡылыс кеүек һуғыш ҡоралдары яһау булған. Урамда малайҙарҙы ике төркөмгә айырып, үҙен "мосолман яғы"на баш итеп, ҡаршы яҡты еңеүҙән ҙур ҡыҙыҡ тапҡан.

Булыр бала — бишектән. Әмирҙең ысын ил балаһы, ватан улы булып тыуғанлығы шунан да ғибарәт: ул 1905 йылғы инҡилаб ваҡытында уҡ, ун өс кенә йәштә булыуына ҡарамаҫтан, ауылдарға сығып, халыҡ араһында хөрриәт фекерен таратып йөрөгән. Урындағы властар эҙәрлекләй башлағас, 1917 йылға тиклем Төркөстан тарафтарында ҡасып йөрөй. Саф башҡорт йөрәкле Әмир, хәҙерге бөйөк Россия инҡилабы килеп, иҙелгән милләттәргә бер аҙ ҡыймылдарға мөмкинлек асылыу менән үк, Башҡортостан эше өсөн арыҫландар кеүек күкрәк киреп эшкә тотонған. Ул көрәш майҙанына сыҡҡан егеттәребеҙҙең алдынғыларынан береһе булды".

Ә. Ҡарамыштың Төркөстан яғында ҡасып йөрөүе, тәғәйен ниҙәр эшләүе тураһында һөйләгән документтар юҡ, ә бына уның "алдынғылар рәтенә сығыуы, башҡорт халҡының ысын-ысындан һөйөүен яулап алыуы Таналыҡ-Баймаҡ төбәгенә килеүе менән бәйле тип асыҡтан-асыҡ әйтергә мөмкин.

Мәғлүм булыуынса, 1918 йылдың ғинуарында, Муса Мортазиндың һүҙҙәрен ҡулланып әйткәндә, "Кесе Ҡоролтай милли фонд булдырыу маҡсатында Башҡортостан биләмәләрендәге помещиктар имениеларын, заводтар һәм алтын приискыларын конфискациялау тураһында ҡарар ҡабул итә. Мөлкәттәрҙе тартып алыуҙы ул помещик Шотт, Мокрушин араҡы заводын һәм Баймаҡ тирәһендәге

приискыларҙы дәүләттеке итеп күсереүҙән башларға була. Ошо эштәрҙе башҡарып сығыу өсөн ул хөкүмәт ағзалары Иҙелбаев менән Мағазовты ебәрә (М. Мортазин, "Башҡортостан һәм башҡорт ғәскәрҙәре граждандар һуғышында", "Китап", 1994, 63-сө бит). Был һүҙҙәргә 1917 йылдың 8 декабрендә Ҡоролтайҙа хөкүмәт ағзаһы итеп һайланған Ә. Ҡарамышевтың да килеүен өҫтәргә кәрәк. — **Авт.**). Улар, Баймаҡ Эшселәр советы менән аңлашып, нисек тә булһа Башҡортостан мөстәҡиллеген нығытыу буйынса ғәмәли эштәр йәйелдереп ебәрә. Ләкин Башҡорт милли-азатлыҡ хәрәкәтенең Ырымбурҙа аҙым һайын ҡаршылыҡтарға осрап тороуы, башҡорттарҙың быуаттар буйына азатлыҡ алырға тырышыуын иң яҡын ҡәрҙәш халыҡ булып һаналған татарҙарҙың ҡыя һуғыуы аптырата уларҙы. Үҙәктә барған был көрәштең ялҡынлы шауҡымы алыҫ төбәктәргә, шул иҫәптән Баймаҡҡа ла барып етә.

Башҡорт автономияһын күрә алмаған көстәрҙең һуңғы һәм иң ҙур яуызлығы — милли-хәрәкәт етәкселәрен хөкүмәт эшенән ситләтеү һәм төрмәгә ултыртып ҡуйыу, Мосолман (татар) Хәрби инҡилаб комитеты, төп маҡсаттарын йәшереп, "большевиктар" флагына ышыҡланып эш итә һәм Советтарҙы башҡорттарға ҡаршы һөсләй. Башҡорт хөкүмәте ағзаларын ултыртып ҡуйыу, Петроградҡа Ойошторою Йыйылышына киткән Шура рәйесе Ш. Манатовты ла ҡулға алдыртырға тырышыу һәм ахыр сиктә Баймаҡҡа килгән хөкүмәт ағзаларына ҡамасаулыҡтар яһау — былар барыһы ла Мосолман Хәрби инҡилаб комитетының махсус, емергес сәйәсәт алып барыуын иҫбатлай. Бына ошо мәсьәлә буйынса Әмир Ҡарамыштың, эс серҙәрен сисеп, гәзит мөхәррире Хәбибулла Ғәбитовҡа шуларҙы һөйләгәне билдәле: "Мосолманлыҡты махсус "әләм" итеп майҙанға сыҡҡан ҡәрҙәштәребеҙ — татарҙарҙың, үҙ туғандары башҡортҡа ярҙам итеү урынына, сәйәси енәйәт эштәре менән аяҡ салыуҙары мине ныҡ борсой. Улар һәр төрлө ваҡлыҡтарҙы ҡыла, шунан ләззәт таба. Улар бөтә тарихтары буйына шундай сирҡаныс эш эшләп килгәндәр, хәҙер ҙә шуны эшләүҙәре тәбиғи".

Ҡарамыш 1595—1607 йылдарҙағы ихтилал сағында ла уларҙың башҡорттарға хыянат итеүен, императрица Нина Ивановна заманында Ҡазан татары полковник Еникеевтың, Минзәләлә ятҡан генерал Румянцевтың 10—15 мең әсир башҡортто ғазаплап үлтереүенә лә ҡәнәғәтләнмәй, үҙенең Үрге Урал өйәҙендә бик күп башҡорт ауылдарын яндырыуы, мал-мөлкәттәрен ҡыйратыуы тураһында хәсрәтләнеп һөйләй. "Бына ошо язалауҙар башҡорттарҙың энергияһын, һуғыштағы берлеген ҡаҡшатты. Шул тарихи ваҡиғалар мине татарҙарҙан биҙҙерһә лә, хәҙерге татарҙар элекке татарҙар түгел тип өмөтләнергә тырышһам да, ышаныстарым юҡҡа

сыҡты". Баймаҡ ваҡиғаларына тиклем үк әйтелгән был һүҙҙәр Әмирҙең ни тиклем дөрөҫ фекерләүен күрһәтә, тип өҫтәй Х. Ғәбитов. Күрәһең, Ҡарамыштың хафаланып йәшәүе лә, бәләгә тарыған башҡорттарҙы ҡотҡарам тип ашығыуы ла уның ошо уйҙарына барып тоташа.

Бына Ҡыуандыҡ станцияһынан (Ырымбур эргәһендә) дүрт-биш саҡырым алыҫлыҡтағы Иҙелбай ауылынан 300 винтовка, патрондар килтереү өсөн ун бер кеше ебәрәләр. Ләкин, Сүкәрә тигән утар аша үтеп барғанда, был башҡорт һалдаттарын Мосолман Хәрби инҡилаб комитеты тарафынан ебәрелгән ҡыҙыл гвардиясылар тотоп бикләп ҡуя. Шул хәбәрҙе ишетеү менән, Әмир Ҡарамыш үҙенең отрядына юлға әҙерләнергә бойора. Әлегә хәтлем ауырып ятҡан Әмир үҙе лә йыйына, ләкин тиҙ генә сығып китә алмай. Ни өсөндөр йөрәкһенеүен баҫа алмай һәм... моңһоулыҡҡа бирелә. Ғөмүмән, Х. Ғәбитовтың яҙмаларын уҡыған саҡта был егеттең шул хәтлем нескә күңелле булыуына аптырап ҡалаһың.

Яугир-йыраусы. Бындай сифатты беҙ Салауат батырҙа ғына күреп ғәҙәтләнгәнбеҙ. Баҡһаң, донъя тарихында халыҡ ихтилалдары, инҡилабтар башында торған инсандарҙың йыр-моңға, ләкап һүҙгә, шиғриәткә мөкиббән булыуы бер ҙә һирәк күренеш түгел икән. Башҡорт милли хәрәкәтен алһаҡ та шул уҡ хәл: Әхмәтзәки Вәлиди үҙе — йәш саҡтан уҡ төрки халыҡтарының үткәнен өйрәнеүсе тарихсы ла, телсе ғалим да; Шәриф Манатов — журналист; Муса Мортазиндың да беҙ походтар араһында туҡтап ял иткәндә башҡорт көйҙәрен тыңларға, бейергә яратыуын беләбеҙ; ә һуң халыҡ күтәрелеше башында, Вәлидиҙең янында йөрөгән шағирҙар Шәйехзада Бабич, Ғәбделхәй Иркәбаев, Фәтхелҡадир Сөләймәнов, Хәбибулла Ғәбитовтар? Әйтерһең, бөтә шиғриәт, матурлыҡ донъяһы һуғыш майҙанына сыҡҡан! Был үтә лә ғәжәп мәҙәни күренешкә һис күҙ йоморлоҡ түгел. Бәлки, рух азатлығын көҫәгән интеллигенцияның тәбиғәте шулайҙыр? Һәм бына, һанап кителгән йәш таланттарҙың эргәһенә тағы бер һоҡландырғыс шәхес килеп баҫа. Ул — Әмир Ҡарамыш.

"...Сәфәренә сығып китер алдынан ул үтә лә моңланды, — тип иҫләй Х. Ғәбитов. — Уның тауышы күҙебеҙҙән йәш ағыҙырлыҡ асы хәсрәттәр менән ҡайнап сыға ине. Беҙ бер нәмә лә уйламайбыҙ, тик мәхбүс (зинданға ябылған) кешеләр менән 300 мылтыҡты ҡулға төшөрөү. Барлыҡ фекерҙәребеҙҙе шул имгәл иткәнгә (билгәнгә), Әмирҙе тиҙерәк ебәрергә тырышып, атҡа атландырыу ине. Ләкин Әмир ашыҡмай.

— Туҡтағыҙ әле, моңло йырымды боҙмағыҙ! Эстәге хәсрәтте йырлап сығарып бөтөрәйем, юғиһә, атҡа ауыр була! — тип, тағы

әллә ниндәй ялҡынлы “аһаң”дар менән һуҙып йырларға тотона. Уның китер алдынан ялҡауланып маташыуы беҙҙе сабырһыҙланды-ра ине. Шуға күрә, ултырырға ирек бирмәй, уны тышта күренеп торған атына мендереп, урамға сыҡтыҡ. 25 атлы һалдат урамда теҙелгәйне. Әмир Ҡарамышев, беҙҙән алда сабып барып, шул кава-леристарҙың алдына баҫып беҙҙе ҡаршыланы. Ғимран Мағазовтың:

— Иптәштәр, һеҙ ҡайҙа барыуығыҙҙы беләһегеҙме? — тип һорау бирелгәс, беренсе бер һалдат: — Ә ...

— Беләбеҙ. Хеҙмәткә әҙербеҙ! — тип яуап бирҙе.

Мағазов, уларға ҡайҙа барасаҡтарын, алда ниндәй эш күрәсәктәрен, муйындарына йөкләнгән бурыстарын, ил бәхете, ва-тан һөйөү юлында хыянатһыҙ командирҙарының әмеренә буйһоноуҙың фарызлығын һөйләп, ышаныс биан иткәндән һуң, өҫтәренә йөкләтелгән эште башҡарыуҙа яҡты муфҡиәт (уңыш) теләп, һүҙен бөтөрҙө. Мағазовтың ҡушыуы буйынса хөкүмәт исе-менән мин дә һөйләп уҙҙым. Әмир Ҡарамышев, отряд исеменән беҙгә яуап биреп, оҙон бер нотоҡ ирад иткәндән һуң, кавалери-старға дүртәрҙән теҙелергә команда бирҙе. Ҡарамышев үҙе алдан, офицерҙар менән бергә теҙелде, һәм отряд, сәфәр хәленә килгәс, Әмир команда биреп, урынынан ҡуҙғалды. Ул үҙе тарафынан тәртип ителгән “Ватан” серләхәле (тип исемләнгән) йырын юғары тауыш менән башлағайны, һалдаттары ла ҡушылды. Шул рәүештә уларҙың сығып китеүҙәрен күҙебеҙ менән бер аҙ ергәсә оҙатып ҡал-дыҡ. Ҡаһарман Урал балаларының киң, таҙа күкрәк бушлыҡтары-нан яңғырап сығып һауаны һелкеткән хор-ауаз, өҫтәрендә ел-берҙәгән йәшел тыу өмөт ҡатыш хәүеф менән фекерҙәрҙе әллә ҡайҙа йыраҡҡа илтеп ташлай, күңелгә әллә ниндәй хөрриәт ғоруры ғәлиәнгә (асыу ҡабарыу) килеп, башҡорт “минлеген” бысраҡкан ҡара “көс”тәрҙе өҙгөләп ырғытырға теләй ине.

Беҙ — Ғабдулла Иҙелбаев, Ғимран Мағазов һәм Ғосман Йәһу-ҙин — бергә өйгә ҡайттыҡ. Кабанов йорто ниңәлер йәмһеҙ, нимәлер юҡ кеүек тойолдо; эс бошорғос күңелһеҙ ултырыш менән бер нисә минут уҙҙырҙыҡ. Берәү ҙә өндәшмәй — һүҙ башламай. Әллә ниндәй трагедия, әллә ниндәй ҡанлы ваҡиға күҙ алдына ки-леп баҫҡан кеүек йән һиҫкәндерерлек хәләттә (хәл) ҡалдыҡ...”

Ни өсөн шул хәтлем күңел төшөнкөлөгөнә бирелә Ә. Ҡарамыш һәм уның иптәштәре? Сәбәп бер генә: Башҡорт хөкүмәтенең аяуһыҙ эҙәрлекләнеүе, үҙ киләсәктәренең ҡараңғы булыуы, баш-ланған эштәренең юҡҡа сығырға тороуы.

Ҡарамыш һәм уның янындағы башҡа ир-уҙамандарҙың ынты-лыштарын һәм хафаланыуҙарын яҡшыраҡ аңлау өсөн “Башҡорт хөкүмәтенең теле” гәзитендә шул көндәрҙә баҫылып сыҡкан (1918

йыл, 20 август) “Башҡорттар ни теләйҙәр?” тигән мәҡәләне уҡып сығыу ҙа етәлер. Бына уның башы: “Мәхкүм милләттәрҙең һәр бере үҙҙәренең милли хәрәкәттәренә, милли тәрәҡҡиҙәренә (прогресына) кәртә ҡуйылмауын, дини вә милли мәнфәғәттәренә аяҡ салмауҙы теләй. Ләкин уларға артта ҡалыуҙан ҡотолоу өсөн бер генә сара бар: уларҙы айырым бер хәмәйәгә (яҡлауға) алыу, улар өсөн башҡаларҙан мөсәүи (тигеҙ) хоҡуҡлы хөр граждандарҙан, йәбер ителмәү сараларын майҙанға ҡуйыу кәрәк... Башҡорт халҡының ерле мөхтәриәт (автономия) һорауҙары шул исәскә нигеҙләнгән: /.../ рус мөһәжирҙәре (күскенселәре) тулып, төҫө үҙгәргән Башҡортостанды кире вәжүдкә (байлыҡҡа) сығарыуға ышанмаһа ла, хәҙерге көндә халҡының 65—70 проценты башҡорт булған киң бер даирәне “Кесе Башҡортостан” исеме менән айырып, айырым бер жәлләткә (мәрхәмәтһеҙлеккә) ҡуймаҡ булалар. Был өлкә, хәҙер Силәбе, Златоуст, Верхурал, Орск, Ырымбур, Стәрле вә Шадрин өйәҙҙәренә бүленеп, күбеһендә ситтәрҙең хужалығы аҫтында иҙелә...”

Һүҙҙең айышы бында башҡорт милләтенең үҙаллылыҡ яулауына, уның хоҡуҡтарына, мәнфәғәттәрен танытҡырыуға, ә бының өсөн Совет власы алдында тейешле талаптар ҡуйыуға табан бара. Шул идеяны ҡурсалап һәм милли ғәскәр төҙөргә тырышып сабауыллай ҙа инде Вәлидиҙең тоғро арҡадашы Ҡарамыш.

“Ашығыс рәүештә Сүкәрә яғына сығып киткән Әмирҙе мин башҡаса күрмәнем”, тип яҙа Х. Ғәбитов. Бына ошо ҡәҙимге генә хәбәр ҡайһы бер эҙләнеүсе тарихсыларға төрлө фараз ҡорорға нигеҙ булып торҙо, ахырыһы. “Ошо арала ул ҡайҙалыр юҡ булды”, тип яҙыусылар ҙа булды, мәҫәлән. Ниндәйҙер шик тыуҙырған һымаҡ был. Юҡ, Әмир бер ҡайҙа ла юғалмай, үрҙә, 46-сы биттә әйтелгәнсә, Ҡарамыш кире Баймаҡҡа сабып ҡайта һәм Әмир Мағазовтар менән бәйләнешкә инә, ләкин тегеләре эште ҡуйыртмаҫҡа кәңәш бирә, һәм Әмир, уларҙың һүҙен йығырға ҡыймайынса, һуйыл, ҡороҡтар тотоп сыҡҡан халыҡты өйҙәренә ҡайтарып ебәрә. Сабырлыҡ күрһәтә ул, әммә уның, оран һалып, бер ынтылыуҙа ҙур ғәскәр тупларлыҡ дәрте-дарманы барлығын да тоялар. Шәйехзада Бабич тиккә генә уға ҙур баһа бирмәгән икән. “Ҡаңлы балаһы” тигән псевдоним менән ул бына ни тип яҙып сыға: “Бөрйән башҡорто Әмир үҙен шул ҡәҙәр һөйҙөргән вә халыҡтың рухын шул ҡәҙәр йәлеп иткән ине ки: уның бер ишараһына халыҡ утҡа йәки һыуға керергә риза ине. Баймаҡта Ғабдулла Иҙелбаев, Мағазовтарҙың ябылыуҙарын ишетеп, әтрафынан (тарафынан) йыйған ете мең атлы башҡорт бөтөн Баймаҡты күл итергә ҡыжрап торғанда, Әмирҙең “сабыр итегеҙ!” тигән бер бармаҡ ишараһы утҡа һыу

һипкән кеүек, халыкты тынысландырҙы. Бына шулай ине уның халыкка барып етерлек һүҙе, бына шулай ине халыктың уға итәғәте...” (“Башкорт хөкүмәтенең теле”, № 1, 1918 й.).

Шулай ҙа кайҙа китә һуң ул Баймак янынан? Был һорауға Вәлиди ҙә анык кына яуап бирмәй. Дөрөҫ, “Хәтирәләр”ҙә Мағазов, Иҙелбаев һәм тағы ун биш кеше үлтерелгәс тә, Әмир Карамыш менән Хәбибулла Ғәбитовтың үҙ һалдаттарын йыйып, кыҙыларместарға һөжүм итеүе һәм уларҙы Орскиға кыуып ебәреүҙәре тураһында юлдар бар. Х. Ғәбитов үҙе иһә был хакта бер ни ҙә өндәшмәй. Артабан Әхмәтзәки Вәлиди уларҙың үҙ карамағындағы һалдаттарҙы таратып ебәреүе һәм Бөрйән-Түңгәүер ерендә тауҙарҙа йәшенеүе тураһында бәйән итә.

Тағы бер мәғлүмәт. “Әмир Карамыштың үҙ ирке менән килгән егеттәрҙән тауҙарҙа ғәскәр туплауы һәм Ырымбурға һөжүм итеү өсөн казактарға кушылырға тырышыуы хакында хәбәр килде”, — ти ул. “Ырымбурға казактар һөжүм иткән, был эштә Әмир Карамыш ебәргән башкорт ғәскәрҙәре лә катнашкан”, — тиелә икенсе урында. Бына ошо бик үк ышаныслы рәүештә әйтелмәгән һүҙҙәрҙе үҫтерә биреберәк һәм кәтғи рәүештә һуңғы вакытта тарихи әҙәбиәттә, Ә. Карамышев етәкселегендәге башкорт отрядтары 1918 йылдың апрель башында атаман Дутов частары яклашыуында Ырымбурға һөжүм яһаны һәм тоткондарҙы коткарҙы, тип бер “асыш” яһай башланылар. Ысынбарлыкка тап киләме был? Икеле. Сөнки ошо вакиғаларҙы якшы белгән һәм матбуғатта бер нисә тапкыр сығыш яһаған Х. Ғәбитов күпкә тыйнағырак һөйләй. Эйе, уның яҙыуы буйынса ла, яңыса 4 апрелдә казактарҙың партизан отрядтары Ырымбурға һөжүм кыла. Шунан файҙаланып, әлегә хәтлем йәшеренеп йөрөгән Әмир, насар ғына санаға бесән тейәп, үҙе сатанлаған, үҙе һукыр башкорт киәфәтен алып, кала урамына барып инә һәм һуғышсылар ташлап калдырған коралдарҙы йыйып, уларҙы бесән аҫтына кыҫтырып алып сығып китә. Тап ошо вакытта Вәлиди һәм хөкүмәттең башка ағзалары төрмәнән каса, һәм Вәлиди көтмәгәндә үҙ юлында хөрриәт тип янып йөрөгән Әмиргә тап була. Бер аҙ вакыт улар Башкортостан төбәктәре буйлап бергә йөрөйҙәр. Әмир үҙенең Башкортостан бәхете өсөн көрәшәсәге, ниндәй пландар короуы тураһында һөйләй...”

Ошо осорҙо сағылдырыуға “Хәтирәләр”ҙә лә байтак урын бирелгән. Әхмәтзәки Вәлиди төрмәнән сыккас та үҙенең Карғалы ауылына барыуы, унан Әмиргә “мин азатмын, Өфөгә бар”, тип хәбәр ебәреүе, ә дуҫының шунда ук Өфөгә барып етеүенә аптырауы, Баймакта сакта әҙерләнгән алтындың бер өлөшөн уға биреүе тураһында яҙа.

Киләсәккә пландар ҡороп, милли хәрәкәттең үҙәге Тамъян-Ҡатай кантонының Әхмәт ауылы булырға тейеш, тип билдәләп, Вәлиди менән Ҡарамыш, 9 апрелдә санаға ултырып, сәфәр сыға. Дуҫтар, башлыса, төндәрен генә юлда булып, Еҙем-Ҡаран, Мырҙаҡай, Шамов руднигы, Шығай ауылдары аша үтә. Йылға ташыу сәбәпле, Хоҙайбирҙе ауылынан йәйәүләп, урман аша китәләр. "Әмир бик матур итеп ҡурай тарта торғайны, — ти шунда Вәлиди. — Был юлы беҙ барып кергән урманда ҡурай итерлек ҡамыш күп ине, латинса ул Heracdeum sidiricum" (русса — борщевик сибирский) тип атала. Әмир уны күреү менән үк ҡырҡып алды ла, өҫтән дүрт, аҫтан бер тишек уйып, уйнарға кереште..." (Әхмәтзәки Вәлиди Туған, "Хәтирәләр", М., 1997, 153-сө бит). Әмир Ҡарамыштың музыка менән етди мауығыуына тағы бер сағыу дәлил был.

Әхмәт ауылында ҡайһы бер ойоштороу эштәрен атҡарғас, Вәлиди ҡаҙаҡтар менән бергәләп эш итеү тураһында гәпләшеү өсөн Ҡустанайға йыйына һәм ул хәҙерге Учалы районы аша үтә, Түләк, Туңғатар ауылдарында кәрәкле кешеләр менән осраша (Иҫкәрмә: ул ни өсөндәр ҡайнағаһы Талха Рәсүлевтың тыуған ауылы Шәрипте лә, уның атаһы йәшәгән Иҫке Байрамғолдо ла иҫкә алмай, уларҙы волость үҙәге Туңғатар исеме менән генә алмаштырып үтә. — **Авт.**). Әмир иһә Тамъян-Ҡатай кантонында ҡалып, партизан отрядтары ойошторорға тейеш була. Был бурысты ул әлегә хәтлем волость милицияһы начальнигы вазифаһын үтәп йөрөгән Муса Мортазин менән бергәләп башҡара. Вәлидиҙең иҫләүенсә, 1918 йылдың апрель аҙағына улар партизан отрядтарының 57 үҙәген төҙөй. Ошо осорға ҡағылып, М. Мортазин бына нимәләр өҫтәй: "1-се башҡорт кавалерия полкы 1918 йылдың июнендә ойошторола башланы... Башҡортостандың ғәскәри идаралығы начальнигы Вәлидовтың приказы менән 1-се башҡорт полкына командир итеп Ә. Ҡарамышев тәғәйенләнде. Полк үҙе төҙөлгән территориялағы иреклеләрҙән ойошторолдо. Кавалерия полкын комплектлау өсөн Тамъян-Ҡатай кантонының Күбәләк-Тиләү, Тамъян-Түңгәүер, Ҡатай һәм Туңғатар волостары бүленде". (М. Мортазин, Әҫәрҙәр, Өфө, 1994, 91-се бит). Ә. Ҡарамышев бойороғо менән М. Мортазин 1-се эскадрон командиры итеп ҡуйыла. Алғараҡ китеп, шуны ла әйтеп китеү фарыз: Ҡарамышев үлгәс, аҡ генерал Анненков полк командиры итеп үҙ кешеһен — есаул Гнаганы тәғәйенләй, ләкин сит кешенең башҡорт халҡы мәнфәғәтен ҡайғыртмауын күреп, М. Мортазин көслөк менән уның урынын баҫып ала (Шунда уҡ, 92-се бит). Ә инде июнь-июль айҙарында, Ҡарамышев, Мортазиндар башлап ебәргән эш ярайһы уҡ уңышлы булып китеп, Хәрби советҡа тотош бер дивизия ойошторорға мөмкинлек тыуа. Уның ко-

мандиры итеп подполковник Аҡчулпанов, полк командирҙары итеп корнет Ҡарамышев, поручик Ғәбитов, поручик Туймаҡаев, штабс-капитан Еникеевтар тәғәйенләнә. Был ҡораллы көстәрҙең төп маҡсаты итеп "башҡорт халҡын төрлө көсләүселәрҙән ҡурсалау" ҡуйыла, шуға күрә лә аңлайышлы лозунг күп фәҡир-фоҡраның яҡлауын таба.

Башҡорт ғәскәрҙәре, башлыса, Белорет заводы, хәҙерге Силәбе өлкәһенең Үрге Йайыҡ ҡалаһы, Уйск районы тирәләрендә һуғыша. "Башҡорт хөкүмәтенең теле" гәзитенең яҙыуынса, Әмир Ҡарамышев үҙенең тау башҡорттарынан тупланған отряды менән Белорет заводында өс көн тоташтан һуғыша, дошманға бик ҙур һәләкәт килтерә һәм байтаҡ трофей ала. "Дошман һан вә ҡорал йәһәтенән бер нисә мәртәбә күберәк һәм көслөрәк булһа ла, — ти гәзит, — Әмир үҙенең яҡшы идара итеүе арҡаһында уны еңеп, ҡасырға мәжбүр итте. "Был юлдарҙы уҡығас та, ирекһеҙҙән башҡа тотонаһың: иҫ киткес! Беҙ бит, ысынбарлыҡҡа күҙ йомоп, хәҡиҡәткә зыян килтереп, Ҡарамыш, Мортазиндарҙан ҡыйратылған Блюхер, Каширриндарҙы маҡтап килдек. Еңелеп, иленән ҡыуылып, ҡайҙалыр сит-ят яҡтарға һырт һалып ҡасыу "легендар рейд" була торғаны бармы инде?!

Был хәбәрҙең айышын уҡыусым дөрөҫ аңлаһа ине: беҙ бында граждандар һуғышында ҡатнашҡан ике ҡоралы көстөң, төҫтәренә ҡарап, береһен күккә күтәреп маҡтарға, икенсеһен битәрләргә йыйынмайбыҙ; бер халыҡты элеккесә икегә, синыфтарға бүлеп һүҙ ҡуйыртыу хәҙер кәрәкмәй — улай эшләгән дәүерҙәр күптән инде үтеп киткән; ә ике яҡ тураһында тыныс ҡына, ҡәҙимге күҙлектән ҡарап, теге яҡтың да, был яҡтың да яугирлыҡ хеҙмәттәрен нисек үтәүҙәре йә иһә кеше сифаттары хаҡында фекер йөрөтөргә хаҡлыбыҙҙыр.

Был юлдарҙың авторына элегерәк ҡыҙыл партизандарҙың Үрге Йайыҡ, Белорет тирәләрендә аяуһыҙ һуғыштар аша үтеүе, ҡыҙылдарҙың берләштерелгән армияһы командующийы Николай Кашириндың хәҙерге Учалы районының Ҡаҙаҡкол ауылы эргәһендәге тауҙа ҡаты яраланыуы тураһында яҙырға тура килгәйне (Рәүеф Насиров, "Ата-бабам баҡҡан ер", Уч., "Панорама" нәшриәте, 1994, 125-се бит). Ә бына бөгөн килеп, 1918 йылғы матбуғат материалдары менән нығыраҡ танышҡас, Каширрииндарға ҡаршы әллә ниндәй "яуыз"дың түгел, ә үҙ яғының патриоты Әмир Ҡарамышевтың һуғышып йөрөүе асыҡлана. Ул ғына ла түгел, Каширин ҡайһы тауҙа сафтан сыҡһа, Ҡарамыш та яҡынса шундағы тауҙарҙың береһендә ҡаты контузия ала.

Эш былай була: ҡаршы яҡ ғәскәрҙең ҡайҙа хәрәкәт итеүен яҡшыраҡ күреү өсөн, Әмир бейек тау башына менә һәм биноклен күтәрә. Ҡаршы яҡтағылар быны һиҙеп ҡалған булырға тейеш, сөнки шунда уҡ атырға тотоналар. Ҡарамышевтың ике яғында ике снаряд шартлай. Шуның еленән Әмир, һушһыҙ булып, тауҙан тәгәрәй. 22 июлдә Әмир Вәлидиҙе проводҡа саҡыра, уға өс көн һуғышып, Белоретты алыуы тураһында хәбәр итә, ләкин үҙенең бик йонсоуын да еткерә — моғайын, инде икенсе тапҡыр контузия алыуын да әйткәндер, тип уйларға кәрәк.

"Шунан һуң Ҡарамыштың хәле көндән-көн ауырая башланы, шул сәбәпле ул Силәбегә оҙатылды, — тип яҙа "Башҡорт хөкүмәтенең теле" гәзите. — Ләкин Миәскә еткәс, докторҙарҙың кәңәше буйынса, уны Миәс лазаретына һалырға булалар. "Бында биш көн ята ул һәм, докторҙарҙың хәтерләүенсә, "йән бирергә өс-дүрт сәғәт ҡалғас, урынында тороп ултыра һәм, көлөп: "Мин үлгәндә лә йырлай-йырлай үләм", — ти. Әмир ысынлап та йырларға тотона. Моңло итеп, ҡысҡырып йырлай. Янындағы һаҡсы һалдаттар, быға ғәжәпләнеп тә, һоҡланып та ҡарай, түҙә алмай, илай". Был хаҡта һуңынан ҡатыны Мәрхәбә лә һөйләй.

Ротмистр Ҡарамышев 7 августа ошонда, Миәс хәрби больницаһында донъя ҡуя. "Шунда уҡ тәрбиәләгәндән һуң ул, табут эсенә урынлаштырылып, һалҡын (боҙло) вагон эсендә Ырымбурға оҙатылды", — тип хәбәр итә "Башҡорт" гәзите (1918, № 3). Бында Тамъян-Ҡатай кантон идаралығы ағзаһы Ғосман Ниязиҙың һүҙҙәрен дә килтереп үтеү кәрәктер. "Мәрхүм, тере сағында, мин һеҙҙән алдараҡ үлһәм, мине Урал тауҙарының бер бейек урынына дәфен итегеҙ", тип васыят әйткәйне, шуға күрә мәрхүмде Үрге Яйыҡ тирәһенә алып ҡайтыу теләге менән килгәйнем, — ти ул. — Ләкин Зәки Вәлидиҙән, уны Ырымбурға килтерергә ҡушып телеграм килгәнлектән, 11 август көндөҙ сәғәт 2-лә мәйетте Миәстән Ырымбурға оҙаттыҡ".

Тимер юл вокзалына тиклем мәрхүмде ғәскәр оҙатып бара. Халыҡ күп була. Дүрт саҡырымды йәйәүләп үтәләр. Боҙло вагонға урынлаштырылған мәйетте алып барып тапшырыу 2-се башҡорт полкы офицеры подпоручик Тереғоловҡа һәм ике һалдатҡа йөкмәтелә. Әмирҙең ғаиләһе, атаһы ла улар менән бергә ҡайғылы юлға сыға. Башҡорт хөкүмәтенең кисектергеһеҙ эштәре булғанлыҡтан, Әхмәтзәки Вәлиди Силәбе һәм Һамар ҡалаларында буласаҡ хөкүмәт кәңәшмәһенә барырға торғанлыҡтан, ерләүҙе ул ҡайтҡансы кисектереп торорға ҡарар итәләр. Шунлыҡтан мәрхүмде ер ҡуйынына биреү бер аҙ һуңлай. Уны 22 августа ғына ерләйҙәр. Мәйетте 1-се һәм 4-се башҡорт полктары музыкаһы оҙатыуында

офицерҙар делегацияһы Каруанһарай алдындағы майҙанға килтерә. Уға Башҡорт хөкүмәте, өлкә Башҡорт мәркәз шураһы, башҡорт йәштәре ойошмаһы "Тулҡын" исеменән сәскәләр, веноктар һалына. Венок таҫмаларында: "Башҡорт тарихында үлмәҫ атаҡ ҡалдырған арҫлан Әмир! Тыныс йәнең илә мәңге алланың рәхмәтендә бул!" — тигән яҙыуҙарҙы, "Тулҡын" ойошмаһы әҙерләгән венокта: "Әй, Әмиржан! Ил өсөн һүнгән шәмдең бере һин, бәхетле булманың һин, Ил күгендә тере һин!" — тигән Ш. Бабич һүҙҙәрен уҡый килгән халыҡ.

Йыназа намаҙы уҡылып бөткәс, штаб начальнигы Емельяновтың командаһына буйһоноп, ғәскәр теҙелә, һәм мәйетте музыка оҙатыуында урамдар буйлап Мосолман зыяратына алып китәләр. Ҡәберлектә Каруанһарай имамы Ниғмәтулла хәҙрәт Тимушев ялҡынлы нотоҡ әйтә. Иң аҙаҡтан хөкүмәт рәйесе Юныс Бикбов сығып һөйләй. Шәйехзада Бабич яңы шиғырын уҡый".

Ш. Бабичтың мәрхүм ҡәберендә һөйләгәненән бер өҙөк:

*Бөгөн беҙгә ни булған?*
*Күңелебеҙ ник ҡырылған?*
*Йөҙөбөҙҙә ник тағын*
*Үлгән хәсрәт терелгән?*
*Терелгәндең сәбәбе —*
*Бер аяулы ир үлгән!*
*Ул аяулы кем ине?*
*— Әмир тигән ир ине,*
*Башҡорт күген яҡтыртҡан*
*Аҙ йондоҙҙоң бере ине.*
*Яу өҫтөнә атылһа,*
*Ҡуйға сапҡан бүре ине...*

"Күп кешеләр үкһеп-үкһеп иларға, ҡайһылары: күҙ йәштәрен күрһәтергә оялып, ситкә китергә йәки икенсе кеше күрмәгән тарафҡа ҡарап торорға мәжбүр булды", — тип тамамлай репортажын Хәбибулла Ғәбитов.

Ш. Бабич "Ҡаңлы балаһы" тигән псевдоним менән "Башҡорт хөкүмәтенең теле" гәзитендә лә сығыш яһай, тип әйткәйнек инде үрҙә. Уның мәкәләһе былай тамамлана: "Мәрхүм бары 26 йәшендә ине. Артында биш-алты айлыҡ Байыслан исемле улы ҡалды. Брадарҙарынан (брадар — ир туған) Ғәни, Мөхтәр һәм Гәрәй Ҡарамышев әфәнделәр — Башҡортостан эшендә йөрөүсе егеттәребеҙҙәндер.

Брадарҙарының, хосуса рәфиҡәһе (кәләше) Мәрхәбә ханымдың ҡайғыларын уртаҡлашабыҙ. Алла, мәрхүмдең ҡәберен яҡты ҡылып,

иманын юлдаш әйләһен. Алла башҡорт егеттәренә Әмирҙәге кеүек рух, Әмирҙәге кеүек йөрәк насип итһен!"

Әмирҙең үҙе генә түгел, ҡатыны Мәрхәбә лә (ҡыҙ фамилияһы Сәлимова) шиғри күңелле кеше булғанға оҡшай. Уның 7 августа Миәс дауаханаһында сығарған шиғыр юлдары һаҡланған:

*Әй, хоҙайым, бирсе миңә сабыр!*
*Сыҡты-сыҡты йәнем, жанғынам!*
*Айырылыу минут килеп етте,*
*Нисек кенә китәйем яныңдан?*

Ә бына уның мәрхүм иренең янында моңланып ултырып йырлаған йыры:

*Ирәмәк кенә тауҙың башҡайында*
*Әнә утра ялғыҙ бер ҡайын,*
*Сит илдәргә китереп, мәхрүм итеп*
*Ҡалдыраңмы, ғәзиз жанҡайым?*
*Ирәмәк кенә тауҙың ай баштар*
*Була микән, жаным, еләкле?*
*Башҡорттарҙан тағын тыуар микән*
*Һинең кеүек ғиуар йөрәкле?*
*Яңы ғына теккән кейемеңде*
*Башлап кейеп киттең һуғышҡа,*
*Һинең генә сығарған моңло көйөң*
*Ҡалды башҡорттарға һағышҡа.*
*Көлөп ҡарап, төртөп күрһәтәһең,*
*Күренәмәллә йәннәт алдыңда?*
*Көлөп кенә үлмәк булаһыңмы?*
*Ғәзиз балаң илай яныңда.*
*Ҡаранаһың төрлө яҡтарға,*
*Һөйләнәһең, Кавказ-Кавказ, тип.*
*Йәш йөрәкәйемә сыҙай алмайым,*
*Ахры ҡалды ғөмрөң аҙ, аҙ, тип.*
*Йыраҡ ҡалды һинең инәкәйең,*
*Һағынғандар улар барһы ла.*
*Сыҙай ғына алмай, уф-уф, тием,*
*Йөрәк кенә бигерәк ярһый ҙа.*
*Туғандарым һине тилмереп көтә,*
*Ялан ерҙә һине — ҡыр ҡошо!*
*Һуңғы минуттарың килеп етте,*
*Ай-һай, ғазраилдың ҡыр ҡышы!*

Әмир Ҡарамыштың ваҡытһыҙ үлеп ҡалыуына ҡайғырып һәм уның яҡты образын сағылдырып, шул көндәрҙә уға күп әҙиптәр мәдхиә уҡый. Бына Фәтхелҡадир Инандың шиғыры:

*Батыр егет килә ат өҫтөндә,*
*Аты уйнай ауыҙын тартҡанда,*
*Булат һауыт кейгән, һөңгө таҡҡан —*
*Ташты яра уҡтар атҡанда...*
*Аҡ оҫҡондар оса ат ауыҙынан,*
*Таштар һына аяҡ аҫтында.*
*Алға саба батыр, алға бара,*
*Саң төтөнө ҡала артыңда.*
*Ниңә ашыға батыр? Ниңә ашҡына?*
*Ни ишеткән батыр, ни күргән?*
*Намыҫы бар егет ниңә ятһын —*
*Ил ситенә бөгөн яу килгән!*

Хәбибулла Ғәбитов та Әмир Ҡарамышҡа шиғырын арнай:

*Беҙгә ғәмле көн тыуҙы,*
*Уралда гөлдәр һулыны,*
*Хәсрәттән күңел тулды,*
*Әмир шаһит* арҫлан!*
*Беҙҙе ташлап һин китте*
*Үкһеҙ йәтим "ил" иттең,*
*Иртә китеп аранан,*
*Күҙ йәштәрен күл иттең,*
*Әмир шаһит арҫлан!*
*Дошмандарҙы таптаның,*
*Бик ҙур эштәр башланың,*
*Шаһит булып арҫлан,*
*Йомшаҡ тупраҡ постандың,*
*Әмир шаһит арҫлан!*
*Ҡаршы сығар алдыңдан*
*Абыҙ — Аҡай — Салауат,*
*Һорашһалар башҡортто,*
*Беҙҙән күп-күп сәләм әйт,*
*Әмир шаһит арҫлан!*
*Башланған эш туҡтамаҫ,*
*Инде башҡорт йоҡламаҫ,*
*Илдең изге теләген*
*Дошман яуы ташламаҫ.*
*Әмир шаһит арҫлан!*
*Ҡанлы "тыу"ын күтәргән,*
*Илгә бурысын үтәгән,*

---

*шаһит — хаҡ эш өсөн һуғышта үлеүсе.

*Халҡын һаҡлап дошмандан*
*Ҡан түкрөп йүтәлгән,*
*Әмир шаһит арҫлан!*
*Әжәл килде ашығып,*
*Бойһондоң һин, баш ороп,*
*Ҡайғы-хәсрәт, әлемдән*
*Илең ҡалды ятғып,*
*Әмир шаһит арҫлан!*
*Хуш мәңгегә, батырым,*
*Башымда юҡ ғаҡылым.*
*Дошман ҡыуып сыңлатҡан*
*Уралдың тау-таҡрын.*
*Әмир шаһит арҫлан!*
*Моңло ҡәбереӊ өҫтөндә,*
*Әмир, һине юҡланым,*
*Ғаҡлым китеп башымда*
*Һөйләй алмай туҡтаным,*
*Әмир шаһит арҫлан!*
*Рәһен* булһын башҡортҡа*
*Иртә осҡан аҡ жаның,*
*Маҡсатҡа беҙ етәрбеҙ,*
*Тыныс булһын пак жаны ,,*
*Әмир шаһит арҫлан!*

*1999 й.*

---

*рәһен — заклад

## V. Ҡорбанғәлиевтарҙың яҙмышы

Ислам диненең күренекле руханиҙары Ҡорбанғәлиевтар атҡарған эштәре, ҡылыҡ-фиғелдәре менән көнсығыш башҡорттары аңында тәрән эҙ ҡалдырһа ла, тормоштары матбуғат биттәрендә әллә ни яҡтыртылмаған.

Был зат ифрат ҙурға оҡшай. Беҙгә уларҙың иң өлкәндәренән бер ни тиклем таныш булғаны — Ғәбделхәким хәҙрәттер. Сығышы менән Ҡурған яғынан, Ялан Ҡатай башҡорттарынан. Арғаяш мөхитенә килеп урынлашып, шул тирәләге мосолмандар араһында тәғлим-тәрбиә менән мәшғүл була. Әммә хәҙрәт ислам дине тәғлимәте, инсафлыҡ тәрбиәләү менән шөғөлләнһә лә, йөрәгендә мәкерлек ағыуы ла йөрөткән булһа кәрәк. Уның был сифаты Зәйнулла хәҙрәт Рәсүлигә ҡарата булған мөнәсәбәтендә сағыла. Дини йолаларҙы атҡарыуҙа, балалар уҡытыуҙа ғәжәп алдынғы аҙымдар яһап, яҡшы даны таралып киткән Рәсүлиҙең уңыштарына Ғәбделхәким ҡара көнсөллөк кисерә һәм ул, үҙе ише бер нисә мулла менән бергәләп, “Зәйнулла диндәштәрҙе юлдан яҙҙыра, батша хөкүмәтенә ҡаршы әрме тупларға йыйына” тип, шикәйәт яҙыуҙа ҡатнаша һәм Зәйнулла хәҙрәтте һөргөнгә ебәртеүгә өлгәшә.

Алма ағасынан йыраҡ төшмәй, тиҙәр. 1859 йылда Силәбе өйәҙенең Миҙиәк ауылында тыуған, ошонда уҡ һәм артабан Троицкиҙа уҡып ҡайтҡан, ғүмерен муллалыҡ хеҙмәтенә бағышлаған Ғабиҙулла ла атаһын ҡабатлай. Арғаяш яҡтарының тарихын өйрәнгән һәм ғүмеренең һуңғы йылдарын Бешкәк ҡалаһында үткәргән журналист Тайфур Көсөков та, тарихсы Мөхәмәҙиә Ғабиҙуллин да, Силәбе ҡалаһында йәшәүсе Ҡәйүм Ҡушаев та (Башҡорт Үҙәк Башҡарма Комитеты рәйесе Хафиз Ҡушаевтың ҡустыһы), Тажикстандан Тойғон Таһиров та (Нуриағзам Таһировтың улы) был юлдарҙың авторына яҙған хаттарында Ғабиҙулла Ҡорбанғәлиевкә сәйәси яҡтан да, шәхси планда ла үтә лә кире баһа бирҙеләр, алдынғы ҡарашлы йәштәрҙе эҙәрлекләүенә миҫалдар килтерҙеләр. Һәр хәлдә һибелмә рәүешендә генә йөрөгән был иҫтәлектәрҙе уҡығандың һуңында, ишан беҙҙең алға бер һөмһөҙ ҡарасҡы ҡиәфәтендәрәк килеп баҫа. Ләкин аҡһаҡ ишанды ҡара буяуҙар менән генә тасуирлау хата булыр, моғайын. Уның холоҡфиғеленең нигеҙе күпкә ҡатмарлы. Ҡорбанғәлиевтар ғаиләһенең тормошон өйрәнеүсе тарихсы Шәриф Шәриповтың һөйләүенсә, мәҫәлән, Ғабиҙулла 1912 йылда уҡ әле Полиция Департаменты тарафынан Петропавловск ҡалаһына һөргөнгә ебәрелә.Ғәйебе: йәнәһе, ишан башҡорттарҙы урыҫтарға ҡаршы ҡоторта, Балҡан христиандары менән һуғыш алып барған төрөктәрҙе яҡлаша.

Ғабиҙулланы ахунлығынан, ишанлығынан мәхрүм итәләр. Был вазифаларын ул һөргөндән ҡайтҡас юллап ҡарай — бушҡа ғына. Ахун дәрәжәһен уға 1918 йылда ғына кире ҡайтаралар.

Әммә шунда уҡ әйтеп үтеү кәрәктер: Ғабиҙулла ишандың ҡара-табын, ялан-ҡатайҙар — ғөмүмән, төньяҡ-көнсығыш башҡорттары араһында йоғонтоһо ҙур булыуын, абруйы арҡаһындамы, ҡурҡытыпмы, төрлө социаль ҡатламдарҙы үҙ ҡулында тотоуын да онотторға ярамай.



Япониәла Ислам йәмғиәте етәксеһе Мөхәммәт Ғәбделхәй хәҙрәт Ҡорбанғәли.

Ишандың биш малайы булыуы билдәле: Мөхәммәт Ғәбделхәй, Мөхәммәт Һарун, Әбделәүәл, Мөхәммәт Әнсәр, Заҡуан, Абдулла. Үҫеп, ир ҡорона ингәндәре араһында иң танылғаны һәм башҡорт халҡы тарихында ҙур урын алғаны — Ғәбделхәй. Уның хаҡында аҙағыраҡ һүҙ буласаҡ, бында шуны ғына әйтеп үтәйек: ул 1889 йылда Миҙиәк ауылында тыуа. Үҫеп еткәс, бөтә аңлы осорон Совет власы менән көрәшеүгә арнай, уға ҡаршы ғәскәр тупларға тотона, һәм 1918 йылдың февралендә ҡулға алынған Әхмәтзәки Вәлидиҙең төрмәнән ҡасып, ошо йылдың көҙөндә Силәбегә килеп урынлашыуы ла тикмәгә түгел — ул бына ошо Ғәбделхәйҙең һәм уның атаһы Ғабиҙулланың ярҙамына ла иҫәп тотҡан булырға тейеш.

Ғәбделхәйҙең сәйәси ҡараштарына туҡталғанда, ул ерҙе социалистик милеккә әйләндереүгә ҡырҡа ҡаршы була һәм башҡорттар өсөн милли-мәҙәни автономия булдырыу яғында сығыш яһай. Ырымбурҙа үткән I Башҡорт ҡоролтайында ҡатнаша. Уның ошо съезға делегат булып һайланыу тарихы фәһемле. Арғаяштарҙың иҫләүенсә, ябай халыҡ Арғаяш кантонынан делегатлыҡҡа кандидат итеп үҙҙәре бик ихтирам иткән Вафа Сөләймәновты, ә батша хөкүмәте яҡлылар кадет Ғәбделхәйҙе күрһәтә. Бәхәс ғәҙәти сиктәрҙән сығып китә һәм үҙ-ара яғалашыуға барып етә. Ахырҙа ҡоролтайға икеһен дә һайлайҙар.

Башҡорт ҡоролтайында ҡатнашҡан Ҡорбанғәлиев хаҡында Әхмәтзәки Вәлиди үҙенең "Хәтирәләр"ендә бына ни яҙа: "Минең ер мәсьәләһе буйынса уҡыған докладымда социализм идеялары һәм ҙур ер биләмәләрен бүлешеү тезисы булғанлыҡтан, миңә ҡаршы сыҡтылар, әммә фекерҙәре ҡабул булманы. Электән консерватив һәм яңылыҡ дошманы сифатында танылған был ғаилә вәкиле Ғәбделхәй Ҡорбанғәле, үҙенә бер төрлө хәбәр һөйләп, Үҙәк Комитет программаһына бөтә башҡа эштән алда динде яҡлау бурысын ҡуйыу фекерен алға һөрҙө..."

1917 йылдың 20 декабре. III Башҡорт Ҡоролтайы. "Был конгреста Арғаяш кантонлығы башҡорттарынан Ғәбделхәй Ҡорбанғәлиев менән Минһаж исемле арҡадашы, монархист урыҫтар менән берләшеп, оппозиция тәшкил итергә маташты..." (Зәки Вәлиди, "Хәтирәләр", 159-сы бит).

Зәки Вәлидиҙең Ғәбделхәйҙе һәр ваҡыт монархист урыҫтар араһында күреүе аңлашыла: был юлынан Ғәбделхәй ахырынаса тайпылмай. Ғәбделхәйҙең ғәмәлдәге аҙымдары ысынлап та батша хөкүмәтен яҡлаған һымаҡ тойола. Ләкин уның алыҫтағы маҡсатын күҙ алдына баҫтырһаҡ, ул тиклем өҙөп әйтеү тарихи дөрөҫлөккә бик үк тап килмәй.

Йәмғиәттең һынылыш осорона хас былдай буталсыҡ хәлде Себер хөкүмәтенең үҙ мәнфәғәтендә файҙаланып ҡалырға тырышыуын, Ҡорбанғәлиевтарҙың да Совет власына ҡаршы ҡотҡо таратыуын беҙ әлегә бер яҡлы ғына, Зәки Вәлиди яҙмаларынан сығып ҡына баһалайбыҙ. Мәҫәлән, ул "Хәтирәләр"ҙә бына ни яҙа: "Башҡорт ғәскәре Силәбенән Ырымбурға күскәс, етди таяныстан мәхрүм ҡалған генерал Ханжин шул яҡтан урыҫ монархистары менән бәйләнешкә ингән, Барын Табын ырыуы Миҙиәк ауылы байы, исеме иҫкә алынған имам Ғәбделхәй Ҡорбанғәлиев менән аңлашҡан. Улар Ташкент фронтындағы башҡорт ғәскәренең күпселеген Арғаяш кантоны башҡорттары тәшкил итеүҙән файҙаланырға тырышты..." (Зәки Вәлидигә ҡаршы тип аңларға кәрәк. — **Авт.**).

Бер осор Вәлиди менән Ғәбделхәй Советтарға ҡаршы фронт һыҙығының бер яғында булһа ла, улар бына ошолай бер-береһе менән һис тынышмай, бер-береһенең өҫтөнән "верховный" хаким Колчакка ялыу артынан ялыу яуҙыра. Быының сәбәбен, моғайын, шулай ғына аңлатырға кәрәктер: З. Вәлиди Башҡортостан автономияһы булдырыу мәсьәләһендә Колчактан да, уның Ҡорбанғәлиев ише эйәрсәндәренән дә яҡлау тапмай, ә Ғәбделхәй шул уҡ мәсьәлә буйынса уның Совет власы менән бәйләнешкә инергә тырышыуын яратмай. Һәм ошо ике позиция уларҙы ҡан дошманға әүерелдерә. Эш шуға барып етә ки, Ырымбурҙа Каруанһарай паркында

Башҡорт ғәскәренең парады барған саҡта Ғәбделхәй пропагандаһына бирелгән бер төркөм һалдат Вәлидиҙе үлтереү ниәте менән уға ташлана. Был көтөлмәгән хәлде Вәлиди “беҙҙең офицерҙар үлтергән Минһаждың үсен алырға теләүе” менән аңлата.

Был ваҡиғанан һуң, “Хәтирәләр”ҙә әйтелеүенсә, Ғабиҙулла ишан, улы Ғәбделхәй өсөн ғәфү үтенгән һымаҡ, Зәки Вәлидигә килеп етә. Башҡортостан хөкүмәте башлаған хәрәкәт уйын эш түгеллеген аңлаған Ҡорбанғәлиев, “тире турһыҡҡа ҡымыҙ тултырып, башҡа бүләктәр менән Силәбегә килеп, мине күрҙе. Ғәфү үтенде. Офицер улы Һарунды беҙгә хеҙмәт итергә ебәрәсәген әйтте. Шулай итеп, Минһаждың үлеме арҡаһында Башҡортостан эсендә беҙгә ҡаршы (Милли хәрәкәткә ҡаршы тип аңларға кәрәк. — **Авт.**) хәрәкәт булдырыу мөмкинлеге юҡҡа сыҡты. Был беҙҙең өсөн ҙур ҡаҙаныш ине”, — тип кинәнес белдерә Вәлиди.

Ләкин ҡыуаныс кисерергә иртәрәк булып сыға. Вәлиди, 1919 йылдың яҙында Колчактан төңөлгәс, уны ташлап, Советтар яғына сыға. Ғәбделхәй иһә, Себер хөкүмәтенән айырыла алмайынса, Алыҫ Көнсығышҡа тиклем сигенә.

Башҡортостан тупрағынан китеп, ҡалын урмандар, һаҙлыҡтар аша фажиғәләр тулы биш мең километр юл үткән башҡорт полкының яҙмышы, башҡорттарҙың атаман Семенов, барон Унгерн ғәскәрҙәренең ышаныслы терәге булып тороуы, ә М. Ғ. Ҡорбанғәлиевтың урыҫ армияһында ярайһы уҡ ҙур дәрәжә биләп, урыҫ милләтле офицерҙарҙың башҡорттарҙы йәберләүенә ҡаршы көрәшеүе тураһында “Ватандаш” журналы яҙып сыҡҡайны инде (1997 йыл, 8—9-сы һандар). Шуға күрә беҙ башҡорт полкы командиры Ғәлимйән Тағандан (Тағанаевтан) тарихи ҡомартҡы булып ҡалған документтарға туҡталып тормайбыҙ. Шулай ҙа уларҙағы һәм башҡа рәсми документтарҙағы Ғәбделхәйгә ҡағылышлы мәғлүмәттәрҙе күҙҙән ысҡындырмайынса, ҡайһы бер фекерҙәрҙе генә әйтергә батырсылыҡ итәбеҙ.

1918 йылдың 1 мартында “Башҡортостан” гәзите яңы ғына ойошторолған Башҡортостан Ваҡытлы Революцион Советының ҡарары тураһында хәбәр итә. Ҡарарҙың 9-сы пункты Ғәбделхәй Ҡорбанғәлиевҡа бағышлана. “Самодержавиены нығытыу яғында булған, әлегә тиклем байыу маҡсатында (?) башҡорттар араһында һуғыш асырға тырышҡан Ғәбделхәй Ҡорбанғәлиевты ҡулға алыу тураһында приказ таратырға”, — тиелә унда. Ҡарарҙың большевиктар позицияһында торған БВРС (А. Дәүләтшин. Ф. Солтанбәк, Ғ. Алпаров, Бәхт. Шәфиев һ.б.) тарафынан сығарылғанын онотмайыҡ.

Ә бына вәлидовсыларҙың 1919 йылдың 18 февралендә башҡорт һалдаттары араһында тараткан (И. Алкин имзаһы менән) өндәмәһе. Унда Башҡорт ғәскәрҙәре командованиеһы Совет власының Башҡортостан мөстәкиллегенә ҡаршы килмәүе, ә Дутов, Колчак менән бергә "һатлыҡ йән Ҡорбанғәлиевтар"ҙың ҡаршы тороуы аңлатыла.

Бер-береһе менән ут та бысаҡ булып йәшәгән ике лагерь әҙерләгән документтар былар. Уларҙың икеһендә лә Ҡорбанғәлиевҡа ҡарата бер үк төрлө мөнәсәбәт — дошманлыҡ хисе.

1919 йылдың 19 февралендә РСФСР хөкүмәте вәкилдәренең Башҡортостан хөкүмәте делегацияһы менән алып барған һөйләшеүҙәрендә Ҡорбанғәлиевтар хаҡында әйтелгән һүҙҙәр иғтибарҙы йәлеп итә. Башҡортостан хөкүмәте делегацияһы етәксеһе М. Ҡулаев унда бына ни ти: "Ҡорбанғәлиевтың булышлығы менән ике кантон Башҡортостан хөкүмәте йоғонтоһонан тартып алынды. Ҡорбанғәлиев башҡорт халҡы исеменән Колчакка шуны белдерә: башҡорт халҡы, йәнәһе, элек-электән бер генә власты яҡлаған". РСФСР хөкүмәте вәкиле В. Смирновтың: "Барыһы ла беҙҙең ҡул аҫтында тип раҫлайһығыҙ, ләкин беҙ бында һөйләшеүҙәр алып барған арала башҡорт саңғысылары, һеҙҙең "ҡырағай дивизия" тип аталған частар Колчак менән бергәләп беҙгә ҡаршы һуғыша", — тип дәғүә белдерә, һәм Ҡулаев быны танымайынса булдыра алмай. "Беҙҙең полктарҙың береһе — 3-сө полк — Колчак яғында ҡалды, — ти ул. — Беҙ уны тартып ала алманыҡ".

Был тәңгәлдә 1918 йылдың көҙөндә булған ваҡиғаларҙы иҫкә алыу урынлы булыр. Вәлиди етәкселегендәге Башҡорт хөкүмәте, Ырымбурҙан Силәбегә ҡасып килгәс, милли ғәскәр төҙөү мәсьәләһендә Ҡорбанғәлиевтарҙың ярҙамына таяна. Һуңғылары, I Башҡорт съезында (1917 й. 19 июль) мөстәкил милли ғәскәри частар ойошторорға кәрәк, тигән фекергә тоғро ҡалып, башҡорт милли полктарын төҙөүгә ҙур өлөш индерә, аҡса менән ярҙам итә. Ул ғына ла түгел, Силәбе-Златоуст тирәләрендә Мөхәммәт Ғәбделхәй һәм Ғәлимйән Таған тарафынан төҙөлгән һәм улар етәкселек иткән 3-сө полк Башҡорт ғәскәренең иң берҙәм, иң уҫал хәрби берәмеге булып танылa. Ошо уҡ полкта уның 1-се батальонына Ғабиҙуллаң икенсе улы Мөхәммәт Һарун командалыҡ итә.

Ошонан сығып ҡына ла Ҡорбанғәлиевтарҙы башҡорт милли-азатлыҡ хәрәкәтенә ҡаршы көрәшкән тип түгел, ә ошо ҙур хәрәкәттең айырым бер тармағына етәкселек иткән, үҙенсәлекле рәүештә башҡорттарҙың азатлығы өсөн һуғышҡан, тиһәк, дөрөҫөрәк булыр ине.

Ғəбделхəйҙең өҙөк-һурыҡ документтарҙан тормош юлын байҡағанда ла уның һəр аҙымды башҡорт халҡы мəнфəғəтенəн сығып яһауын күрергə була: ҡоролтайҙарҙа Ғəбделхəй башҡорт ерҙəрен һатыуға ҡырҡа ҡаршы сыға, тик ниңəлер, “үҙе өсөн яңы белəмəлəр алырға тырыша”, тигəн һүҙҙəр ишетə; Ш. Манатов 1918 йылдың ғинуар башында Учредительный Йыйылышта ҡатнашыу өсөн һəм Башҡорт Автономияһын төҙөү тураһында һөйлəшеү өсөн В. Ленинды күрергə тип Петроградҡа барырға сыҡҡас, уны Ғəбделхəй оҙатып бара (Ш. Шəриповтың раҫлауынса).

Петроградтан Ҡорбанғəлиев 1918 йылдың авгусында ғына (фронт аша!) ҡайта. Өфөлə булғанында уның 1919 йылдың 17 апрелендə Омскиға Колчактың махсус бүлегенə (особый отдел), полковник Федоровҡа яҙған хаты һаҡланған. Был хатта Ҡорбанғəлиев Өфө Мосолмандар дини идаралығының башҡорттарҙы татарлаштырыу сəйəсəте уҙғарыуы тураһында хəбəр итə һəм башҡорт халҡы мəнфəғəтендə ошо учреждение бинаһын (ул бик ҙур, ти) ваҡытлыса тартып алырға кəрəк, тип тəкдим индерə һ. б.

Мөхəммəт Ғəбделхəй 3-сө полк менəн биш мең саҡырымлыҡ юлға ҡуҙғалғас, артынан ғаилəһе лə китə. Ҡорбанғəлиевтар Петропавловскиҙа осрашырға тейеш була. Лəкин сəйəхəттəренең башында уҡ аҡ казактар тарафынан таланып, ниндəйҙер бер станцияла тороп ҡала. Артабан ҡыҙыл частар уларҙы ҡулға ала. Ғабиҙулла кескəй улы, 16 йəшлек Əбделвəли менəн Стəрлетамаҡҡа килтерелеп, хөкөм ҡарамағына тапшырыла. Ишан яҡлашыуҙы һорап, ул саҡта Башревком рəйесе булған З. Вəлидовҡа мөрəжəғəт итə. Лəкин бынан бер ни ҙə килеп сыҡмай. Ишанды һəм уның улын Ашҡаҙар йылғаһы буйына сығарып аталар.

Шулай итеп, Ҡорбанғəлиевтар һəм Вəлиди araһында бергə эш итерлек аңлашыу булғандыр тип əйтерлек түгел. Лəкин, ҡайһы бер документтарға эйəреп, Ҡорбанғəлиевтарға “батша яҡлы реакционерҙар” тип ҡырҡа баһа биреү үтə лə ябай, бер ҡатлы ғына, тимəк, бик үк тулы баһа булмаҫ ине. Эш бында беҙ уйлағандан күпкə ҡатмарлыраҡ. Ғəбделхəйҙең Силəбе тирəһендəге башҡорттарҙың байтағын үҙе артынан эйəртə алыуына ҡарағанда, ул етəклəгəн хəрəкəттең социаль базаһы ныҡлы ғына, идеялары ла əүрəтерлек кеүек күренə. Əлегə хəтлем Ҡорбанғəлиевтарҙы “монархист” тигəн ҡалыпҡа ғына биклəп, башҡорт милли хəрəкəтенə яҡын юлатмай килделəр. Лəкин улар башҡарған эштəрҙе ентеклəберəк тикшергəндəн һуң, фекер ҡырҡа үҙгəрə һəм, Ғəбделхəйҙең ҡараштары З. Вəлидиҙекенəн əллə ни айырылмай, Ғ. Ҡорбанғəлиевтың сəйəсəте һуңғыһының: “Беҙ большевиктар ҙа,

меньшевиктар ҙа түгел, беҙ башҡорттар ғына", — тигән оҫҡор һүҙҙәренән бик алыҫ та түгел, тигән һығымта яһарға тура килә.

Билдәле булыуынса, З. Вәлидовтың Совет власы менән һөйләшеүҙәр башлап ебәреүенең төп маҡсаты — Төркөстанға, шуның эсендә Башҡортостанға ла, мөстәҡиллек алып биреү. Иң мөһим пункттарҙың береһе — Башҡорт ғәскәрҙәрен тарҡаттырмау, милли хәрби берәмек алып ҡалыу. Ләкин был теләк бойомға ашмағас, ул Төркөстан территорияһына китеп, Советтарға ҡаршы һуғыш иғлан итә.

Күп йәһәттән Ғәбделхәй Ҡорбанғәлиевтың маҡсаты ла шуға бик оҡшаш: Рәсәй батшалығы яғында булһа ла, большевиктар булмаған шарттарҙа Башҡортостанды башҡорттар өсөн һаҡлап алып ҡалыу, башҡорт халҡының дәүләт кимәлендә территориаль хоҡуҡтарын яҡлау, милли мәҙәни автономия булдырыу. Алыҫ Көнсығышҡа барып сыҡһа ла, урыҫтар армияһында Башҡорт ғәскәрен хәрби берәмеккә әйләндереү. Икеһенең дә маҡсаты оло, бер иш, юлдары ғына төрлө (Тарихтың хикмәте: хәҙерге күҙлектән сығып, икеһен дә яманлап булмай).

Үҙ маҡсатына өлгәшеү өсөн Ғәбделхәй, Вәлиди кеүек үк, Башҡорт ғәскәрҙәренең үҙ аллы идаралығын, милли башҡорт хәрби берәмеген төҙөү буйынса аҡ армияның Каппель, башҡа генералдары менән ҡат-ҡат һөйләшеп ҡарай, хатта ошо ниәт менән япон ғәскәрҙәре командованиеһы менән дә бәйләнешкә инә. Ләкин урыҫ генералдары Ҡорбанғәлиев тәҡдимдәрен кире ҡаға. 1920 йылдың 14 мартында ғына Ҡорбанғәлиев, атаман Семеновтың буйһоноуына ингәс, атаман "башҡорттарҙың теләген ҡәнәғәтләндереүгә әҙер булыуын" белдерә. Ләкин был юлы ла уңышһыҙлыҡҡа осрай: юғары хәрби кәңәшмәлә урыҫ генералдары армияны милләтләштереүгә ҡаршы төшә.

Шунда илдә ҡалған Башҡорт ғәскәрҙәренең, ҡыҙылдар яғына сыҡҡас, башта ҡоралһыҙландырылыуын иҫкә төшөрөү урынлы. Аҙағыраҡ уларҙың айырым полктары, Көнбайыш фронтҡа ебәрелеп, юҡҡа сығарыла. Илдән ситкә китеп, Байкал аръяғына барып еткән ике меңгә яҡын башҡорт һалдаттарын да шул уҡ яҙмыш көткән була: үҙ аллы хәрби берәмек була алмайынса, улар таралып бөтә. Һөҙөмтәлә (икеһендә лә ултырып иларлыҡ!) Башҡорт ғәскәрҙәренең эске милли мәнфәғәтен ҡәнәғәтләндереү йәһәтенән элек Зәки Вәлиди менән Муса Мортазин Колчактан бер ниндәй ҙә яҡлау тапмаһа, хәҙер Ҡорбанғәлиев та Алыҫ Көнсығыш армияһы командованиеһынан — Каппель, Семеновтарҙан һуҡыр тинлек тә файҙа күрмәй. Урыҫтарҙан башҡа бер милләткә лә ташлама яһалмаясағын һуңлап, бик һуңлап аңлап ала Ғәбделхәй ҙә. Юҡҡа

түгелдер, моғайын, Әхмәтзәки Вәлиди "Хәтирәләр"ендә Ғәбделхәйҙең үҙ хатаһын таныуы, Ғәлимйән Таған аша Вәлидиҙән ғәфү үтенеүе тураһында яҙа.

Бына ошолай күңелһеҙ тамамлана Ҡорбанғәлиевтың хәрби миссияһы. Ғәбделхәй ҡоралдаштары менән Ҡытай сиге аша үтә, 1925 йылға тиклем Маньчжурияла йәшәй, унан Японияға күсеп китә. Ғәбделхәйҙең дини эшмәкәрлек осоро башлана.

1927 йылдың ғәйет мәжлесендә, яҙмыш ташҡынына эләгеп Японияға барып сыҡкан башҡорт һәм татарҙар балаларының мосолман йолаларын, үҙҙәренсә уҡыу-яҙыуҙы онотоуҙары хаҡында гәпләшеп ултыра. Әмәлгә дарыу тигәндәй, мәхәллә ағзалары араһында имам һәм мөҙәррис Мөхәммәт Ғәбделхәй Ҡорбанғәлиевтың да булыуын белеп ҡалғас, уны күтәреп алалар. Һәм Ғәбделхәй, диндәштәренең үтенесе буйынса, Япония хөкүмәтенә мөрәжәғәт итә. Шул уҡ йылдың 2 октябрендә хөкүмәттең ризалығы менән башланғыс мосолман мәктәбе асылып, дини һәм милли дәрестәр бирелә башлай. Ун йыл үткәс, был мәктәп, рәсми талаптарға яуап бирерлек хәлгә килтерелгәс, рәсми уҡыу йорттары рәтенә индерелә. Ул өс кенә бүлмәне биләй.

Хөкүмәт мосолман мәктәбенең мөдире итеп Мөхәммәт Ғәбделхәйҙе раҫлай. Татарстандың "Гасырлар авазы" журналы (1996, 1/2) яҙыуынса, бында беренсе имтихан 1928 йылда булып, 6-сы синыфты 4 шәкерт, 1929 йылда улар 7-се синыфты тамамлай. 1930 йылда — 22, 1931 йылда — 21 шәкерт, 1933 йылда 33 шәкерт уҡый.

Мәктәптең эске малия (финанс) эштәрен Сания Ҡасимия алып бара. Уға 7 кешенән торған башҡарма һәйәт булышлыҡ итә: Мөхәммәт Ғәбделхәй хәҙрәт (рәйесе), ағзалары: Закир Шакири, Хужәхмәт Ваһап (сәркәтип), Сабир Жамил, Закир Илмәти, Мотаһар Яхши, Әхмәт Мөхтәсиб.

1932 йылдың 2 октябрендә, мәктәптең асылыуына биш йыл тулыу айҡанлы, байрам ойошторола. Банкетта Японияның ҙур ғилем эйәләре ҡатнаша.

Ғәбделхәй хәҙрәт Токиола мосолман общинаһына етәкселек итә, мәҙрәсә, типография төҙөтә. Ғөмүмән, нәшриәт эшен яйға һалыу буйынса күп эш башҡара ул. Үҙе лә ижад итә. Уның, мәҫәлән, 1924 йылда нәшер ителгән "Пан-славизм һәм Урал-Алтай халыҡтары", "Һинд-Европа һәм Урал-Алтай халыҡтары" тигән хеҙмәттәренең Японияла һаҡланыуы асыҡланды.

Әлбиттә, башҡорт кешеһенең шулай ҙур эшмәкәрлек йәйелдереп ебәреүе ҡайһы бер әҙәмдәргә оҡшамай. Бында татарҙарҙың күренекле шәхесе Ғаяз Исхакиҙың да килеүе, мосолмандар менән

етәкселек итеүҙе үҙенә тартып алырға тырышыуы һәм башҡорттарға бойкот иғлан итеүе билдәле. Ошо арҡала был ике абруйлы заттың, үҙ-ара низағлашып, һуғышып китеүе лә мәғлүм.

Ғәбделхәйҙең иғанә аҡсаһына мәсет һалдырып, үҙ халҡына (төркиҙәргә) күрһәткән хеҙмәте ҙур маҡтауға лайыҡ. Тыуған яҡтың тарихын яҡшы өйрәнгән һәм һуңғы ваҡыт Миәс ҡалаһында йәшәгән Мөхәмәтғаяз Байбуриндың һөйләүенсә, мәсет һалынып бөткәс, Мөхәммәт Ғәбделхәй хәҙрәт уны күрһәтеү өсөн Япония императорын саҡырған икән. Мәсет ҡыйығы аҫтына оҙон итеп алтын хәрефтәрҙә башҡарылған ғәрәп һүҙҙәренә төртөп, император:

— Бында нимә тип яҙылған? — тип һорай.

— "Лә илаһи иллалла, мөхәммәҙрәсулла", — ти Ғәбделхәй.

— Минең исемде яҙғанһығыҙҙыр тип уйлағайным, — ти, кәйефе ҡырылып, император. — Алып ташлағыҙ яҙыуҙы.

— Яҙыуҙы алһаҡ, мәсет үләсәк, — ти хәҙрәт.

Император мәсеткә инмәй, боролоп ҡайтып китә һәм Ғәбделхәй хәҙрәтте буйһонмағаны өсөн Япониянан һөрөргә әмер бирә.

Ғәбделхәй бында Һамар ҡалаһының бер мишәр сауҙагәренең ҡыҙына өйләнгән була. Уларҙың бер улы, өс ҡыҙы тыуа. Ошо ғаиләһен ҡалдырып, Ғәбделхәй Маньчжурияға китергә мәжбүр була. Бында ул имам-хатип булып, һаман мосолман динен таратыу менән шөғөлләнә.

1945 йылда Совет Армияһы Маньчжурияны баҫып алғас, тағы ла М. Байбуриндың раҫлауынса, Ғәбделхәй хәҙрәт, Солтанғәлиев, казак атаманы Семенов менән бергә — бөтәһе дүрт кеше — беҙгә әсирлеккә төшә. Ғәбделхәй Совет Армияһы командованиеһына үҙенең сәйәсәт менән башҡаса шөғөлләнмәйәсәген белдерә һәм, И. Сталинға мөрәжәғәт итеп, мин шундай-шундай кеше булам, Токиола йәшәнем, ете дәүләттә китап баҫтырҙым, һеҙгә кәрәгем булыр, беҙҙе былай ғына әрәм итмәгеҙ, тип үтенә. Был һорауға И. Сталин ошондай әмер бирә: әсирҙәрҙең өсөһөн атырға, Ғәбделхәй Ҡорбанғәлиев тураһында өҫтәмә материалдар йыйып, миңә күрһәтергә.

Йыялар, күрһәтәләр. Сталин, Совет власы тураһында ниндәй фекерҙәһегеҙ хәҙер, тип ҡыҙыҡһына, имеш. Ҡорбанғәлиев тура яуап биреүҙән тайпыла.

— Мин диндең нисек бөтөүен генә беләм, — ти ул һәм диндең балалар уйынсығы кеүек кенә булыуын, әгәр дини китаптар баҫып сығарып тормаһаң, уның онотоласағы хаҡында әйтә.

— Ярар, китап яҙ, — ти Сталин, һәм Ғәбделхәй бер йыл күҙәтеү аҫтында ижад эше менән шөғөлләнә. 50 битлек китап яҙылып бөткәс, Сталин тағы саҡырта.

— Ҡайҙа торорға теләйһең? — тип һорай.

— Кире Японияға ебәрегеҙ*. Унда революция, переворот яһаясаҡмын.

— Юҡ, ситкә ебәрә алмайбыҙ.

— Ул саҡта Төркиәгә китергә рөхсәт итегеҙ.

— Юҡ, ситкә ебәрмәйбеҙ. Бында эш бирербеҙ.

— Ул саҡта Силәбелә йәшәргә рөхсәт итегеҙ. Унда йортом да бар, атайым йорто.

Иркенлек алғас, Ғәбделхәй хәҙрәт тура Силәбе яғына, тыуған ауылына ҡайтмай, ә нисектер бер делегация составына эләгеп, сит илгә сығып китә, унан Төркиәгә юллана.

Төркиәлә Ғәбделхәй бер ҙур яҙыусы аша Зәки Вәлидиҙе табып ала.

— Рәхим итегеҙ, — тип, ихлас ҡаршылай ул элекке дошманын.

Араларында күп һүҙ булмай. Вәлиди шуны ғына әйтә:

— Иптәшеңде ҡарап торҙом. Балаңды үҙең менән ала алаһың. Тик ҡатының икенсе кешегә сыҡты.

Ғәбделхәй уйланып тора ла әйтә, имеш:

— Ярар, тормошта төрлөһө була. Йәшәп ятһындар, әйҙә.

Ғәбделхәй һаубуллаша ла сығып китә.

Был хәлде миңә Байбурин ҡарт 70-се йылдарҙа уҡ әле һөйләгәйне. Үкенескә ҡаршы, һәр һүҙен ентекләп яҙып барылмаған. Хәҙер ҡайһы бер нәмәләр аңлашылып етмәй. Очерктың башында Зәки Вәлиди менән Ҡорбанғәлиевтар араһында шәхси планда ла ниндәйҙер конфликт булыуына ишара яһағайныҡ. Һуғыштан һуң булған осрашыуҙан да сер асылмай. З. Вәлиди быға "Хәтирәләр"ендә лә бер нисек тә асыҡлыҡ индермәй. Тик былай тип кенә яҙып китә ул: "Бөгөн ғаиләһе (Ғәбделхәйҙең. — **Авт.**) Токиола, бер ҡыҙы Төркиәлә булып (ҡайһы ҡыҙы, ул нисек Төркиәгә барып сыҡҡан? — **Авт.**), икеһе лә русса һәм инглизсә уҡыны".

М. Байбуриндың хәтерләүенсә, ғаиләһенең Төркиәлә һәйбәт кенә йәшәп ятыуын белеп ҡайтҡан Ғәбделхәй Силәбелә тағы бер ҡот осҡос хәбәр ишетә: баҡһаң, Вәлиди уның атаһын, тағы ҡустыһын аттырған, имеш. Шуны белеп алғас, Ғәбделхәй хәҙрәт үҙ сәсен үҙе йолҡа, Зәки менән ипле һөйләшеп ултырыуына йәне көйә.

Был хәбәрҙең күпмеһе дөрөҫ, дөрөҫкә ниндәй ялған өҫтәлгән — әйтеүе бик ҡыйын. Әммә был ике тарихи шәхес — З. Вәлиди менән Ғ. Ҡорбанғәлиев араһында, тағы ла киңерәк планда алғанда, ике ҙур зат — Зәйнулла ишан менән аҡһаҡ Ғабиҙулла ишан араһында

* Ошо хаҡта Сталинға Японияла тороп ҡалған улы ла үтенес яҙып ебәрә. Ләкин быны файҙаһы теймәй.

бөткөһөҙ тарткылаш булғанлығы ғына бәхәсһеҙ. Быны тулыһынса асыҡлау буйынса тарихсыларға эш етерлек.

Ғәбделхәй хәҙрәт Силәбегә ҡайта, тинек. Уны бындағы мосолмандар яҡшы белә. Бер мәжлестә, Ғәбделхәй бик ғилемле кеше, күпте белә, тип, маҡтап ултыралар. Тик ҡунаҡтар араһында Мөжәһит тигән әҙәм: "Сталин уны төрмәнән тиккә генә сығармаған", — тип шик тыуҙыра. Хәй үҙе лә Силәбегә юкка ғына килеүен, бында төпләнеп, яңылышлыҡ эшләүен аңлай.

Икенсе бер урында тағы мәжлес ҡоралар. Беренсе булып әлеге Мөжәһит бара. Байға: "Ғәфү ит, иртәрәк килдем бит әле", — ти. "Бик яҡшы эшләгәнһең, — ти бай. — Һөйләшеп ултырырһығыҙ, һин түрге өйгә ин".

Инһә, күреп ҡала, мейес артында, креслола Ғәбделхәй ултыра.

— Һу! Минән дә иртә килгән кеше бар икән! — ти ул, уңайһыҙланып.

— Йә, хәлдәр нисек, Мөжәһит?

Иҫәнлек-һаулыҡ һорашҡас, Ғәбделхәй хәҙрәт Мөжәһиттән уның хаҡында нимәләр һөйләп йөрөүен һорай. Мөжәһит, һөйләмәнем, тип танғас, Ғәбделхәй үҙенең Сталин менән һөйләшеп ҡайтыуын, сәләмәтлегенең бик ҡаҡшауын, өйөнә лә кермәйенсә ситкә барып ҡайтыуын һәм, Силәбелә булмаһа, башҡа ерҙә урын табасағын әйтә.

Ғәбделхәй 1972 йылдың 22 сентябрендә Силәбе ҡалаһында донъя ҡуя.

Бына шундай асы яҙмыш. Үҙенсә бөтә Башҡортостан бәхете өсөн ал-ял белмәй көрәшкән, Урал ҡаяларынан алып Япония утрауына тиклем биш мең саҡырымдан ашыу бәлә-казалар тулы юл үтеп тә файҙалы бер ни тапмаған бер башҡорт укымышлыһының тормошо. Сит яҡтарҙың ҡояшынан ғына түгел, хатта тыуған тупрағынан да биҙә төшкән һәм ҡанаты ҡайырылған ҡарағоштоң һуңғы көндәре.

*1998 й.*

# VI. Ҡыҙыл партизандар

Ҡыра-ҡыра булып, төньяҡтан ҡайҙалыр Әбйәлил, Баймаҡ яҡтарына һуҙылып киткән Урал армыттарының иң бейек ҡаяларының береһе Уйташҡа менһәң, баш әйләнерлек юғарылыҡтан Башҡортостан тигән бөйөк илдең көнсығыш өлөшөнөң бөтә хозурлығын айырыуса тояһың. Тәбиғәт мөһабәтлеге генә түгел, тыуған яғыбыҙҙың бөгөнгөһө лә, уның үткәне лә айырым асыҡ булып күҙ алдына килеп баҫа кеүек бына ошонда. Иртәнсәк бөтә күк йөҙөн иңләп, әлегә нурһыҙ, әллә шуға күрә ғәйәт ҙур булып тойолған ҡояш ҡалҡһа, тирә-яҡтағы ҡаяларҙы балҡытһа, бе́р аҙҙан түбәндә күлдәр, йылғасыҡтар үҙ-ара ярышырға, йылтырашырға тотона. Иң яҡындағы ауылдар — Ҡужай, Шәрип, Балбыҡ, Кинйәкәй — ус төбөнә килеп ятҡандай була. Унан, күкһел томан пәрҙәһен йыртып, Миәс күле йылҡылдап ҡуя, туп-тура Силәбе өлкәһенең Уйск, ә уң ҡулда Учалы төҫмөрләнә.

Тыуған яғымдың ауыл, ҡалалары... Юғарынан тамаша ҡылып торғанда, ирекһеҙҙән, уларҙың яҙмышы — Башҡортостандамы ул, күрше өлкәләме, — бөтәһенең дә яҙмышы бер төйөнгә төйнәлгән, тигән уй тыуа. Йылҡы йәки һарыҡ көткәне лә, алтын йыуып, суйын сүкегәне лә — ҡара тирен түгеп көн күргән һәр әҙәми зат, бергәләп бәхет эҙләп ҡаңғырған. Уны табып ҡыуанған, яңылышып, ҡайғырған.

Уй алыҫ 1918—1919 йылдарға алып китә, һәм миңә, сәскәләр менән биҙәлгән ошо үҙәндәрҙе дер һелкетеп, һыбайлылар һайт-һайтлап сабып үткән кеүек тойола. Улар менән бер ҡатарҙан Уй, Ҡыйҙаш йылғалары буйлап, ҡылғанлы яландарҙан казактар ташҡыны ағыла. Ҡайһыны — ҡыҙыл, ҡайһыны — аҡ. Белмәҫһең. Әле хәрби берәмек булып ойошоп етмәгән Совет власы яҡлыларға ярҙамға тип төньяҡтан текә Урал һырттары аша Златоуст эшселәре отрядтары ашыға. Улар ҙа был яҡҡа тик ғәҙеллек кенә алып килгән тип әйтеүе хәҙер ауыр. Яҡшыһы менән яманын да өҫтәгәндәр. Һәр хәлдә, төрлө көстәр бәрелешеп, болалар ҡуйырған, бына ошо Уйташ, Ирәмәл, Бәләкәй Ирәндек буйҙарын пулеметтар тыҡылдауы тултырған, аттар кешнәп ауған, ҡандар ҡойолған...

Ә бит былар бер ҙә уйлап сығарылмаған, ошо күҙ күреме төбәктәрҙә ҡаты бәрелештәр булып уҙған, уларҙың шаһиты булып партизандар ҡәберҙәре тумтайып ятып ҡалған.

Үкенескә ҡаршы, В. К. Блюхер етәкселегендәге партизандар армияһының аҡтар тылынан рейд яһауы хаҡында күп кенә китап нәшер ителһә лә, уның армияһы ойошҡан беренсе осор, бигерәк тә Учалы тирәләрендәге һуғыштар тарихта бер нисек тә сағылыш

тапмаған. Ошо етешһеҙлекте бер аҙ ғына булһа ла бөтөрөргә тырышып, автор, Граждандар һуғышында ҡатнашҡан кешеләрҙең үҙҙәре менән әңгәмәләшеп һәм яҡын-тирәләге музейҙар материалдарына таянып, төпкөлдәге халыҡтың Совет власын яулауҙа нисек ҡатнашыуы тураһында һөйләмәксе.*

Башҡортостандың күпселек өлөшөндә Совет власы 1917 йылдың октябрь аҙаҡтарында урынлашып бөтһә лә, уның көнсығыш яғында, шул иҫәптән Типтәр-Учалы, Ахун, Күбәләк-Тиләү, Туңғатар волостарында, ул ауырыраҡ нығына. Быға күрше аҡ казактарҙың ҡаршы тороуы, шулай уҡ башҡорт халҡының төп хыялын — автономия алыу мәсьәләһенең оҙаҡ хәл ителмәүе, милли-азатлыҡ хәрәкәтен аңлап етмәү — былар барыһы ла Совет органдарының нығыныуына ныҡ ҡамасаулыҡ итә. Ырымбур губернаһының бай казактарында ныҡлы таяныс табып, сығышы менән Үрге-Яйыҡ тирәһенән булған полковник Дутов Советтарға ҡаршы һуғыш иғлан итә. Илдең үҙәктәге пролетар районларын бай Себер икмәгенән мәхрүм итеү уйы менән ул Силәбене, уның тимер юлын баҫып алырға йыйына. Көньяҡ Уралда хәлдәр әлегә тиклем күрелмәгәнсә ҡырҡыулаша.

Урал пролетариатының дутовсыларға ҡаршы көрәшен ойоштороу өсөн большевиктар партияһы ашығыс саралар күрергә мәжбүр була. Ғәҙәттән тыш комиссар итеп тәғәйенләнгән тимер юлсы П. Кобозев 1917 йылдың ноябрь урталарында Ырымбур, Һамар, Златоуст ҡалаларында Ҡыҙыл гвардия отрядтары ойоштора башлай. Боевой дружиналар Белорет, Троицк ҡасабаларында, Баймаҡта ла төҙөлә. Дутовҡа ҡаршы Һамарҙан 500 кешелек отряды менән В. К. Блюхер, ә Петроградтан 17-се Себер полкы юлға сыға.

Был полкта Учалы егеттәре лә байтаҡ була. Элекке ҡыҙыл партизан Дәүләтбай Лоҡмановтың раҫлауынса, Туңғатар волосының Ҡарт Муйнаҡ ауылынан ошо хәрби берәмектә бер туған Хәмзә, Хәсән Әлимсуриндар, Хөснулла Бураншин, Мәхмүт Мөхәмәтйәров, Мөхәмәтша Шаһарғазиндар хеҙмәт итә. Улар, декабрь урталарында Екатеринбургҡа килеп етеп, унан Троицкиға йүнәлә. 22—26 декабрҙә уңышлы операциялар үткәргәндән һуң, полк Троицкиҙан атаман Токаревты ҡыуып сығара һәм Ырымбур эргәһендә торған Кобозевҡа ярҙамға ашыға.

---

*Иҫкәрмә: Автор был һуғыштарҙы төрлө күҙлектән ҡарап сағылдырыуҙы бурыс итеп ҡуйманы. Ул башлыса Учалы районының ҡыҙыл партизандар яғында йөрөгән Ахун, Илсе, Иманғол ауылдарынан сыҡҡан яугирҙарҙың һәм элекке КПСС өлкә комитеты архивында һаҡланған бер яҡлыраҡ документтарға нигеҙләнеп кенә яҙҙы был очеркты. — **Авт.**

1918 йылдың 18 ғинуарында берләшкән Урал отрядтары Ырымбурҙы аҡ казактарҙан таҙарта

Дутов 300 кешелек ғәскәре менән тыуған төйәгенә Үрге-Яйыҡҡа ҡасып ҡайта. Үрге-Яйыҡ ҡалаһы — ул саҡта ун дүрт станцияны, өйәҙҙәге урыҫ ауылдарын, Белорет округының бер төркөм заводтарын берләштергән эре административ үҙәк. Был өйәҙгә хәҙерге Учалы районының яртыһы — типтәрҙәр йәшәгән Типтәр-Учалы, Ахун, башҡорт халҡы төбәге Күбәләк-Тиләү волостары ла инә.

Ҡалала быға тиклем үк эшсе һәм һалдат депутаттары Советы төҙөлөүгә ҡарамаҫтан, Дутов тап ошонда үҙ фетнәселәрен ҡайтанан туплап алырына өмөт тота. Ул бигерәк тә округтағы таныш офицерҙарға, буржуазияға, эсерҙарға арҡалана. Өйәҙ үҙәгенән төньяҡтараҡ ятҡан ҙур мишәр ауылы Ахун байҙары ла атамандың килеүен көтөштөрә. Быны яҡшы аңлаған Дутов отрядтары, әленән-әле ауылға инеп, Совет активистарын, большевиктарға теләктәшлек белдергән фронтовиктарҙы эҙәрлекләй башлай.

Үҙ аллы дәүләт ҡоролошо алырға тырышҡан башҡорт интеллигенцияһын да күҙҙән ысҡындырмай Дутов. Уның ҡанаты аҫтында элекке Башҡорт хөкүмәте ағзалары 1918 йылдың ғинуар аҙағында Үрге-Яйыҡта үҙҙәренең съезын үткәрә. Башҡорт ярлылары Әхмәтзәки Вәлиди артынан эйәрә, ләкин Белорет, Тирлән, Ҡағы, Үҙән урыҫтары, улар артынан Типтәр-Учалы, Ахун волостары вәкилдәре лә, съездың маҡсатын оҡшатмайынса, уны ташлап сыға. Шулай итеп, был төбәк халҡы икегә айырыла.

Ошо осорҙоң ни тиклем ҡатмарлы булыуын Белорет большевиктары етәксеһе П. В. Точисскийҙың Өфө губернаһы ревкомына ебәргән хаты ап-асыҡ һөйләй. “Хөрмәтле иптәштәр. 25 ғинуарҙа Ырымбур янында ҡыйратылған казактар Үрге-Яйыҡҡа килеп тулды һәм Вур-Фурштадт биҫтәһендә урынлашты, — тип яҙа ул. — Офицерҙар бик асыулы, урам буйлап төркөм-төркөм булып йөрөйҙәр. Оло йәштәге казактарҙы станцияларына ҡайтарып ебәрҙеләр, ә йәштәр йыйып алынды, улар һуғышҡа инергә әҙер генә тора... Дутов башҡорттарға — Белоретҡа походта ҡатнашырға риза булған һәр кешегә — көнөнә 30 һум түләргә вәғәҙә иткән, тигән хәбәрҙәр йөрөй. Иҫәпләүҙәргә ҡарағанда, ҡалала атҡа менергә әҙер торған 8 мең самаһы казак бар...”

Ҙур көс туплап, Дутов 1918 йылдың февралендә террор кампанияһын башлап ебәрә: Үрге-Яйыҡ ҡала Советын ҡулға ала, ҡыҫҡа ғына ваҡыт эсендә 600-ләгән кешене төрмәгә ташлай. Мәскәүгә поход менән сығыу тураһында хыял йөрөткән атамандың ҡул аҫтында 13—15 мең һыбайлы булған ғәскәр тупланып китә һәм ул бөтә

көнсығыш контрреволюционерҙарына берҙәм фронт йәйелдереү өсөн төп тәрәккә әүерелә.

Дутов менән көрәште әүҙемләштереү өсөн П. В. Точисский етәкселегендә Белорет хәрби дружинаһы нығытыла. Уға тиҙҙән А. И. Чеверев отряды килеп ҡушыла. Тирлән заводында өйәҙ үҙәгенән китергә мәжбүр булған Үрге-Йыйыҡ большевиктарынан һәм Белорет округы эшселәренән 1400 кешелек отряд барлыҡҡа килә. Бер аҙ көс йыйып алғас, РСДРП-ның Белорет комитеты, завод өсөн ҙур ҡурҡыныс килеп тыуыуын күреп, кисекмәҫтән үҙе Дутовҡа ҡаршы операция башлауҙы хәйерлерәк тип таба. Атаманға ҡаршы ике отряд ҡуҙғала. Береһе — Тирләндә ойошторолған Прямицын отряды, ул туп-тура хәҙерге Учалы районының Муса ауылы аша үтеп, Науырҙа ауылында аҡтар заставаһына тап була. Застава тулыһынса ҡыйратыла, тик отряд ни сәбәптәндер, кире Тирләнгә борола. Икенсе көс, И. Волков отряды, 18 мартта Белореттан сығып, оло юл менән бара ла Ҡаҙаҡкол эргәһендә, Ҡайынлы тау итәгендә Дутов заставаһын осрата. Атыш башлана. Застава еңелә, ҡайһы берҙәре ҡасып ҡотола. Уларҙың артынан ҡыуа төшкән Волков, ғәжәпкә ҡаршы, Үрге-Йыйыҡҡа һуғышһыҙ барып инә. Сәбәбе ябай ғына булып сыға: шул көндө Үрге-Йыйыҡ казактары атаманға ҡаршы үҙҙәре баш күтәрә.

Үрге-Йыйыҡ ҡалаһының тыуған яҡты өйрәнеү музейы материалдарына һәм элекке ҡыҙыл партизандарҙың иҫтәлектәренә ҡарағанда, халыҡ күтәрелеше бына нисек башланып китә.

Фурштадтҡа ҡала коменданты поручик Гончаренко килә. Ул мәктәп бинаһына йыйылған казактар алдында телмәр тота һәм, ғәҙәттәгесә, большевиктарҙы яманлай. Йыйын барған мәлдә бүлмәгә, тәрткөләп, бер татар егетен индерәләр. Комендант уны большевиктар шымсыһы булыуҙа ғәйепләй, ә егет, мин Бәләкәй Ахун ауылынан булам, ҡалаға баҙарға китеп барам, тип ныҡыша. Быны күҙәтеп торған элекке фронтовиктар араһында ризаһыҙлыҡ тыуа, улар бер ниндәй ғәйебе булмаған кешене туҡмауҙы туҡтатыуҙы талап итә. Халыҡты мәктәпкә саҡырып килтергән казак Смирнов, түҙемлеген юғалтып, эргәһендә ултырған писарҙың винтовкаһын тартып ала ла уны Гончаренкоға тоҫҡай.

Ҡобараһы осҡан комендант кеҫәһенән пистолетын сығарырға тырыша, тик Смирнов уның пистолетын кеҫәһе-ние менән умыра тартып ала һәм хужаһына атып өлгөрә. Гончаренко ауа.

Ошо көтөлмәгән фажиғә баш күтәреүгә сәбәп була ла инде. Восстание шунда уҡ ҡаланың төрлө урамдарын солғап ала. Баш күтәреүселәр Дутовтың штабын, ҡорал арсеналын, төрмәне баҫып ала.

Ихтилал тураһында ишетеү менән үк Үрге-Йайыҡ ҡала Советы — ул Белоретҡа күскән була — ҡалаға 300 кешенән торған Н. Константинов һәм Н. Фролов (120 кеше) отрядтарын ебәрә. Фролов дутовсыларға ҡаршы Байрамғол, Наурҙа ауылдары эргәһендә уңышлы ғына операция үткәрә. Был хаҡта Үрге-Йайыҡ Советы рәйесе С. Попов Екатеринбургҡа ошондай хәбәр ебәрә: "...Тирләндән сыҡҡан беҙҙең разведка Байрамғол ауылы янында дутовсылар отрядын ҡыйратты. Наурҙала 120 дутовсы юҡ ителде. 213 ат ҡулға төшөрөлдө".

Шул уҡ көндө бер туған Кашириндар ойошторған сотня Фурштадттан ҡалаға бәреп инә. Дутов, Үрге-Йайыҡты ҡалдырып, туған станцияһы Краснинскиға сигенергә мәжбүр була.

Өфөнән бында Михаил Кадомцев етәкселегендәге отрядтың килеүе лә билдәле. Ул, Эҫем, Златоуст эшселәре дружиналарын да берләштереп, көньяҡҡа табан Учалы тирәһендәге волостар аша үтә. Юл ыңғайы уға типтәр ауылдарынан байтаҡ кеше ҡушыла. "Кадомцев кешеләре беҙҙең Иманғол ауылына ла һуғылды, — тип хәтерләй ине партизандар армияһында взвод командиры булып йөрөгән Латиф Ҡаһиров. — Беҙ, Хәким Хәйбуллин, Заһир Таһиров, Мөхәмәтйән Вәлиев, мин, Кадомцевҡа яҙылдыҡ. Ул беҙҙе шунда уҡ Белоретҡа орудие алырға ебәрҙе".

Үрге-Йайыҡта баш күтәргәндәр икән, Дмитрий Каширин ҡарттың малайҙары ғәскәр йыя икән, тигән хәбәр ауылдарға тарала. Яңылыҡты ишеткәс, румын фронтынан ғына ҡайтҡан һәм хәрби учетҡа теркәлергә тейеш булған, ләкин аҡтар тороу сәбәпле, өйәҙ үҙәгенә бара алмай аптырап йөрөгән Илсе ауылы егеттәре лә дәртләнеп китә. Улар, Ә. Кәримов, Закир Шакиров, Фәхретдинов (ҡайһы берҙәренең исемен асыҡлап булманы. — **Авт.**), Шаһикамал Ғәйнуллин, шунда уҡ Үрге Йайыҡҡа барырға сыға. Өйәҙ үҙәгенә барып етеү менән уларҙың һәр береһенә ат бирәләр, ҡылыс тотторалар. Ә иртәгеһенә — яуға. Сөнки 28 мартта Дутов, Краснинск, Ноғайбәк казактарын туплап, һөжүмгә күсә.

Тик инде ҡыҙылдар ҙа ойошоп өлгөрә, улар аҡтарҙың һөжүмдәрен һәйбәт кенә кире ҡаға. Ахырҙа Дутов, һуғыш икенсе көнгә күскәс, ҡыйралышҡа осрап, ҡаса.

Каширинсылар кире ҡалаларына әйләнеп ҡайта. Уларҙы бында тирә-яҡтан йыйылған өҫтәмә көстәр ҡаршылай. Кәримов, Шакировтар ҙа кинәнә, сөнки уларҙың ауылдаштары ла килгән: Вәли Сәғиҙуллин, Шаһикамал Хажиев, Ғәйнетдин Сәғетдинов, Ғиззәт Ғәйнуллин, Сәйҙулла Фәйзуллин, Ғәни Бикчәнтәев, Сәфәрҙән — Әхмәтвәли ҡарт (фамилияһы билдәһеҙ — һуңынан ул походтарҙа Кашириндарҙың атаһы һәм әсәһенең күсере булып йөрөй).

Илсенән, Иманғолдан ғына түгел, башҡа ауылдарҙан да киләләр Кашириндар отрядына: Ураҙҙан — Әһел Хәйерваров, Мансурҙан — Хәким Хажиәхмәтов, Мостафа Сафин, Учалы ауылынан — Мирза Вәлиуллин, Шәймәрҙән Фәйзуллин, Сәләхетдин Бәшәров, Мөбәрәк Шәмсетдинов, Өргөндән — Заһир Ғәрипов, Ҡалҡандан — Мөхәмәтйәр Бәхтиәров, Аҡкужанан — Ғ. Һунаршин, Сәфәрҙән — Әһлиулла Шаһивәлиев, Рәхим менән Әхмәтхан Әхмәтйәновтар, Дәүләт Мөхәмәтрәхимов, Камалетдин Сәләхетдинов, Ғабдулла Мөхәмәтйәров.

Алтмышынсы йылдарҙа, партизандарҙың байтағы иҫән-һау саҡта, мин уларҙың тулы исемлеген төҙөп ҡараным. Ҡатмарлы эш ине был. Шулай ҙа һәр ауыл буйынса һорашып, партизандарҙың үҙҙәренән ҡат-ҡат тикшертеп сыҡҡандан һәм мөмкин тиклем документтар менән нығытҡандан һуң, Учалы районының урта өлөшөнән, күберәк типтәрҙәр йәшәгән төбәктән — Ҡыҙыл гвардияға кәм тигәндә 600 кеше яҙылған, тигән һығымта яһалды.

Әлбиттә, исемлеккә инмәй ҡалғандар ҙа булғандыр. Иң тулы мәғлүмәт — ул Ахун ауылы партизандары тураһында. Сөнки уларҙың күбеһе Иван Каширин ҡулы аҫтында ғына һуғышҡа йөрөгән, бер-берейһен яҡшылап хәтерләп ҡалған. Ә бына Туңғатар, Мулдаҡай волостары ҡараған Троицк өйәҙенә һәм унда ойошторолған Николай Томин отрядына килгәндә, уның документтарын әлегә берәүҙең дә өйрәнгәне юҡ. Ә ветерандарҙың иҫләүенә ҡарағанда, ул яҡтан да ҡыҙылдарҙа йөрөгән кешеләр булған: Мулдаҡайҙан — Ғәффән Исаев, Ялсығолдан — Абдулла Шәмиғолов, Шәриптән — Мөхәмәтша Әминев, Аҙнаштан — Ғәйфулла Ҡунаҡбаев һәм башҡалар. Ләкин хәҙер асыҡланыуынса, Ҡаҙаҡкол, Туңғатар волостары йәштәре тулыһынса тиерлек аҡтар яғында йөрөгән Башҡорт ғәскәрҙәренә йәлеп ителгән.

Нисек кенә булмаһын, 1918 йылдың яҙында ике яҡ армияһы ла бик йылдам үҫә, ҡыҙылдар яғын ғына ла көн һайын 200—300-ләгән кеше тулыландырып тора.

1918 йылдың апрель башында Ырымбурҙа хәлдәр бик ҡатмарлаша. Дутов, ҙур көс туплап, ҡалаға барып инә... Ошо ваҡиғанан бер нисә көн генә алда, Ырымбурға ярҙамға, ике эскадрон һәм ике рота эйәртеп, Николай Каширин отряды юлға сыға. Ул унда ике аҙна тигәндә барып етә һәм шунда уҡ Дутов ғәскәренең артынан төшә. Илселәр, мансур, ураҙҙар был ваҡытта тап ошонда була ла инде.

Богоявленск, Йөрүҙән дружиналарын да берләштергән Николай Каширин ҡыҙыл ғәскәрҙәрҙең Көньяҡ төркөмөн барлыҡҡа килтерә. Станица артынан станицаны алып, каширинсылар урындарҙа Со-

веттар ойоштороуҙа булышлыҡ итә. Үрге-Йайыҡта ҡалған отрядтар Михаил Кадомцев етәкселегендәге Көнбайыш төркөмдө тәшкил итә. Был төркөм аҙағыраҡ Миәс фронтында һуғышасаҡ. Троицкиҙа ҡыҙыл ғәскәрҙәрҙең Көнсығыш группаһы туплана. Дутовтың төп терәге булған Краснинскиға беренсе булып 9 апрелдә Троицк яғынан В. К. Блюхер һөжүм башлай. Иван Каширин иһә Ахун ауылы эргәһендәге Ҡарағайлыны ала, ә 12 апрелдә ошо отрядтың Н. Иванов отделениеһы Ахун ауылына килеп инә.

Учалы яҡтарында иң ҙур ауылдарҙан һаналған Ахунда армиянан ҡайтҡан һалдаттарҙың йоғонтоһо көслө була. Улар араһында һуғышҡа ҡаршы агитация алып барғаны өсөн Октябрь революцияһын Петербург төрмәһендә ҡаршылаған Шайкамал Кәримов, элекке фронтовиктар Ғәббәс Усманов, Вәлиулла Мөрсәлимов, уҡытыусы Ниғәмәт Ғәзизов аңлатыу эштәре алып бара. Күберәк ер алыу тураһында хыялланған хеҙмәтсән халыҡ властың үҙ ҡулына күсеүен көтә.

Бына ул көн дә килеп етә. 13 апрелдә Үрге-Йайыҡ большевиктары ярҙамында ахундар волость Советы һайлай. Уның беренсе рәйесе итеп Хәмәтвәли Даушевты һайлайҙар. Хәрби комиссар итеп кисәңге һалдат Вәлиулла Мөрсәлимов, аҙыҡ-түлек буйынса комиссар итеп Ғәббәс Усманов, ер мәсьәләләре буйынса Сәләх Шәрипов, секретарь итеп Имам Сибәғәтуллин ҡуйыла.

Волость Советы үҙенең тәүге ултырышында уҡ ауыл кулактарына 100 мең һум контрибуция һала. Ярлы-ябағаны һәм Белорет эшселәрен тәьмин итеү өсөн хәллеләрҙән 6500 бот иген йыйып алына, уның 4500 бото шунда уҡ заводҡа, Белоретҡа оҙатыла. Совет шулай уҡ ауыл кулагы Ә. Мөрсәлимовты һәм батша охранкаһы хеҙмәткәре Н. Даушевты атырға тигән ҡарар сығара.

Учалы тирәһендә Совет власы урынлаша башлай.

...Краснинск ҡасабаһы Үрге-Йайыҡтан 35 километрҙа ғына. Уға инеү юлдары — ус төбөндә генә. Дутовсылар стратегик яҡтан был бик уңайлы урындағы ҡалҡыулыҡтан файҙаланырға итә, шуның өсөн ҡыҙылдар, нисек кенә тырышлыҡ һалмаһын, улар ҡаршыға, асыҡ урынға сыҡмай.

Станицаға яҡынлашҡас, Чеверевтың отряды уң флангынан урын ала, ә составына иманғолдар ҙа ингән Кадомцев отряды тура-нан китә. Һулдан, Лебяжье күле буйлап, Погорельский ротаһы атлай.

Ҡыҙылдар, дутовсыларҙың ҡаты ут асыуына ҡарамай, һөжүмгә күтәрелә. Таң алдынан башланған һуғыш көн буйына бара, тик кискә генә каширинсылар, уларҙан һуң чеверевсылар аҡ казактар позицияларына барып инә. Аяуһыҙ урам һуғышына күсәләр.

Бер-берећен ҡыйратыу эңер төшкәс кенә туҡтала. Ҡыҙылдар күп көс юғалта. Ләкин Дутов та буш ҡалмай, һәм ул станицаны ҡалдырырға мәжбүр була.

Дутовты асыҡ ялан буйлап Михаил Кадомцев менән Иван Каширин боецтары ҡыуып китә. Аҡтар, тулыһынса ҡыйралыуҙан ҡурҡып, юғалтыуҙар менән дә иҫәпләшмәйенсә, ҡамауҙы йырып сыға. Дутов бер төркөм казактары менән Турғай яғына сығып ҡаса.

1 майға бөтә ҡыҙыл дружиналар ҙа, кем ҡайҙан килгән, шунда әйләнеп ҡайта. М. Кадомцев та Өфөгә ҡайтырға йыйына. "Хушлашыр алдынан ул, ауылдарығыҙҙа Совет власы урынлаштырығыҙ, тип әйтеп китте", — тип хәтерләй Иманғол ауылы партизаны Латиф Ҡаһиров.

1918 йылдың апрель-май айҙарында Учалы яҡтарында Совет власы нығына башлай. Яңы власть органдарына күбеһенсә элекке фронтовиктар һайлана. Ауыл Советтары депутаттарының беренсе съезында Учалы волость Советы рәйесе итеп Иманғол ауылы егете Ғүмәр Ихсанов һайлана.

Мулдаҡайҙа ла волость Советы төҙөлә. Ялпылар власы урындағы байҙарҙан 300 һум контрибуция талап итә.

1919 йылдың 24 майында Үрге-Йәйыҡта өйәҙ Советының съезы асыла. Унда Учалы тирәһендәге Ҡунаҡбай, Ахун һәм башҡа ауылдарҙан да делегаттар ҡатнаша. Съезд И. Каширин рәйеслегендә өйәҙ Советы власын нығытыу, Дутов бандаларынан ахырынаса ҡотолоу мәсьәләләрен ҡарай. Ләкин съезд асылғандың икенсе көнөнә аҡ чехтарҙың баш күтәреүе хаҡында Силәбенән хәбәр килтереп еткерәләр.

Съезд шунда уҡ ҡаланы хәрби хәлдә тип иғлан итә, кисекмәҫтән Ҡыҙыл Армия полктарын төҙөү тураһында ҡарар сығара.

Чехтарҙың сығышы Антанта империалистарының Советтарға ҡаршы ойошторған заговорының бер өлөшө ине. Был восстание кулактарҙы, ҡыйратып бөтөрөлмәгән аҡ казактарҙы ҡанатландырып ебәрә.

1918 йылдың 27 майында Урал хәрби комиссариаты өлкәнең бөтә ҡалаларындағы гарнизондарҙы ла боевой әҙерлек хәленә килтереү тураһында приказ сығара. Көньяҡ Урал заводтарына ебәрелгән телеграммала бына ни тиелә:

"Себер яғын чехословактар өҙҙө, Златоуста һуғыш бара. Хәл бик аяныс. Златоустҡа ашығыс ярҙам кәрәк..."

Фетнәгә ҡаршы тороу өсөн заводтар көс бүлә. Рәсәй Федерацияһының Златоуст районындағы ҡоралды көстәре менән етәкселек итеү өсөн Мәскәүҙән Халыҡ комиссары Н. И. Подвойский килә.

Һамар-Өфө-Силәбе линияһы буйындағы операцияларға туранан-тура командалыҡ итеүҙе ул Э. С. Кадомцевҡа йөкмәтә.

Бер нисә ҡанлы бәрелештән һуң, ҡыҙылдар 30 майҙа Златоусты ала. Ләкин был дөйөм хәлде һис еңеләйтмәй. Златоуст — Миәс фронты киңәйгәндән-киңәйә. Көньяҡ Уралдың яңынан-яңы райондары интервенттар тырнағына эләгә. Чехтар отряды Мулдаҡай волосын баҫып ала.

1918 йылдың 2 июнендә Үрге-Яйыҡ өйәҙ комитеты секретары Н. П. Иванов Миәс яғындағы аҡ чехтар отрядына ҡаршы сығыу ниәте менән Ахунға килеп инә. 3 июндә бында хәрби хәл иғлан ителә, иртәгеһенә Ахун Советы ултырыш уҙғара, ә тағы бер көндән Ташсыуалда митинг йыйыла һәм унда Иван Кашириндың саҡырыуы уҡыла. Хәрби комиссарҙың өндәүен яҡлап, митингыла Ғөбәй Айытов, Вәлиулла Мөрсәлимов сығып һөйләй.

Үҙ теләктәре менән отрядҡа сама менән 100 кеше яҙыла: Әхмәткамал һәм Шайкамал Кәримовтар, Ғәйнула Ғәфүров, Шәриф Шәйәхмәтов, Ғәлимйән Шакиров, Муллағәле Мөниров, Ғабиҙулла Фәйзуллин, Закирйән Усманов, Ниғмәтйән Мөхәмәтшин, Әхмәтйән Ясаков, Ғәлиулла Фәхретдинов, Сафа Мөсәүиров һәм башҡалар. Күрше Иманғол һәм башҡа ауылдарҙан 35 кеше килеп ҡушыла.

Х. Ғәлиәскәровтың раҫлауынса, Н. Погорельский етәкселегендәге икенсе отряд Миәс фронтына Наурҙа — Ураҙ — Илтабан — Ҡалҡан — Поляковка ауылдары аша йүнәлә. Разведканың хәбәр итеүенә ҡарағанда, Поляковкала “аҡ бандиттар”ҙың эскадроны торорға тейеш була. Ләкин Н. Погорельский уны бында тота алмай һәм, артынан төшөп, Ҡолаҡты яғына китә.

Иванов отряды иһә Учалы — Мансур — Малай Муйнаҡ аша Кинйәкәйгә (Вознесенка) килә. Бында боецтарҙы ҡайтанан отрядтарға бүлеп, уларға ҡорал таратып бирәләр.

“Күптәр мылтыҡ та тота белмәй ине. Бигерәк йәштәр ине шул, — тип иҫләгәйне Ахун партизаны Ғәлимйән Шакиров. — Мин дә ҡулыма мылтыҡ алдым. Тик атып булмай. Олораҡ ағайҙар, ана, тегендә итексе йәшәй, шуға барып кил, мылтығыңдың берәй шөрөбө төшкәндер, тиҙәр. Киттем, эҙләп итексене таптым. Өйөнә инеп, мылтығымды иҙәнгә төшөрөүем булды — ҡорал шарт итеп атып ебәрмәһенме! Өй хужаһы ҡурҡыуынан урынынан һикереп торҙо... Мин урамға сыҡҡанда, иптәштәрем ауыл осондағы ҡалҡыулыҡта ине инде. Шунда күрәм: Поляковка яғынан, һибелеп, ҡылыстарын ялт-йолт иттереп, казактар сабып килә. Барлыҡ мылтыҡтарҙан, пулеметтан ут астыҡ. Аҡтар кире сигенде”.

Ғәлимйән Шакиров, Н. Иванов беҙҙе Вознесенкаға алып барҙы, унда ҡорал склады бар ине, тип һөйләй. Ниндәй склад ул, унда

кем ҡорал һаҡлап ҡуйған? Айырым иҫтәлектәрҙе сағыштырып, шундай ғына һығымта яһарға мөмкин: Златоуст — Үрге-Йайыҡ юлы өҫтөндә урынлашҡан иң ҙур урыҫ ауылы (бында элек баҡыр рудаһы сығарғандар) был яҡта ҡыҙылдар өсөн үҙенә күрә бер терәк пункты булып торғанға оҡшай. Ошо мәлдә Ҡужай, Балбыҡ ауылдары эргәһендә лә һуғыштар булып ала — күрәһең, улар ҙа каширинсыларҙың Кинйәкәйгә килеүе менән бәйлелер.

Ҡыҙылдарҙың разведкаһы Шәрип ауылына етеп килгәндә, Бейектүбәнән уларға пулеметтарҙан ут асалар. Был аҡтарҙың Мулдаҡай яғынан килеп, был тирәне баҫып алыуын аңлата.

Бына ошо ваҡиғаларҙан сығып ҡына ла һығымта яһарға мөмкин: июнь башында фронт инде Поляковка тирәләренән үткән һәм аҡтар, киң һыҙат хасил итеп, Үрге-Йайыҡ яғына хәрәкәт иткән. И. Каширин юҡҡа ғына ҡырҡа көнсығышҡа боролмаған.

Каширинсылар волость үҙәге Туңғатар аша казактар ауылы Пичугинға юл тота, әммә унан тағы кире әйләнеп килергә мәжбүр була. Большевик Федор Борониндың йоғонтоһо көслө булған Поляковкаға килеп ингәс тә, Н. Ивановҡа ярҙам күрһәтеү маҡсатында Поляковка ревкомы 120 мең һум контрибуция, бер нисә тиҫтә ат йыйып бирә. Был эште Н. Жильцов менән А. Андреев башҡара. Отряд, ҙур һәм бай урыҫ ауылы Поляковкала ял итеп алғас, аҙыҡ-түлек запастарын тулыландырып, арыған аттарын алмаштырып, тағы ла Туңғатар аша казак станицалары яғына йүнәлә. Ҡыҙылдар һәр урында ла Совет власы иғлан итә, ябай халыҡҡа ҡарата ихтирам күрһәтергә тырыша. Яңы ғына ойошторолған ҡыҙыл ғәскәрҙәрҙең командирҙары И. Каширин, Н. Погорельский, Ф. Вандышев үҙ һалдаттарынан ҡаты тәртип талап итә. Х. Ғәлиәскәров, мәҫәлән, шундай ваҡиғаны хәтерләй. Ҡалҡан ауылы аша үткәндә Н. Погорельскийҙың ҡустыһы Мөхәмәҙи тигән ҡартты йәберләй, аҡса талап итә. Был хаҡта ишеткәс, Погорельскиҙың асыуы килә һәм ул, ғәйеплене саф алдына сығарып, аттыра.

— Беҙ кеше талау менән килешә алмайбыҙ, — ти ул. — Кем дә кем халыҡты йәберләй, беҙ уны ҡаты язалаясаҡбыҙ. Әгәр ундай ҡәбәхәтлекте мин эшләһәм, мине лә йәлләп тормағыҙ.

Аҡтар икенсе төрлөрәк ҡылана. Иванов отряды Ахунды ҡалдырып киткәс тә уны казактар килеп баҫа. Ауыл халҡын йәберләү башлана. Кулак ҡуштандарының күрһәтеүе буйынса, аҡ офицерҙар ҡыҙыл партизандарҙың ҡатындарын, ата-әсәләрен туҡмауҙы ойоштора. Совет власы активисы Вәлиулла Мөрсәлимов урманға йәшеренә. Башҡарма комитет рәйесе Хәмәтвәли Даушев та ҡасып ҡотола. Ләкин уны һағалап йөрөп, тоталар. Ул өйәҙ төрмәһенә оҙатыла һәм унда атып үлтерелә.

Шул уҡ хәл Поляковкала ла ҡабатлана. Һиҙҙермәй генә килеп баҫҡан чехтар отряды ауыл ревкомын ҡулға ала. Совет активистарын Миәс төрмәһенә оҙаталар, араларынан Ф. Г. Боронинды атып үлтерәләр.

Яңы власть яҡлыларға бер ниндәй ҙә аяу, ҡыҙғанып тороу булмай.

Иван Каширин Учалы, Уйск тирәләрендә һуғышҡан арала ағаһы Николай Дмитриевич Ырымбур эргәһендә ауыр һуғыштар алып бара. Тыуған яҡтарын аҡ чехтар баҫып алыуын Илсе егеттәре ошо фронтта саҡта ишетеп ҡала. Н. Каширин да Үрге-Йайыҡтан: "Чехтар баш күтәрҙе, ҡайтып етегеҙ", — тигән хәбәр ала.

...Поляковканан Уйск яғына ҡуҙғалған И. Каширин һәм Н. Иванов, һәр урында ла ҙур ҡаршылыҡ осратҡас, үҙҙәренең Ҡыҙыл Армиянан айырылып тороп ҡалғанын аңлай. Хәҙер ҡамауҙы йырып сығырға кәрәк. Улар, бөтә көсөн туплап, аҡтарҙы Выдринонан ҡыҫырыҡлап сығара ла, ошонда нығынып алып, бер аҙна буйына ҙур казак станицаһы Уйскиға һөжүм яһап тора. Уны нисек тә ҡулға төшөрөү уйы менән Каширин Иванов отрядын дошмандың һул флангыһына — Фоминоға ебәрә... Бер көндө каширинсылар, аҡтарҙың ҡаршы һөжүм башлауҙарын көтөп, Глазуново ауылы эргәһендәге түбәлә көтөп ята. Ике эскадронды разведкаға ебәрәләр. Ярты сәғәт тә үтеп өлгөрмәй, алғы эскадрондарҙан алты кеше кире сабып килә һәм, Уйск беҙҙең ҡулға күсте, унда бер кем дә юҡ, тигән хәбәр һала. Ҡыуанысլы яңылыҡ ишеткән ҡыҙылдар тиҙ генә колонналарға теҙелә лә, уны-быны уйлап тормайынса, Уйскиға йүнәлә. Тик ике километр ҙа китеп өлгөрмәйҙәр, йәнәштәге урмандан ҡыйҡыуҙап казактар килеп ябырыла. Китә һуйыш, ҡыйралыш!.. Һуңынан шул асыҡлана: разведкаға ебәрелгән ике эскадрон да, үҙ-ара һөйләшеп, ҡыҙылдарға хыянат иткән.

Бик күп кеше һәләк була был ҡапҡанда. Ахундарҙан ғына ла урман буйында тиҫтәләгән кеше ятып ҡала: Шәймәрҙән Садиҡов, Ғәлимулла Мөрсәлимов һ.б. Командирҙар, ағаслыҡ араһына таралышҡан боецтарын саҡ йыйып алғас, сигенергә мәжбүр була.

"Кешеләр ҙә, аттар ҙа ялға мохтаж ине. Аҙыҡ-түлекте, ҡоралдарҙы, һуғыш кәрәк-яраҡтарын да тулыландырырға кәрәк булды", — тигән иҫтәлеге ҡалған Сәфәр ауылы партизаны Ә. Шаһивәлиевтың. И. Каширин Шәрәф Шәйәхмәтов менән Ғәлимйән Шакировты алдан фатир әҙерләп ҡуйыу өсөн тыуған ауылдары Ахунға ҡайтарып ебәрә.

1918 йылдың 17 июнендә отряд тағы Ахунға килеп инә. Ахун, Типтәр-Учалы волостары буйынса хәрби мобилизация иғлан итеЛә.

20 июндә Ахунда йыйын була, Иван Каширин телмәр һөйләй, Совет власының ни тиклем ауыр хәлдә ҡалыуын аңлата ул. Митинг бөткәс, 250 самаһы кеше революция һағына баҫырға теләк белдерә. Яңы отрядтың командиры итеп волость Советы ағзаһы Кәшәф Вәлиев тәғәйенләнә. Шулай итеп, киләсәктә ауылдарына “Партизандар ауылы” тип дан-шөһрәт килтергән Ахун ротаһы барлыҡҡа килә.

Иван Каширин Фомино эргәһендә тағы фронт һыҙығын өҙөргә тырышып ҡарай һәм шул уй менән ул Учалы ауылына борола. Ләкин уға барып етмәй, ете-һигеҙ километрлыҡ ара ҡалғас, Һәйтәк эргәһендә аҡтар отрядына тап була. Ҡыҫҡа, әммә ҡаты бәрелеш булып ала. Ике яҡ та бер-береһен ныҡ теткеләй. Аҡтар сигенә. Әммә ҡыҙылдар ҙа уларҙы эҙәрләп тормай. Артабан юлында була. Ҡояш байыр алдынан отряд Учалыға барып инә. Йонсоған боецтар волость үҙәгенән аҡтарҙың бер ҙур булмаған төркөмөн ҡыҫырыҡлап сығара ла, постар ҡуйып, ял итергә туҡтала.

Иртәгеһенә ул кире Ахунға юллана, тик разведка унын аҡтар ҡулында булыуын хәбәр иткәс, ауылды ситләтеп үтеп, дошмандың ҡыҫырыҡлауы аҫтында Үрге-Йайыҡҡа табан сигенә. Был участкала ҡыҙылдарҙың тылын ахундар һаҡлап бара.

Каширинсылар артынан ҡала Троицкиҙан, ауыр юғалтыуҙар кисереп, Н. Д. Томин отряды килеп етә. Каширинсылар уны шатланып ҡаршы ала.

23 июлдә командирҙар кәңәшмә уҙғара һәм берләшкән көстәрҙең командующийы итеп Иван Каширинды, штаб начальнигы итеп Н. Енборисовты, Миәс фронтының командующийы итеп Н. Леонтьевты һайлап ҡуя.

Үҙенең 1-се приказында башкомандующий Н. Каширин бына ни тип яҙа: “Ҡоро һүҙ һөйләй торған замандар үтте, бөтә частарҙың командирҙары һәм начальниктары, бойороғоҙ: кемгә азатлыҡ ҡиммәт, шул приказды үтәргә тейеш: командирҙар һәм ҡыҙылгвардеецтар араһында үҙ-ара ыҙғыш һәм аңлашылмаусылыҡ булырға тейеш түгел. Һайлағыҙ, иптәштәр: йә хеҙмәтсәндәр власы, йә жандармдар таяғы; йә эш эшләргә, йә йәшенмәк уйнарға...”

Иван Кашириндың приказын үтәп, Николай Томин отряды Троицк яғына һөжүм башлап ебәрә. Петропавловка станицаһын, Ҡыйҙыш, Сухтелинск ҡасабаларын ала, ләкин төп бурысын үтәй алмай, кире борола. Ҡыҙыл Армияның ҙур көстәренең, Златоусты ҡалдырып, ауыр һуғыштар менән Екатеринбургҡа сигенеүен ишеткәс, тимәк, Силәбе — Златоуст фронтының да инде булмауын аңлағас, Үрге-Йайыҡ хәрби советы ҡаты уйға ҡала: инде ни эшләп ҡарарға? Ҡала янында аҡтар бик күп көс туплап алған, уларға һис

тә ҡаршы тороп булмаясаҡ. Ҡамауҙан нисек сығырға? Командирҙар араһында берҙәм фекер булмай. "И. Каширин отрядында штаб начальнигы булып урынлашып алған эсер Енборисов, Каюков һәм тағы бер нисә офицер хатта аҡтарға бирелеү яғында торҙо", — тип хәтерләй шул көндәрҙең береһен командирҙарҙың бәхәсен осраҡлы ғына тыңлап торған Латиф Ҡаһиров. — Ләкин Каширин, Погорельский үҙ һүҙҙәрендә ныҡ торҙо: көстө һаҡлап алып ҡалырға, ҡаланы һуғышһыҙ ғына ҡалдырып, Белорет заводына ҡарай сигенергә".

Ҡыҙылдар шулай итә лә.

Каширин Үрге-Яйыҡты 7 июлдә ҡалдыра. Бына ошонда Ғәлимйән Шакировтың иҫтәлеген килтереү урынлы булыр:

"Каширин беҙҙе, Ҡаҙаҡкол ауылы эргәһендә туҡтатып, телмәр һөйләне. Мин һеҙҙе өс айға ғына тип алғайным, тине ул. Ә хәҙер әйтә алмайым: һуғыш, бәлки, өс йылға һуҙылыр. Ләкин беҙ бирешмәйәсәкбеҙ. Алда ауырлыҡтар күп осраясаҡ. Шуның өсөн алдан иҫкәртәм: кем дә кем ҡурҡа, беҙҙең эштең барып сығыуына шикләнә, шул беҙҙе ҡалдырһын. Ҡоралын тапшырһын да ҡайтып китһен. Һәр кем дә өйөнә барып етәсәк, был ауырға төшмәйәсәк, сөнки тирә-яҡта урман. Тик аҙаҡтан үпкәләштән булмаһын: дошман берәүҙе лә йәлләп тормаясаҡ, аҫасаҡ та киҫәсәк..." Шунда ҡайһы берәүҙәр ҡорал ташланы".

8 июлдә Каширин Белорет заводына барып етә. Был ваҡытта уның ҡул аҫтында ете полк иҫәпләнә һәм ул, ошо көс менән генерал Ханжиндың ҡыҫымын кире ҡағып, Белоретты уңышлы ғына һаҡлап тора. "Хатта беҙ, Тирләнгә барып етеп, унан аҡ казактарҙы бәреп сығарҙыҡ", — тип һөйләгәйнеләр М. Закиров менән Л. Ҡаһиров.

16 июлдә Белоретҡа Ырымбур яғынан Николай Каширин менән Василий Блюхерҙың отрядтары ла килеп етә. Күп тә үтмәй, уларға Өфө—Златоуст тимер юлы буйында ҡыйратылған Ҡатау-Ивановск, Тирлән, Сим отрядтары килеп ҡушыла.

Шул уҡ көндө барлыҡ отрядтарҙың да вәкилдәре ҡатнашлығында "Көньяҡ Уралдағы көстәрҙе берләштереү, берҙәм штаб төҙөү һәм хәрәкәт итеүҙең дөйөм планын эшләү өсөн" кәңәшмә уҙғарыла. Унда башкомандующий итеп — Николай Каширин, ә урынбаҫары итеп Василий Блюхер һайлана.

Николай Каширин, фронтты өҙөп, ҡыҙыл Екатеринбургҡа үтергә һәм бының өсөн Үрге-Яйыҡ — казак станицалары — Миәс аша китергә тигән ҡарарға килә...

Көнсығышта ғәйәт ҙур территорияны баҫып алған аҡтар, ҡыҙыл Екатеринбургҡа һөжүм итергә, бөтә Ырымбур губернаһын үҙ

ҡулында тоторға һәм, шулай итеп, Өфөгә ынтылған аҡ чехтарҙың уң флангыһын ҡапларға уйлай. Ләкин был планды тормошҡа ашырыуға Белоретта тупланған партизан армияһы ҡамасаулай. Ҡыҙыл Армияның был төркөмөнә аҡтар башта артыҡ әһәмиәт тә бирмәй, ләкин үҙ тылында ҙур көстөң барған һайын нығыраҡ борсоясағын аңлап, генерал Ханжин Үрге-Йайыҡ яғына бик яҡшы ҡоралланған, башында офицерҙар торған һәм яуҙарҙа һыналған частарын ебәрә. Ҡыҙылдар уларға ҡаршы торорлоҡ нимә ҡуя ала ине һуң? Күп тигәндә, үҙ һуғышсыларының мораль-психологик өҫтөнлөгөн генә.

18 июлдә ҡыҙыл партизандар, Белореттан сығып, Үрге-Йайыҡҡа юллана. Үтә ауыр, фажиғәләр тулы юл була был.

Томин етәкселегендәге отряд, һул яғы менән хәҙерге Учалы районы биләмәләре аша барып, шул уҡ көндө Ҡаҙаҡкол ауылына барып инә. Ошонда көслө алыш була. Офицерҙар ротаһы һөжүмен кире ҡағып һәм артиллерия утын баҫып, позиция ала. Иртәгеһенә ул дошманын ҡыҫырыҡлай.

Каширинсылар Әбйәлил районының Абҙаҡ ауылы аша китә һәм Үрге-Йайыҡҡа яҡынлашҡан һайын ҡаршылыҡтың көсәйгәнен тоя. Шулай ҙа улар Боғаҙаҡты азат итә.

Боғаҙаҡта ахундар үҙҙәрен һис аямай һуғыша. Әүхәҙи Кәримов мылтығын яһап һәм тоҫҡап өлгөрә алмай. Ә казактар һаман килеү өҫтөндә. Ахырҙа Кәримов гранатаһын ала, тик ҡулсаһын тартҡансы (Әүхәҙиҙең герман һуғышынан уҡ ике бармағы етмәгән була), ул усында шартлай... Бында шулай уҡ Миңлебай Шакиров, Кәримовтар баштарын һала.

Аҡтар партизандарға яңынан-яңы көстәр ташлап тора, һуғыш һаман көсөргәнешлерәк төҫ ала бара. Ханжиндың армияһы күпкә артыҡ булһа ла, сигенгәндән-сигенә һәм, күп юғалтыуҙарҙан һуң, Үрге-Йайыҡты ҡалдырырға мәжбүр була. Ләкин ҡыҙылдарҙың аяуһыҙ ҡан ҡойоуының, тырышлыҡ һалыуының бик тиҙҙән кәрәкмәгәнлеге асыҡлана.

Эзбиз тауындағы һуғыш тымғас та, үлгән аҡ офицерҙың кеҫәһен аҡтарғанда бер партизан гәзит киҫәге табып ала. Уҡыһалар, аҡтарҙың Екатеринбургты баҫып алыуын белеп ҡалалар. Был нимә тигән һүҙ һуң? Екатеринбургҡа барыу, унда ашығыуҙың инде һис тә кәрәге юҡ. Ахырҙа армия кире Белоретҡа борола һәм, унда полктарҙы тикшереп, армияны яңынан төҙөгәндән һәм Ҡаҙаҡколдан алыҫ түгел яраланған Н.Каширин урынына В. Блюхерҙы башкомандующий итеп һайлағандан һуң, партизандар үҙҙәренең тарихта ҡаласаҡ походтарына сығып китә.

5 августа партизан армияһы, эшселәр ғаиләләрен дә үҙҙәре менән алып, Белоретты ҡалдыра.

В. К. Блюхер етәкселегендәге ҡыҙыл партизандарҙың аҡтар тылы буйлап рейд яһауы хаҡында әҙәбиәттә күп яҙылған. Бында шуны ғына өҫтәге килә: 12 меңгә яҡын боец туплаған был армия составы буйынса интернациональ соединение булған һәм, ҡайһы бер документтарға ҡарағанда, уның 5 меңе башҡорт-татар егеттәренән торған. Үкенескә ҡаршы, донъя күргән әҙәбиәттә бына ошо фактҡа әле бик үк әһәмиәт бирелмәй.

В. Блюхерҙың армияһында Учалынан, Иманғол, Илсе, Ҡалҡан, Сәфәр һәм башҡа типтәр, шулай уҡ башҡорт ауылдарынан бик күп кеше ҡатнаша. Ахун үҙе генә лә ротанан ашыу ҡыҙылармеец бирә. Иглинды, Ҡыҙыл Ярҙы алған саҡта улар ысын-ысындан батырлыҡ күрһәтә. Илсе, Сәфәр егеттәре Константин Денисов ротаһының 4-се взводын тәшкил итә. Взводтың күпселеге Көнгөрҙән йыраҡ түгел, Колчак һалдаттары менән һуғышып, һәләкәткә осрай.

1918 йылдың сентябрендә партизандар Ҡыҙыл Армия частарына ҡушыла һәм ошо ваҡыттан алып регуляр армия составында һуғыша.

*1980 й.*

# VII. Ете орден кавалеры

**Биографияһынан:** Степан Сергеевич Вострецов 1883 йылда Өфө губернаһының Бөрө өйәҙе Казанцево ауылында тыуған, 1895—1901 йылдарҙа Өфөлә тимер юл депоһында, оҫтаханала, артабан Силәбе, Омск, Усть-Ҡатау заводтарында эшләй. Егет ҡорона ингәс, I Бөтә донъя һуғышында ҡатнаша, прапорщик званиеһы ала. Граждандар һуғышында (Көнсығыш һәм Көнбайыш фронттарҙа) уҡсы полк командиры була, Алыҫ Көнсығыш республикаһында революцион халыҡ армияһының ғәскәрҙәр төркөмөнә етәкселек итә.



Граждандар һуғышы геройы С. С. Вострецов.

С. С. Вострецов батырлыҡтары өсөн 3 Георгий тәреһе, 4 Ҡыҙыл Байраҡ ордены һәм Почетлы революцион ҡорал — ҡылыс менән наградлана.

1932 йылда вафат булып, Дондағы Ростовта ерләнә.

Геройҙың тыуған ауылы хәҙер уның хөрмәтенә Вострецово тип үҙгәртелгән, шунда уҡ, бейек яр өҫтөндә, уға музей булдырылған.

...Музей ни тиклем бай булмаһын, тарихи ҡомартҡылар, архив материалдары шәхестәрҙе күргән-белгән, уның менән аралашып йәшәгән кешеләрҙе алмаштыра алмай. Сөнки уҡыусыға улар ғына тере тойғоларҙы еткерә ала.

Шул ихтыяждан сығып, мин С. С. Вострецовтың ҡатыны һәм ғүмерлек дуҫы Александра Кондратьевнаны, төрлө яҡҡа хаттар яҙып, оҙаҡ ҡына эҙләнем. Ниһайәт, ул табылды. Харьковта йәшәп ята икән. Йәше һикһәнгә етеп килеүгә ҡарамаҫтан, Александра Кондратьевна элеккесә йәмәғәт эштәрендә лә ҡатнаша булып сыҡты.

80-се йылдарҙың башында мин унан бер нисә хат алдым. Был яҙмалар шул хаттарҙың йыйылмаһы ғына булып тора.

“1924 йылдың яҙында мин Киев эргәһендә урынлашҡан 45-се дивизияның Сырецк лагерында яҙмышымды бәйләйәсәк кешене ос-

раттым. Был ваҡытта уның, илебеҙҙең төньяҡ-көнсығышында Граждандар һуғышына иң һуңғы нөктәне ҡуйған кеше, тигән даны таралғайны. Ул, генерал Пепеляев бандаларын тар-мар итеп, үҙен дә ҡулға төшөргән булған. Бер һүҙ менән, ғәжәп батыр кеше.

Беҙ танышҡан көндәрҙә Степан Сергеевич Киевҡа Мәскәүҙән Юғары академия курсанттары төркөмө менән тактик учениеларҙа ҡатнашырға килгәйне. Шул саҡта 45-се дивизия, үҙенең биш йыллыҡ юбилейын билдәләп, кисәгә Вострецов ошо дивизияға ҡараған 135-се бригадаһының элекке командиры булараҡ саҡырылғайны. Беҙ инде шефлыҡ итеүсе коллектив исеменән килдек. Мин үҙем өс-йыллыҡ фельдшер-акушерлыҡ мәктәбен тамамларға йыйына инем, тәмәке фабрикаһының комсомол ячейкаһына ла беркетелгәйнем.

...Салт аяҙ, ҡояшлы бер көн ине. Беҙ, йәштәр, йырлаша-йырлаша, хәрбиҙәр торған лагерға килдек тә, йәшеллек, сәскәләр араһына ҡоролған бөхтә палаткаларға барып юлыҡтыҡ.

Бына байрам башланыр сәғәт килеп етте. Бөтә халыҡ хәрби лагерҙың йәйге клубы яғына ығылды. Тантананы корпус командиры, мөһабәт кәүҙәле Иван Наумович Дубовой асты. Артабан дивизия ветерандары, партия ойошмалары һәм йәмәғәтселек вәкилдәре, йәштәр сығып һөйләне. Степан Сергеевичҡа ла һүҙ бирҙеләр. Уны көслө ҡул сабыуҙар менән, аяҡ өҫтө тороп ҡаршы алдылар. Ул тантанала ҡатнашыусыларҙы Юғары академия курстары исеменән дә, 45-се дивизияның элекке бригада командиры сифатында ла тәбрикләне.

Асыҡ, аңлайышлы итеп, тантанала ниндәйерәк аудитория булыуын яҡшы белеп һөйләне ул. “Р” өнөн һаҡауыраҡ итеп әйтә икән. Ләкин был етешһеҙлек ни өсөндөр миңә оҡшаны. Ғөмүмән, дүрт орден таҡҡан герой мине арбаны ла ҡуйҙы. Уның һәр һүҙен йотлоғоп тыңлайым. Уның эргәһенә барып етеп, ҡыҙыл таҫмалар араһында нур сәсеп янған наградаларын тотоп ҡараһаң ине, тип хыялланам. Иҫәр!

Йыйылыш тамамланды. Беҙҙең хор үҙешмәкәр түңәрәктәрҙә ҡатнашҡан ҡыҙыларм еецтар менән бергә сығыш яһаны. Концерт бөткәс, полк командиры миңә: “Саша, бына һиңә кейәү. Ул бит әле өйләнмәгән”, — тип шаяртып һүҙ ҡушты. Степан Сергеевичты саҡырып алып, минең яуҙаш иптәшем, тип таныштырҙы. Беҙ, ҡыҙҙар, ҡунаҡты уратып алдыҡ, нисек ордендар алыуығыҙҙы һөйләгеҙ, тип үтенә башланыҡ. Ә Степан Сергеевич, башҡаса булдыра алмай, көлдө. “Ҡыҙҙар, шундай матур кистә һуғыш хаҡында һөйләнеп тормайыҡ әле, — ти. — Һеҙҙең ише сибәрҙәр алдында мин ҡаушауымды ла еңә алмайым... Буфетта һалҡын лимонад эсһәк, яҡшыраҡ булмаҫмы икән? Бик эҫе бит”.

Полк командирының ҡатыны минең әхирәтем ине. Иртәгеһенә, ул мине саҡырғас, өйҙәренә киттем. Барһам, ире, Степан Сергеевич минең хаҡта, ниндәй ғаиләнән булыуым, ни менән шөғөлләнеүем тураһында ҡыҙыҡһынды, тип сер асты ла: "Ҡыҙыҡай, ул һине бик оҡшатҡан бит", — тип әйтеп ҡуйҙы.

Анау хәтле шаян ҡыҙҙар араһынан геройға оҡшаған бер мин генә түгелдер инде, тип, был яңылыҡҡа артыҡ әһәмиәт бирмәнем.

Икенсе көндө миңә әхирәттәремә тағы барырға тура килде. Был юлы Степан Сергеевич та уларҙа булып сыҡты. Күренеп тора: кәйефе шәп. Ул шаяртып һүҙ ҡушты, минән нимәләрҙер һораштты.

Кисен дүртәүләп Киев халҡының ял итергә яратҡан урынына — Днепрҙың текә ярындағы баҡсаға, унан йәйге театрға барҙыҡ.

Бөгөнгөләй хәтеремдә, Леонковаллоның "Паяцы" операһы бара ине.

Ошо көндән һуң Степан Сергеевич менән һәр кис осраша башланыҡ. Йәштәребеҙ араһы ҙур булһа ла, дуҫлаштыҡ та киттек. Ул миңә ҡарата бик иғтибарлы булды. Ауыр тормош юлы үткән элекке ябай тимерсенең күңеле тупаҫланмауы хайран ҡалдырҙы мине. Уның йөҙө, бигерәк тә уйланған сағында талапсан, етди булыуы әсир итте, ләкин был ҡарашта мине ғашиҡ иткән киң күңеллелекте лә күрҙем мин.

Бергә йөрөгән көндәр һиҙелмәй үтте лә китте. Һуңғы кистәрҙең береһендә Степан Сергеевич "етди" һөйләшергә булды шикелле. Ул тотто ла: "Миңә тормошҡа сыҡ, Саша, — тип тәҡдим яһаны. — Һис үкенмәйәсәкһең. Һин артабан уҡыһын, үҫһен өсөн мөмкин булғандың бөтәһен дә эшләрмен. Һинән башҡаға өйләнергә уйламайым. Мин һине яратам".

Уның тәҡдиме ныҡ аптыратты мине. Ә ул минең риза буласағыма шикләнмәй ҙә ине, буғай.

Беҙ Степан Сергеевич менән икебеҙ ике төрлө булып, бала сағыбыҙ төрлө шарттарҙа үтһә лә, минеке — сағыштырмаса етеш, ә уныҡы асы етемлектә, уны тормош юлдашым итеп һайлауыма бер ваҡытта ла үкенмәнем.

...Ғүмеренең һуңғы йылдарында Степан Сергеевич 9-сы уҡсы корпустың командиры булды һәм, белеүемсә, күренекле совет хәрби начальнигы М. Н. Тухачевский идеяларына таянып, корпусты үҙгәртеп ҡороу менән мәшғүл ине. Үҙенә ышанып тапшырылған частарҙа ул шулай бөтә яңылыҡтарҙы ла индерергә тырышты. Уның хәрби теорияны яҡшы белеүе, хәрби операциялар буйынса бай практик тәжрибәһе менән иҫәпләшмәүе мөмкин түгел ине.

1937 йылдың яҙында корпус Краснодарға күсергә әҙерләнде. Шуға ла Степан Сергеевичтың унда, шулай уҡ Мәскәүгә барыуы

бик йышайҙы. Күп юл йөрөүҙәр, көсөргәнешле эшләү, төн ауғансы яҙышып ултырыу унының хәрби-сәйәси академияла уҡыған сағында ауырығандан һуң нығынып та етмәгән организмын ныҡ ҡаҡшатты.

Степандың, иҫәпһеҙ күп яуҙарҙа еңеүсе булып сыҡһа ла, ауырыуға ҡаршы көрәшкәндә организмы түҙмәне. Икенсе майҙа Степан Сергеевич баҡсала моңһоу ғына Шаляпин, Карузо йырҙары яҙылған пластинкаларҙы тыңлап ултырғайны. Ә таң атҡанда ул юҡ ине инде.

"Правда" һәм "Красная звезда" гәзиттәрендә баҫылған некрологтарҙа шундай юлдар яҙылғайны: "Граждандар һуғышы геройҙарының бик күп хеҙмәт күрһәткән яугирҙарҙың береһе Степан Сергеевич Вострецовтың йөрәге һуғыуҙан туҡтаны". Некрологта хәрби һәм диңгеҙ эштәре буйынса Халыҡ комиссары К. Е. Ворошиловтың ҡултамғаһы беренсе булып тора ине.

Степан Сергеевич Дондағы Ростовта туғандар ҡәберлегендә ерләнде. Унда унының туғандары һәм дуҫтары йыш килеп тора, Ростовтың 36-сы урта мәктәбе уҡыусылары ҡәберҙе шефлыҡҡа алған".

Степан Сергеевич үҙе яратҡан Башҡортостандан алыҫ ерләнһә лә, яҡташтары уны онотмай. Унының исеме бирелгән колхоз Башҡортостанда алдынғыларҙан иҫәпләнә. Бында уға ике һәйкәл ҡуйылған. С. С. Вострецовтың тыуған ауылында мемориаль музей асылған.

Ул аҡ гвардеецтарҙы тар-мар иткән Охот диңгеҙе яры буйында һәм Приморьела тағы ике ауылға унының исеме бирелгән. Унда — Аянда һәм Охот диңгеҙе буйындағы Вострецовола ла Степан Сергеевичҡа һәйкәл ҡуйылған.

*1983 й.*

# VIII. Яңғыҙ яуҙы ҡайтармай

*(Граждандар һуғышында Башҡорт ғәскәрҙәр..,*

Башҡорт хөкүмәте һәм РСФСР Эшсе-Крәҫтиән хөк
Килешеү төҙөүе һөҙөмтәһендә — ул 1919 йылдың 23 мартында "ВЦИК хәбәрҙәре"ндә баҫылып сыға — башҡорт ҡыҙыл ғәскәрҙәре ойошторола башлай. Совет Республикаһы Революцион Хәрби Советы: "1. Башҡортостан Республикаһы граждандары иҫәбенән бер еңел артиллерия дивизионы, гаубица батареяһы, элемтәселәр ротаһы һәм саперҙар ротаһы ла булған өс полклы бригада төҙөргә; 2. Дүрт полклы бер атлылар дивизияһы; ошо приказдың 1-се һәм 2-се пункттарында күрһәтелгән частарҙы тулыландырыу йәһәтенән запас уҡсы һәм атлы полктар булдырырға", — тигән ҡарар сығара. Башкомандующий Л. Троцкий ҡул ҡуйған приказ буйынса, был ғәскәрҙәрҙе туплау урыны итеп Ырымбур ҡалаһы билдәләнә, ә уны "кисектермәй үтәү һәм тейешле сифатта башҡарыу" бурысы Әхмәтзәки Вәлидовҡа йөкмәтелә. 40 мең кешегә еткерелергә тейеш ғәскәрҙе ойоштороу шарттары еңел булмай. Уны 1919 йылдың апрелендә йыя башлайҙар, ләкин Көнсығыш фронтта килеп тыуған хәлдәр был эште Саранск ҡалаһына, артабан Бәләбәйгә күсерергә мәжбүр итә.

Бәләбәйҙә 2-се башҡорт уҡсы бригадаһы, атлы полк һәм башҡа частар ойошторола. 1-се һәм 2-се уҡсы полктар, шулай уҡ 1-се һәм 2-се кавалерия полктары, тулыһынса ат һәм ылауҙар менән тәьмин ителмәһә лә, 1919 йылдың июнендә Көньяҡ фронтына оҙатыла. Бәләбәйҙә тағы 3-сө, 4-се атлы, 3-сө уҡсы полктар, Стәрлетамаҡта запас хәрби частар төҙөлә.

Реввоенсоветтың тәүге планы буйынса, башҡорт частары Петроград гарнизоны составына индерелергә тейеш була. Башҡорттар менән рустар араһында йәшәп килгән милли ҡаршылыҡтарҙы бөтөрөү, "халыҡ-ара фекерҙәшлек" тәрбиәләү кәрәклегенән уйланыла был. Әммә тиҙҙән, Л. Троцкийҙың әйтеүенсә: "Быға бөтөнләй яңы, кисектергеһеҙ нәмә — Финляндия буржуазияһын башҡорт баҫҡынсылары шәүләһе менән ҡурҡытыу маҡсаты килеп ҡушыла (Л. Троцкий, "Моя жизнь", II т., 157-се бит).

В. И. Ленindың уйы ла Л. Троцкийҙыҡынан әллә ни айырылмай. "Йыртҡыс империалистар уянған Көнсығыш халыҡтарының пролетар революция үҙәктәрен һаҡларға нисек күтәрелеүен күрер, — тип яҙа ул. — Шул уҡ ваҡытта ҡораллы башҡорттарҙың Петроград эшселәре менән тығыҙ аралашыуы уларҙың коммунистик рухта бәйләнешен һәм бер-береһенә ихтирамын тәьмин итәсәк".



Петроград ҡалаһын һаҡларға килгән башҡорт яугирҙары.

Башҡорт ғәскәрҙәре Петроградҡа килеү менән үк һуғыш һәм сәйәси әҙерлеккә тотона. Был көстәрҙе, Ә. Вәлидовтың әйтеүенсә, “башлыса пропаганда маҡсатында урамда йөрөткәндәр. Шул уҡ ваҡытта башҡорттар ҡыҙылдар араһында һуғышсан ҡәүем сифатында танылғанлыҡтан, ғәскәребеҙгә, бер яҡтан, симпатия күрһәтәләр, икенсе тарафтан, көнләшеп ҡарайҙар ине. Ә Юденич ғәскәрендә иһә уларҙы ҡырағай башҡорттар тип атауҙарын һуңынан Америкала Стамфордтың “Гувер хәрби китапханаһы”ндағы архивтарҙы өйрәнгәндә белдем” (Ә.-З. Вәлиди Туған, “Хәтирәләр”, Өфө, “Китап”, 1996).

Республиканың көнбайыш сиктәрендәге хәлдәр Петроградҡа килтерелгән башҡорт частарын аныҡыраҡ маҡсатта файҙаланыу бурысын ҡуя. Сөнки бындағы Ҡыҙыл Армияның хәле ифрат аяныс була: фронтта дезертирлыҡ, хулиганлыҡ хөкөм һөрә. Ғәскәрҙәрҙәге тәртип ҡаты саралар менән генә тотола. Ҡыҙыл Армияның 47-се, 48-се полктары, мәҫәлән, баш-баштаҡлыҡтар арҡаһында резервҡа күсерелә. Шуға күрә В. И. Ленин быға тиклем үк әле Стәрлетамаҡҡа, Вәлидовҡа телеграмма ебәргәндә үҙенең хафаланыуын йәшерә алмай һәм: “Башҡорттар, иң ҡыҫҡа ваҡыт эсендә һәм тимер юл транспортына артыҡ ауырлыҡ төшөрмәйенсә генә, башҡорт частарын бында күсереүгә бөтөн көстәрен һалыр тип ышанам”, — ти.

1919 йылдың 30 сентябрендә Башҡортостан хәрби комиссариатынан В. И. Ленин исеменә, 19 сентябрҙә Петроградҡа ике эшелонда 3-сө уҡсы һәм 3-сө атлы полктар, сентябрҙең 20—21-ендә өс эшелонда — бер атлы полк, ә Л. Троцкийҙың приказына ярашлы рәүештә, Петроград һәм Псков фронттарына Украинанан тағы ике башҡорт йәйәүле полктары һәм ике атлы полк ебәрелде, тигән телеграмма китә. Шулай итеп, һуғыш барған шарттарҙа 11 мең яугирҙан торған башҡорт частары Петроград фронтында үҙ урынын ала. Х. Ф. Алишев командалыҡ иткән Башҡорт ғәскәрҙәре төркөмө 7-се армия составына индерелә. Тәүге осорҙа ул кавалерия полкынан (командиры Каплан, сәйәси комиссары Әбдрәшитов), бер батальонлы 3-сө уҡсы полктан ғына (командиры Авдеев, комиссары Бүләков) торһа, 1919 йылдың октябрь аҙағына инде бында өс атлы полкты, техник эскадронды берләштергән атлы дивизия (командиры А. Х. Ахлов, штаб начальнигы Кудржицкий), Айырым башҡорт уҡсы бригадаһы (командиры Х. Әхмәров) иҫәпләнә. Хәрби төркөм менән етәкселек итеү өсөн штаб төҙөлә, уның начальнигы итеп Х. Кәлмитев тәғәйенләнә.

Октябрь айында башҡорт частары алғы һыҙыҡҡа йүнәлә һәм Юденич армияһын ҡыйратыуҙа ҡатнаша, Павловск, Гатчина, Ямбург һәм тиҫтәләгән башҡа ҡала-ауылдарҙы азат итә. Беренсе булып аҡтар нығытмаһын Көньяҡ фронтынан килеп еткән башҡорт полкы өҙөп үтә. 26 октябрҙә бөтөн фронтты ҡыҙылармеец Г. Төхфәтуллиндың ҡаһарманлығы таң ҡалдыра: ул, япа-яңғыҙ аҡтарҙың бронемашинаһы менән алышып һәм уның өҫтөнә менеп, пушкаһының өнөн тыға һәм экипажын әсирлеккә төшөрә.

“Ғәскәр штабы Петроградтан ун биш саҡырым алыҫлыҡта Пулково обсерваторияһында булды, — ти Әхмәтзәки Вәлиди. — Беҙ бында саҡта 3-сө һыбай һәм 3-сө йәйәүле полктарыбыҙ Царское Село янында Юденич ғәскәре менән ҡаты һуғышта ҡатнашты. Көнө буйы дауам иткән был һуғышта етмеш кеше яраланды. Ике көндән һуң Кулма ауылы янындағы шундай уҡ ҡаты һуғыш һөҙөмтәһендә йөҙгә яҡын кешебеҙ яраланды...” (Ә.-З. Вәлиди Туған, “Хәтирәләр”, Өфө, “Китап”, 1996). “1 декабргә бөтөн Башҡорт төркөмөндә 8295 кеше ҡалды, сөнки Петроград эргәһендәге һуғышта 2140 кеше, башлыса яраланып, сафтан сыҡҡайны. Шул иҫәптән 3-сө атлы полк — Нарва эргәһендә, 3-сө уҡсы полк Финляндия сигендә, башҡалары резервта торҙо”. (Ә.-З. Вәлиди Туған, “Тура сымдан һөйләшеү”, ж. “Ватандаш”, 1997, № 2, 173-сө бит.) “Совет Республикаһы баш ҡалаһы өсөн иң ҡурҡыныс мәлдәрҙә Айырым башҡорт ғәскәрҙәре частары шул хәтлем сыҙамлылыҡ, ҡаһарманлыҡ һәм ныҡлыҡ күрһәтте ки, хатта

хәл ҡотҡарып алып ҡына ҡалынманы, бәлки хәүеф еңеүгә әүерел-де...” (Константин Федин, “Ҡыҙыл башҡорттар тураһында”, ж. ”Ватандаш”, Өфө, № 2, 1997, 172-се бит).

1919 йылдың 16 ноябрендә Ямбург ҡыҙылдар ҡулына күсә, Юденич көсөн юғалта. Был осорҙа Төркөстан фронты бик ҙур мохтажлыҡтар кисереп, М. Фрунзе Реввоенсоветҡа ярҙам һорап мөрәжәғәт итһә лә, башҡорт ғәскәрҙәренә унда барырға рөхсәт бирелмәй. Уның бер часы Новгород губернаһына оҙатыла һәм Муравьев казармаларына урынлаштырыла.

М. Мортазин командалығындағы Айырым башҡорт кавалерия бригадаһы Төркөстан фронтынан 1920 йылдың 29 апрелендә Көньяҡ-көнбайыш фронтҡа оҙатыла. Был ваҡытта ул 27-се, 28-се полктарҙан, йәйәүле дивизиондан тора, 200 ҡылыс, 15 пулемет менән ҡоралланған 600 атлы 800 яугиры була. Бригада 12-се армия составына индерелә. Ошо көндәрҙә тиерлек — 16 майҙа — уға Петроград фронтынан килгән 1-се башҡорт полкы ҡушыла. Бынан тыш, шул уҡ май айында Польша фронтына Стәрлетамаҡтан ирекләләр отряды килә. Былар барыһы бергә 12-се армияның удар төркөмөн тәшкил итә.

Был осорҙа дөйөм хәрби хәл шунан ғибәрәт була: 1920 йылдың 6 майына ҡараған төндә поляктар Киевты һаҡлап торған 12-се армияға ҡаршы һөжүм башлай. Ҡыҙылдар, поляктарҙың ҡыҫымына түҙә алмайынса, Днепрҙың һул яғына сығырға мәжбүр була. Дошман, Киев эргәһендәге барлыҡ көстәрен бер йоҙроҡҡа төйнәп, уны йылға буйлап Ҡыҙыл Армияға ҡаршы йүнәлтергә һәм ҙур зыян килтерергә мөмкинлек ала. Хәл бик ҡурҡынысҡа әүерелә. Әмәлгә ҡаршы, М. Мортазин бригадаһы килеп өлгөрә. Тимер юл эшелондарынан төшөп тә етмәгән бригадаға ҡәтғи рәүештә приказ бирелә: кисекмәҫтән Днепрҙың уң яҡ ярына сығырға, һөжүм башларға һәм, уны йәйелдереп, дошман көстәрен йәлеп итергә. Шунда ғына 12-се армия үҙендә тәртип булдырасаҡ һәм флангыла торған М. Буденный һыбайлылары бер аҙ тын алып ҡаласаҡ. Ләкин дивизия командиры Голиков тағы икенсе приказ бирә: ашығыс рәүештә Бровары ауылына һөжүмгә күсергә, дошманға кәртә ҡуйырға. Башҡорт бригадаһы ял итеп тә өлгөрмәй, яңы позициялар беләргә һәм, вәғәҙә ителгән артиллерияның булмауына ла ҡарамай, ныҡ ҡоралланған поляктарға ҡаршы күтәрелергә мәжбүр була. Кавалеристар, үҙҙәре алдынан мал ҡыуып һәм уға ышыҡланып, ике сәғәт үтеүгә Броварыға барып инә һәм дошмандың артиллерияһын баҫып ала.

20 майҙа башҡорт атлы бригадаһын, хәрби күҙлектән ҡарағанда, был бик хата аҙым булһа ла, пехота бригадаһы етәкселегенә буйһондоралар һәм шунда уҡ Зазимье-Потребы ауылына һөжүм

башларға бойоралар.Ләкин, уҡсы бригада командованиеһының аҡрын ҡыбырҙауы сәбәпле, һөжүм һүнеп ҡала. Башҡорт бригадаһы яугирҙары, башҡаса сара тапмайынса, аттарынан төшөп, йәйәү килеш һуғышырға тотона. Ул Зазимье ауылын таҙарта һәм бер нисә көн Ромашко бандиттарын аулау менән шөғөлләнә. 26 майҙа, ике йөҙләгән кәмә йүнләп алғас, бригада Днепрҙы кисә һәм бер ниндәй юғалтыуһыҙ икенсе ярға сыға. Ләкин, яҡшылап разведка үткәрелмәү сәбәпле, ул яулап алған урынын ҡалдырып китергә мәжбүр була. Башҡорт бригадаһына үтә лә ауыр шарттарҙа, көслө пулемет уты аҫтында, Днепр аша тағы ике мәртәбә сығырға тура килә. Уң яҡ ярҙа 4 июндә генә ныҡ ына ул һәм шунан һуң ғына поляктарҙы эҙәрлекләргә тотона. Пилявы, Горностайполь, Богданы һәм башҡа ауылдарҙы алыу өсөн ҡаты һуғыштар аша үтә. Был алыштарҙың маҡсаты — Киевты талауға мөмкинлек бирмәү, Киев-Коростель магистрален киҫеү була. Атлы дивизия Тетеревҡа, артабан Пенезевичи, Зарудье, Игнатполгә һөжүм итеүен көсәйтә.

11 июндә Башҡорт бригадаһына 7-се уҡсы дивизияның 7-се атлы полкы бирелгәс, атлылар төркөмө ойошторола. Уға, Башҡорт бригадаһынан тыш, 325-се атлы бригада, Дон-Кубань, Суворов, 7-се йыйылма һәм 58-се атлы полктар индерелә. Был ҙур хәрби төркөм менән етәкселек итеү Муса Мортазинға йөкмәтелә.

Июлдең икенсе яртыһында Атлы төркөм, Стырь, Стоход йылғаларын кисеп, 3 августа Ковель ҡалаһын ала. Шулай итеп, ул Буг йылғаһына тиклем ауыр һуғыш юлдары үтә, бик күп ҡала һәм ауылдарҙы таҙарта.

12 августа, М. Мортазиндың тыуған иленә ҡайтып китеүе сәбәпле, бригада командиры вазифаһын Х. С. Кәлмитев ала, ләкин ул тиҙҙән ауырып китә һәм уның урынына 2-се Дон-Кубань полкы командиры А. Горбатов тәғәйенләнә.

Август аҙағында, бер нисә операция үткәргәндән һуң, Башҡорт бригадаһы, Буг йылғаһы аша сығарылып, Бердичевҡа күсерелә һәм уны артабан Котовский бригадаһына ҡушыуҙы күҙҙә тотоп, 14-се армия етәкселегенә буйһондоралар. Ләкин ике бригаданы ҡушмайҙар, Башҡорт бригадаһына Петлюра армияһын ҡыйратыу бурысы ҡуйыла.

Башҡорт бригадаһының артабанғы яҙмышы маҡтарлыҡ түгел. Ул бер нисә тапҡыр бүлгеләнеүгә дусар ителә. Мәҫәлән, 10 декабрҙә таратылып, бик кәмегәс, ике полкка ғына тороп ҡала. Уларын да бер дивизиянан икенсе дивизияға күсереп йөрөтәләр, ахыр сиктә Польша-Румыния сиген һаҡлауға ҡуялар. Уның иң ахырғы дүрт эскадроны Петлюраға ҡаршы һуғышып йөрөй һәм аҙаҡтан Черкассы дивизияһы етәкселеге ҡарамағына тапшырыла.

Башҡорт бригадаһының ойошторолоуы тураһында шуны әйтергә кәрәк: М. Мортазиндың иҫләүенсә, уның һуғыш ҡоралдары 1892 йылда сығарылған өс һыҙмалы винтовкаларҙан һәм төрлө системалағы пулеметтарҙан ғына торған. Поляктарға ҡаршы һуғыша башлағас, дошмандан тартып алынған карабиндар менән ҡайтанан ҡоралландырыла. Артиллерия бөтөнләй булмай. Тәьминәт өлкәһендә лә урында табылған аҙыҡ-түлекте генә ҡулланалар. Фураж етешмәү сәбәпле, аттар бик ябыға. Яугирҙар кеше елкәһенән төшкән йә иһә трофейға алынған кейемдәрҙә йөрөй. Һуғыш барышында бригада өҫтәмә рәүештә 500 кеше, 160 ҡына ат ала. Бөтөн һуғыштарҙа командирҙарҙың 80 проценты, ҡыҙылармеецтарҙың 20 процент самаһы ятып ҡала. Ләкин башҡорт егеттәренең сыҙамлылығын, әхләҡи йөҙөн, ойошҡанлығын Ҡыҙыл Армия етәкселеге юғары баһалай.

*1998 й.*

# IX. Дау дауыл тыуҙыра

***Нимә был: фетнәме, ихтилалмы?***

1919—20 йылдарҙа Башҡортостандың Урал аръяғы волостарын тетрәткән ваҡиғаларҙы төрлө осорҙа төрлөсә баһаланылар. Уларға “буржуаз милләтселәр сығышы” тип тә, “бунт”, “фетнә”, “бандиттар хәрәкәте” тип тә мөһөр баҫтылар. Унда ҡатнашыусылар ҡара көҙғон ҡиәфәтендә генә төҫмөрләнде. Был баһа, әлбиттә, Коммунистар партияһы идеологияһына таянып ҡына бирелде. Донъялар үҙгәреп китеп, ваҡиғаларҙың икенсе яғын да яҡтыртҡан архив материалдары табыла башлағас, ҡараштар ҙа үҙгәрҙе һәм ахыр сиктә эш шуға барып етте: ҡайһы бер тарихсылар, егерменсе йылғы болаларҙы башҡорт халҡы алып барған иң һуңғы ихтилал тип атаны — тимәк, был ваҡиғаларҙың башында йөрөгән инсандар ҙа милли батырҙар кимәленә күтәрелде. Был ҡарашты һис тә икеләнмәйенсә ҡабул итеп буламы? Эйе, тип әйткәнгә йә кире ҡаҡҡанға тиклем ул ваҡиғаларҙы бәйнә-бәйнә һәм яңынан тикшереп-барлап сығыу кәрәкмәйме? Эйе, был бер ҙә ҡамасауламаҫ. Хәйер, 1919—20 йылғы болалар — ул Башҡортостан үҙаллылығы өсөн булған көрәш тиеүселәр файҙаһына баштан уҡ шуны әйтергә кәрәк: был осор халыҡ аңында йә иһә тарихыбыҙҙа “Һәнәк һуғышы” тигән исем менән нығынып ҡалған. “Һәнәк һуғышы”... Тимәк, ҡоралһыҙ кешеләрҙең, бик аптырағандандыр инде, ҡулдарына һәнәк, балта алып, һуғышырға күтәрелеүе. Тик кемгә ҡаршы? Әлбиттә, власть башында тороусыларға, ә тәғәйен егерменсе йылды алһаҡ, коммунистарға ҡаршы. Нимә даулаған һуң халыҡ, ниңә тағы ҡан ҡойған?

Быны ахырынаса асыҡлап ҡуйыу бик мөһим. Ни өсөн тигәндә, ауырлыҡ менән һәм хаталана-хаталана яулап алынған үҙаллылыҡтың икенсе йылында уҡ ҡуйырып китә был сыуалыштар. Етмәһә, “Башҡортостан йөрәге” (Тамъян-Ҡатай кантоны башҡарма комитеты рәйесе булып эшләгән Исмәғил Солтанов һүҙҙәре. — **Авт.**) тип йөрөтөлгән төбәктә. Улар ошонда йәшәгән башҡорттарҙың яңы власҡа ҡарата мөнәсәбәтен асып һала. Йәнә бер ҡыҙыҡлы нәмә: тап ошо киҫкен осорҙа төрлө милләттәрҙең һәм сәйәси көстәрҙең үҙ-ара һыйышмау сәбәптәрен, тыныслыҡ урынлаштырыу юлында төрлө ысулдар ҡулланыуын да күрергә була. Тарихи күҙлектән ҡарағанда, был конфликттың үҫеүе һәм хәл ителеүе бөгөнгө көн өсөн дә фәһем алырлыҡ кеүек. Беҙ ошо хаҡта әлегә тиклем матбуғатта бик үк күренмәгән архив материалдарына таянып эш итмәксебеҙ.

## Тәүге аҙымдар

Тәүҙә дөйөм дәүләт ҡоролошо тураһында бер кәлимә һүҙ.

Билдәле булыуынса, 1919 йылдың 20 мартында РСФСР Халыҡ Комиссарҙары Советы һәм ВЦИК ҡарары нигеҙендә Башҡортостан Автономиялы Совет Республикаһы төҙөлә. Ул, Кесе Башҡортостан сиктәрендә булдырылып, 13 административ берәмекте — кантондар ойоштороуҙы күҙҙә тота. Уларҙың араһынан Тамъян-Ҡатай кантоны үҙәге итеп хәҙерге Учалы районының Ҡаҙаҡкол ауылы билдәләнә, ә кантонға Ырымбур губернаһының Верхнеуральск, Троицк өйәҙҙәренең бер нисә волосы, шулай уҡ Белорет, Тирлән, Ломовка, Ҡағы, Әүжән волостары индерелә.

Ләкин был уй тиҙ генә бойомға ашмай. 1919 йылдың апрель аҙағында Уралдың аҡтар хакимлеге аҫтында ҡалыуы сәбәпле, Башҡорт хөкүмәте Саранскиға күсеп китә һәм унда август айына тиклем йәшәй. 1919 йылдың июнендә Ҡыҙыл Армия һөжүмгә күсә һәм уның Тимер дивизияһының Мәскәү полкы 4 июлдә Белорет заводына килеп инә. Ошо көндән алып, армияның сәйәси бүлеге һәм партияның Өфө губерна комитеты булышлығы менән Белоретта Совет власының тәүге органдары булдырыла. Өфөнән тәжрибәле большевиктар — Ф. Алексеев, М. Заворуев, М. Козловтар килә. Тиҙҙән уларға яңы көстәр өҫтәлә: Ф. Сызранкин, А. Пирожников, И. Козлов, В. Гис һ.б. Әлбиттә, большевиктарҙың Белорет, Тирлән заводтары эшселәренә йоғонтоһо бик көсәйә, һәм уларҙың тырышлығы менән фронт реввоенсоветы ярҙамында иҫке ревком таратылып, коммунистарҙан ғына торған яңыһы төҙөлә. Уның башына Михаил Козлов ҡуйыла.

Ни өсөн партия ойошмаһы эшенә шулай ентекләп туҡталабыҙ һуң әле? Сәбәбе ябай: рәсми әҙәбиәттә һәр ваҡыт маҡталып килгән Өфө большевиктары сәйәси эшмәкәрлегенең йөкмәткеһе һуңғы йылдарҙа ғына аңлашыла башланы. Уларҙың төп иғтибары үҙәк органдарҙың әмерҙәрен үтәүҙә генә булған. Әлбиттә, был йәһәттән улар күп эш башҡарған. Әммә ошо әүҙемлектең кире яғы ла булыуы асыҡлана хәҙер: урыҫ милләтле большевиктар урындағы халыҡтың, бигерәк тә улар өсөн бөтөнләй аңлайышһыҙ телдә һөйләшкән, тарихтары ла уларға билдәһеҙ булған башҡорттарҙың уй-хыялына, ынтылыштарына иғтибар итмәгән, милли кадрҙар менән бик үк иҫәпләшеп бармаған. Быға бер генә миҫал. РКП(б)-ның Өфө губкомы тарафынан ҡабул ителгән бер документта башҡорттар араһында абруйы ҙур булған Гәрәй Ҡарамышевҡа ҡарата ошондай һүҙҙәр яҙылған: "Ревкомға ниндәйҙер Ҡарамышев етәкселек итә". Йәки Харис Йомағоловҡа ҡарата ла түбәндәге һүҙҙәр ҡулланылған: "Башревком эргәһендә татар һәм башҡорт

коммунистарының ойошмаһы төҙөлгән, уның башында Йомағолов тигән шикле әҙәм тора".

Һауалылыҡ, урындағы халыҡ вәкилдәренә кәмһетеп ҡарау Өфөнән Белоретка ла эйәреп килә һәм ошондай тәкәбберлек, документтарҙан күренеүенсә, ыҙғыштарға, ә аҙағыраҡ бәхетһеҙлектәргә килтерә.

1919 йылдың авгусында Башҡорт хөкүмәте Саранскиҙан эвакуациянан ҡайта һәм, Стәрлетамаҡта урынлашып алғас, автономиялы республика өсөн берҙәм дәүләт аппаратын төҙөргә тотона. Тамъян-Ҡатай кантоны үҙәге итеп элек билдәләгәнсә Ҡаҙаҡкол түгел, ә Сермән ауылы һайлана, яңынан ревком составына хәрби комиссар К. Иҙелғужин (ваҡытлыса рәйес вазифаһын үтәүсе), Ш. Дауытов (ағза), А. Волчнев (секретарь) индерелә.

**Белешмә:** 1. Кәрим Иҙелғужин. Ҡыпсаҡ волосының Мираҫ ауылында тыуған. 1912—1914 йылдарҙа "Ғәлиә" мәҙрәсәһендә уҡыған. 1918—1919 йылдарҙа Башҡорт ғәскәрендә хеҙмәт иткән. Милли хәрәкәттең идеологтарының береһе. 1919 йылдан бирле РКП(б) ағзаһы. 1919. VII—1920. VIII — Тамъян-Ҡатай кантонының хәрби комиссары. Һуңынан, төрлө кантондарҙа эшләп, халыҡ мәғарифы институты директоры, "Башҡортостан" гәзите мөхәррире, халыҡ мәғарифы министрына тиклем үрләй.

2. Шәйәхмәт Дауытов. Верхнеуральск өйәҙенең Сермән ауылында тыуған. Приход мәктәбен һәм уҡытыусылар курсын тамамлаған. Әрме хеҙмәтен тултырғас, 1918—1919 йылдарҙа Сермән дружинаһына етәкселек итә. 1918 йылдың мартынан — Белорет ревкомы ағзаһы. Һуңынан кантон башҡарма комитеты рәйесе, БАССР-ҙың Тәьминәт бүлеге халыҡ комиссары, Дәүләт планы рәйесе һәм Халыҡ Комиссарҙары Советы рәйесенең беренсе урынбаҫары буласаҡ. 1917 йылдан бирле РКП(б) ағзаһы.

Ревком биш кенә ултырыш үткәреп өлгөрә, ләкин мөһим мәсьәләләр ҡарай. Ашығыс мәсьәләләр араһында — волость һәм ауыл Советтарын ойоштороу, контрреволюциянан зыян күргән ҡыҙылармеецтар ғаиләләренең, етемдәр, ғәриптәрҙең исемлеген төҙөп, уларға ярҙам күрһәтеү, булған бөтә иген, орлоҡ запасын асыҡлау, һөрөнтө ерҙәрҙе, сабынлыҡтарҙы иҫәпкә алыу һ.б. Шул арала урындарҙан ҡыуаныслы хәбәрҙәр ишетелә. Әлегә тиклем Верхнеуральск өйәҙенә буйһоноп йәшәгән Типтәр-Учалы, Ахун волостарынан 17 сентябрҙә, кантон ревкомын һәм, ғөмүмән, Совет власын ҡотлауҙарын, үҙҙәренең Башҡорт АССР-ына инеүҙәрен белдереп, Сермәнгә вәкилдәр килә.

Аҡтарҙы ташлап кире иленә ҡайтҡан һалдаттарҙы, әгәр улар ярлы халыҡҡа зыян килтермәгән булһа, ярлыҡау мәсьәләләрен дә күтәреп сыға ревком.

## Ҡуйындағы ҡара йылан

Тормошто ошолай аҡрынлап яйға һала башлайҙар. Тик хәлдәр көтмәгәндә ҡатмарланып китә. Кантондың ҡырмыҫҡа иләүе һымаҡ ҡапыл ҡуҙғып китеүенең төп сәбәпсеһе — тиҙҙән тарихта ҡара эҙҙәр ҡалдырасаҡ В. Поленов була.

Бында шуны айырып әйтеп китергә кәрәк: В. Поленовты тарихсылар күрше Бөрйән-Түңгәүерҙә булған ваҡиғалар менән бәйле генә иҫкә ала. Асылда иһә коммунист исемен йөрөткән был ҡот оскос йәлләт үҙ йөҙөн тәүҙә Белоретта аса. Тулы ғәҙеллек булһын тип, шуны ла өҫтәйек: Поленовты Тамъян-Ҡатай кантревкомы итеп тәғәйенләүҙә Шәмиғоловтың ғына түгел, ә Ә. Вәлидовтың да ҡатнашлығы бар. Сөнки Башвоенревком 16 сентябрҙә “Вәлидов иптәш тарафынан ваҡытлыса ревком ағзалары итеп тәғәйенләнгән Поленов менән Иҙелғужин составындағы Тамъян-Ҡатай ревкомын үҙгәртеү һәм шулай уҡ Мирасов иптәште саҡыртып алыу, өсөнсө ағза итеп Дауытовты индереү” тураһында ҡарар ҡабул итә.

Был документты, моғайын, шулай аңларға кәрәктер: Поленов һәм Иҙелғужинды башта Вәлидов тәғәйенләгән, ләкин мәсьәлә тағы бер мәртәбә ҡаралып, Башвоенревком ҡарарға үҙгәрештәр индергән, быға өҫтәп, кантревком рәйесе посына В. Гисты тәҡдим иткән.

Ләкин был бойороҡтар ҙа аҙағына тиклем бойомға ашырылмай. 26 сентябрҙә Тамъян-Ҡатай ревкомы ошо уҡ мәсьәләне ҡарай һәм “Ревком рәйесе итеп Поленовты, урынбаҫары итеп Дауытовты, ревком ағзаһы итеп Иҙелғужинды (бер үк ваҡытта хәрби комиссар ҙа) һайларға” тигән ҡарар сығара (Ревком ултырышы протоколы).

В. Поленов бик ҡыҙыу тотона эшкә: шунда уҡ милиция ойоштора, кантон территорияһын 7 районға бүлеп, милиция начальниктарын тәғәйенләй, дезертирлыҡ, контрреволюция, алып-һатарлыҡ менән көрәшеүҙе көсәйтеү өсөн үҙ ҡулы менән ҡарар әҙерләй, 2 октябрҙә Инйәр волосына, “юлбаҫарҙар бандаларын ҡыйратыу өсөн” И. Волков етәкселегендә 20 кешенән торған ҡораллы отряд сығарып ебәрә. Дөйөмләштереп әйткәндә, үҙенең беренсе аҙымдарынан уҡ ревком репрессив юлдар һайлай.

Кантон учреждениеларын ҡайҙа урынлаштырыу мәсьәләһе лә бик киҫкен хәл ителә. Поленов, хәрби комиссариатты ғына Сермәндә ҡалдырып, ревкомды Белорет заводына күсерә һәм ошо

аҙымы менән ул ике органдың үҙ-ара ыҙғышыуына мая һалып ҡуя. Алғараҡ китеп, шуны әйтәйек: ревком, оҙаҡ бәхәсләшкәндән һуң, бер айҙан кире Сермәнгә киләсәк, ә декабрь айында кантЧК Белоретҡа күсереләсәк, 1920 йылдың ғинуарында, ауылда биналарҙың етешмәүе сәбәпле, ревком үҙе лә Белоретҡа ҡайтасаҡ.

Белоретты ҡала итеп иғлан итеү мәсьәләһе буйынса ла шул уҡ хәл ҡабатлана. Поленов, 1919 йылдың октябрендә Верхнеуральск ревкомы вәкилдәре ҡатнашлығында Белорет һәм Тамъян-Ҡатай ревкомдарының берләштерелгән ултырышын үткәреп, "Белоретты ҡала итеп иғлан итергә һәм Башвоенревкомдың был ҡарарҙы раҫлауын һорарға", — тигән документ ҡабул иттертә.

Завод коммунистарының Белореттың мәртәбәһен арттырырға, уны кантон үҙәге итергә тырышыуы бик тә аңлашыла: бында уларҙың позицияһы ныҡлы, нимә уйлаһалар ҙа шуны бойомға ашыра алалар, эргәлә Поленов ише "полицейский" торғанда бигерәк тә. Бер яҡтан, завод партия ойошмаһының эшселәр мәнфәғәтен генә күҙәтеүе, икенсе яҡтан, ауылдарҙа йәшәгән башҡорттарҙың үтә лә фәҡирләнеүе 1919—1920 йылдарҙа ревком менән хәрби комиссариат араһындағы ыҙғыштың төп нигеҙен тәшкил итә. Ревком рәйесе булып Ш. Дауытов эшләй башлағас та тартҡылаштар туҡтамай, тәжрибәһе ярайһы уҡ ҙур булған был коммунист та ике көс уртаһында юғалып ҡалған һымағыраҡ.

Сермән менән Белорет, йә иһә Иҙелғужин менән Поленов араһындағы аңлашылмаусанлыҡ үҙен 1919 йылдың октябрь урталарында ныҡ һиҙҙерә. Инйәр яғына разведкаға барып әйләнгән И. Волков унда артыҡ хәүефләнерлек нәмә күрмәһә лә, һәм, ғөмүмән, кантонда әлегә именлек һаҡланһа ла, Поленов "дошман" эҙләүен дауам итә һәм хәрби комиссариат менән мөнәсәбәтен ҡырҡыулаштыра. 16 октябрҙә Поленов: "Кисә хәрби комиссариатҡа контрреволюцион фетнә тураһында телефонограмма килгән, ләкин комиссариат был хаҡта кантревкомға хәбәр итмәгән", — тип бәлә һала һәм, Иҙелғужинға шелтә бирергә, тигән ҡарар сығарта. Ул шулай уҡ, республика хәрби комиссары Вәлидов менән бәйләнешкә инеп, дезертирҙар комиссияһына етәкселек итеүҙе Иҙелғужинға йөкмәтергә тырыша (ревком ултырышы был эште И. Волковҡа тапшыра).

Артабан беҙ Поленовтың дезертирҙар менән нисек "көрәшеүе", башҡорттар араһында һаман шикле кешеләр эҙләүе, һорау алған саҡта тотҡондарҙы яҙалауы хаҡында айырым иҫтәлектәрҙән белә алабыҙ. Ул үткәргән сәйәсәтте кантондың төньяғында, Вознесенка волосында милицияла эшләгән Иван Селивановтың (ҡушаматы — Кәләс), Совет власы файҙаһына тип, кешеләрҙе "бомба" менән

ҡурҡытып, һуңғы мөлкәттәрен алып йөрөүенән дә төҫмөрләргә була.

Поленовтың ҡылыҡтары тураһында хөкүмәткә еткереүселәр ҙә булғандыр, тип уйларға кәрәк. Сөнки бер ай ваҡыт үтеүгә ул баҫыла төшә. 22 октябрҙә ревком ултырышында рәйеслек итһә лә, ул бер мәсьәлә буйынса ла һүҙ алмай (ә тәүге ултырыштарҙа һәр мәсьәлә буйынса сығып һөйләй). Идара итеү бүлеге мөдире Козловтың сығышынан һуң, ревком ошондай ҡарар сығара: "Көнсығыш фронт штабына делегат ебәреп, уның аша сроктары тулған иптәштәрҙе артабан да урындарында ҡалдырыуҙарын һорарға. Кантревком рәйесе Поленов та, мәсьәлә асыҡланғанға хәтлем, бында эшләүен дауам итә".

Өс көн үткәс, Поленов, эштән сығармауҙарын, ә бында ҡалдырыуҙарын һорап, ғариза бирә. Ревком, Поленовтың үтенесен хәл итә алмай һәм фронт штабына уның үҙен ебәрергә, тигән ҡарар сығара (14-се протокол, 1919 йылдың 25 октябре).

Урыҫ телле ҡайһы бер матбуғат биттәрендә арҙаҡлы башҡорт эшмәкәре С. Мырҙабулатовҡа мөмкин тиклем күберәк бысраҡ ташлау йәһәтенән Поленовтың вазифанан алыныуын туранан-тура уға япһарып килделәр. Ысынбарлыҡҡа был бик үк тап килмәй. Сөнки Мырҙабулатов Тамъян-Ҡатай ревкомында Башҡортостан Үҙәк ревкомы вәкиле сифатында тәү тапҡыр 30 октябрҙә генә ҡатнаша. Ләкин шуныһы дөрөҫ: ул мәсьәләне ҡабырғаһы менән ҡуя. "Ҡайһы бер кантон ревкомдарында башҡорт милләтле хеҙмәткәрҙәрҙе эштән ситләтеү һиҙелә, ә беҙ башҡорт хеҙмәткәрҙәрен вазифаларынан алырға түгел, ә киреһесә, фирҡәһеҙ булһалар ҙа, уларҙы эшкә йәлеп итергә, революция тарихы менән таныштырырға һәм быуаттар буйына һуҙылған иҙелеүҙән ҡотҡарырға тейешбеҙ", — ти ул (15-се протокол).

1 ноябрҙә хәрби ревкомдың сираттағы ултырышында Ғәҙәттән тыш тикшереү комиссияһының полномочиелары бөтөрөлөп, уның бурыстары кантон хәрби судына йөкмәтелә. Ошонда уҡ Мырҙабулатов ревкомдың составын үҙгәртеү мәсьәләһен ҡуя, ревком рәйесе итеп Ш. Дауытовты тәҡдим итә.

Иртәгеһенә ревком тағы Поленов мәсьәләһен ҡарай. Ултырышта ҡатнашҡан Гулин: "Ни өсөн Поленов ҡулға алынды?" — тип һорай. Быға яуап итеп, Мырҙабулатов: "Поленов, кантревком рәйесе посында тороп, үҙенә бирелгән властан артыҡ файҙаланған, үҙ вазифаһынан ситкә тайпылған, тип табылды. Шуның өсөн ул ҡулға алынды, ә материалдар тикшереү өсөн ашығыс рәүештә Башҡортостан ЧК-һына ебәреләсәк", — тип аңлата. Шул уҡ ваҡытта ул Белорет парткомының Поленов эшенә ҡыҫылмауын һорай.

Бында шуныһы иғтибарға лайыҡ: Тамъян-Ҡатай ревкомы документтарынан күренеүенсә, Поленов йылы ҡуйын эҙләгән йылан шикелле йәнә һәм йәнә килеп әйләнәсәк. 1919 йылдың декабрь аҙағында Ә. Вәлидов ҡушыуы буйынса ул Стәрлетамаҡҡа бара һәм ҡайтҡас, Тамъян-Ҡатай кантревкомының ниндәйҙер йомошо менән Верхнеуральскиға юллана. Ике юлдың да сығымдарын Тамъян-Ҡатай кантревкомы иҫәбенә ҡаплата, бының өсөн 5.900 һум аҡса ала. Ниндәй эштәр башҡарып йөрөй ул — билдәһеҙ, әммә ул 1920 йылдың 1 апрелендә Магнит-Комаровск тау округының тәьминәт бүлеге вәкиле сифатында Белоретта тармаҡ-ара кәңәшмәлә ҡатнаша, ә һуңғараҡ, кемдеңдер ярҙамына таянып, Бөрйән-Түңгәүер кантонында булып сыға (унда Поленовтың башҡорттарға ҡаршы ниндәй яуыз эштәр ҡылыуы тураһында әҙәбиәттә етерлек яҙылған. — **Авт.**).

## Ҡоралланыу

Тамъян-Ҡатай кантонында халыҡ ризаһыҙлыҡтарының көсәйеүенә беренсе сиратта В. Поленовтың этлектәре, уны яҡлап сығыш яһаған Белорет партия ойошмаһының ҡоралланыуы һәм сәйәси көрәште ҡораллы һуғыш юҫығына күсереүе сәбәпсе булғандыр, тип әйтергә тулы нигеҙ бар. Ә һуңынан ошо төбәктә фетнә ойоштороуҙа ғәйепләнәсәк һәм юҡ ителәсәк С. Мырҙабулатов ниндәй эштәр менән мәшғүл була һуң?

Тамъян-Ҡатай кантревкомын яңыртҡас һәм Сермәнгә күсергәс, ул тағы бер аҙға Сермәндә ҡалып, учреждениеларҙы утын менән тәьмин итеү, өйҙәр ремонтлау, бының өсөн хатта Вәлидовҡа ла мөрәжәғәт итмәйенсә урында уҡ аҡса табып биреү (кооперативтан 1 миллион һум ала. — **Авт.**) кеүек эштәрҙе башҡара. Ә шул арала завод парткомы йәшерен рәүештә ҡасаба коммунистарына ҡорал тарата. Ячейкалар төҙөп өлгөргән Ахун, Николаевка кеүек ауылдар ҙа бишәр винтовка алып ҡайта. Быны күреп, хәрби комиссар Г. Ҡарамышев 1920 йылдың 2 ғинуарында Белоретта хәрби хәл иғлан итә һәм коммунистарҙың ҡорал тапшырыуын талап итә. Ошо уңай менән ревком (рәйесе Ш. Дауытов), "кантон өсөн бөтә яуаплылыҡ ревкомға йөкмәтелгән, ундағы хәлде үҙгәртеү, әгәр Үҙәктән бойороҡ булмаһа, ревкомдың рөхсәте менән генә эшләнергә тейеш", тигән ҡарар ҡабул итә һәм, комиссариат ни өсөн хәрби хәл индерҙе, тип аңлатма биреүҙе талап итә.

Кантондағы хәлдәрҙең ҡырҡыулашыуында һис шикһеҙ Ғ. Шәмиғоловтың да ғәйебе бар. Ул, Тамъян-Ҡатай кантонына 1919 йылдың декабрь башында БашЧК вәкиле сифатында килеп, шунда

уҡ канЧК-ны Сермәндән Белоретҡа күсертә һәм бик тиҙ арала ревкомға кире мөнәсәбәтен белдерә, хатта ике ай үтеүгә ревкомға буйһонмай башлай. 1920 йылдың 15 февралендә ул, Ахун ауылына командировкаға ебәрелгән хәрби комиссариат вәкиле Солтановты ҡулға алып, комиссариат менән конфликтҡа инә. Был ыҙғыштың сәбәбен асыҡлағанда канЧК "комиссарҙары"ның ришүәт алыуҙары, башбаштаҡлыҡ ҡылыуҙары ла асыҡлана. Ошо ғәйептәре арҡаһында булһа кәрәк, биш ай ҙа үтмәй, 1920 йылдың 22 мартында Шәмиғолов, Тамъян-Ҡатай кантонын ҡалдырып, Стәрлетамаҡҡа ҡайтып китә.

Башҡорт халҡының күренекле улы Дауытовтың да был осорҙағы ҡылыҡтары, бигерәк тә хәрби комиссариатҡа ҡарата мөнәсәбәте, бик үк аңлашылып етмәй. Бәлки, уның күберәк урыҫтар араһында йәшәп, 1918 йылда аҡ гвардеецтар тарафынан төрмәгә ябылыуы һәм атырға хөкөм ителеүе лә үҙенекен иткәндер? Һәр хәлдә, Дауытовтың коммунистик ҡараштарҙан бер килке лә ситкә тайпылмайынса, Белорет коммунистары менән ҡулға-ҡул тотоношоп эшләүе ныҡ һиҙелә. Партия ойошмаһы етәкселәре кеүек үк ул да кантонда икмәккә дәүләт монополияһы булдырыуға, продразверстка үткәреүгә беренсе сираттағы эш тип ҡарай.

Кантревкомдың 1919 йыл аҙағындағы, 1920 йыл башындағы документтарын ҡарағанда, хронологик тәртиптә бына ниндәй ваҡиғалар күҙ алдына килеп баҫа. Ревком 28 ноябрҙә "Башкиропомощь" уполномоченныйы Бикбулатовтың докладын тыңлай, 29 ноябрь — икмәк монополияһын индереү өсөн ошо комиссияға 40 кеше бүлә, 23 декабрь — аҙыҡ-түлек комитеты рәйесе итеп яңы кешене тәғәйенләй, 27 декабрь — ошо уҡ комиссияға яңы ағзалар индерә, 5 ғинуар — Ҡатай волосы граждандарының кантпродкомдың малдар реквизициялау (мәжбүри рәүештә мал йыйыу) тураһындағы приказын ни өсөн үтәмәүен тикшерә, шул уҡ көндө — кантонда аҙыҡ-түлектең бөтөнләй булмауы тураһында продком мөдире Соколовтың докладын тыңлай, халыҡтың артыҡ (?) аҙыҡ-түлеген дәүләткә алыу кәрәклеген аңлатыу буйынса эш йәйелдерергә ҡуша, волость ревкомдарына мотлаҡ рәүештә дәүләт развёрсткаһын үткәрергә тип, бойороҡ сығара.

Әммә волостарҙа кантревком сәйәсәтенә ҡаршылыҡ күрһәтеү ҙә көсәйә бара. Бына ул рәсми рәүештә теркәлгән ваҡиғалар: 1920 йылдың башында Ҡатай волосы халҡы мал тапшырыу тураһындағы ҡарарға ризаһыҙлығын белдерә. Белоретта аҙыҡ-түлек менән эш иткән Моисеев тигән кеше шул уҡ Ҡатай халҡына ярҙам йөҙөнән бер аҙ аҙыҡ-түлек биреү тураһындағы бойороҡто үтәмәй, Дауытовтың үҙен тиргәп, ҡыуып ебәрә; Туңғатар, Вознесенка волостарында

ла дәүләткә иген тапшырыуҙан баш тарталар. Ә Поляковка волость Советы рәйесе, элекке ҡыҙыл партизан В. Ушаков, әгәр большевиктар игенде тартып алабыҙ тип отряд килтерһә, беҙ, ҡорал тотоп, уға ҡаршы сығасаҡбыҙ һәм, ғөмүмән, беҙ Тамъян-Ҡатай кантревкомына буйһонорға теләмәйбеҙ, сөнки беҙ уны һайламағанбыҙ, тип белдерә. Вознесенка ауылында Тау округы рәйесе Г. Бибиков иһә, башҡорттарҙан һыбайлы отряд туплап, баш күтәрә һәм продармеецтарҙы эҙәрлекләй башлай.

Кантревком рәйесе Дауытовҡа, хәрби комиссариаттан 21 кеше алып, "Үҙәк приказдарын үтәмәгән волостарға йоғонто яһау өсөн" төньяҡ төбәккә юлланыуҙан башҡа сара ҡалмай. Кантпродком ағзаларын туҡмағаны өсөн ул Бибиковты ҡулға ала, ләкин Поляковкала эшләгән агенттарҙың эскелек менән шөғөлләнеүен, ҡатын-ҡыҙҙарҙан көлөүен дә асыҡлай ул. Дауытов, ун биш көн йөрөп ҡайтҡандан һуң, информация биреү өсөн Стәрлетамаҡҡа китә. Март аҙағында төньяҡ волостарға кантревком ағзалары Козлов, Туркестанова ла барып әйләнә, Стәрленән БашЧК коллегияһы ағзаһы С. Мырҙабулатов килеп етә. Иҙелғужин урынына тәғәйенләнгән Козловты алмаштырған Г. Ҡарамышев та, волость башҡарма комитеттарына һәм хәрби комиссариаттарға инструктаж биреү өсөн кантон буйлап сығып китә.

Ҡулға алынған Бибиков урынына Вәлидов Тау округы рәйесе итеп Бикчәнтәевты тәғәйенләй, Вознесенкаға округ бухгалтеры итеп кантревкомда эшләгән Волчневты ебәрәләр — шулай итеп, кадрҙар составын яҡшыртыу буйынса байтаҡ саралар күрелә.

Етәкселәрҙән Иҙелғужин, Дауытов, Шәмиғолов, Ҡарамышевтар хаҡында әйтеп үттек инде. 18 апрелдән кантмилиция начальнигы итеп З. Ғәликәев, 27 апрелдән кантревком рәйесе булып М. Халиков эшләй башлай. 25 майҙа канЧК рәйесе итеп бик теремек Ғ. Айытбаев тәғәйенләнә һәм тиҙ арала Ғ. Шәмиғоловтың хаталарын төҙәтеп өлгөрә. Әлегә хәтлем Үҙәк хөкүмәт вәкиле сифатында ғына килеп йөрөгән С. Мырҙабулатов та 14 майҙан бында ныҡлап эшкә егелә һәм бер ай буйына көн дә тиерлек Тамъян-Ҡатай кантревкомы ултырыштарында ҡатнаша.

Ләкин был саралар ғына дөйөм хәлде яҡшырта алмай. Эш бында теге йәки был етәксенең яҡшы йә иһә йүнһеҙ булыуында ла түгел, ә, беҙҙеңсә, кантон етәкселегенең утлы ҡорал ярҙамында нисек тә булһа продразверстканы үтәп сығырға тырышыуында. Әйткәндәй, был тәңгәлдә Вәлидов телеграммаһын да иҫкә алып китергә кәрәк. Ул "Үҙәктән сәсеү орлоғона наряд бирелмәне, шулай булғас, халыҡтан артыҡ игенде тартып алыу буйынса энергиялы

саралар күрергә" ҡуша (46-сы протокол, 27 апрель). Шулай инде, тормош бит ул үҙенекен талап итә.

Эш тағы шуның менән ҡатмарлана: Тирлән партия ойошмаһы Башреспублика составынан сығыуы тураһында белдерә, был ынтылыш Белорет халҡында ла, кантондың урыҫ милләтле башҡа ауылдарында ла һиҙелә. Ҡайһы бер волостарҙа — бигерәк тә Вознесенка һәм Поляковкала — ситтән килеп төпләнгән һәм башҡорттарҙан арендаға ер алып йәшәгән урыҫ ғаиләләре, үҙ биләмәләрен киңәйтергә ниәтләнеп, әленән-әле ыҙғыш сығарып тора. Ошо эштәргә күрше Силәбе губернаһы ревкомы ла ҡыҫыла. Һөҙөмтәлә ике территория хакимиәттәре араһында бәхәс тыуа.

## Айырымланыу

Килеп тыуған иҡтисади ауырлыҡтар, илдәге киҫкен сәйәси хәлдәр кантон етәкселәренең кәйефенә кире йоғонто яһамайынса ҡалмай, әлбиттә. 11 майҙа Г. Ҡарамышев: "Мин һөнәрем буйынса уҡытыусы, мине бүлек мөдирлегенән бушатығыҙ", — тип ғариза яҙып бирә. Үпкә сире менән яфаланған Ш. Дауытов та Стәрлетамаҡҡа китә (тик уны 8 июндә финанс бүлеге мөдире итеп тәғәйенләйәсәктәр. — **Авт.**) Нигеҙһеҙ төрлө ғәйептәр ташлауға түҙә алмай, КантЧК рәйесе Ғ. Айытбаев 26 майҙа эштән ебәреүҙәрен һорап ғариза яҙа. Уны Мырҙабулатов яҡлап, ревком тарафынан уға тулы ышаныс белдергәс кенә, Айытбаев эшендә тороп ҡала.

Мырҙабулатов үҙе лә, уның БашЧК уполномоченныйы сифатында бында эшләүен бик үтенеп һораһалар ҙа, 8 июндә Стәрлетамаҡҡа китә — уны саҡыртып алалар, Кантревкомдың 59-сы протоколынан күренеүенсә, әлегә эшенән бушатылмаған Г. Ҡарамышев та, отпуск алыу һәм дауаланыу өсөн командировка бирелеп, Башвоенревком ҡарамағына ебәрелә.

Тамъян-Ҡатай кантоны етәкселәренең шулай тырым-тырағай урындарынан китеп бөтөүе сәйерерәк тойола, әлбиттә. Ләкин был тәү ҡарамаҡҡа ғына шулай. Был хәл Ә. Вәлидиҙең Мәскәүҙән хат ебәргән ваҡыт менән тап килә. Бәлки, уларҙың таралышыуы тура-нан-тура Вәлидиҙең әмере менән бәйле лә түгелдер, әммә уларҙың бик борсолоп йәшәүе былай ҙа ныҡ һиҙелә һәм был аңлашыла: ҙур ауырлыҡтар аша яулап алынған автономияны бер йыл үтеүгә юғалт әле! Әхмәтзәки Вәлидиҙең Мәскәүҙә ни өсөн тоткарланыуы, кире әйләнеп ҡайта алмауы хаҡында Иҙелғужин да, Ҡарамышев та, башҡалар ҙа белгән булғандыр. Хәбәрҙәр килеп етеп торғандыр. Мәҫәлән, ВЧК-ның Башҡортостандағы махсус уполномоченныйы

Журбинский ҙа, йыш ҡына Тамъян-Ҡатай кантонына килеп, ревком ултырыштарында ҡатнашып йөрөй, 4 июндә ул, РКП(б)-ның Башҡортостан өлкә комитеты президиумында сығыш яһап, шуны белдерә: "Минең белеүемсә, ти ул, Башревком Башҡортостандың яңы хәлен өлкә комитеттан алдараҡ белгән. Ошо хаҡта Башревком урындарға телеграммалар һәм йомошсолар ебәрә, протестар, тәкдимдәр әҙерләргә кәрәклеген әйтеп, быны сер итеп һаҡларға ҡуша. Өлкә комитеттан былай йәшерен эшләүгә ул (йәнәһе) протест белдерә".

1920 йылдың 26 июнендә партияның Башҡортостан өлкә комитетынан Белоретка телеграмма килеп төшә. "Милли агитация Башревкомдың ҡасып китеүе менән тамамланды, — тиелә унда. — Башҡортостан 10 көн буйына Үҙәк власһыҙ тороп ҡалды. Уларҙың планы өлкә комитетка әлегә билдәһеҙ, ләкин шуны тойомларға була: улар өлкә партия ойошмаһын икегә бүлергә һәм Көнсығыш халыҡтары араһында Совет власына ҡаршы хәрәкәт ойошторорға теләй. Был авантюраның ахыры хурлыҡлы буласаҡ. Өлкә комитет уларҙы партия, Үҙәк власть һәм башҡорт ярлылары алдында енәйәтсе тип иҫәпләй..."

Ләкин Ә. Вәлиди хөкүмәте ағзаларының фекере бөтөнләй икенсе. Өлкә комитеттың 21 июнендәге киңәйтелгән ултырышында хөкүмәт ағзаһы А. Йәғәфәров, Башҡортостан хеҙмәтсәндәренең төп уйҙарын сағылдырып, былай ти: "Беҙ бик борсоулы көндәр кисерәбеҙ... БССР тураһындағы 1920 йыл 22 май ҡарары беҙҙең хеҙмәткәрҙәргә үлемесле йоғонто яһаны. Беҙ автономиялы республика төҙөнөк, ә хәҙер Үҙәк уны бирмәй. Хәҙер беҙҙең бер бушлыҡта эшләүебеҙ аңлашыла".

Июнь урталарында Тамъян-Ҡатай кантоны ревкомының эше һүнә тиерлек. Ревкомда башҡорттарҙан кемдәр генә тороп ҡала һуң? М. Халиков (рәйес, бер айҙан ул да китәсәк), финанс бүлеге мөдире Ш. Дауытов, мәғариф бүлеге мөдире А. Рәсүлев.

Өлкә комитеттың үрҙә иҫкә алынған телеграммаһында: "Аңлатыу эштәрен йәйелдерергә, әгәр Тамъян-Ҡатай кантревкомы ағзалары ла таралышһа, уның составын үҙегеҙҙең кандидаттар иҫәбенә тулыландырырға", — тигән һүҙҙәр бар. Әйтелгән — үтәлгән. 22 июндә — кантревкомдың мәжбүри эштәр бүлеге мөдире Шәмсетдинов, 7 июлдә Иҙелғужин ҡулға алына һәм улар урынына Козлов, Щекуновтар тәғәйенләнә. Милиция начальнигы посына партия ойошмаһы тәкдиме менән — Щербаков, дезертирҙар комитеты рәйесе Ғ. Усманов урынына И. Волков үрләтелә.

Элек Өфө губкомынан ебәрелгән кешеләр һәм Белорет большевиктары, күберәк шовинистик мәнфәғәттәрҙән сығып, алдараҡ хәл

ителмәй ҡалған мәсьәләләрҙе яңынан күтәреп сыға. Мәҫәлән, Мулдаҡай, Туңғатар волостарындағы "буш ятҡан" ерҙәрҙе тартып алып, Поляковка һәм Вознесенка волостарына бирергә; Белорет заводын 22 июндән алып штаттан тыш ҡала тип иғлан итергә; кантревкомды кантон башҡарма комитеты итеп үҙгәртеп, уның составына яңы кешеләр һайларға.

14 июлдә кантон башҡарма комитеты, махсус рәүештә продотряд төҙөмәҫкә, ә халыҡтан иген йыйыуҙы, ЧОН штабы менән бәйләнешкә ингәндән һуң уның ярҙамында башҡарырға, тигән ҡарар ҡабул итә. Йәй етеп, Белорет заводы эшселәренең дә бесән сабырға күпләп китеүе сәбәпле, гарнизон начальнигына ҡаланан сыҡҡан бөтә юлдарға ла заставалар ҡуйырға һәм халыҡты пропускалар буйынса ғына үткәрергә ҡушыла. Икенсе төрлө әйткәндә, Белореттағы тормош хәрби юҫыҡҡа күсерелә.

## Ризаһыҙлыҡ

Август-сентябрь айҙарында, бесән әҙерләү хәл ителә биргәс, халыҡ ауыҙынан ризығын тартып алыу тағы ҡыҙыулатыла. Ошо эште башҡарып сығыу өсөн махсус рәүештә 25 агент бүленә. Развёрстканы көсәйтеү маҡсатында дүрт кешенән торған Ғәҙәттән тыш комиссия төҙөлә. Үҙәк органдарҙың бойороғо буйынса аҙыҡ-түлектең бөтә төрҙәрен дә иркле һатыу йәки һатып алыу ҡәтғи рәүештә тыйыла. Былдай таланыуҙан ситтә тороп ҡалмаһындар тип, ахырыһы, кантон Советы башҡарма комитеты 14 сентябрҙә: "Бөтә башҡорттар ҙа йәйләүҙәренән ҡышлаҡтарға ҡайтарылырға тейеш", — тигән приказ сығара.

Был юлдарҙы яҙғанда, миндә, аҙыҡ-түлек развёрсткаһы ярлыябағаға ла ҡағылдымы икән, тигән һорау тыуҙы. Уға 1919—1920 йылдарҙа агент булып эшләгән Федор Сапуновтың яуап биргәне бар. Хәлде ул бына нисек аңлатты: "1919 йылда мин продкомға продармеец булып урынлаштым. Мине, һигеҙ кешегә командир итеп, Учалы, Туңғатар волостарына продразверстка үткәрергә ебәрҙеләр. Был бурысты тормошҡа ашырыуы бик ауыр булды. Көс ҡулланырға ла тура килде. Иген, мал-тыуарҙы кантон халҡын ашатыу өсөн Белоретҡа оҙата инек. Беҙҙең бүлек Поляковка ауылында, Д. Недошивин тигән кулактың йортонда булды: юғары ҡатта хужа үҙе йәшәй, беҙ — аҫҡы ҡатта. Продразверсткаға бандалар ныҡ ҡамасаулыҡ яһаны. Хәтерләүемсә, улар Вознесенка эргәһендә продармеецтар Мамыкин менән Визгаловты үлтерҙе. Икенсе отрядтың командиры В. Пирожников та улар ҡулына эләкте. Атырға тип алып китеп барғанда, ул ҡасып ҡотолған". "Байлыҡтары мул ке-

шеләр күп инеме ни?" — тигән һорауға Федор Кузьмич шуларҙы һөйләне: "Поляковкала биш кулак бар ине, Вознесенкала — икәү, Учалы ауылында — берәү, Өргөндә лә берәү. Иң ҙур кулактарҙың сама менән 50—100 һарығы, 20-шәр һыйыры, 70 дисәтинә ере була торғайны. Уларҙан алынған байлыкты ылауҙар менән оҙата инек... Икмәк йыйыуға килгәндә, тәртип былай: бер кеше иҫәбенә бер бот иген, сәсеүгә етерлек орлоҡ ҡалдырабыҙ ҙа башҡаһын алабыҙ... Ә башҡорттарҙан йыйырлыҡ нәмә юҡ ине, улар бик фәкир булды бит".

Эйе, башҡорттарҙың тамам бөлгөнлөккә төшөүе сер түгел: граждандар һуғышы ваҡытында уҡ төп байлығы — мал-тыуарынан — мәхрүм булып ҡалған һәм инде урман эштәре менән дә шөғөлләнә алмаған халыҡ, 20-се йылғы ҡоролоҡта тотошлай ҡырылып бөтөү ҡурҡынысы алдына баҫа. Аҙағыраҡ урыҫ яҙыусылары: "Башҡорт халҡы кисергән аслыҡ алдында Волга буйындағы ҡот осҡос хәлдәр ҙә төҫһөҙләнеп, тоноҡланып ҡала", — тип юҡҡа ғына әйтмәҫ. Аслыҡ башланғас, хөкүмәт продразверсткаһының туранан-тура башҡорт ярлыларына ҡағылыуы шикле. Шулай ҙа ҡыҫыу барыбер булған. Һәм аңлашыла ки: кисә генә ҡыҙылармееҫ кейеме кейеп йөрөгән ирҙәр, үҙ хөкүмәтенең ҡушыуына буйһоноп, урмандарға йәшеренә, ҡасҡындарға, "ғизетдиндәргә" әүерелә. Көҙ етеп, һалҡындар төшкәс, Бөрйән-Түңгәүер кантонында Х. Унасов кеүек үк, Тамъян-Ҡатайҙа ла элекке батрак, әрменән прапорщик званиеһында ҡайтҡан Фәтҡулла Мәғәсүмов (хәҙерге Учалы районының Малай Муйнаҡ ауылы кешеһе), күпселеге ҡасҡындарҙан торған һәм мобилизация иғлан итеү юлы менән йыйып алынған ҙур төркөм башында Учалы менән Белорет араһында юлбаҫарлыҡ ҡылырға, ауылдарҙа төҙөлә башлаған партия ячейкаларын туҙҙырырға тотона.

Был болаларға, уның тәүге осоронда уҡ айыҡ күҙ менән ҡарап, ҡайҙа бандитлыҡ, ҡайҙа ҡасҡынлыҡ, ә ҡайҙа милли-азатлыҡ хәрәкәте икәнен айырып һәм дөрөҫ баһа биреп, эште үтә олоға ебәрмәҫкә кәрәк булғандыр ҙа бит, тик, әлеге лә баяғы, быға власть башындағыларҙың үҙҙәрен һәр ваҡыттағыса бик аҡыллы һанап, халыҡ тауышына ҡолаҡ һалмауы ҡамасаулағандыр, тигән фекер ныҒына. Был йәһәттән Тамъян-Ҡатай башҡарма комитетының 1920 йылдың 1 октябрендә үткәрелгән ултырышы иғтибарға лайыҡ. Унда партияның Өфө губерна комитеты вәкиле Скобцовтың тәкдиме менән: "Кантонда совет төҙөлөшөнөң төп бурыстарына ҡаршы контрреволюция баш ҡалкыта", — тигән һүҙҙәр индерелгән ҡарар ҡабул ителә.

Бер төрлө генә һәм ҡәтғи төшөнсә: контрреволюция! Аҙ ҙа түгел, күп тә түгел. Ә контрреволюция икән — ҡорал ҡулланырға, аçырға ла, киçергә лә мөмкин. Беҙҙә бит шулай. Һәм Урал аръяғында оло ҡыйралыш башлана. Уның ахыры, партияның өлкә комитеты фараз иткәнсә, ысынлап та, ҡыҙғаныс була. Бигерәк тә кантондың төньяҡ өлөшөндә йәшәүселәр өсөн. Сөнки Баймаҡ, Темәс, Әбйәлил тирәләрендә баш күтәреүселәрҙең (уларға Хәжиәхмәт Унасов, Ф. Юламанов, Зәйнуллин, Мөждәбә Рәсүлевтар етәкселек итә) күпләп үлеүе документтарҙа теркәлмәгән, ә бына Туңғатар, Малай Муйнаҡ, Мансур, Буранғол, Әүеш ауылдарынан Фәткулла Мәғәсүмов, Ишмөхәмәт Мөжәүировтар артынан киткәндәрҙе асыраҡ яҙмыш көтә. 500 кешенән торған Мәғәсүмов төркөмө (уға шул тиклем уҡ тиерлек казактары менән күрше станицаларҙан элекке аҡ офицерҙар Выдрин, Луконindар килеп ҡушыла һәм, Поляковка тирәһендә ҡалып, ҡан ҡойошто арттырып ебәрә) кантондан ситкә, төньяҡҡа ҡарай юллана һәм, ҡаты һыуыҡтар төшөүгә ҡарамаçтан, Урал урмандары аша ауыр юл үтеп, Златоуст ҡалаһына барып инә. “Йәшелдәр” тимер юл станцияһына һөжүм итә, хәрби комиссариатты, батальон торған хәрби казарманы баçып ала, ҡорал заводына йүнәлә. Ләкин ҡала чекистары һәм ВОХР ғәскәрҙәре батальоны ихтилалсыларҙы сигенергә мәжбүр итә. Ҡайтыу яғынараҡ йүнәлгәндә, Веселовка ауылы эргәһендә уларҙы Богатырев (Силәбенән), Тирлән, Белорет, Ахун отрядтары (уларға Дауыт Мортазин, Волков, Штырляев һ.б. етәкселек итә) ҡамап ала. Ҡаты һуғышта байтаҡ кеше ятып ҡала, яралана, 300 кеше әсирлеккә төшә. Ҡайһы берҙәре тыуған яҡтарына ҡасһа ла, уларҙы ЧОН отрядтары ҡыуып етеп, араларынан бигерәк тә Белорет эшселәре, баш күтәреүселәрҙе өйҙәренең тупһалары эргәһендә тиерлек, Мулдаш, Мулдаҡай ауылдары араһында, ҡанға батыра.

Шулай итеп, нигеҙҙә элекке хәрби офицерҙар, хәрби комиссариаттар һәм милиция хеҙмәткәрҙәре етәкселегендә баш күтәргән ябай халыҡ ниндәй файҙа күрҙе һуң? Бер ниндәй ҙә! Уларҙың коммунистарһыҙ Советтар төҙөү, сауҙаны ирекле итеү, Вәлидов Ревкомын кире Башҡортостанға ҡайтарыу һәм башҡорттарҙың ергә аçабалыҡ хоҡуғына тейҙермәү — был теләктәрҙең береһе лә бойомға ашмай. Талаптар документ рәүешендә властар алдына ҡуйылмай, һәр хәлдә урындағы кантревкомдар быны ахырынаса белеп тә етмәй. Шулай булғас, халыҡ ихтилалы булдымы был, булһа, төптән уйланылған инеме? Хәйер, бындай ваҡиғаларҙың алдан уйланылыуы мөмкин дә түгелдер — улар ихтыярҙан тыш, стихиялы рәүештә килеп сыға. Ә шулай ҙа...

Башҡортостан хәрби комиссариаты тарафынан ғәскәри частарҙың таратылыуы һәм ҡыҙылармеецтарҙың өйҙәренә ҡорал менән ҡайтарып ебәрелеүе бикәр эш булған түгелме? Властар менән һөйләшеп килешеү, үҙ хоҡуҡтарыңды бәхәс аша хәл итергә тырышыу, партия өлкә комитетының бөйөк державасылыҡ сәйәсәте үткәреүенә ҡаршы протест артынан протест белдереү урынына, халыҡтың иң яҡшы өлөшөн — ир-егеттәрҙе — күрәләтә дезертирлыҡҡа этәреү кәрәк булғанмы? Һөҙөмтәлә кантон территорияһында ҡәҙимге юлбаҫарлыҡ ҡына тыуа. Быны бөтөрөү өсөн властарға ла ҡорал көсөнә генә таяныуҙан башҡа сара ҡалмай һымаҡ. Ике яҡтың да башбаштаҡлығы, законһыҙ эш итеүе көсәйә. Ә ҡайҙа законһыҙлыҡ — шунда енәйәтселек: кеше көсләү, талау, үлтереш.

Урал аръяғында халыҡ күтәрелеше баҫтырылғас та, 1920 йылдың ноябрендә ике яҡ "Килешеү" төҙөй. Ләкин унда күрһәтелгәнсә, комиссияға индерелгән М. Халиков, М. Рәсүлевтың рөхсәтенән тыш ихтилалсыларҙың береһенең дә тейелмәҫлеге вәғәҙә ителһә лә, һуңынан бөтәһе лә йә атып бөтөрөлә, йә каторгаға ебәрелә.

С. Мырҙабулатов менән дә шул уҡ хәл ҡабатлана. Уның был болаларҙағы роле әлегә тиклем асыҡланып бөтмәһә лә, байтаҡ документтарҙа С. Мырҙабулатов ихтилалдың төп етәксеһе һымағыраҡ күрһәтелә. Һуңғы йылдарҙа яҙыусы Й. Солтанов "Башҡортостан" гәзитендә ҙур күләмле ике очерк баҫтырып сығарҙы (С. Мырҙабулатов. "Заманы һәм көрәше", 1995 йыл, май; "Баш күтәреүсе Унасов", 1996, ғинуар). Икеһе лә күп тарихи фактарҙы эсенә алған, үҙенсәлекле һығымталар эшләнгән әҫәр. Автор 1920 йылғы боланы, башҡорт халҡының милли-азатлыҡ өсөн алып барған "һуңғы ихтилалы", тип атай һәм уның башында йөрөгән Х. Унасовты ла, Ф. Мәғәсүмовты ла, бигерәк тә С. Мырҙабулатовты милли батырҙар кимәленә күтәрә. Быны менән килешергә мөмкинме? Уйланаһы нәмәләр етерлек. Миңә ҡалһа, айырыуса һуңынан да үҙен күренекле дәүләт эшмәкәре итеп танытҡан С. Мырҙабулатовҡа журналист Д. Мәһәҙиевтың мөнәсәбәте яҡыныраҡ тойола. Тамъян-Ҡатай һәм Үҫәргән ырыуҙары башҡорттары Советтарға ҡаршы баш күтәргәс, боланы мөмкин тиклем аҙ ҡан менән баҫтырыу маҡсатында ул (Мырҙабулатов. — **Авт.**) фетнәселәр араһына инә, бандиттарҙы һәм контрреволюционерҙарҙы восстание башынан осороп, етәкселекте үҙ ҡулына ала, тигән ҡараштa ул.

Эйе, иң ысыны шул булырға тейеш. Сөнки уның милли хәрәкәт етәкселәренең береһе булыуынан башҡа, РКП(б) ағзаһы һәм БашЧК етәксеһе булыуын да онотоорға ярамай. С. Мырҙабулатовтың Тамъян-Ҡатай кантонында, Белоретта эшләгән осорҙа ла кон-

фликтка ингән ике якты нисек тә булһа килештерергә тырышып йөрөүе һиҙелә. Белорет шовинистары менән көрәшеү менән бергә, ул милли сикләнгәнлеккә алып барған аҙымдар ҙа яһамай. Әйткәндәй, тап бына ошо сифаттарҙың да уны милли батыр итеп күрһәтеүе мөмкин.

Польша фронтынан ялға ҡайтып төшкән һәм Белорет кантпарткомы талабы буйынса дезертирҙар менән көрәшеү маҡсатында ҙур булмаған отряд төҙөргә мәжбүр булған Муса Мортазиндың да үҙен тотошо С. Мырҙабулатовтыҡына бик оҡшаған. Ул үҙ отряды менән тыуған ауылы тирәләрендә бер нисә тапҡыр йөрөп әйләнһә лә һәм ҡасҡындарҙы ҡурҡытып таратып ебәрһә лә, асылда ҡан ҡойошоуға бик үк юл ҡуймай.

...Ғауғалы, даулы көндәр. Тик дауҙы кем дауылға үҫтереп ебәргән? Был һорауға тағы әйләнеп килеп, шуны ғына өҫтәргә ҡала: 1921 йылдың 8 февралендә РКП(б)-ның Башҡортостан өлкә комитеты «республикала милли мәсьәләне хәл итеү юлдары» тураһында хат тарата. Унда бөгөнгө заманға ла ауаздаш яңғыраған һүҙҙәр бар: «Автономиялы Башҡортостанды төҙөүҙең тәүге көндәренән үк бөтә органдар ҙа, тәғәйен генә практик эш менән булыу урынына, үҙ аппараттарын ойоштороу һәм ҡайтанан ойоштороу, күберәк теоретик һәм сәйәси мәсьәләләр менән шөғөлләнде... Иҫке Башвоенревком халыҡтың урыҫтар тәшкил иткән өлөшөндә ихтирам яуламаны һәм, киреһенсә, сәйәси шарттар ҙа шулай үҙгәреп киткәнлектән, Башҡортостан хөкүмәтенең (БашЦИК) яңы составында ла абруйлы башҡорт вәкилдәре булманы, шунлыҡтан халыҡ, бигерәк тә башҡорттар, уны хупламаны... Күп иптәштәр, Рәсәйҙәге автономиялы республикаларға, ғөмүмән, совет автономияһына ваҡытлыса ғына түҙерлек яуызлыҡ, тип ҡараны һәм уның менән көрәшергә, аҙағыраҡ бөтөнләй юҡҡа сығарырға кәрәк, тип иҫәпләне. Тамырынан хата ҡараш ине был...”

Урал аръяғы кантондарында болалар ҡуйырып китеүенең тағы бер сәбәбе — һис шикһеҙ, Башҡорт хөкүмәте ағзаларының, үҙ постарын ташлап, Республиканы власть органдарынан мәхрүм итеүендә. Беҙ быны бер нисек тә инҡар итә алмайбыҙ. Башҡорт милли-азатлыҡ хәрәкәте идеологтарының береһе К. Иҙелғужин һуңыраҡ, 1926 йылда, ошо ваҡиғаларға ҡарата бына ниндәй һүҙҙәр яҙасаҡ: “Вәлидов һәм уның яҡындарының фекере — сәйәси саботаж яһап, шул юл менән халыҡҡа таянып, үҙ теләктәренә ирешеү ине. Бының өсөн, кәрәк булғанда ҡораллы көскә таянып, ҡаршы көрәшеүгә хәтле уйлап ҡуйҙылар...” К. Иҙелғужин, Бөрйән-Түңгәүер, Тамъян-Ҡатай кантондары башҡорттарының Советтарға

ҡаршы күтәрелешен Вәлидовтың ситкә ҡасып китеүе һөҙөмтәһе, тип иҫәпләй.

Ләкин ирекһеҙҙең сараһы булған был мәлде бер яҡлы ғына аңлатырға тырышыу тип әйтергә тура килә. Конфликттың башҡа сәбәптәрен ваҡиғаларҙың уртаһында ҡайнаған урыҫ милләтле етәкселәр ҙә ярайһы уҡ объектив баһалай. Мәҫәлән, Белорет тирәһендә дезертирҙар менән көрәшеү комиссияһы рәйесе И. И. Волков, 1920 йылдың август айында уҡ әле Белорет парткомы адресына ебәргән хатында восстаниеның төп сәбәптәре араһында башҡорт халҡының репрессияларға (язалауҙарға) башҡаса түҙә алмауҙарын иҫкә ала.

Был тәңгәлдә Эске хеҙмәт көстәренең (ВНУСЛ) 68-се бригадаһы командиры Г. И. Симоновтың фекере лә бик иғтибарға лайыҡ. Республика территорияһында ихтилалсыларҙы һәм бандаларҙы ҡырып бөтөрөү бурысы йөкмәтелгән был хәрби етәксенең 23-сө дивизия штабына яҙып ебәргән докладнойынан ҡыҙыҡлы ғына мәғлүмәттәр табабыҙ. Г. Симонов унда 1921 йылдың 9 ғинуарында Ф. Юламанов, М. Мортазин, Х. Тереғоловтар оҙатыуында Стәрлетамаҡтан Бөрйән-Түңгәүер кантонына барыуы, ихтилалсыларҙың комиссия ағзалары менән осрашырға теләмәүҙәре, С. Мырҙабулатов менән М. Мортазиндың бөтөнләй кире ҡағыуҙары, восстаниены баҫтырыу өсөн ебәрелгән Мельников батальонын бынан алып китеүҙе талап итеүҙәре тураһында белдерә. Ләкин бында мәсьәләнең икенсе яғына ла күҙ йома алмай командир: “Халыҡ армияһы” тип аталған ҡоралды төркөм төҙөп алған кулактар башҡорт ихтилалсыларын үҙҙәренә ҡушылырға өндәһәләр ҙә, һуңғылары был хәтәр юлға баҫмай. Киреһенсә, әле яңы ғына восстание етәкселәренең береһе булған Юламанов та, тәүге ниәттәренән ваз кисеп, ыҙғыш-талаштарҙы һөйләшеп, аңлашып хәл итеү тураһында ҡайғыртып йөрөй. Уның шул маҡсат менән Әүжән-Петровскиға килеүе урындағы кулактарҙы аптыраушта ҡалдыра. Етмәһә, Тамъян-Ҡатай ихтилалсылары вәкиле Ф. Мәғәсүмов та Ф. Юламанов менән бер һүҙҙә булып китә. Ҡыҫҡаһы, был күренештәрҙән Г. Симоновтың элек тә төйнәлеңкерәп йөрөгән уйҙары нығына. “Минең һиҙемләүем тулыһынса раҫланды, — тип хәбәр итә ул 23-сө дивизия штабы начальнигына. — Мостовенко алып барған һөйләшеүҙәрҙә ҙур хаталар ебәрелгән, баш күтәреүселәргә ҡорал да ҡалдырылған...”

Әлбиттә, офицер — офицер инде ул, хәрбилеген онотмай: Симонов та, һаман баш бирергә теләмәгән Хажиәхмәт Унасовты нисек тә булһа “теҙгенләү, ауыҙлыҡлау” яғын ҡайғыртып, уның тыуған ауылы Байышҡа Мельников урынына икенсе ҡоралды отряд

килтереп тултырыу яғын ҡайыра. Ләкин был сара түгел, ә урыҫ кешеһенең, тормошҡа айыҡ күҙлектән ҡарап, ихтилалдың төп сәбәбен билдәләп ҡуя алыуы мөһим беҙҙең өсөн. “Баш күтәреүҙең төп сәбәптәренең береһе — башҡорттарҙың иҫ киткес фәҡирлеккә төшөүе, хужалыҡтарҙың таланыуы, — тип яҙа ул. — Бына ошо нигеҙҙә урындағы урыҫ халҡы менән ыҙғыштар тыуҙы...”

Үҙ ҡарашын Г. Симонов Бөрйән-Түңгәүер кантоны Советтарының II съезында ла ҡабатлай. “Кантондағы ваҡиғалар ҡапыл ғына башланып китмәгән, — ти ул. — Бандитлыҡ һәм кеше үлтереү осраҡтары Поленовҡа тиклем дә булып торған. Шундай шарттарға тап килгәс, Поленов менән Руденко яҙалау ысулдары менән артыҡ мауығыуға бирелгән... Ә бандитлыҡ итеү һәр ваҡыт халыҡ хәрәкәте менән йәнәшләп барған. Тик, күрәһең, Поленов ошо хәрәкәтте Мансыревҡа (1920 йылдың майынан — Башревком рәйесе) бандитизм тип аңлатып килгән”.

Эйе, бандитлыҡ, юлбаҫарлыҡ — ул бер нәмә. Халыҡ хәрәкәте, уның властар менән ризаһыҙлығы — бөтөнләй икенсе күренеш. Үкенескә ҡаршы, ил етәкселәре йыш ҡына бына ошоно айырмай һәм үҙҙәре үк халыҡты ғауғаларға этәрә.

*1996 й.*

# Х. Алты ҡырлы Мортазин

*(Трагик яҙмыштың ҡайһы бер биттәре)*

“1-се Башҡорт кавалерия полкы командиры Ә. Ҡарамышевҡа рапорт.

Һеҙҙең полкҡа буйһондоролған 1-се эскадрон командиры хорунжий Мортазин үҙенең эскадроны менән ике аҙна самаһы минең отрядта булды һәм ошо ҡыҫҡа ғына ваҡыт эсендә лә үҙен бик яуаплы тотоуы, эште ойоштора белеүе арҡаһында отрядҡа ҙур булышлыҡ итте. Ҡыҙылдар 23 августа, Еҙем ауылы эргәһендәге һуғыштан һуң, ниһайәт, ауылды ҡалдырып киткәс, уларҙы эҙәрләргә тип, мин арттарынан Мортазинды ебәрҙем. Ул алға барыуын бер аҙға ғына ла туҡтатмайынса, ҡаршы яҡ көстөң ҡайһы яҡҡа йүнәлеүен, ниҙәр эшләүен хәбәр итеп торҙо. Беҙҙең отряд, 26—27 августа үҙенән күпкә көслөрәк ҡыҙылдарҙың ҡыҫымы аҫтында артҡа сигенә башлағас, хорунжий Мортазин эскадроны, беҙҙе Эҫем йылғаһында ҡыуып етеп, пехотаның сигенеүен ҡаплап торҙо — был бурысты ул һоҡланырлыҡ итеп башҡарҙы, бәрелештә ни бары өс ат сафтан сыҡты. Мин хорунжий Мортазинды бик теләмәйенсә генә ебәрәм һәм һеҙҙән уны ҙурыраҡ чинға күсереүегеҙҙе һорайым. Ошолай үтенес белдереүемде мин үҙемдең намыҫ эшем тип һанайым...



М. Л. Мортазин.

Верхне-Уральск отряды начальнигы ПАПАВИК.

*1918 йыл, 28 август.*
Архангельск заводы”.

Ошо рапортка Ә. Ҡарамышев Мортазинға яңы звание биреү тураһында шул уҡ көндө әмер бирә. Был ваҡиғаға ялғап, Мортазиндың башҡа хәрби дәрәжәләрҙе лә аҡтар армияһында йөрөгәнендә һәм бик йылдам рәүештә алғанын әйтеп үтергә кәрәк: 1918 йылдың 29 мартында ул поручик ҡына әле, ә 3 августа — штабс-ротмистр, артабан — подпрапорщик һәм, бына, август аҙағында — прапорщик (корнет).

Аҡтар армияһындағы бөтә званиеларҙы ла иҫкә төшөрөүҙең ни хәжәте булды һуң әле? Мортазинға йәнә лә ҡара буяуҙар яғыу өсөн түгелдер бит? Юҡ, әлбиттә. Һораүҙы ошо рәүешле килтереп ҡуйыу үҙе генә лә хата, хилафлыҡ, сөнки был, тәбиғилектән ҡасып, һаман элеккесә һәр нәмәне, кешенең һәр аҙымын синфи күҙлектән генә баһалауға этәреү булыр ине. Ә беҙгә бит хәҡиҡәт кенә, тулы объективлыҡ кәрәк, ҙур шәхестең үтә лә боролмалы тормошон төрлө яҡтан барлап сығыу фарыз.

Былай ҙа Муса Мортазиндың башҡорт халҡы тарихында тотҡан роле һуңғы йылдарҙа асыҡланманы түгел. Был йәһәттән төплө генә публицистик мәҡәләләр ҙә, артабан ҙур күләмле художестволы әҫәрҙәр ҙә донъя күрҙе. Шулар нигеҙендә хәҙер "Мортазин" тиеү менән уҡыусыларыбыҙҙың күҙ алдына тышҡы ҡиәфәте, мөһабәт һыны менән — әкиәт батырҙарын, рухи донъяһы менән Салауат Юлаевҡа оҡшағаныраҡ бер ир уҙаманы килеп баҫа. Уныһы бәхәсһеҙ. Ләкин күпселек яҙмаларҙа Муса образын тарайтыңҡырап алыу, уны билдәле бер ҡоршауҙар эсенә ҡуйыу һиҙелә. Һәм, дөйөм алғанда, ул һаман да талантлы ҡыҙыл командир булыуҙан бик алыҫ китмәй. Ҡайһы саҡ ул бер аҙға ғына аҡтар яғына "сығып китә" лә, шунда уҡ "хаталарын аңлап", баһым ғына кире ҡыҙылдарға "әйләнеп ҡайта". Әйткәндәй, Муса биографияһын үҙе лә шундайыраҡ схема буйынса төҙөй.

Тик 1917—21 йылдарҙағы бик тә ҡатмарлы осорҙа, фронттарҙа ғына түгел, республика хужалығы менән етәкселек иткәндә лә, башҡорт милләте идеологияһы нигеҙҙәрен төҙөп, Рәсәй етәкселеге менән мөнәсәбәттәр урынлаштырғанда ла һәр ваҡыт алғы һыҙыҡта булған ҡыҙыу ҡанлы һәм ярһыу холоҡло был шәхесте ҡәҙимге бер ситлек эсенә һыйҙырып буламы? Юҡ, әлбиттә. Ул бер нигә лә һыймай, сөнки булмышы ҡатмарлы. 1918—19 йылдарҙа Муса артынан яуҙарға сапҡан, һуңынан, 30-сы йылдарҙа ла уның менән бик йыш аралашҡан Әбйәлил халҡының Мусаны "алты ҡырлы Мортазин" тип атауы бер ҙә юҡҡа түгелдер. Ябай, бер ҡатлы йәки ике ҡатлы ла түгел, йоморо һәм шар ише шыма ла түгел, ә "алты ҡырлы", ниндәй генә шарттар килеп тыумаһын, үҙ характерын юғалтмаған, ләкин һис көтөлмәгән яҡтарын, сифаттарын күрһәтә алған етәксе.

Мортазинды аҡ чехтар командиры Папавиктың уға ниндәй баһа биреүе менән таныштыҡ инде. Башҡорт ғәскәре башында торған Әхмәтзәки Вәлиди ҙә Муса менән һоҡланыуын белдерә, уны үҙенең дуҫтары рәтенә индерә. Ләкин 1918—19 йылдар ваҡиғаларының Ә.-З. Вәлидиҙең "Хәтирәләре"ндә һәм М. Мортазин яҙмаларында нисек тасуирланыуын сағыштырһаң, ҙур ғына айырмалыҡтар барлығын да күрәһең. Уларҙың тәүгеһе Совет власын яратмауын һис йәшереп тормай, Башҡорт ғәскәрҙәрен беҙ Советтарға ҡаршы һуғышыу өсөн тупланыҡ һәм беҙ урыҫ большевиктары менән көрәштек, тип белдерә. Ә икенсеһенең — Мортазиндың — һүҙҙәре тоноғораҡ, хатта "ҡыҙылыраҡ", ул күберәк үҙенең партизан отрядтарын ойошторop йөрөүенә, уларҙың Башҡорт автономияһын төҙөү өсөн көрәшеүенә баҫым яһай, "беҙ ҡыҙылдарға яҡын булдыҡ, ҡыҙыл командирҙарҙың башҡорттарға ҡарата ғәҙелһеҙлек күрһәтеүе арҡаһында ғына уларҙан ситләштек", ти. Хәйер, асылда шулай була ла инде. Бында артыҡ бәйләнмәйенсә, айырманы һүҙ бәйләнештәренә, бер үк фекерҙе төрлөсәрәк әйтеүгә генә ҡалдырырға ла мөмкин. Шулай ҙа... ике позицияның ике тамырҙан үсеп сығыуына күҙ йомоп булмай, һәм былар Мортазинға ниндәйҙер шик белдергән өсөн түгел, ә уны нығыраҡ аңлау өсөн генә яҙыла. Мусаны "ҡыҙыл" йә "аҡ" тип өлөштәргә бүлгеләмәйенсә һәм үҙебеҙ ҙә теге йәки был яҡка баҫмайынса ғына, синфи күҙлектәрҙе ситкәрәк ҡуйып күрһәтеү фарыздыр. Шуға ирешә алһаҡ ҡына уның ни тиклем үҙ аллы, бер кемгә лә буйһонмайынса эш итеүен күрербеҙ, үҙенең халҡына яҡлашып, уны талаған, аҫҡан-киҫкән аҡтарҙы ла, ҡыҙылдар тип йөрөгән башҡаларҙы ла, төҫтәренә ҡарамай, йәлләп-ҡыҙғанып тормауын аңларбыҙ. Күрәһең, шул сәбәптәндер ҙә эйәргән Мусаға башҡорттар.

Инде Мортазиндың Ҡыҙыл Армияла нисек хеҙмәт итеүенә бер нисә генә миҫал килтерәйек.

Польша фронты. "Комбриг Мортазин иптәш инициативаһы менән һәм уның туранан-тура ҡатнашлығында 1920 йылдың 5 февралендә Айырым кавалерия бригадаһы Пилевы ауылына ябырыла. Аяуһыҙ бәрелештәр һөҙөмтәһендә Пилевы утары һәм ауылы баҫып алына. Был эштә 196 кеше әсирлеккә, 30 ат, 8 пулемет, 200 снаряд һәм төп-төҙөк 2 орудие ҡулға төшә. Улар шунда уҡ сигенеп барған дошманға ҡарата йүнәлтелә.

Шул уҡ көндө Горностайполь ауылын алған саҡта Мортазин иптәш, ҡыҙылармеецтарҙы үҙе артынан эйәртеп, бер нисә тапҡыр дошманға ҡаршы ташланды һәм, ян-яҡтан ҡамау эсендә тороп ҡалһа ла, бәләкәй генә төркөмө менән ҡулсаны йырып сыҡты, ҡаршы яҡты ҙур юғалтыуҙарға дусар итте, улар araһында оло ғауға

тыуҙырҙы. Шул арҡала беҙҙең полктарға бер урында тупланырға һәм хәл иткес атаканы башлап ебәрергә мөмкинлек тыуҙы. Һөҙөмтәлә дошман тар-мар ителде, Горностайполь ауылында беҙҙекеләр нығынды.

20 июндә Мортазин етәкселегендәге башҡорт кавалерия бригадаһы, егерме сәғәт буйына өҙлөкһөҙ һуғыш алып барғандан һуң, Игнатполь станцияһын һәм ауылын баҫып алды. 21 июндә дошман, ун мең самаһы штык йыйып, артиллерия, бронепоездар һәм кавалерия ярҙамында яңынан бригада өҫтөнә ябырылды. Бригада частары һәм башҡа кавалерия частары араһында сыуалыш башланды, ләкин Мортазин иптәштең ҡыйыулығы, үҙен ҡаты тотоуы арҡаһында тәртип шунда уҡ кире аяҡҡа баҫтырылды. Бригада, урман һәм һаҙлыҡтар араһында тиҙ генә борола алмағанлыҡтан, 28-се полктың башына Мортазинды ҡуйғас, ул бригаданы ҡаплау өсөн ебәрелде. Командирҙар составында һәм ҡыҙылармеецтар араһында юғалтыуҙар күп булыуға ҡарамаҫтан, полк, һуғыша-һуғыша, аҡрынлап артҡа сигенде һәм, бригаданың башҡа частарына ҡушылғас, Мортазинға эйәреп, тағы һуғышҡа инде, дошман һөжүмен кире ҡағып, Игнатполь станцияһын һәм ауылын таҙартты, элек әсирлеккә төшкән ҡыҙылармеецтарҙы ҡотҡарҙы" (РВСР-ҙың 1920 йыл, 3 ноябрендәге 524-се приказынан. Военно-исторический журнал, № 11, 1971.).

Әле тасуирланған батырлыҡтары өсөн Муса Мортазин Ҡыҙыл Байраҡ ордены менән наградлана. Ә икенсе орден "Варшаваға һөжүм иткәндә һәм артабанғы арьергард һуғыштарҙа күрһәткән батырлығы һәм сыҙамлылығы өсөн" бирелә (РВСР-ҙың 1921 йылдың 31 декабрендәге 353-сө приказы. Иҫкәрмә: ике орден алғандар Ҡыҙыл Армияла күп түгел: 285 кеше генә). Бынан тыш, Мортазинға орден беркетелгән көмөш ҡылыс тапшырылыуы ла билдәле (Был награданы алыусылар — 21 кеше). Ләкин һуңғы йылдарҙа Мортазиндың өсөнсө Ҡыҙыл Байраҡ ордены алыуы ла аҡрынлап асыҡлана бара.

Ниндәй документтарға нигеҙләнеп әйтелә был һүҙҙәр?

Беренсе — 1989 йылдың ғинуарында СССР Министрҙар Советы эргәһендәге Баш Архив идаралығынан алынған хат. Унда: "М. Л. Мортазиндың 1924 йылда тултырылған "Личное дело"һында уның өс Ҡыҙыл Байраҡ ордены менән наградланыуы әйтелгән, — тиелә. — Ләкин Совет Армияһының Үҙәк Дәүләт архивы материалдарында был раҫланмай. "Мортазин үҙ "Дело"һын тултырғанда өсөнсө орденды уйлап тапмағандыр бит инде?

Был аңлашылмаусылыҡҡа СССР Дәүләт именлеге комитетының Үҙәк Оператив архивынан килгән хат саҡ ҡына асыҡлыҡ ин-

дерә (Был хатты миңә, 80-се йылдарҙа Учалы ҡала Именлек комитетында ҡулға тоттормайынса ғына, күҙ алдына ҡуйып уҡып сығырға рөхсәт иттеләр. — **Авт.**) Унда бына ни тип яҙылғайны: "М. Мортазин 8-се кавалерия дивизияһында энергиялы һәм емешле эшләгәне өсөн 3-сө Ҡыҙыл Байраҡ ордены менән наградланған".

Тағы бер документ. Ул — 1956 йылдың 1 мартында ССР Союзының Юғары Суды Билдәләмәһе (Определение суда, № 4Н). "Граждандар һуғышы йылдарында хәрби батырлыҡтары өсөн Мортазин өс Ҡыҙыл Байраҡ ордены, көмөш ҡылыс һәм алтын сәғәт менән наградланған", — тиелгән унда. Был рәсми документҡа хәрби Коллегия секретары капитан Марков ҡул ҡуйған.

Был документтарҙың йөкмәткеһен дөйөмләштереп, Мортазин 3-сө орденға ла күрһәтелгән, хатта наградланған, тик ни сәбәптәндер ул наградаһын ала алмаған, тип кенә фараз ҡылайыҡ хәҙергә. Ләкин был фаразды самаһыҙ һаҡсыллыҡ күрһәтеү тип тә атарға мөмкин, сөнки батырҙың 30-сы йылдарҙа өс орден тағып йөрөүен күреүселәр бар. Уларҙың береһе — Әбйәлил районының Таҡһыр ауылы кешеһе Нуретдин Хужиәхмәт улы Шаһимәрҙәнов (1912 йылда тыуған). Был юлдарҙың авторына ул бына ни тип яҙып ебәргәйне: "Муса Мортазин Әбйәлил районына йәйге һабантуйҙарға килә торғайны. Мәскәүҙән һуңғы тапҡыр килеүе 1936 йылдың июнендә булды. Мин ул саҡта комсомолец, район финанс бүлегендә эшләйем. Миңә, аш әҙерләп, мортазинсыларҙы ҡунаҡ итергә ҡушып ҡуйҙылар. Асҡарҙың түбән яғында, Иҙәш йылғаһы буйында ҡор әҙерләнек. Мортазин, мине янына ултыртып, бар хөрмәткә риза булып, рәхмәт белдерҙе. Бик яҡшы хәтерләйем, уның күкрәгендә өс Ҡыҙыл Байраҡ ордены ине".

М. Мортазин биографияһының бик үк билдәле булмаған тағы бер бите — уның дини эшмәкәрлеге. Башҡортостан Республикаһы Федераль Именлек хеҙмәтенең өлкән референты Р. Мәрҙәмшин шул ойошма архивында үҙенсәлекле бер документҡа барып юлыҡҡан. Унан күренеүенсә, Муса, дини белемен тикшереүҙәрен һорап, 1916 йылда Ырымбур Диниә назаратына мөрәжәғәт итә. Һынайҙар, тикшерәләр һәм Мусаға танытма тотторалар. Рәсми рәүештә рухани хеҙмәткәр дәрәжәһе биргәнгә тиклем мөфтөй уға мәсеттә эшләп торорға рөхсәт итә. Тимәк, үҫмер сағында уҡ аҡты ҡаранан айырырлыҡ, кешеләр менән аралашырлыҡ белем алып өлгөрә Муса. Тиккә түгел икән уның, Алыҫ Көнсығышта хеҙмәт иткәндә, 1912 йылда, артиллерия фейерверкеры (орудие командиры) булыуы һәм һуңыраҡ, 1916 йылда, герман һуғышында полк муллаһы булып тәғәйенләнеүе.

Мортазин биографияһындағы йәнә лә бик үк асыҡланып бөтмәгән һорау шул: 1920 йылдың көҙөндә, Польша фронтында һуғыш дауам иткән көндәрҙә Муса ни өсөн тыуған яғына ҡайтып төшә? Етмәһә, бер төркөм арҡадаштары-яҡташтары менән? Мортазин биографияһын яҡтыртыусылар был хәлде ифрат еңел, һис уйлап тормайынса, ул отпускыға ҡайтҡан, тип аңлата. Ләкин ҡыҙыу һуғыш барғанда, бригада ғына түгел, хатта тотош кавалерия төркөмө командиры итеп тәғәйенләнгән кешенең, тота килеп, ялға китеүен күҙ алдына килтереп буламы? Ышандырмай был хәбәр. 1920 йылдың көҙөндә Урал аръяғы волостарын ихтилал солғап ала. Бәлки, Мортазин Тамъян-Ҡатай кантревкомы йә иһә республика етәкселегенең талабы буйынса ошо болаларҙы баҫтырырға саҡыртып алыналыр? Юҡ, былай тип әйтеү өсөн бер ниндәй ҙә документ табылғаны юҡ әлегә. Шулай ҙа Мортазин биографияһын ныҡлап өйрәнгән тарихсы Ғ. С. Мөғәттәровтың фекеренсә, комбриг И. Сталиндың ҡушыуы буйынса ҡайтарылған булырға тейеш. Муса, юл ыңғай Мәскәүгә һуғылып, Сталиндан, илеңә ҡайтып тыныслыҡ урынлаштыр, тигән күрһәтмә ала, йәнәһе. Быны раҫлаған документ булмаһа ла, фараз ысынға оҡшай. Өҫтәүенә, Мортазин Тамъян-Ҡатай кантонына ҡайтҡас та, Белореттағы канткомды ла, кантревкомды ла бик үк һанға һуҡмаһа ла, кемдеңдер абруйына таянып эш иткән һымаҡ (Был кешенең Мәскәүҙә Милләттәр эштәре буйынса Халыҡ Комиссариатында эшләгән Ш. Манатовтың булыуы ла мөмкин, сөнки уның Мортазин менән даими бәйләнеш тотоуы, дуҫ булыуы мәғлүм).

Тамъян-Ҡатай кантон башҡарма комитеты һәм Белорет заводы парткомы Мортазинды бандитизмға ҡаршы көрәшеү буйынса эскадрон командиры итеп тәғәйенләү яғында тора. Муса аптырай. "Нисек инде һеҙ данлыҡлы Мортазин бригадаһы командирын эскадронға ҡуяһығыҙ? Мыҫҡыллау була был, башҡа бер нәмә лә түгел. Икенсенән, һеҙ аҙ тигәндә лә Хәрби фронт Советынан рөхсәт алырға тейешһегеҙ, мине ул ғына тәғәйенләй ала", ти. Ләкин килеп тыуған шарттарҙың ни тиклем ҡырҡыулашыуын комбриг үҙе лә күреп тора һәм ул кантон башлыҡтары менән ризалашырға мәжбүр була, тик эште үҙенсәрәк бороп ебәрә: Тамъян-Ҡатай кантонынан урыҫтарҙан торған язалау отрядтарын алып сығырға (Был талап һуңыраҡ Бөрйән-Түңгәүер кантонына ҡарата ла әйтеләсәк. — **Авт.**), кешеләрҙе атыуҙы, уларҙың милек-мөлкәтен талауҙы туҡтатырға, партком составына башҡорт коммунистарын да индерергә. Ә инде дезертирҙар менән көрәшеү мәсьәләһенә килгәндә, был бурысты урыҫ отрядтарынан алып, башҡорттарҙың үҙҙәренә йөкмәтергә.

Көтөлмәгәнерәк, әммә иң ҡулай юл була был, тик Мортазиндың талабы ахырынаса яҡлау тапмай, урыҫ коммунистары отрядтары, бигерәк тә Тирлән ҡасабаһы эшселәре, Үрге-Яйыҡ ҡалаһы, шулай уҡ Ахун ауылының элекке ҡыҙыл партизандары, Силәбенән саҡырып килтерелгән ЧОН отрядтары ихтилалсыларҙы эҙәрлекләргә тотона. Мортазин иһә, “Башҡортостан һәм Башҡортостан ғәскәрҙәре граждандар һуғышында” тигән китабында үҙе яҙғанынса, күберәк тыуған ауылы Көсөк, күрше Сораман, Ҡаҙаҡкол тирәләрендә һәм хәҙерге Әбйәлил районында эш итә.

Ошо тәңгәлдә Мортазиндың ҡайһы бер хаттарында сәйерерәк күренгән юлдарға ла туҡталып китеү кәрәктер. Мәҫәлән, ул, “Шәхси дело”һына һалынған “Ҡыҫҡаса хәрби хәрәкәттәр” тигән белешмәһендә 1921 йылдың февраленә хәтлем Башҡортостанда контрреволюцияны баҫтырыуҙа ҡатнашыуын иҫбатлап, ошоларҙы яҙа: “Колош, Һөйәрғол, Ҡотой ауылдары (былар барыһы ла Учалы районында — **Авт.**) эргәһендәге һуғышта 500-ҙән ашыу бандит үлтерелде, 300 винтовка, 3 пулемет алынды, Байрамғол, Тәпән, Ташбулат, Күсем... ауылдарында 200 кешенән торған банда тар-мар ителде, 300 кеше хәбес булды, 2 пулемет һәм 100 ат тартып алынды. Юламан, Әбләз, Оҙонкүл, Ҡарағужа, Ҡаҙаҡкол, Ураҙ, Ахун, Поляковка ауылдары эргәһендә, Златоуста, Верхне-Уральск районында 550-нән ашыу кеше юҡ ителде, 800-е пленға төштө, 90 ат алынды. Белорет һәм Кананикольск заводтары тирәһендә 1.000-дән ашыу кеше тар-мар ителде”. Күп һаналған, ләкин был һүҙҙәргә бик үк ышанғы килмәй. Ышанған хәлдә лә һандар ныҡ арттырылған. Сөнки республиканың Ижтимағи ойошмалар архивы (элекке КПСС-тың өлкә партия архивы) материалдарына ҡарағанда, Тамъян-Ҡатай кантонының төньяҡ волостарына (Златоусҡа тиклем) Муса үҙе түгел, ә энеһе Дауыт бара, һуғышта уның да әллә ни әүҙемлеге күренмәй. Ә бына Тирлән (командиры И. Волков), Силәбе (Богатырев) отрядтары, ихтилалсыларҙы Златоуст тимер юл станцияһынан һәм казармаларҙан ҡыҫырыҡлап сығарғас та, уларҙы хәҙерге Учалы районының Мулдаш, Мулдаҡай тирәләренә баҫтырып килтереп, шул арала байтаҡтарын тунап һала. Уларҙың ҡылыстан үтеп тә иҫән ҡалғандарын һәм оҙаҡ ваҡыт “яраларын бисәләренең һейҙеге менән дауалап”, терелеп киткәндәрен был мәҡәләнең авторына күреп ҡалырға насип булды.

Ошо һуғыштар документтарҙа ғына түгел, халыҡ хәтерендә лә һаҡланып ҡалған һәм уның һөйләгәндәре архив материалдарына ҡарағанда ла ышаныслыраҡ дәлил булып тора һымаҡ. Мәҫәлән, Учалы районының Сораман ауылы кешеһе Хәбир Нәғимйәнов менән Ишкен ауылынан Ғимал Илһамов Байрамғол менән Ҡотой

араһындағы Туйтүбәләге һуғышта "дезертирҙар"ға ҡаршы бик ҡаты торһа ла һәм ошо ҡылыс сабышында уның үҙен Ғәҙелша ауылының Баһау исемле егет үлтерә яҙһа ла, был шаһиттарҙың тел төбө күберәк бер үк нәмәгә бара ине: Муса уға ҡаршы сыҡҡан кешеләрҙе мөмкин хәтлем аярға тырышҡан, бының өсөн төрлө хәйләләр ҙә ҡорған. Мәҫәлән, юлында баш күтәргән халыҡ төркөмө тап була икән, ҡылысын ҡынынан бер һурып, бер кире тығып, үҙенекеләргә генә аңлайышлы ишаралар яһап, "банда"ға ҡаршы сапҡан һәм уға барып етер саҡта ғына ситкә янтайып, юлын артабан дауам иттергән. Ә күберәге — үҙенең яғына ылыҡтырырға тырышҡан.

Был хаҡта тыуған яҡты өйрәнеүсе, һөнәре буйынса тарихсы Әғләм Янбаев бына ниҙәр яҙып ебәрҙе. "Мин быны ошо яу батыры Баһау Фәтхуллиндың ҡатыны Доха әбейҙән ишеттем, — ти ул. — Доха әбей мин Науырҙала директор саҡта төнгө ҡарауылсы булып эшләй ине. Пенсияға сығыр ваҡытта әбейгә: "Һин бит большевик бисәһе, шуға күрә һиңә пенсия күберәк сығырға тейеш", — тигәндәр. Әбей миңә ярҙам һорап мөрәжәғәт итте. Мин, дирекция исеменән партияның өлкә комитетына хат яҙып, Фәтхуллин Баһауҙың партияла тороу-тормауын раҫлаған документ ебәреүҙәрен һораным. Хат килде, Баһауҙың 1916 йылда партияға инеүе, 1919 йылда билдәһеҙ сәбәптәр менән унан сығыуы тураһында хәбәр иттеләр. Ә халыҡ Баһауҙы Мортазин отрядында әүҙем ҡатнашыусы тип белә. Һин яҙған һуғыш бәйнә-бәйнә былай була: Мусаның урындағы халыҡҡа зыяны тейә башлағас, уға ҡарата ауылдарҙа ризаһыҙлыҡ тыуа. Ҡыҙылдар шул ризаһыҙлыҡты үҙҙәре файҙаһына ҡулланмаҡ була һәм, большевик Баһауға урындағы халыҡтан отряд төҙөп, Мусаны ҡулға алырға ҡушалар. Баһау, ун-ун биш көн эсендә яҡындағы ауылдарҙа аңлатыу эше алып барып, 400—500 егетте атҡа мендерә. Егеттәр, ҡайһы һәнәк, ҡайһы күҫәк һәм бик һирәге генә ҡылыс, мылтыҡ менән ҡоралланып, Мортазинды көтә (был инде 1919 йыл була, бер кем дә аныҡ айын, көнөн әйтә алманы). Мортазин 18 кешенән торған отряды менән Көсөккә ҡайтып төшә. Баһау төркөмө Мортазинға ташлана. Был Ҡаран йылғаһы буйында була. Мортазин еңел генә был ҡамауҙан ҡотола һәм Байрамғол яғына ҡаса башлай. Баҫтырышып, Туйтүбә янына барып етәләр. Баһау Мусаны ҡыуып етә лә ҡылыс менән һелтәп ебәрә. Муса бик тиҙ, йәшен кеүек, ҡылыстан һаҡланып ҡала. Ат бауыры аҫтынан сығып, кире эйәренә ултыра. Кинәт атын Баһауға ҡарата бора һәм: "Баһау, хәҙер үк ҡылысыңды ташла! Быға тиклем Мортазинға бер кем дә ҡылыс күтәрергә баҙнат иткәне юҡ ине. Һин күтәрҙең — бик йөрәкле егет икәнһең. Мин һине ғәфү итәм. Эйәр

минен арттан!" — тип команда бирә. Һәм Баһау Мусаға буйһонған, үҙенең егеттәренән байтағын эйәртеп, мортазинсы булып киткән. "Муса мине йылан кеүек арбаны ла ҡуйҙы: икенсе тапҡыр ҡылысымды күтәрә алманым", — тип һөйләгән Баһау бисәһенә".

Үҙ халҡын үлтерергә бирмәү, ҡурҡытып булһа ла үҙе артынан эйәртеү — бына Мусаның маҡсаты. Ә инде "шунса кешене юҡ иттем", тип яҙыу күрәләтә үҙенә гонаһ алыу һымаҡ ҡабул ителә хәҙер. Ләкин ниңә шулай үҙ башына бәлә ала ул? Тикмәгә түгел. Килтерелгән документтың илдәге сәйәси хәлдәрҙең бик киҫкенләшә башлаған осорҙа (1930 йылдың 8 сентябрендә) яҙылыуын иғтибарға алып, Мортазинға ҡарата асылда бер ҡасан да ҡыҫымдың кәмемәүен, унын өҫтөнән өҙлөкһөҙ шиҡәйәттәр ойошторолоп тороуын иҫләһәк, аңлашыла ки: моғайын, ул үҙен властар алдында булғандағынан да "ҡыҙылыраҡ" итеп күрһәтергә тырышҡандыр. Мин күберәк башҡорттарға яҡлаштым, урыҫ колонизаторҙарына ҡаршы һуғышып йөрөнөм тип, матбуғат биттәрендә асыҡтан-асыҡ яҙа алмай бит инде ул. Һәм был тәңгәлдә, Мусаның үҙен нисек тотоуын иғтибарлыраҡ өйрәнһәң, бер генә фекергә киләһең, Әхмәтзәки Вәлиди, Шәриф Манатовтар күтәреп сыҡҡан лозунг — "беҙ ҡыҙылдар ҙа, аҡтар ҙа түгел, беҙ башҡорттар ғына" тигән идея — унын төп авторҙарынан да бигерәк, Мусаның позицияһына әүерелә, сөнки ул ошо ҡараштьı ғәмәлдә тормошҡа ашыра.

...Тамъян-Ҡатай кантонының төньяҡ волостарында болалар баҫыла төшкәс, Мортазинды ашығыс рәүештә Стәрлетамаҡҡа саҡыртып алалар. Республиканың төрлө тарафтарында тырым-тырағай эш иткән ваҡ-ваҡ ҡораллы отрядтарҙы бер йоҙороҡҡа уҡмаштырып, уларға етәкселек итә алырҙай шәхес кәрәк булғандыр, тип уйларға кәрәк. 1920 йылдың ноябрь урталарында килә Муса Стәрлетамаҡҡа. "Советтарҙың VIII Бөтә Рәсәй съезы үтеү менән үк мине БССР-ҙың Хәрби эштәре буйынса Халыҡ комиссары итеп ҡуйҙылар һәм БашЦИК ағзаһы итеп һайланылар", — тип яҙасаҡ ул һуңынан.

Ә быға тиклем, тормошто күҙәтеп, ниндәй һығымталар яһап өлгөрә ул? Мортазиндың ошо осорҙағы тәьҫораттарын, фекерҙәрен 1920 йылдың 29 мартында ВЦИК һәм РКП(б) Үҙәк Комитетына ебәргән хатынан күрергә мөмкин. "1 майҙан 15 августа хәтлем мин, тулыһынса Польша фронтында булып, Айырым башҡорт (Мортазин) бригадаһы һәм 12-се армия эргәһендәге кавалерия корпусы менән командалыҡ иттем, — тип яҙа ул. — 12-се армияның приказына ярашлы, мин Башреспубликаға командировкаға киттем һәм унда 1920 йылдың 9 сентябренә барып еттем. Уға тиклем дә

мин, Көнсығыш фронтындағы операцияларҙа ҡатнашып, Башҡорт Республикаһындағы хәлдәр менән таныша алманым. Бригаданың бер ниндәй ҙә бәйләнеше булманы, ул тылда ҡалған иптәштәрҙең выжданына ышанды. Улар, Ҡыҙыл Эшсе-Крәҫтиәндәр Армияһы полктарының ҡыҙыл еңеүҙәренә таяныл, Совет власын ойошторыу, бөйөк коммунистик идеалдарҙы тормошҡа ашырыу менән шөғөлләнерҙәр (беҙ быный өсөн Ҡыҙыл фронттарҙа ҡан ҡойҙоҡ), емерелгән хужалыҡты аяҡҡа баҫтырырҙар, тип уйлағайныҡ.

Беҙ, Башҡортостандың тәрән тылында коммунистик идеалдарҙы үткәргән абруйлы һәм көслө власть барҙыр, тип уйлағайныҡ һәм был эшкә ул: "Бына һиңә власть, Совет власы, бына һинең алда ятҡан юл туғандашлыҡ һәм азатлыҡ, бер-беренде яратыу юлына алып барыр", — тип әйтеүҙәрен күҙ алдарына ла килтермәгән туғандарыбыҙҙы йәлеп иткәндер, тип өмөтләнгәйнек.

Фронтовиктар Башҡортостан хаҡында шулай уйлай ине, һәм ошо фекер беҙҙең митингыларҙа төп фекер, иң көслө дәлил булып яңғырай торғайны. Ҡыҙғаныҫҡа ҡаршы, Башҡортостанға ҡайтҡас, мин дә, фронттарҙан ҡайтҡан башҡа иптәштәр ҙә бөтөнләй икенсе күренештәргә тап булды..."

Совет аппараты эшенең ниндәй булырға тейешлеген күҙ алдына килтермәгән кешеләрҙең власть башында тороуы, Халыҡ Комиссариаттары яғынан контролдең юҡлығы, ҡыҙыларм еец ғаиләләренә бер нисек тә ярҙам күрһәтелмәүе өсөн нәфрәтләнә Мортазин. Етмәһә, "партизан ысулы менән колонизаторҙар ҡалдыҡтарынан, элекке эксплуататорҙарҙан ваҡ-ваҡ отрядтар төҙөп, башҡорт ауылдарын талайҙар, йыртҡыслыҡ ҡылалар, ҡатын-ҡыҙҙарҙан көләләр. Енәйәтселекте туҡтатыу өсөн Башҡортостан Үҙәк власы тарафынан бер ниндәй ҙә сара күрелмәй. Был фажиғәле ваҡиғалар төбәгенә барған БашЦИК рәйесе Мансырев та Поленов ойошторған террорға фатиха ғына бирел ҡайтҡан, уның яҡлы кешеләрҙән ревком төҙөп, унан абруйҙары булған башҡорт эшмәкәрҙәрен ҡыуып сығарған. Был иһә халыҡ араһында, совет власы беҙгә ҡаршы икән, тигән фекер уята".

Күләме менән ярайһы уҡ ҙур (ете биттән тора) мөрәжәғәт-хаттың күсермәләре Милләттәр эштәре буйынса Халыҡ комиссары Сталинға, Оборона Советы рәйесе Ленинға ла адреслана. Республика закондарын сығарыу, ғөмүмән, яңы тормошто төҙөү буйынса БашЦИК-тың бер ниндәй ҙә абруйы булмауын, сөнки республика етәкселегендә башҡорт ялпыларына билдәлерәк үҙ эшмәкәрҙәренең юҡлығын йәшерә алмай хат авторы.

Әхмәтзәки Вәлиди республиканы ташлап киткәндән һуң Башревком рәйесе итеп ситтән килтерелгән һәм башҡорт халҡы

мәнфәғәттәрен белмәгән, артыҡ белергә лә теләмәгән Фейзулла Мансырев тигән әҙәм тәғәйенләнә (Ысынында шулай: һайлау тигән нәмәне үткәреп тә тормайҙар, ә тоталар ҙа Хәрби-революцион комитеттың 1-се һанлы приказы менән билдәләй ҙә ҡуялар). Ревком ағзалары да асылда ят бауыр кешеләр: Аклау Ахлов, Петр Зудов, Семен Лобов, Андрей Семякин. Уларға ике генә кеше — Хәсән Хөснөтдинов менән Арҫлан Батталов — ҡаршы тора аламы ни?

Мортазин партияның Башҡортостан өлкә комитеты алдына ҡәтғи талаптар ҡуя: Бейешевты, Халиҡовты һәм уның үҙен, Мусаны, өлкә комитет президиумы составына индерәһегеҙ. Башҡортостанда милли мәсьәләләр буйынса ҡайһы бер тезистарҙы баҫтырып сығарырға һәм таратырға, баш күтәреүселәр менән Килешеү төҙөргә...

Бына ошонда Муса Мортазиндың әлегә хәтлем булғанса талантлы хәрби етәксе генә түгел, ә тотош халыҡтың яҙмышы, киләсәге тураһында уйлай белгән ҙур аҡыл эйәһе, дәүләт эшмәкәре икәнлеге лә асыҡлана башлай.

Ауыр шарттарҙа, 1921 йылдың 18 ғинуарында, Мортазин А. Ахловтан Хәрби комиссариатты ҡабул итә. Нимәнән башлай һуң яңы эште комиссар?

Граждандар власының кәрәкмәгәндә лә Хәрби комиссариат эшенә ҡыҫылып тороуын, шулай уҡ Рәсәй һәм Башҡорт хөкүмәттәре араһында төҙөлгән, 1919 йылдың 23 мартында "Известия" гәзитендә баҫылып сыҡҡан Килешеүҙең дә бик үк үтәлмәүен, ЗВО (Волга буйы хәрби округы) етәкселегенең Башҡорт Республикаһын һанға һуғырға теләмәүен аңлап ала ул. Етмәһә, Көнбайыш фронтҡа, Мортазин бригадаһын тулыландырыу өсөн йыйылған көстәрҙең тәғәйенләнгән урынға түгел, ә бөтөнләй икенсе урынға — йә Ырымбурға, йә Екатеринбургҡа — оҙатылып тороуын асыҡлай. Башҡортостан Хәрби Комиссариаты быға ризаһыҙлыҡ та белдерер ине, бәлки, ләкин уның өҫтөндә бер түгел, ә ике власть: Хәрби Комиссариат үҙе туранан-тура ЗВО-ға буйһона, ә ул төҙөгән 68-се бригада Урал хәрби округы ҡарамағына биреп ҡуйылған. Үҙенең иһә ҡул аҫтында бер һалдат та юҡ. Кәрәк саҡта, бигерәк тә алыҫ кантондарҙа йәштәрҙе армияға оҙатып барғанда йә ҡасҡан кешеләрҙе ҡарауыллағанда, бер ниндәй ҡоралды көскә эйә түгел. Был Хәрби Комиссариаттың план буйынса эш алып барыуын һәм көнбайышта һуғышыуын дауам иткән Башҡорт ғәскәрҙәрен аҙыҡтүлек менән тәьмин итеп тороуҙы ла өҙә.

Мортазин, ошо етешһеҙлектәрҙе асыҡлағас, ҡәтғи рәүештә Рәсәй хөкүмәте алдына алты пункттан торған талаптар исемлеген ебәрә. Беҙ уларҙың өсөһөн генә килтерәбеҙ.

1. Башреспубликала берҙәм хәрби власть булдырып, Башҡортостан Хәрби Комиссариаты бөтә яҡтан да туранан-тура Бөтә Рәсәй Баштабына һәм Рәсәй Реввоенсоветына буйһондоролһон.

2. ВНУС-тың 68-се бригадаһын Айырым Башҡорт уҡсы бригадаһы тип үҙгәртергә.

3. Айырым Башҡорт уҡсы бригадаһын Айырым дивизияға тиклем үҫтерергә, быының өсөн тағы бер пехота полкы йыйырға һәм дивизияны икешәр полктан торған ике бригадаға бүлергә, уға Мортазиндың өс полклы бригадаһын һәм 68-се бригаданы ла индерергә...

Был документта элемтәселәр ротаһы, саперҙар ротаһы, артиллерия дивизиондары булдырыу, командирҙар курстары асыу тураһында ла тәкдимдәр бар (Ниндәй ҙур пландар!).

"Башҡортостан Хәрби Комиссариаты РВСР тарафынан ҡуйылған бурыстарҙы шул саҡта ғына үтәй аласаҡ", — тип белдерә Мортазин. Ул, үҙ ваҡытында Әхмәтзәки Вәлиди кеүек үк, сәйәси яҡтан бик тотороҡһоҙ шарттарҙа йәшәгән республика өсөн ҡораллы көстәрҙең ни тиклем мөһим булыуын аңлай. Бәлки, ул Башҡортостан дәүләтселеген төҙөү, мөстәкиллек яулау юлын да ошонда күргәндер?

1918 йылдың июнендә Мортазиндың Ҡаҙаҡкол һәм Тунғатар волостарында башҡорт эскадроны йыйыуы, ошо эскадрон нигеҙендә полк төҙөлгәс, полк командиры Ә. Ҡарамышев һәләк булып, уның урынына аҡ гвардиясы есаул Гнага тәғәйенләнгәс, Мортазиндың ошо полкты үҙ ҡулына тартып алыуы — былар бөтәһе лә алдан уйланылған пландың бер өлөшө, уның ғәмәлгә аша башлауы кеүек аңлашыла. Был маҡсат 1917 йылда уҡ әле Ҡазанда булып үткән Мосолман хәрби съезы (унда Мортазин да ҡатнаша) ҡабул иткән үҙ аллы милли ғәскәрҙәр ойоштороу тураһындағы ҡарарға барып тоташа. "Башҡортостан һәм Башҡорт ғәскәрҙәре граждандар һуғышында" тигән китап менән танышҡанда ла полкты тартып алыу уны Башҡортостандың милли автономияһы өсөн көрәш ысулына әүерелдереү өсөн эшләнгәнлеге күренә. Әлбиттә, 1920—21 йылдар — 1918 йыл түгел, был ваҡыт эсендә Мортазин көнбайышта тотош Совет Рәсәйе мәнфәғәтендә аяуһыҙ көрәштәр аша үтә, уның сәйәси ҡараштары ла үҙгәрә, билдәле. Ул инде үҙен "милләтсе" тип атауҙарына юл да ҡалдырмай. Шулай ҙа... уға ҡарата һаман шик бөтмәй, Һамарҙағы ЗВО етәкселеге лә, Приурво ла Мортазин индергән тәкдимдәрҙе ишетмәмешкә һалыша.

1921 йылдың 14 июлендә "БССР-ҙың Хәрби эштәр Халыҡ комиссары" тигән титул менән Мортазин Урал хәрби комиссариаты (Приурво) ғәскәрҙәре командующийы Мрачковскийға рапорт ебәрә, БССР-ҙа өҫтәмә хәрби частар төҙөү кәрәклеге тураһында белдерә.

Был мәсьәләне ул тәүҙә (12 июлдә) ВКП(б)-ның Башҡортостан өлкә комитеты президиумы һәм Контроль Комиссияһының берлектәге ултырышына ҡуя, республика территорияһында бер генә хәрби командование булырға тейешлеген иҫбатлай. “Урал хәрби округы етәкселеге ризалыҡ биргән хәлдә, Мортазин индергән тәкдимдәрҙе хупларға”, — тигән ҡарарға килә ултырыш. Ошонда уҡ партия өлкә комитеты президиумы Мортазинды Башҡортостан ғәскәрҙәре командующийы итеп күрһәтә, уның бурыстарын билдәләй.

Был идеяны БССР-ҙың Халыҡ Комиссарҙары Советы ла яҡлап сыға һәм, хәрби етәкселекте башҡорт командованиеһы ҡулында туплау кәрәклеген белдереп, БССР ғәскәрҙәре етәкселеген Мортазинға буйһондороуҙы, уға үҙ штабын булдырырға рөхсәт итеүҙәрен һорай. Шуның һөҙөмтәһендә Стәрлетамаҡ менән Екатеринбург араһында телеграф аша һөйләшеүҙәр башлана. Ләкин хәрби округтарҙа хафаланыуҙар тыуа. 68-се бригада етәкселеге, мәҫәлән, Урал ғәскәрҙәре командующийына “Мортазиндың милли ғәскәр туплауы һәм уның совет власына ҡаршы сығыу ихтималлығы” тураһында хәбәр итә (ЦГА СА, ф. 4, оп. 1, д. 23, 11-се бит).

Ә Мортазиндың елкәһендә яңы хәстәрҙәр. Башҡортостанда, айырыуса уның тыуған яҡтарында, аслыҡ башлана. Халыҡ себен кеүек ҡырыла. Етмәһә, башҡорттарҙы йәберләйҙәр, кәмһетәләр. Мортазин И. Сталинға урыҫ хеҙмәткәрҙәренең башҡорттарҙы ҡыҫымға алыуы, террор ойоштороуҙары тураһында хәбәр итә, тик-томалдан нисәмә кешенең сығарып атылыуына аныҡ дәлилдәр, миҫалдар килтерә (ЦГА СА, ф. 4, оп. 1, д. 23-се бит).

Был сигнал ВЧК-ның Махсус (Особый) бүлегенә ебәрелгән булырға тейеш, сөнки хатта бүлек рәйесе Менжинскийҙың имзаһы тора. Ул ҡәтғи рәүештә шундай күрһәтмә бирә: “Данилов иптәшкә. Мортазин иптәшкә ышанырға ярамай. Ул аҡ гвардиясы, коммунист төҫөн генә алған... Нисек итеп ул тағы ла Башҡортостанға барып сыҡҡан? Уны Башҡорт ғәскәрҙәренә бөтөнләй яҡын ебәрмәҫкә. Яңы ғәскәрҙәр төҙөргә рөхсәт итмәҫкә, урыҫтарҙан торған комсоставҡа иплерәк кешеләрҙе индерергә. Мортазин һәм уның эше башҡалар үҙҙәре аңламаған һәр кем өҫтөнән дә ялыу ебәреп торасаҡ, уның комсоставы (урыҫтар өлөшө) Щедрин тасуирлаған кешеләргә оҡшамаһын...”

Ваҡыт үткән һайын көсөргәнешлектәр ҙә арта. Урал хәрби округы командующийы Мрачковский РВСР рәйесе Троцкийға, Башҡортостандағы хәлдәрҙе баһалап, рапорт ебәрә. Ул милләтселек хәрәкәтенең үҫеүе, урыҫтар менән башҡорт хеҙмәткәрҙәре араһында дошмансылыҡтың көсәйеүе, БССР-ҙа башланған “милли

хәрәкәт"тең уртаһында төп фигура булып Мортазиндың тороуын белдерә. "Рус командованиеһы үҙен тәртипле тотмай, башҡорт ауылдарын талай, юлбаҫарлыҡ ҡыла тип бәлә һала Мортазин", — тип ошаҡлаша Мрачковский.

Командующий һис тынышырға теләмәй, РВСР рәйесе урынбаҫары Склянский исеменә лә, Мортазин миңә буйһонмай, Екатеринбургҡа саҡырһам, килмәй, тип ялыу оҙата. Шиҡәйәттәр күбәйеп китә, күрәһең. Уларҙың бөтәһенә лә И. Сталин бер юлы түбәндәгесә яуап ҡайтара: "1. ВЦИК тарафынан раҫланған БССР Конституцияһы буйынса ("Известия" гәзитен ҡарағыҙ, № 109, 27.5.20) БССР өсөн Хәрби Халыҡ Комиссариаты институты ҡаралмаған.

2. Был мәсьәләне РСВСР үҙе нисек теләй шулай эшләй ала.

3. Мортазин иптәштең дәғүәләрендә мин бер ниндәй контрреволюционлыҡ күрмәйем. Шунлыҡтан Урал хәрби округына еткерегеҙ: башҡорт хеҙмәткәрҙәренең ниндәй булыуына ҡағылышлы хәбәрҙе эҙемтәһеҙ ҡалдырырға тәҡдим итәм".

И. Сталин, бер ҡараһаң, Мортазинды ла, уның көрәштәштәрен дә үҙенең ҡанаты аҫтына алған кеүек, ләкин ҡуҙғатылған мәсьәләлә — айырым армия төҙөүгә килгәндә, Башҡорт Республикаһы етәкселеге Үҙәктең яҡлауын тапмай. Хәрби өлкәләге пландар тормошҡа ашмай ҡала. М. Мортазинға ҡарата иһә етәксе органдарҙа эшләгән, һәр нәмәгә синфи күҙлектән ҡарарға күнеккән кешеләр яғынан ҡыҫым көсәйә. Төп сәбәп итеп улар Мусаның, әлеге лә баяғы, 1918 йылдың йәйендә аҡтарҙа йөрөүен һөйрәп сығара. Әммә Мортазин, бөтә сабырлығын йыйып һәм оло дәрәжәһен төшөрмәйенсә генә, был баҫымдарҙы юҡҡа сығара килә. Әлегә.

Шул арала Бәләкәй Башҡортостандың сәйәси тормошонда ҙур үҙгәрештәр башлана.

1921 йылдың 21 июле. Башҡортостан Үҙәк Башҡарма Комитетының беренсе ултырышы бара. Уны М. Мортазин алып бара, секретары — А. Тереғолов — яңы кешеләр. Ултырыш республиканың яңы етәкселеген һайлау мәсьәләһен ҡарай. Беренсе булып һүҙҙе А. Бейешев ала һәм сессия фракцияһынан түбәндәге исемлекте тәҡдим итә: БашЦИК рәйесе М. Мортазин булырға тейеш. Президиум ағзалары: Бейешев, Ишмурзин, Зудов, Гузаков, Михеев, Хоҙайбирҙин. Тауышҡа ҡуйғандан һуң был тәҡдим үҙгәрешһеҙ үтеп китә.

Шул уҡ Бейешев фракция исеменән хөкүмәт ағзалығына 29 кешене тәҡдим итә: Халыҡ Комиссариаты Советы (СНК) рәйесе — Халиков, Аҙыҡ-түлек Халыҡ комиссары — Ишмурзин, Һаулыҡ һаҡлау Халыҡ комиссары — Ҡыуатов, Финанс Халыҡ комиссары

— Озоль, Халыҡ хужалығы комиссары (Совнархоз) рәйесе — Зудов, уның урынбаҫары — Бикбауов, РКИ Халыҡ комиссары — Дауытов, Ер эштәре Халыҡ комиссары — Мырҙабулатов һ.б. Республикалағы сәйәси, социаль, иҡтисади тормошто тамырынан түңкәреп, уны бөтөнләй икенсе юлға күсерергә тырышыу һымаҡ ҡабул ителә был ҡарар. Ләкин уйланылған эштәрҙе тормошҡа ашырып өлгөрәме һуң Мортазин? Быға ҡәтғи рәүештә "юҡ" йә иһә "эйе" тип яуап биреп булмай, сөнки илдә ҡот осҡос аслыҡ башланыуы ла, сәйәси һәм милли, шулай уҡ ер мәсьәләләренең киҫкенләшеүе бөтә иғтибарҙы хужалыҡ эштәренә йүнәлтергә мөмкинлек бирмәй. Төбәктәрҙең үҙ-ара алыш-биреш эштәрен көйләү, ошо маҡсатта Рузаевка тимер юл станцияһынан Стәрлетамаҡҡа тиклем узкоколейка тартып, йөк ташыуҙы рәтләп ебәреү өсөн бик ашығыс саралар күрергә кәрәк була. БашЦИК рәйесен волостарҙа, айырыуса Йылайыр, Тамъян-Ҡатай, шулай уҡ Арғаяш, Мәсәғүт, Стәрлетамаҡ, Бәләбәй кантондарында, малсылыҡтың үҫмәүе борсой. Әгәр ҙә ундағы халыҡҡа матди ярҙам күрһәтелмәһә, малдың үрсеүе бөтөнләй туҡтап ҡаласаҡ. Ә мал-тыуарһыҙ башҡорт нисек йәшәһен? Башҡорт хужалыҡтарының үҫмәүе — халыҡтың һәлкәүлегенән түгел, ә уның ер эшкәртерлек ҡоралы булмауға бәйле, быуаттар буйына техниканан мәхрүм ителеп, ул урыҫтар кеүек билдәле бер үҫеш кимәленә барып етмәгән. Бына шуны аңлай Мортазин.

Һәм бында М. Мортазиндың хужалыҡ эштәре менән саҡ-саҡ ҡына танышыу ҙа, уның хәрби етәксе булыу менән бер рәттән, аҡыллы дәүләт эшмәкәре лә булғанлығын күрһәтә. Ҡыҙғанысҡа ҡаршы, уның БашЦИК рәйесе сифатында эшмәкәрлеге — Мәскәү архивтарында был турала материалдар етерлек тигән мәғлүмәт булһа ла — әлегә өйрәнелмәгән.

1921 йылдың сентябрь аҙағында Стәрлетамаҡта урындағы партия комиссияһы, кемде коммунистик ячейкала ҡалдырырға, кемде ҡалдырмаҫҡа, тигән мәсьәләне ҡарай.

Иң тәүҙә партия ағзаһы И. Морозовтың биографияһын тыңлайҙар. Уға ниндәйҙер дәғүә белдереүсе булмай. Икенсе булып БашЦИК секретары Тереғолов сығып баҫа. Уға 24 кеше — "ыңғай", 1 кеше "ҡаршы" тауыш бирә. Сират Халыҡ Комиссарҙары рәйесе Халиҡовҡа етә. БашЦИК ағзаһы Хафиз Ҡушаев уны маҡтап сығып һөйләй, ләкин РКП(б) өлкә комитетының Контроль Комиссияһы секретары Опарин уға ҡырҡа ҡаршы сыға, "М. Халиҡов — сығышы менән пролетариат түгел, ә шкурник", — ти. Мортазин быға сыҙап ултыра алмай, һүҙ алып, ярһып-ярһып фекерҙәрен ауҙарырға тотона. Башҡортостан хеҙмәтсәндәренең ирке,

бәхете өсөн күп көс һалған арҡадашы Муллаян хаҡында ғына әйтмәй ул, ә иғтибарҙы тәрәнгәрәк ебәрә. Ярлылар араһынан сыҡҡан алдынғы башҡорттарҙың нисек итеп коммунист булып китеүе, революцион аңдарының үҫеүе тураһында инандырырлыҡ итеп аңлата ул (асылда Муса үҙенең яҙмышын да күҙ алдында тота), шуға күрә “ячейкаларҙы таҙартыу мәсьәләһенә килгәндә, һаҡлыҡ күрһәтергә, кешегә баһа биргәндә ваҡ-төйәк менән шөғөлләнмәҫкә” өндәй.

М. Халиҡов, 28 “ыңғай”, 19 “ҡаршы” тауыш йыйып, партия сафында тороп ҡала.

Сират еткәс, комиссияны Мортазин үҙенең тормош юлы менән таныштыра. Уның артынса дүрт яҡлаусыһы сығып һөйләй. Ә артабан һорауҙар яуа: Ҡыҙыл Армияға тиклем ҡайҙа булдың, Советтар яғына ниндәй шарттарҙа сыҡтың? Ҡыҙыҡһыныу күберәк шул тирәлә урала. Муса һәр һорауға ашыҡмай ғына яуап бирә: ауылда ялланып иген игеүен, мәҙрәсәлә уҡыуы, халыҡ мәғарифы буйынса эшләүе, революцияға тиклем рядовой сифатында батша армияһында хеҙмәт итеүе, һалдаттар араһында революцион эш алып барыуы тураһында бәйән итә ул; халыҡ тарафынан һайланып, йыйындарҙа ҡатнашыуы, ә артабан Башҡорт автономияһының ойошторолоуы, унда хәрби эштә булыуын әйтеп, үҙенең Колчакҡа, Дутовҡа ҡарашын асып һала, уларға буйһонмауына миҫалдар килтерә, һәр ваҡыт иҙелгән башҡорт халҡы файҙаһына тырышыуын, аҡтар яғында йөрөгән осорҙағы тактикаһын аңлата.

Һүҙе бөткәс, Мусаны залдан сығарып торалар, шунда ғына ҡалғандар берәм-берәм үҙ фекерҙәрен асып һала. Иң тәүҙә Сухоруков тороп баҫа һәм Мортазинды “совет власына ят элемент тип иҫәпләүе”н белдерә. Уға Х. Кәлмитев ҡаршы сыға, Мусаның Көньяҡ-көнбайыш фронтындағы хәрби, сәйәси эшмәкәрлегенә, ул күрһәткән батырлыҡтарға, Польша, Галиция һәм, ғөмүмән, Көнбайыш Европа халыҡтарына совет власы идеяларын аңлатыуына баҫым яһай. Революция осоронда Мортазиндың ғәйебе булған икән, һуңғы хеҙмәттәре уны тулыһынса аҡлай. Кәлмитев, Мортазиндың 1920 йылдағы эшмәкәрлегенә шаһит булғанлыҡтан, уға үҙенең тулыһынса ышаныуын һәм уның партия сафында ҡалырға хаҡлы икәнлеген белдерә. Башҡа коммунистарҙың да фекере тос яңғырай. Мәҫәлән, партия ағзаһы Дулов аҡтар араһында Мортазиндың, хәрби етәксе булараҡ, ҙур абруй ҡаҙанғанын әйтә. Колчак башҡа генералдарға ҡарағанда уның менән күберәк хисаплашыр ине, тиеүе ҡыҙыҡһыныу тыуҙыра. Кабанов тигән коммунист та Мортазинды өҙөп кенә ғәйепләмәй, яҡламай ҙа, ә былай ти: “Мортазин мәсьәләһе буйынса аңлашылмаған берәй нәмә ҡалмаһын

өсөн, был хаҡта ентекләп һөйләшергә кәрәк. Ләкин, онотмайыҡ, революционер булараҡ, Мортазин ысынбарлыҡта бер айырым күренеш булып тора".

Ғәҙел баһа бирергә ынтылған аҙым был. Ләкин ошо фекерҙең башҡаларҙа ныҡыныуынан ҡурҡҡан кеүек, Сухоруков тағы күтәрелеп сыға һәм Мортазиндың өҫтөнә сүп өйөргә тотона.

— Аслыҡтан минтеккән балаларҙы йыйыу комиссияһында эшләгәндә, бер көндө мин Мортазинға тап булдым, — ти ул.— Муса миңә, кисекмәҫтән урамдан мосолман балаларын йыйып ал, тип приказ бирҙе. Йыймаһаң, атасаҡмын, тине. Ни өсөн Мортазин мосолман балаларына ғына әйтте, ә урыҫ балалары тураһында өндәшмәне? Сөнки ул милләтсе, уны партиянан сығарып ташларға кәрәк. Бынан башҡа бер мәл мин уға доклад менән ингәйнем, ул миңә, ни өсөн инстанция буйынса тәүҙә кантон халыҡ мәғарифына бармайһың, ә туп-тура ВЦИК рәйесенә мөрәжәғәт итәһең, тип, ҡулға алырға итте.

Әммә ултырышта дәғүәсегә ҡаршы сығыусылар ҙа табыла. Х. Алишев (элек Петроград эргәһендә Башҡорт ғәскәрҙәре төркөмө командиры), хәҙер аслыҡ комиссияһы рәйесе булараҡ, шундай аңлатма бирә:

— Сухоруков юҡты һөйләй. Стәрлетамаҡ урамдарында бер урыҫ балаһы ла, ғөмүмән, урамда урыҫтар күренмәй.

Мортазин өсөн тауыш бирәләр: "ыңғай" — 26, "ҡаршы" — 14, "битараф" — 9.

М. Мортазин 1921 йылдың декабрендә Советтарҙың IX Бөтә Рәсәй съезында делегат булып ҡатнаша. Ә тағы өс ай ашыуыраҡ ваҡыт үткәс, уны Мәскәүгә бөтөнләй саҡыртып алалар. Ул Юғары хәрби-педагогик курстарға уҡырға инә, тағы ике йыл ярымдан һуң — 1924 йылдың 17 сентябренән — Мортазин М. В. Фрунзе исемендәге Эшсе-Крәҫтиәндәр Ҡыҙыл Армияһының Хәрби Академияһы тыңлаусыһы булып китә.

Мәскәүгә китеп, өҫтәүенә махсус белем дә алғас, Муса Мортазинды хәрби яҙмыш ҡайтанан үҙ ҡосағына ала. 1928 йылдың ғинуарынан ул — 11-се кавдивизияның 3-сө бригадаһы командиры, өс ай үтеүгә уны 8-се кавдивизияға күсерәләр. 1929 йылдың аҙағында Мортазин — РККА Баш идаралығында Ремонтлау идаралығы инструкторы, 1932 йылдың 15 авгусынан алып ошонда уҡ Ат составы идаралығында сектор, артабан уның 2-се бүлеге начальнигы. Ул йылдарҙа армияның төп ҡеүәте кавалерия булғанлығын иҫкә алһаҡ, атлылар менән эш иткән бүлек начальнигы вазифаһында эшләү бик ҙур хәрби пост икәнлеген аңларға мөмкин.

Әммә баш өҫтөндә ҡара болоттар ҙа ҡуйыра. Мортазинды күпмелер ваҡыт аҡтар яғында булыуы һис тә ҡотолтмай. Башҡортостан Республикаһы Дәүләт архивында һаҡланған бер документтан күренеүенсә, Мортазин 1918 йылда үҙенең партизандар отряды ойоштороп йөрөүе тураһында яҙған. Ләкин уның өҫтөнән йыйылған материалдарҙы ҡарап сыҡҡас (1935 йылдың 1 февралендә), Башҡортостан өлкә комитеты секретары Ә. Иҫәнсурин ошо материалдар тупланмаһына: "Бюро ағзаларына танышып сығырға", — тигән резолюция ҡуя. Ә "Дело"һына шундай документ барып ята: "Башҡортостанда Мортазин командалығындағы ниндәйҙер партизан отряды булыуы тураһында документ табылманы".

1937 йылдың 31 майында, НКВД органдары тарафынан тикшереү башланыу менән бәйле, Мортазин РККА-ла хеҙмәт итеүҙән бөтөнләй ситләтелә. Был приказға (№00132) СССР Оборона Халыҡ комиссары, Советтар Союзы Маршалы К. Ворошилов ҡул ҡуя (ЦГА СА, ф. 37837, оп. 1348, 519-сы бит). Шул уҡ көндө Эске эштәр Халыҡ комиссары һәм Дәүләт Именлеге Башидаралығының 2080-се ордеры буйынса Г. Айзенберг тигән капитан уны ҡулға ала. 17 июлдә Мәскәү хәрби округы Сәйәси идаралығы эргәһендәге парткомиссия ҡарары менән ул ВКП(б) ағзалығынан сығарыла. Шулай итеп, Мортазин хәрби званиеһыҙ, бер ниндәй дәрәжәһеҙ, фирҡәһеҙ-ниһеҙ, туғандарһыҙ ғәҙәти кешегә әүерелә. Уны хәҙер төрлөсә йәберләргә лә, туҡмарға ла, мәсхәрәләргә лә була. Һәм шулай итәләр ҙә. Дүрт айға һуҙылған допрос ваҡытында был көслө рухлы, баһадир кәүҙәле ирҙе нисек һындырырға маташҡандарҙыр — беҙ быны белмәйбеҙ. Белә лә алмаҫбыҙ. Фараздар ғына ҡорорға мөмкин.

Бына беҙҙең алда — ике битлек "Ҡулға алыныусылар анкетаһы". Анкета булғас, тотоп килтерелгән кеше үҙе тултырырға тейештер инде уны. Ә бында, ун биш пункттан торған документты тәфтишсе яҙған, ике пункттың ғына биш юлын Мортазин үҙе башҡарған. Хәрефтәре һикергеләгән, тегеләй-былай ауышҡан, ун биш һүҙҙә ун орфографик хата яһаған. Тимәк, ғәҙәти, тыныс шарттарҙа яҙылмаған анкета. Тағы бер нәмә ғәжәпләндерә: "Анкета"ға Мортазин үҙе түгел, ә ул булып бөтөнләй икенсе кеше ҡул ҡуйған.

1937 йылдың 27 ноябрендә СССР Юғары Суды Хәрби коллегияһы, РСФСР УК-ның 58-1 "б", 58-8, 58-11 статьялары буйынса уны атып үлтерергә, тигән ҡарар сығара. Ҡарар шул уҡ көндө ғәмәлгә ашырылып, мәйете Донской зыяратындағы соҡорға ташлана.

Муса Мортазиндың атылыр алдынан ярты сәғәт кенә алда төшөрөлгән һәм Мәскәү архивында табылған фотоһы 1992 йылда республика гәзиттәрен йөрөп сыҡҡайны инде. Йән тетрәндергес

һүрәт! Йылдар аша үтеп, беҙҙең йөрәктәргә килеп ҡаҙалған батыр ҡарашы. Ҡан һауған һәм аҙ ғына йәштәре лә йылтыраған күҙҙәрҙә, әрнеү менән бергә, уланын яҡлап алып ҡала алмаған халҡына үпкә тойғоһо ла уҡып була һымаҡ. Тап ошонда Мортазиндың ҡулға алынғанға тиклем үк әле яҙған һүҙҙәрен иҫкә төшөрөү урынлы булыр: “Ун бер йыл булды инде: минең бөтөн эшмәкәрлегем иптәштәремдең күҙ алдында үтте — улар мине яҡшы белә. Мин һәр ваҡыт фәҡир-фоҡралар эргәһендә булдым һәм кулактар, аҡ офицерҙар, мосолмандарҙың — башҡорттоң да, татарҙың да — руханиҙары менән көрәштем. Партияға, Ҡыҙыл Армияға, Советтар Союзына үҙемдең бирелгәнлегемде иҫбатлап килдем. Колчакҡа, аҡ поляктарға, Вәлидовтың аҡ гвардиясыларына ҡаршы һуғыштым. Ҡыҙыл Армияла хеҙмәт иткән бөтөн йылдарҙа ла миңә кем мәнфәғәте яҡын икәнен, кемде яҡлауымды, кемгә ҡаршы булыуымды күрһәттем”.

*1998 й.*

# XI. Йөрәк яраһы

“Сәләм хаты.

Ҡарағай ҙа ағас — сибәр ағас,
Бирешмәй ул ҡаты елдәргә.
Беҙҙең кеүек батыр, һылыу ирҙәр
Баш эймәҫтәр яуыз дошманға...

*(Бөйөк Ватан һуғышы геройы Әхмәҙи Мамиевич Якушев һүҙҙәре һәм музыкаһы).*

“Һеҙгә, Зөлҡәғиҙә һеңлем, Ғамир ҡустым, бар ғаилә ағзаларына береһен дә ҡалдырмай, айырмайынса, бик күп һағынышлы Урта Азия сәләмдәре менән ағайығыҙ Таймас. Зөлҡәғиҙә туғаным! Яҙған хатыңды алып укып, бик-бик шат булдым. Һеҙгә киләсәк тормошоғоҙҙа ҙур бәхеттәр, хоҙай иҫәнлек-һаулыҡ бирһен.

...Ҡурҡмағыҙ, атайымдың фамилияһын туғандарына белдерергә КГБ рөхсәт бирҙе. Фамилияһын элек ҡайтып киткәндә белә инем, ләкин был хаҡта әйтеүе хәүефле һымаҡ күренде. Хәҙер мин Мәскәүҙән атайымдың адресын хәбәр итеүҙәрен көтәм”.



Ә. М. Мамилин.

Бына шундай сәйер хат эләкте ҡулға. Уны миңә 1991 йылдың аҙағында Учалы районының Сораман ауылынан килеп тотторо киттеләр. Шул серҙе асып булмаҫмы икән, халыҡ бик ҡыҙыҡһына, тип үтенде ауыл вәкиле Ямалов Салауат.

Хат Төркмәнстандың Чарджоу ҡалаһында йәшәгән Мамилин Таймастан булып сыҡты. Ул артабан апаһына ошо һүҙҙәрҙе яҙғайны: “Һеҙ, атайым иҫән-һау, тигән һүҙемә ышанмай инегеҙ. Хәҙер ул Мәскәүҙә йәшәй, бик ҡартайған, 90 йәштә инде. Исемен үҙгәрткән — Якушев Әхмәҙи Мамиевич булып йөрөй... Пенсияға сыҡһам, уның янына китергә уйлайым...”

Кем һуң ул ғәжәпләнеү тыуҙырған хаттың авторы?

Байрамғол яҡтарынан сыҡҡан таныш-тоноштарҙан һораштыра торғас, шул асыҡланды: Таймас Мамилин 50-се йылдарҙа Башҡорт

дәүләт филармонияһында эшләгән икән, оҫта баянсы булған, мәшһүр йырсы Хәбир Ғәлимовтың аккомпаниаторы сифатында республика буйлап концерттар менән йөрөгән. Ләкин тормошо үҙгәреп, ул артабан Стәрлетамаҡ мәҙәниәт-ағартыу училищеһына музыка уҡытыусыһы булып урынлашҡан. Ә һуңынан яҙмыш уны Төркмәнстанға алып барып ташлаған.

Таймас Мамилиндың йәшәгән урыны беленгәс, беҙ хат алыша башланыҡ. Элек апаһына яҙғанына өҫтәп, Таймас атаһының йәш саҡтағы фотоһын ебәрҙе. Ҡиәфәтендә интеллигентлыҡ күренгән, бик үк ауылдарҙағы ябай хеҙмәткәргә оҡшамаған кеше икән. Уҡыһа, ундай заттың әллә кем булып китеүе бик ихтимал. Тик Әхмәҙи Мамилиндың һуғыш алдынан репрессияға эләгеүе, шулай ҙа иҫән ҡалыуы, һуғышта ҡатнашыуы, ҙур наградалар алыуы, хатта ҙур хәрби етәксе булып китеүе тураһында ла хәбәр итә ине Таймас.

Юҡ, артыҡ хыялланыуға оҡшамай ине уның хәбәре. Таймас икенсе бер хатында яҡташтарының да хәтирәләрен яҙып ебәрҙе: “Атайым 1944 йыл һуғышта яралана һәм ике айға яҡын фронт госпиталендә дауаланып ята. Ошонда Якушева фамилиялы ҡатын менән танышып, улар өйләнешә, һәм атайым уның фамилияһына күсә. Бында иҫ китерлек бер ни юҡ... Был хаҡта миңә Учалы районының Муса ауылынан Ниғмәт Сафиуллин мәрхүм һөйләгәйне. Ул атайымдың штабында хеҙмәт иткән икән. Тағы уның аҙашы — Иманғол ауылынан Ниғмәт Шәрипов та бар ине. Уның һөйләүе буйынса, һуғыш туҡтап торған арала атайым, командирҙарҙы үҙ штабына йыйып, концерт күрһәтә торған булған. Ул гармунда ла уйнаған, йырлаған, етмәһә, үҙе сығарған шиғырҙарҙы ла уҡыған”.

Бына шулай. Ысынлап та серле йомаҡ ине был. Тормошта булғаны һәм ысыны, буш хыял һәм уйҙырма менән аралашып, буталып бөткән һымаҡ. Әммә, нисек кенә булмаһын, Әхмәҙи Мамиевич Мамилиндың серле яҙмышы асыҡлауҙы талап итә ине, уның исеме ауылдаштарына ҡайтарып бирелергә тейеш. Ошо ихтыяждан сығып, төрлө урындарға хаттар китте. Мамилинды ғына түгел, Таймас әйткән Макаевты ла, Якушевты ла эҙләп ҡараныҡ беҙ. Һәм бына бөгөн, инде күп нәмә аңлашылғас, артабан был хаҡта яҙып тороу кәрәкмәгән дә кеүек, ләкин эҙләнеү эшенә ике-өс кешенең ҡушылып китеүен, Сораман халҡының да яуап көтөүен һәм, ғөмүмән, һәр тарихтың да — насармы, яҡшымы ул, барыбер, — кеше өсөн һабаҡ булыуын иҫкә төшөрөп, эҙләнеүҙең һөҙөмтәләрен хәбәр итеп ҡуйыу һис тә артыҡ булмаҫ, тигән уйға киленде.

Иң тәүҙә шундай һорау тыуа: Мамилин иҫән ҡалған икән, ни өсөн быны ауылдаштары белмәй? Таймастан башҡа, Сораманда уның тағы кемдәре бар, бәлки, улар берәй асыҡлыҡ индерә алыр?

Бына бер яуап — уны Зөлҡәғиҙә Ғәләүетдинова яҙып ебәрҙе.

"Мамила ҡарттың ете балаһы бар ине. Оло улы Йосоп, унан Әсфәндиәр, Ниғәмәтйән, Әүхәҙи, Әхмәтйән, Әхмәҙи, Мөслиха. Әхмәҙи ағай менән атайымды Верхнеуральск ҡалаһында рус мәктәбендә уҡыталар. Бик белемле була икеһе лә. Һуңынан атайым мәҙрәсәгә күсә уҡырға, Әхмәҙи ағай Муса Мортазин отрядында йөрөнө, тиҙәр ҡарттар. Аҙаҡ унан ҡайтҡас, һуғыш бөтөпмө инде, Науырҙала колхоз рәйесе булып эшләй, унан Оҙонгүл ауылына күсерәләр... 1937 йылдың көҙөндә уны ике хәрби кеше килеп алып китә. Шул ваҡыттан бирле бер ниндәй ҙә хәбәр-хәтере юҡ".

Күренеүенсә, ауыл өсөн Әхмәҙи Мамилин һыуға батҡан кеүек юҡ булған.

Үкенескә ҡаршы, бәлә яңғыҙы йөрөмәй, тиҙәр. Мәҡәл был юлы ла дөрөҫкә сыға. Таймас үҙе ул турала бер ни ҙә өндәшмәй. Ауылдан уҡытыусы Фирҙәүес Мамилина яҙа: "Әхмәҙи Мамилин оҙон буйлы, ҡуңыр йөҙлө, бөхтә кейенеп, тура һәм ныҡ баҫып йөрөгән кеше була. Уҡымышлы ине, тип хәтерләйҙәр ауылда. Тәүге ҡатыны Байрамғолдан  ине — исеме Хәҙисә. Унан 1924 йылда Мөслиха исемле ҡыҙы тыуа, 1976 йылда үлә, унан ике ҡыҙ ҡалған. Икенсе тапҡыр Әхмәҙи уҡытыусы Фатимаға өйләнә. Ул һуғыш осоронда уҡытыусыларға бүленгән ондо алып ҡайтам тип, ете-һигеҙ саҡырымда ятҡан Наурҙала, ауыл Советына бара. Бригадир уға ат бирмәй, ә ваҡиға ҡышҡы һыуыҡта була, Фатима апай юлда хәлдән тая, шунлыҡтан эргәһендә саңғыла килгән ун йәшлек улы Таймасты ҡайтарып ебәрә. Малай, ауылға килеп, ат егеп, кешеләр менән барғансы, инәһе инде туңған була. Янында тоғо ла юҡ..."

Хатында З. Ғәләүетдинова ла шуны ҡабатлай һәм, Наурҙала биргән ондоң ауырлығы ярты бот самаһы булғанлығын өҫтәп, шул он ҡайҙа юғалды икән тип, әле лә аптырауын белдерә.

Өйҙә Мөслиха, Таймас, Лида, Зилдә тигән береһенән-бере ваҡ балалар ултырып ҡала. Шулай итеп, ғаилә башлығына килгән ҡайғы бәләкәй сабыйҙар өҫтөнә лә төшә. Әсәләре лә гүргә ингәс, балаларҙың бар уйы ҡайҙалыр китеп юғалған аталарына барып тоташыуы, Таймастың да гел уны табырға тырышыуы аңлашыла ки. Был ынтылышты Фирҙәүес Мамилинаның хаты ла раҫлай. "Таймас ағай ауылға һирәк ҡайта торғайны. Шунда ла, атайым тере бит, тип ҡабатлар ҙа йөрөр ине. Ғәҙәттә ул мәжлес мәлдәрендә иҫкә ала торғайны уны. Шуға ағай-эне, Таймас атаһын һағына торғандыр тип, был һүҙҙәрҙе ысынға алманы".

“Таймастың хатындағы тағы бер нәмә иғтибарҙы йәлеп итмәй ҡалмай. “Беҙгә Муса Мортазин туған тура килә, — тип уйҙары менән уртаҡлаша ул. — Төп сығышы буйынса Муса бабай — беҙҙең Сораман кешеһе. Уларҙың олатаһы Ишморат Ғөмәров, ҡайһы бер уландарына ер бүлеп биреп, Көсөккә күсереп ултыртҡан. Муса бабайымдың Сораман клубында сығыш яһауы — 1937 йылда — әле лә хәтеремдә. Тик атайым уға ниңәлер бик ныҡ үпкәләгәйне. Атайымдың хеҙмәттә күрһәткән уңыштары Муса бабайыма ни өсөндөр оҡшамаған. Ә атайым, йәш кенә булыуына ҡарамаҫтан, һуғышта ағаһынан бер баҫҡыс ҡына түбән торған... И. Сталин атайымды дөрөҫ баһалаған һәм ул тулыһынса уның ышанысын аҡлаған...”

Быныһы тағы бер йомаҡ. Оло мөнәсәбәттәргә ишара иткән сер. Мосолман халҡында туғандарҙың үҙ-ара үпкәләшеүе яҡшыға килтермәүе билдәле. Хәүефле нәмә был. Ләкин быға ғына таянып, Муса Мортазин менән Әхмәҙи Мамилин араһында нимәлер булыуын, ни өсөн Мусаның үҙ ҡустыһын өнәп етмәүен бер нисек тә аңлатып булмай.

Таба алған архив документтарынан күренеүенсә, Ә. Мамилин 1920 йылда РКП(б) ағзалығына кандидат булып ингән, шул уҡ йылдың сентябрендә Муса Мортазин менән бергә Польша фронтынан ҡайтҡан. Ул Тамъян-Ҡатай кантонында ҡуҙып киткән “һәнәк һуғышы”н баҫтырыуҙа ла ҡатнашҡан булырға тейеш, сөнки Мортазин бындағы эскадронын фронттан эйәртеп алып ҡайтҡан яҡташтарына таянып туплай. Ләкин Мамилин 20-се йылдарҙың дауамында нимә менән шөғөлләнә — мәғлүмәттәр юҡ.

М. Мортазиндың тормош юлын өйрәнгәндә уның әленән-әле Сораман ауылы кешеләренә “бәйләнеп” йөрөүе күҙгә салына. Мәҫәлән, Мусаның ошо ауыл муллаһын, Мортазиндарға ҡырын күҙ менән ҡарағаны өсөн, Рәхмәт ауылынан алып Сораманға тиклем ат менән ҡушарлап сыбыртҡылап килтереүен, шул мулла үсен ауылдаштарынан да алыуы хаҡында һөйләйҙәр. Был хәлде аңлатырға тырышып, тарихсы-уҡытыусы Ә. Янбаев ошо ҡыланышты “алты ҡырлы Мортазин”дың “етенсе ҡыры” тип атай. 1935 йылда Үҙәк хөкүмәт органдары Муса өҫтөнән шиҡәйәттәр ойоштора башлағас, Сорамандың бер нисә кешеһе лә уның өҫтөнән ялыу яҙып ебәрә: әйтәйек, 1922 йылда Мортазиндың көтөүҙә йөрөгән юрғаһын бүреләр тарттырып киткәс, Муса, йәнәһе, асыуланып, бөтөн бәләне ғәйептәре булмаған кешеләргә ауҙара; 1920 йылдың ҡышында Мусаға ашығыс рәүештә Белореттан Стәрлетамаҡҡа китергә кәрәк булғас, ул Сорамандан бер ҡатындың толоптунын алып китә. Һуңынан асыҡланыуынса, тун өсөн аҡса түләнгән булһа ла, сора-

мандар быны ла ғәйепкә ала. Бына шундайыраҡ ялыуҙар араһында Ә. Мамилиндың да тәфтишсегә әйткән һүҙҙәре бар. Ул былай ти: “Муса отпускыға ҡайтһа, прокурорға ла, милиция начальнигына ла, секретарға ла әйләнә, һәр эшкә ҡыҫыла, бының менән Совет власының абруйын төшөрә һәм түбәндәге органдарҙың эшенә ҡамасаулай”. Был миҫалда ла Мортазиндың характеры ниндәй булыуы күренә.

Мамилиндың етди дәғүәләр белдереүендә дөрөҫлөк бар, әлбиттә. Бергә аҡтар яғында ла, унан һуң ҡыҙылдар яғына сығып, көнбайышта күп ут-һыуҙар кискән ике яугир, етмәһә, ағай-энеләр, бер-береһенең яҡшы яҡтарын да, хаталарын да аҙ белмәгәндер, тип уйларға кәрәк. Тыныс тормош башланғас, уларҙың юлы айырыла. Әммә барыбер ғүмерҙәре бер төрлөрәк тамамлана: Мусаны “буржуаз милләтсе, Совет власына ҡаршы восстание күтәрергә әҙерләнгән”, тип ҡулға алһалар, Әхмәҙиҙе “мортазинсы” тип алып китәләр.

Ә Таймас Мәскәүҙә кемде эҙләй һуң? Уның хаталаныуы аңлашылып тора. Сөнки репрессиянан ҡотолоп ҡалған хәлдә лә, Әхмәҙиҙең, махсус белеме булмаған колхоз рәйесенең, бер нисә генә йыл эсендә юғары хәрби дәрәжәгә үрләүе мөмкин түгел.

Хыял — хыял инде ул. Уға яҡынайған һайын, ул алыҫыраҡ ҡаса... Баламын, улмын тигән һәр кемдең дә күңел төбөндә атай образы йәшәй. Йәшәргә тейеш. Әммә кеше ғүмере мәңгелек түгел. Быны мин ни өсөн әйтәм һуң әле?

Ике-өс кеше ҡатнашлығында башланған эҙләнеү эше көтмәгәндә һәм еңел генә тамамланып ҡуйҙы. Башҡортостан Республикаһы Именлек министерствоһынан шундай мәғлүмәт бирҙеләр: эйе, Ә. М. Мамилин тигән кеше ысынлап та булған. Тыуған йылы 1892. Башҡорт, Учалы районының “Большевик” колхозында иҫәпсе булып эшләгән. М. Мортазин отрядында хеҙмәт иткән. Ҡатынының исеме — Фатима. Таймас исемле 6 йәшлек улы, Лида исемле 3 йәшлек ҡыҙы бар. 1937 йылдың 10 октябрендә ҡулға алынған. Эшен “тройка” ҡараған. 1937 йылдың 27 ноябрендә сығарып атылған. 3.05 сәғәттә”.

Дәүере кеүек үк үтә лә ҡаты һәм рәхимһеҙ хәбәр.

*1992 й.*

# XII. Милләтебеҙ инәһе

1922 йылдың февралендә Муса Мортазиндан республикалағы иң ҙур посты Хафиз Ҡушаев ҡабул итеп ала һәм ыҙғыш-тартҡылаштарға бик үк бирелмәй, хатта шым ғына Башҡортостан дәүләтселеге төҙөү, һөҙөмтәле милли сәйәсәт үткәреү менән шөғөлләнә башлай. Унда Башҡортостан Мәркәз Комитеты Рәйесенең ныҡышмалылығы арҡаһында республика өсөн сағыштырмаса үҙ аллы йәшәргә нигеҙ һалыныуы һәм, беҙҙең тойомлауыбыҙса, тап ошо сәбәптән Ҡушаевтың Мәскәүгә алыныуы, ләкин ғәҙәти генә эшкә тәғәйенләнеүе, аҙаҡ килеп, уның бөтөн ғаиләһенең ҡот осҡос фажиғәгә тап булыуы билдәле. Ул очеркты яҙған саҡта был юлдарҙың авторына Х. Ҡушаевтың әле Силәбелә йәшәгән ҡустыһы Ҡәйүм Ҡушаев күп ярҙам иткәйне. Ә инде был яҙмаларҙы тәҡдим иткәндә беҙ күберәк икенсе хәтирәләргә — Өфөлә йәшәүсе Мәрйәм Ғабдрахманованың һөйләгәндәренә таянабыҙ (**Иҫкәрмә:** М. Ғабдрахманова — Х. Ҡ. Ҡушаевтың ҡатыны Рабиға Йәнғоловнаның һеңлеһе 1933—1937 йылдарҙа Мәскәү консерваторияһында уҡый, Хәбир Ғәлимов, Ғабдрахман Хәбибуллин, Баныу Вәлиева, Маһира Мәксүтова кеүек Башҡорт сәнғәтенең күренекле эшмәкәрҙәре менән бергә уҡыуын тамамлап ҡайтып, ун йыл буйына опера һәм балет театрында эшләй, аҙаҡ Башҡортостан радиоһында музыкаль редактор вазифаһын башҡара. — **Авт.**).



Рабиға Ҡушаева милли кейемдә.

Ҡушаевты ситкәрәк ҡуйып, Рабиға эшмәкәрлегенә иғтибар бүләйек.

Табып булған бер аҙ ғына архив материалдарынан да Рабиға Йәнғоловна бөтөн ғүмере буйына, балалар астан ҡырылмаһын, уҡып ҡалһын, тип борсолоп йөрөгән шәхес һымағыраҡ төҫмөрләнә. Ун биш йәшендә генә булыуына һәм атаһының рөхсәт итмәүенә лә

ҡарамайынса, үҙҙәренә күрше Бөрйән ауылында уның уҡытыусылыҡ эшенә тотоноуы... 1919 йылда Стәрлетамаҡта йәшәй башлағас та, ике йыл үткәс Өфөлә лә, тағы һуңыраҡ, Мәскәүгә күсенгәс тә гелән бер үк эш — етемдәрҙе, ҡарауһыҙ ҡалған үҫмерҙәрҙе балалар йортона урынлаштырыу, уҡырға йәлеп итеү. Әммә, бына бит, тормоштоң бер ҡәһәрле яғы: Рабиға ғүмер баҡый ил балаларын ҡурсалап йәшәгән, ә үҙенең улы Ирэк, бер ҡыйырсыҡ икмәккә зарығып, күҙҙәрен мөлдөрәтеп, ни бары алты йәшендә тере етем хәлендә торған да ҡалған.

Беҙҙең уйыбыҙса, ошо ғәҙелһеҙлек әле булһа Ҡәйүм Ҡушаевҡа ла, Мәрйәм Ғабдрахмановаға ла тынғылыҡ бирмәй, улар бөгөн дә, Сталин репрессияларынан һуң инде алтмыш йылдан ашыу ваҡыт үтеп китһә лә, бөтә хәбәрҙәрен ошо Ирэккә бора. Бора һәм күҙҙәренә йәш ала. Ҡәйүм Ҡушаевич 1937 йылда Мәскәүҙә Мәрйәм Йәмилевна менән бергә малайҙы нисек итеп балалар йортона урынлаштырып йөрөүен һөйләһә, икенсеһе Ҡәйүмдең дә аяныс хәлдә тороп ҡалыуын иҫләй: ағаһы Хафиздың бүлмәләре бикләнгән, мисәт һуғылған, әйберҙәре тартып алынған. Мәрйәм Ирэкте күрергә, ҡарашырға тип барһа, Ҡәйүм уны ҡабаландырырға тотона, сөнки тағы килеүҙәре, Мәрйәмде лә ҡулға алыуҙары ихтимал. Ахыр сиктә студент ҡыҙ малайҙы үҙе уҡыған Мәскәү консерваторияһы ҡунаҡханаһына алып ҡайта. Тик бында ла тыныслыҡ юҡ, малайыңды алып кит, тип ҡыуалар. Ә малай шыңшый: апай, ти, һин миңә бер шешә һөт менән бер һыныҡ икмәк алып бир ҙә, мин бер кешегә лә күренмәй тыныс ҡына ултырырмын, тип инәлә. Ләкин ҡыҙ батырсылыҡ итмәй.

Итһә икән, үҙе ҡараһа икән малайҙы! Бына ошолай үҙҙәренең тәрбиәләй алмауы Мәрйәм апайҙың да, Ҡәйүм ағайҙың да һаман выжданын ғазаплай. Малайҙың ҡайҙалыр олаҡтырылыуы, юғалып ҡалыуы һәм һаман табылмауы яфалай уларҙы.

Хәйер, бер мәл милиция, Юрик Хафизович Ҡушаев исемле бер егетте табып, Ҡушаевтарҙың оло ҡыҙы балерина Динә менән осраштыра. Тик, минең ҡустым түгел ул, тип баш тарта ҡыҙ. Ни өсөн? Бәлки, тап ошо Юрик элек Ирэк булғандыр? Булһа, егет үҙе лә ни өсөн өндәшмәйенсә, милиция бүлмәһендә башын баҫып тик ултыра? Ҡурҡҡанмы? Берәй ғәйебе булғанмы? Әйтеүе ауыр.

РСФСР Халыҡ мәғарифы комиссариаты эргәһендәге Балалар йорттары идаралығы инспекторы булып эшләп йөрөгән Рабиға Йәнғоловнаның үҙ дачаһына етер саҡта кемдеңдер ҡулынан һәләк булыуы ла асылмаҫ сер булып ҡалған. Был эш буйынса бер ни тиклем тикшереү алып барған Мәскәү уголовный розыскаһы, Ҡушаеваны талау маҡсаты менән үлтереп киткәндәр, тигән рәсми доку-

мент бирә. Һис ышандырмай был. Ҡәйүм Ҡушаевичтың иҫләүенсә, мәйеттән алыҫ түгел уның "балетка"һын табалар. Унда Рабиғаның күлдәк, туфли кеүек әйберҙәре тейелмәйенсә ятып ҡалған. Ул саҡта нимә урлағандар, нимә алып киткәндәр?

Мәрйәм Ғабдрахманова ла уның талау өсөн генә үлтерелеүенә ышанып етмәй. Сөнки Тверь ҡалаһына инспектор тикшереүе менән юлға сығыр алдынан Рабиға иренә ҡасан ҡайтырын нығытып әйтеп китә. Шуға күрә ул көндө Хафиз ҡатынын көтмәй ҙә, кисен ҡайнағаһы Харис Йомағолов менән тыныс ҡына шахмат уйнап ултыра. Кемдеңдер, йөрәкһеп килеп "ҡатыныңды үлтергәндәр", тиеүенә Хафиз ышанмай башта, "Ерунда! Ул иртәгә ҡайтырға тейеш", тип кенә ебәрә.

— Командировкаһының иртәрәк бөтөрөн белгәндәрме, әллә артынан эҙәрлекләп килгәндәрме — аптырайым, — ти Мәрйәм Йәмил ҡыҙы. — Һәр хәлдә уны аҡса өсөн үлтермәгәндәр, тип уйлайым.

Эҙәрләһәләр, бының сәбәбе түбәндәгеләр генә булыуы мөмкин.

Берҙән, Рабиға — Башҡортостандың иң абруйлы кешеләренең береһе булған Ҡушаевтың ҡатыны. Был матур ике кешенең ғаилә тормошо хаҡында әле булһа һоҡланып һөйләйҙәр: улар һуңғы көндәренә тиклем бер-береһенә ҡарата ихтирам, һөйөү тойғоһо һаҡлай, Ҡушаевтың тоғро тормош юлдашын юҡ итеү һәм уны ҡурҡытырға, рухын һындырырға тырышыу властарҙың маҡсаты булыуы бик тә ихтимал. Тарихтан, әйтәйек, И. Сталин эргәһендә йөрөп тә, ҡатындары ултыртып ҡуйылған М. Калинин, В. Молотов ғаиләләре миҫалын беҙ хәҙер беләбеҙ бит инде.

Рабиғаның Бәләкәй Башҡортостан хөкүмәтенең элекке етәксеһе Харис Йомағоловтың туғаны булыуын да онотмайыҡ... Хәйер, утыҙынсы йылдарҙың уртаһында Рабиға Йәнғоловна үҙе лә ярайһы уҡ күренекле дәүләт эшмәкәренә әйләнеп өлгөрә: Н. Крупскаяның ҡул аҫтында эшләй, мәғариф өлкәһендә байтаҡ мәсьәләләрҙе хәл итә, тура килгәндә, яратмағанын ярып әйтә лә белә. Шуға күрә Рабиға Ҡушаева аҫтыртын рәүештә Сталин репрессияһы, НКВД органдары ҡорбаны булғандыр, тигән шик-шөбһәгә нигеҙ бар.

...Әле балалығы ла сығып бөтмәгән ҡыҙҙың күҙе шулай иртә асылыуына, донъяға ҡарашының тиҙ формалашыуына ғәжәпләнәһе түгел: уның атаһы менән бер туған ағаһы Харис Йомағолов — Башҡортостан Республикаһының ревком рәйесе, икенсе ағаһы Ғилаж да волость ревкомы кимәлендә комиссар исемен күтәргән кеше. Шуларҙың йоғонтоһонда үҫә Рабиға һәм... уҡытыусы булырға хыяллана. Ун алты йәшендә маҡсатына ирешә лә. Һамар губернаһы Пугачев өйәҙе Бөрйән ауылы кешеләре үҙе теремек, үҙе

яғымлы булыуы менән айырылып торған уҡытыусы ҡыҙҙы тиҙ арала яратып өлгөрә. Шуға күрә һис тә аптырарға ярамай: 1917 йылдың июлендә уны Ырғыҙ буйынан Ырымбурға башҡорттарҙың беренсе йыйынына делегат итеп ебәрәләр.

Йыйын ҡабул иткән ҡарарҙарҙың Башҡортостандың милли дәүләтселеген, ижтимағи-сәйәси тормошон юлға һалыуҙа мөһим роль уйнағаны яҡшы билдәле. Дәүләт ҡоролошо, уға идара итеү мәсьәләләрен тикшереү менән бергә, ул ер, мәғариф һәм белем биреү, ғәскәр төҙөү кеүек көн үҙәгендә торған мәсьәләләрҙе лә ҡарай. Тик бына съездың көн тәртибендә "ҡатын-ҡыҙҙар мәсьәләһе" тигәне генә булмай. Ғәҙелһеҙлек был, тип иҫәпләй Рабиға һәм, съезды ойоштороу комитетына үтенесен еткереп, үҙен төп докладсы итеп тәҡдим итә.

Йыйын 20 июлдә Каруанһарайҙа асыла. Ҡуйылған бер нисә мәсьәлә буйынса ҡыҙыу-ҡыҙыу фекер алышҡандан һуң, һүҙҙе Йомағоловаға бирәләр.

Нимә хаҡында һөйләй һуң йәш уҡытыусы? Иң тәүҙә Йомағолова, йөрәгендә төйнәлгән бөтә ризаһыҙлыҡтарын еңә алмайынса, бына ошо съезда башҡорт ҡатын-ҡыҙҙары араһынан ни өсөн уның ғына, бер үҙенең генә ҡатнашыуын аңлата. Бының сәбәбе, ти ул, башҡорт ҡатын-ҡыҙҙарының наҙан булыуында, ҡараңғы тормошта йәшәүендә.

Рабиға фекерен артабан ошолай үҫтерә: башҡорт ҡатын-ҡыҙҙарына ирҙәр менән тиң гражданлыҡ һәм сәйәси хоҡуҡтар бирергә кәрәк. Быны тормошҡа ашырыу өсөн йәш уҡытыусының тәғәйен генә тәҡдимдәре лә бар: шәриғәт буйынса ирҙәр һәм ҡатын-ҡыҙҙар тиң булһын, ҡатын-ҡыҙҙар ҙа ижтимағи-сәйәси эштәр менән шөғөлләнһен. Улар һайлауҙа ла ҡатнашырға тейеш. Ҡатындар, ирҙәр менән тиң хоҡуҡлы булып, йәмәғәт эштәрендә ҡатнашһа ғына милләт үҫә һәм юғары мәҙәниәткә эйә була ала.

Ун алты йәшлек ҡыҙ был үтә лә етди фекерҙәргә нисек килгән? Ләкин уны артабан тыңлап ҡарайыҡ. Уның талаптары ҡаты һәм ҡәтғи яңғырай: һайлаусылар тауышын юғалтмаҫ өсөн, ҡатын-ҡыҙҙарҙың һайлауҙа ҡатнашыуы мәжбүри ителергә тейеш, тик улар өсөн ирҙәрҙекенән айырым участкалар ойоштороrға кәрәк: никах уҡығанда ике яҡ та — егет тә, ҡыҙ ҙа — ҡатнашырға тейеш: ҡыҙ кеше, йәше ун етегә етмәйенсә, кейәүгә бирелә алмай.

Ғаилә тормошо бөтөн булмаһа, ҡатындың айырылып китергә хоҡуғы бар. Был хоҡуҡ метрик кенәгәгә яҙып ҡуйылһын. Ирҙәрҙең өс-дүрт бисәгә өйләнеүен тыйырға һ.б.

Ярһып, янып һөйләй уҡытыусы ҡыҙ. Көлөргә лә, асыуланырға ла белмәй зал. Уның сығышын өнәмәгән кешеләр ҙә була. Хатта,

ҡайһы бер иҫтәлектәргә ҡарағанда, уға И. Мерәсов, М. Буранғолов та ҡаршы сыға. Үҙенә туған да тура килгән был ҡыҙ баланың ата-олатайҙарҙың ғөрөф-ғәҙәтенә йәмһеҙ рәүештә ҡаршы сығыуы, йәштәрҙең әҙәпһеҙлеге тип һанай, күрәһең, улар. Әммә, күҙҙәренән ут сәсрәтеп, ҡарашын залдан алмайынса, Рабиға телмәрен шундай һүҙҙәр менән тамамлай: "Йәшәһен милләттең яртыһын тәшкил иткән һәм уның үҫеүендә, сәскә атыуында ҙур көс булып торған ҡатын-ҡыҙҙар! Ҡатын-ҡыҙҙар — улар милләт инәһе, шуны аңларға ваҡыт!"

Рабиғаның телмәре ныҡ тәьҫир итә съезға. Аңлашыла ки: йөкмәткеһе буйынса үтә лә мөһим проблеманы беренсе булып йәш кенә ҡыҙ сығып һөйләһен әле! Ысынлап та, ҡатын-ҡыҙҙан башҡа ҡайҙа, ҡайһы халыҡ нимә хәл итә алған? Юҡ ундай ер, юҡ ундай милләт. Тиккә түгел, Рабиға йөрәгенең талпыныуын, ярһыуын тойған, яратып та, шул уҡ ваҡытта көләмһөрәп тә ултырған делегаттар уға "милләт инәһе" тигән исем тағалар һәм ҡатын-ҡыҙҙар мәсьәләһе буйынса етди ҡарар ҡабул итәләр. Асылда башҡорт ҡатын-ҡыҙҙарына рухи азатлыҡ биреү һәм уларҙың йәмғиәттә яңы социаль статусын билдәләүҙе күҙҙә тотҡан тәүге закон акты була был.

"Милләт инәһе". Уҡыусының күреүенсә, Р. Йомағоловаға был исем рәсми рәүештә бирелмәй. Республика айырым дәүләт булып ойошмайынса тороп, ундай исем биреү йолалары ла, әлбиттә, булмаған. Ләкин рәсмилектең булмауы ғына был тарихи мәлдең әһәмиәтен кәметәме? Эш "Милләт инәһе" тип исемләнгән ҡыҙҙың йәш булыуында ла тормай. Кешенең ҡартайып та халҡы өсөн бер ни күрһәтә алмауы мөмкин һәм, киреһенсә, йәш булып та бөтөн ил хәстәрен күтәреп сығыуы ихтимал. 1993 йылдың башында был юлдарҙың авторына яҙған хатында М. Ғабдрахманова ла шул уҡ фекергә ишара яһай: "Илебеҙ, халҡыбыҙҙың бәхете өсөн көрәшеп, 1917—1919 йылдарҙа беренсе булып "Милләт инәһе" тигән исемгә Рабиға апайым лайыҡ булған. Был оло хөрмәт уға тиктән генә күрһәтелмәгән..."

Автор артабан үҙ фекерен ошолай нығыта: "1921 йылдың 22 декабрендә IX Бөтә Рәсәй съезына Башҡортостандан ун ете кеше делегат булып бара. Шулар араһында Рабиға Ҡушаева ла була... Шәһит ағай Хоҙайбирҙин менән Ленинға приемға барғанда апайым үҙенең башҡорт милли кейемен кейеп ала. Ошо осрашыу тураһында ул, ҡайтҡас, ялҡынлы телмәрҙәр һөйләй..." Мәскәүгә күсеп, унда Балалар йорттары идаралығында эшләй башлағас та, хеҙмәттәштәре уға: "Рабиға, һин инде милләт әсәһенән Бөтә Россияның етем балалары әсәһенә әйләндең",— тиҙәр... Ғүмере 36 йәштә

генә өҙөлгән Рабиға Йәнғоловна һәм уның ғаиләһе тураһында мин тыныс ҡына яҙа алмайым. Күҙҙән йәштәр аға, ҡул ҡалтырай, ғәфү итегеҙ..."

Ырымбурҙа бына ошолай ҙур танылыу таба йәш уҡытыусы. Ә тыуған өйөнә, Хәсән ауылына ҡайтҡас, өс бисә менән йәшәп ятҡан атаһы донъя ҡуптара һәм... уҡымышлы ҡыҙын өйҙән ҡыуып сығара.

...Ошонда, хикәйәтте бүлеп, саҡ ҡына "Ырғыҙ" романын иҫкә алып үтәйек. Ни өсөн?

Ҡәйүм Ҡушаев һәм Мәрйәм Ғабдрахманованың раҫлауынса, Һәҙиә Дәүләтшина үҙ әҫәрендәге образдарҙы тыуҙырғанда Хәсән ауылында үҙҙәренә күрше генә йәшәгән Йәнғол байҙы һәм уның туған-тыумасаларын прототип итеп алған. Уҡыусының хәтерендәлер, романда шундай юлдар бар: Өсүҙән, Сәҙе буйҙарында "үҙе баш, үҙе түш булып маҙырап йәшәгән Ныязғол бай... өс бисәһенә өс аҡ тирмә, ҡалған ғаиләһенә тағы бер нисә тирмә ҡороп ебәрә лә, шунда көҙгә тиклем ҡымыҙ эсеп, ҡунаҡ һыйлап, ирекәндә ҡалаға барып килеп, ситтән килгән түрәләр менән донъя емереп, ҡотороноп йәй үткәрә".

Әлбиттә, быңдай фани донъяны юҡ итергә йөрөүселәргә, үҙ ҡыҙы булмай, әллә кем булһын, Йәнғол-Ныязғолдар аяуһыҙ. Өс бисә менән йәшәгән ирҙәрҙе ғәйепләүселәрҙе лә, аңлашыла ки, ул хушһынып бармай, ситтәрәк йөрөгәндәрен хәйерлерәк күрә. Шул уҡ ваҡытта Ныязғол — иҫ киткес сәмле лә, үҙ ырыуы, Бөрйән нәҫеле намыҫын яҡлау өсөн, тура килә икән, йәнен дә, байлығын да ҡыҙғанып торған кеше түгел. Шуға күрә, иң матур ҡыҙҙы, Гөлйөҙөмдө сит ырыуға ебәрмәҫ өсөн ул, Айбулатты бик үк өнәп етмәһә лә, уға кәләш итеп алып бирергә әҙер. Китапта тасуирланған был ваҡиғалар Хәсән ауылында булғандар менән тап килә. Ә Рабиғаның ярһып, съезда иҫке ҡараштарға ҡарсығалай осоп ҡунып ҡуныуы романдағы ауыл сходын хәтерләтеп ҡуя. Китапта Айбулат һәм уның шәкерттәше Ныязғол старшинаға ошондай һүҙҙәр ташлай: "Беҙҙең Ырғыҙ буйына килеп, беҙҙең яңы ғына аңдары уяныл килгән ярлы крәҫтиән халҡыбыҙҙың башын ҡаңғыртып йөрөүсе мулла-монтағай... бөгөндән үк ҡайтып китһен. Улар беҙҙең ихтыяр менән алға барған тормошобоҙға ҡаршы тороп маташмаһындар..."

"Һәҙиә беҙҙең ғаилә менән бик дуҫ булды", — тип хәтерләй Мәрйәм апай Ғабдрахманова. — Күрше торғас, беҙгә йыш килә ине. "Һеҙҙең ҡартатайығыҙға бағышлап китап яҙҙым әле", йә иһә: "Әҫәремде яҙып бөтөп киләм инде", — тиә торғайны. "Китаптың икенсе өлөшө лә буласаҡ, ул һеҙҙең турала. Унда һин артистка, йыраусы буласаҡһың", — тине бер мәл". Романдың башҡа персонаждары кемдән алынған һуң? Айбулат — ул Йәнғолдоң ярлы

энеһе Ғилаж. “Һимеҙ өйрәк кеүек байпандап атлап йөрөй торған оло бисәһе Рәхимә — ул, әлбиттә, Ғизелбанат һәм Рабиғаның инәһе Рәхилә. Китаптағы Ныязғолдоң башҡа ҡатындары ла Хәсән ауылынан алынған: Йәнғолдоң икенсе бисәһе — Мәхүбә; өсөнсөһөнөң исеме лә — Мәхүбә, тик ул бик йәш булғанлыҡтан, Мәхүп тип кенә йөрөткәндәр.

Уҡыусыға аңлауы еңел булһын өсөн, Йомағоловтарҙың шәжәрәһен дә яҙайыҡ:

1-се улы Харис (уның улы Искәндәр, әле лә иҫән).

2-се улы Йәнғол (уның 1-се бисәһе Рәхиләнән ҡыҙҙары: Ғизелбанат һәм Рабиға. Ғизелбанаттың ҡыҙы — Мәрйәм Ғабдрахманова).

(Йәнғолдоң икенсе бисәһе Мәхүбәнән бер ул була, иртә үлеп ҡала.)

(3-сө бисәһе Мәхүптән балалары: Хәйрелбанат, Латиф, Фатих, “Ырғыҙ һылыуы” тип матбуғатта яҙылған Фатима).

Йомағолдоң 3-сө улы — Ғилаж (уның улдары — Әхсән, Әнүәр).

Йәнғол хаҡында шуны ла әйтеп үтергә кәрәк: романда Ныязғол ифрат үҙ һүҙле, тәкәббер старшина итеп һүрәтләнә. Әммә Ырғыҙ яғынан сыҡҡан кешеләрҙең иҫләүенсә, Йәнғол үҙен бик ихлас, ярҙамсыл кеше итеп тә танытҡан. Миҫалға шундай ваҡиғаны килтерәләр: һуғыш башланып, Һамар яғына Украинанан бик күп кеше килеп тула. Ерһеҙ, мал-тыуарһыҙ ҡалған халыҡҡа ниндәй ярҙам күрһәтергә? Ошо аяныс хәлде күреп, Йәнғол ҡасаҡтарҙы урынлаштырып, уларға өй һалышып йөрөй. Бындай изгелекте Пугачев районының Хәсән ауылында әле лә онотмайҙар икән. Халыҡ хәтере — мәңгелек.

Хәсән ауылы осонда, үҙенең өйө эргәһендә, бала-саға ҡыуанһын тип, Йәнғол ҡарт, ер ҡаҙытып, күл эшләтә, уны уратып ағас ултырталар. Йәнғолдоң йорто юҡ хәҙер, ташына тиклем ҡутарып алынған, ә күле бар, уны Балҡан күле тип исемләгәндәр. Ошо хозур, төклө урында хәҙер мәктәп, йә китапхана һалдырырға уйлайҙар.

Эйе, тормош үҙенекен итә инде ул. Ул ниндәй генә кешеләрҙе лә һындыра. Бәлки, был изгелектәрҙе Йәнғол-Ныязғол ҡыҙы алдындағы ғәйебен еңеләйтеү өсөн дә эшләгәндер. Кем белә.

...1917 йылда атай өйөн ҡалдырғас, Рабиға ҡайҙа китә һуң? Уны Һамар ҡалаһына Харис ағаһы саҡыртып ала. Уҡырға.

1918 йылда Харис Йомағолов Ҡазанда губерна хәрби комиссариатында, артабан ошонда уҡ РКП(б)-ның Мосолмандар ойошмалары секретары булып эшләй. 1919 йылдың майында Саранскиҙа

Башревком рәйесе итеп һайлана. Рабиға ла Ҡазанда буламы-юҡмы, ағаһы артынан эйәреп йөрөймө-йөрөмәйме — былары беҙгә мәғлүм түгел, ләкин уның абруйлы Харис йоғонтоһонда булыуы шикһеҙ. Рабиғаның 1919 йылдың авгусында Стәрлетамаҡҡа килеүе лә Харис Йомағоловтың Башҡортостанға күсеүе менән бәйле (уның икенсе ағаһы, Ғилаж, волость ревкомы рәйесе, был ваҡытта үҙ еңгәһенең ошаҡлауы буйынса тотолоп, инде үлгән була).

1919 йылдың ахырында Рабиға Вәли Рәхмәтуллин тигән кешегә кейәүгә сыға, ләкин уларға оҙаҡ йәшәргә тура килмәй, 1922 йылдың яҙында Вәли үлеп ҡала.

Рабиға Йомағолова тотошлай эшкә бирелә. Уның бар вайымы — етемдәрҙе балалар йортона урынлаштырыу, уҡырға йәлеп итеү.

Күрәһең, күберәк ҡатын-ҡыҙҙар араһында аңлатыу эштәре алып бара торғас, Рабиға бер мөһим нәмәне — махсус гәзит етмәгәнен аңлап ҡалғандыр. Сөнки ул партияның Башҡортостан өлкә комитеты секретары Шәһит Хоҙайбирҙинға кәңәш һорап килә. Хоҙайбирҙин уны аңлай һәм, күп тә үтмәй, 1921 йылдың 7 ноябрендә партия өлкә комитеты органы булған “Азат хатын” исемле гәзиттең беренсе номеры сыға. Уның мөхәррире Рабиға Рәхмәтуллина (Йомағолова) була.

Был баҫма гәзит рәүешендә оҙаҡ йәшәмәй, уның ике генә номеры сығып ҡала. Шулай ҙа ул наҙан, хоҡуғы булмаған башҡорт ҡатын-ҡыҙҙарын иҫкелектән азат итеүҙә, уларҙы яңы тормошҡа ылыҡтырыу эшендә ҙур роль уйнай. “Ул Башҡортостан ҡатын-ҡыҙҙарының тарихта беренсе тапҡыр күргән гәзите ине”, — тип баһаланы үҙенең мәҡәләһендә Төхфәт Йәнәби. Артабан ул, журналға әүерелеп, “Яңы юлда” тигән исем ала. Шулай булһа ла, был журналды хәҙерге “Башҡортостан ҡыҙы” журналын башлап ебәреүсе, ә Рабиғаны уның тәүге мөхәррире тип һанарға мөмкин.

Рабиға Йәнғоловна тормошоноң артабанғы биттәре ошолай: ул — ҡатын-ҡыҙҙар бүлеге инструкторы. Тимәк, ҡатын-ҡыҙҙар араһында йыйылыштар, наҙанлыҡты бөтөрөү буйынса төрлө саралар үткәреү, балалар аҙналыҡтары ойошторооу — туранан-тура уның вазифа даирәһенә инә.

1919 йылдың сентябрендә Стәрлетамаҡта I Бөтә Башҡортостан эшсе һәм крәҫтиән ҡатын-ҡыҙҙары конференцияһы булып үтә. Уны ойоштороусылар араһында беҙ Рабиғаның исемен дә осратабыҙ. 1921 йылдың ноябрендә Башҡортостан Үҙәк Башҡарма Комитетының 2-се сессияһында Бөтөн Рәсәй Советтар съезына делегаттар һайлайҙар. Унда ла Р. Рәхмәтуллинаны күрһәтәләр.

Был осорҙа Хафиз Ҡушаев аслыҡ кисергән республика өсөн губерналар буйлап сабауыллап иген эҙләй, ләкин уның кеүек йәштәр

ял итергә лә ваҡыт таба. Матур итеп йырлай белгәнлектән, Хафиз художестволы үҙешмәкәр түңәрәктәре эшендә ҡатнаша һәм бына ошо концерттарҙың береһендә Рабиға БашЦИК рәйесе Хафиз менән таныша. Дуҫлашып китәләр, 1922 йылдың майында уларҙың туйҙары була.

Туй мәжлесендә ул ваҡытта үҙен талантлы шағир итеп танытып өлгөргән Хәбибулла Ғәбитовтың ҡунаҡтарҙың дәррәү ҡул сабыуы аҫтында үҙенең шаян шиғырҙарын уҡыуы мәғлүм. Шуны ла өҫтәйек: һуңынан Ҡушаевтар менән Ғәбитовтар, бигерәк тә уларҙың ҡатындары, дуҫ булып, нығ аралашып йәшәй.

Өфөгә күскәс (шул уҡ 1922 йылда), Рабиға партия өлкә комитетының ҡатын-ҡыҙҙар бүлегендә эшләүен дауам итә әле, ләкин уның бар ынтылғаны — балалар. 20-се йылдарҙың урталарында Рабиға Йәнғоловна Ш. Хоҙайбирҙин исемендәге балалар йорто мөдире итеп тәғәйенләнә, бер үк ваҡытта В. И. Ленин исемендәге мәктәп-интернатта йорт эштәре дәрестәрен дә алып бара. Шунда Мәскәүгә киткәнгә тиклем эшләй.

Улар Мәскәүгә китергә йыйынып бөткәс, Хафиз Ҡушай улына иҫтәлек өсөн тип, "Үҙәк хөкүмәттең бойороғо" тигән адрес тапшыралар. Уға, Ҡәйүм ағайҙың иҫләүенсә, Башҡортостандың байтаҡ абруйлы кешеләре ҡул ҡуя. Ҡыҙғаныс, улар үҙҙәренең үлемдәренә үҙҙәре ҡул ҡуйған кеүек булып сыға һуңынан, сөнки 1937 йылда ошо "адрес" буйынса уларҙың барыһын да ҡулға алалар.

Ә Мәскәүҙә ниндәй вазифалар үтәй һуң "беренсе леди?" Тәүҙә туҡыу фабрикаһына моторист булып урынлаша. Тиҙҙән уны Федерация Халыҡ мәғариф комиссариатына, Н. К. Крупская ҡулы аҫтына күсерәләр, ә 1937 йылда, үрҙә әйтелгәнсә, кемдәрҙер уның башына етә...

Йәнғол байҙың өйөнә Һ. Дәүләтшинаның йыш ҡына инеп йөрөүе хаҡында яҙғайныҡ инде. Быны сәбәбен Мәрйәм апай Ғабдрахманова шулай аңлата: беренсенән, ул Рабиға һәм уның апалары менән дуҫ булған; икенсенән, бай үҙ ҡыҙҙары өсөн гувернантка тотҡан. Һәҙиә лә ошо гувернантҡаға уҡырға йөрөгән, ә һуңынан ул Рабиға менән бергә Һамарға уҡырға киткән. Һәм бына бит, ваҡиғаларҙың бер-береһенә нисектер тап килеп тороуы! 1937 йылда М. Ғабдрахманова Һ. Дәүләтшина менән бергә Аксен санаторийында дауаланып ята. Көндәрҙең бер көнөндә Һәҙиә, ҡобараһы осоп, гәзит тотоп килеп инә һәм уны Мәрйәм Ғабдрахмановаға һона: унда Рабиғаның һәләк булыуы тураһында некролог баҫылған була.

Беҙ Рабиға Йәнғоловна биографияһын тотоп торған төп мәғлүмәттәрҙе теркәп сыҡтыҡ. Ләкин быны менән генә уның

тәржемәи хәлен тулыһынса беләбеҙ, тип әйтә алмайбыҙ. Мәскәүҙә юғары вазифа үтәгәндә унан ниндәй хеҙмәттәр тороп ҡалған, тәрбиәүи эшкә ул ниндәй өлөш индергән — былар беҙҙең өсөн әлегә ҡараңғы. Хәйер, тәрбиәселәр, уҡытыусыларҙың эшен ахырынаса баһалап бөтөү мөмкинме ни? Ниндәйҙер үлсәү юҡ бында. Уларҙың күренеше, образы кеше аңында, йөрәгендә генә ҡалыуы мөмкин. Хәтерләрлек нәмә булһа — ҡала, юҡ икән — юҡ. Шуға күрә беҙ тәрбиәселәрҙең кеше сифатына ҡағылған һәм бик тә ғәҙәти күренгән ҡайһы бер һүҙҙәрҙе генә ҡабатлай алабыҙ. Миҫал өсөн 1919 йылда Стәрлетамаҡта Бөтөн Башҡортостан эшсе һәм крәҫтиән ҡатын-ҡыҙҙары конференцияһында ҡатнашҡан Мәстүрә Сәхәүетдинованың иҫтәлегенән бер өҙөк килтерәйек: "Кантондарҙан килгән делегаткаларҙы ҡала хеҙмәткәрҙәре йылы ҡаршы алды... Бер әхирәтем менән мине (Сәхәүетдинова Дыуан-Ҡошсо кантонынан килгән була. — **Авт.**) Рабиға Рәхмәтуллина үҙенә алып ҡайтты. Был һылыу, белемле башҡорт ҡатыны, беҙгә бер ҡарауҙа уҡ оҡшаны. Ул ҡаланың төп урамдарын күрһәтеп сыҡты, ашхана, балалар йортона алып барҙы, ҡатын-ҡыҙҙар бүлегенең эше тураһында һөйләне".

Ҡәйүм Ҡушаев: "Рабиға — минең иң яратҡан еңгәм ине. Ул миңә үҙ ҡустыһына ҡараған кеүек ҡараны. Минең өҫтә иҫкереп бөткән киндер күлдәк күргәс, уның бер түгел, ике сатин күлдәк тегеп биргәнен һис онота алмайым. Ә был хәл ул Хафиз ағайға тормошҡа сыҡҡанға тиклем үк булды бит...

Йәки бына икенсе миҫал. Ҡушаевтар Стәрлетамаҡтан Өфөгә күсеп килгәс, миңә, 13 йәшлек малайға, урыҫса белмәгәс, 9-сы мәктәптең 1-се синыфына ултырырға тура килде. Рабиға еңгә өҫтәмә дәрес биреү өсөн миңә уҡытыусы тапты һәм, шулай итеп, Рабиға еңгәнән көн һайын "практика" үтеп, бер ҡышта урыҫса ярайһы уҡ өйрәнеп алдым, һәм мине февраль айында — 2-се, йыл аҙағында өсөнсө синыфҡа күсерҙеләр. 16 йыл буйына ошо ғаиләлә мин иркә тәнәй булып йөрөнөм".

Мәрйәм Йәмилевна ла үҙен Рабиға апаһы алдында бөткөһөҙ бурыслы итеп һанай. Тап уның ярҙамы менән Ғабдрахманова асяланғас булмай, ә белем, һөнәр алып ҡала.

Бәлки, вағыраҡ, ғаилә кимәлендәге иҫтәлектәрҙер былар, тип әйтеүселәр табылыр. Әммә шуны инҡар итерлек түгел: Рабиғаны яҡындан белгән кешеләрҙең уны Әсә тип баһалаған ҡиммәтле һүҙҙәре ул. Шуға күрә был яҙманың ахырында М. Ғабдрахманова хатынан тағы бер өҙөк килтерәйек: "Беренсе тапҡыр халҡыбыҙ тарафынан Ҡушаеваға бирелгән оло исем юҡҡа сығырға тейеш түгел. Ул Ҡушаевала ҡалһын — быға мин ышанам..."

Эйе, хаҡ талап, ышаныслы өмөт. Халыҡ өсөн йәшәгән кешенең, Һәҙиә Дәүләтшина әхирәтенең исеме лә республика тарихы биттәренә баҙыҡ хәрефтәр менән яҙып ҡуйылырға тейеш.

Тағы шуныһы: беҙҙә "Атҡаҙанған уҡытыусы", "Халыҡ артисткаһы", "Халыҡ яҙыусыһы" тигән ҙур исемдәр биреү ғәҙәткә ингән. Ләкин улар ни тиһәң дә, кешеләрҙең профессиональ оҫталығын, эшмәкәрлектең айырым тармаҡтарында күрһәткән хеҙмәтен баһалауға ғына ҡайтып ҡала. Ә ни өсөн һуң әле йәмғиәт өсөн төп тотҡа булырлыҡ, бигерәк тә, әхләҡ өлкәһендә, атайҙы — атай, әсәйҙе — әсәй тип белмәгән алама заманда, беҙ иңгеждәрҙе инә ҡорттай бергә туплап тотҡан оло инәйҙәрҙе, аҡыллы ҡарсыҡтарҙы күрмәйенсә үтеп китәбеҙ? Бар бит улар ауылдарҙа, бар, илдең тотҡалары! Кешеләрҙе аҙғынлыҡтан, эскелектән ҡурсалап тороусылар. Ҡайһы бер ҡылыҡтарыбыҙ өсөн алдарында йөҙ ҡыҙарырлыҡ, күрше-күләненең ихтирамын яулап йәшәүсе әбейҙәр.

Был мәҡәләлә ундай инәйҙәрҙе берәмләп әйтеп тороу кәрәкмәйҙер. Әммә беҙ, башҡорт ҡатын-ҡыҙҙарының иң гүзәл сифаттарын һаҡлап алып ҡалайыҡ тиһәк, Рабиға Ҡушаеваны иҫкә алыу менән бергә, "Милләт әсәһе" тигән ғорур исемде лә кире ҡайтарырға бурыслыбыҙ.

*1993 й.*

# XIII. Башҡорт һыбайлыларының фажиғәһе

1943 йылдың 6 февралендә 3-сө гвардия армияһы командованиеһы 8-се кавалерия корпусына, шул иҫәптән 112-се Башҡорт кавалерия дивизияһына ла, оло бурыс йөкмәтә: фронтты йырып, немец ғәскәрҙәре тылына үтергә, Ворошиловград — Дебальцево тимер юлын киҫергә, дошмандың коммуникацияларын өҙөргә һәм, шулай итеп, Донбасс тирәһендә фашистарҙы ҡыйратырға булышлыҡ итергә.

Был приказдың нисек үтәлеүе хаҡында документаль әҫәрҙәр етерлек хәҙер. Уларҙың иң күренеклеләре тип Г. Беловтың “Путь мужества и славы”, С. Ҡадировтың “Урал бөркөтө”, М. Докучаевтың “В бой идут эскадроны” китаптарын әйтергә мөмкин. Уларға 1984 йылда тағы бер китап өҫтәлде — ул талантлы башҡорт яҙыусыһы Т. Сәғитовтың “Аманат” тип исемләнгән поэмаһы. Бына яңыраҡ уҡыусы йәнә бер бүләк — тарихсы Т. Әхмәҙиевтың архив документтарына нигеҙләнгән ҙур хеҙмәтен (“Башкирская гвардейская кавалерийская”, Уфа, “Китап”, 1999) ҡабул итте. Бөйөк Ватан һуғышының ифрат ҡатмарлы, буталсыҡ осороңа бағышланған, ә инде башҡорт халҡының тарихына туранан-тура бәйләнгән был әҫәрҙәрҙең һәр береһенә туҡталыу, уларҙы сағыштырырға тырышыу бер нигә лә килтермәйәсәген аңлап, беҙ, беренсенән, дошман тылына яһалған рейдтың дөйөм һөҙөмтәләрен генә яҙып китеү менән сикләнәбеҙ: корпус фашистарҙың 52-се, 164-се пехота, 18-се танк дивизияларына уңалмаҫ зарар килтерә, 36 урында тимер юлды, бер нисә күперҙе шартлата, 12 мең һалдат һәм офицерҙы дөмөктөрә, байтаҡ танкыны юҡҡа сығара, 15 ҡорал, 10 аҙыҡ-түлек складын, 152 автомашинаны, 830 ылауҙы баҫып ала. Гитлерсылар дивизияһы штабы ҡулға төшөрөлә, корпус шулай уҡ 1480 совет кешеһен ҡоллоҡтан ҡотҡара. Икенсенән, һанап үтелгән барлыҡ хеҙмәттәрҙең дә асылда 1948 йылда Башҡорт АССР-ы Юғары Советы Президиумы төҙөгән (рәйесе — С. Р. Ҡадиров) комиссияның тикшереү һөҙөмтәләре менән тап килеүен күреп һәм ошо рәсми документтар менән республика йәмәғәтселегенең әлегә хәтлем таныш булмауын иҫтә тотоп, беҙ уларҙы матбуғат биттәренә сығарырға булдыҡ. Ләкин башта уҡ шуны әйтергә кәрәк: ил азатлығы өсөн бик тә ситен шарттарҙа яһалған был рейд халыҡтар күңелендә матур ғорурлыҡ тойғоһо булып тороп ҡалған. Ғорурлыҡ, мәңгелек йыр булып. Юҡ, йыр-моң ғына түгел, ә бөткөһөҙ һағыш һәм үкенес булып та...

Гитлерсылар тылына яһалған был ғәжәп яу походына инде алты тиҫтәгә яҡын йыл үтеп китте. Әммә уның күп кенә биттәре әле



Башҡорт атлылар дивизияһы фронтҡа китер алдынан. Дим станцияһы.

лә бик үк аңлашылып етмәй. Хатта ки, яңынан-яңы һорауҙар тыуа тора: мәҫәлән, ни өсөн кавалерия корпусы хәтәр ут ҡосағына инеп китер алдынан йүнле-рәтле әҙерлек үтмәгән, янғын сыҡҡанда ҡуңалтаҡ сарыҡ кейеп урамға йүгергәндәге һымаҡ, яртылаш буш арбалар һөйрәтеп, аҙыҡ-түлекһеҙ тиерлек, дошман келәттәренә генә өмөтләнеп, танкылар менән ҡоралланған дошман араһына барып ингән? Ярар, тәүәккәлләгән — таш йотҡан, тиҙәр. Ләкин ниңә ул ғәскәрҙәргә, вәғәҙә итеп тә, ауыр сәғәттәрҙә энә осондай ҙа ярҙам күрһәтелмәй? Өҫтәүенә, корпус һәм дивизиялар командованиелары араһында ҡәҙимге аңлашыу ҙа етешмәй? Шайморатов генерал һөжүм итеүселәрҙең ҡайһы төркөмөндә, ниндәйерәк шарттарҙа үлеп ятып ҡалған? Һәм, ниһайәт, генералдың кәүҙәһе ҡайҙа ерләнгән?

Башҡорт АССР-ы Юғары Советы Президиумы комиссияһы, Воронеж өлкәһенә барып, генерал-майор М. Шайморатовтың ҡайҙа ерләнеүен өйрәнеү менән бергә, һанап кителгән һорауҙарға ла яуап эҙләгән тип уйларға кәрәк. Комиссия рейдта ҡатнашҡан яугирҙарҙан 100 биттән ашыу аңлатма, белешмәләр йыйған. Ысынысындан тамуҡ уттары аша үткән был кешеләрҙең яҙма рәүешендәге хәтирәләренә беҙ шикләнеү белдерә алмайбыҙ. Уларҙың һәр һүҙе ысыңбарлыҡҡа тап килә, тип уйлайыҡ. Шунлыҡтан беҙ был документтарҙы матбуғат биттәренә сығарғанда (беренсе тапҡыр!) үҙебеҙҙән бер ауыҙ һүҙ ҙә өҫтәмәйбеҙ, фантазияға бирелмәйбеҙ. Беҙ яугирҙар рейдтан сыҡҡанда нимәләр булғанын күҙаллауҙы ғына үҙебеҙҙең төп бурысыбыҙ тип иҫәпләнек. Шулай

һуғыш операцияһын хронологик тәртиптә күҙ алдына килтерһәң генә, бәлки, берәй асыҡлыҡ инер?

## Гитлерсылар тылына...

**Кузнецов М. И.,** 16-сы гвардия кавалерия дивизияһы Махсус бүлегенең элекке начальнигы:

"Генерал-майор Шайморатовты мин 1941 йылдың декабренән, йәғни Башҡорт (16-сы) кавдивизияһы төҙөлгән көндән алып ул үлгән көнгә — 1943 йылдың 23 февраленә тиклем — беләинем. Ул етәкселек иткән бөтә һуғыштарҙа ла ҡатнаштым. Шайморатов алып барған һуғыш хәрәкәттәре Верховный командование тарафынан иң юғары баһа алды — И. В. Сталиндың рәхмәт белдереү тураһындағы приказдары ла шул хаҡта һөйләй. 1943 йылдың 15 февралендә дивизияға гвардия исеме бирелде.

Миңә билдәле булған бөтә һуғыш хәрәкәттәрендә лә Шайморатов үҙен Тыуған илгә тулыһынса бирелгән, Ҡыҙыл Армияның талантлы һәм ҡыйыу командиры итеп күрһәтте.

Сталинград эргәһендә һуғыш туҡтап, Ворошиловград районында боевой бурыстарҙы үтәгәс тә, 16-сы кавдивизия 7-се кавалерия корпусы составында немецтар тылына ебәрелде һәм ул Шайморатов етәкселегендә ифрат ауыр шарттарҙа, ҡышҡы һыуыҡтарҙа көсөргәнешле һуғыштар алып барып, гитлерсыларҙың тере көсөнә, техникаһына һәм коммуникацияларына ғәйәт ҙур зыян килтерҙе.

Немец командованиеһы, беҙҙең частарҙы юҡ итергә тырышып, үҙенең бер нисә уҡсы дивизияһын, мотомеханикалаштырылған һәм танкы частарын, авиацияһын ташланы, ләкин беҙҙең дивизия дошманға емергес ударҙар яһауын дауам итте..."

**Ҡадиров С. Р.,** 112-се Башҡорт кавдивизияһының ул саҡтағы Сәйәси бүлеге начальнигы урынбаҫары:

"1943 йылдың ғинуар аҙағында 112-се Башҡорт кавдивизияһы 7-се кавкорпус составында Ворошиловград-Дебальцево йүнәлешендә дошман тылына үтергә приказ алды...

Оборона һыҙығын өҙгәндә, артабан хәрәкәт иткәндә лә 112-се кавдивизия корпустың алдында барҙы. Дебальцево өсөн барған алышта ла 112-се дивизия немецтарҙың төп ҡаршылығын емереүҙе үҙ өҫтөнә алды..."

**Сәйәрғәлиев Б. С.,** 16-сы гвардия кавдивизияһы Сәйәси бүлегенең элекке секретары:

"1943 йылдың ғинуарында беҙҙең дивизия Ворошиловградтан көньяҡ-көнсығыштараҡ Сиволобово ауылы эргәһендә тора ине. Дивизия 5-се танк армияһына буйһондоролғайны. Ошонда беҙ дошман тылына инергә әҙерләнә башланыҡ.

һәм бына 5-се танк армияһы, Сиволобово эргәһендә немецтарҙың оборонаһын емергәс, дивизия 8-се кавкорпус составында, 1943 йылдың февраль башында булһа кәрәк, ике километр самаһындағы аралыҡҡа инеп китте. Иртәгеһенә ул Ворошиловградтың көньяҡ-көнбайышындағы Васильевка ауылы тирәһендә һуғыш башлап ебәрҙе һәм немецтарҙың коммуникацияларын тар-мар итеү маҡсатында уларҙың тылына йүнәлде, район үҙәге Ворошиловскийҙы алғас, Донецк бассейнына күсте. Һуңғы пунктыбыҙ — Дебальцево тимер юл станцияһы ине..."

**Родин И. В.,** 55-се кавдивизияның эскадрон командиры:

"Беҙҙең корпус, Чернухино станцияһын баҫып алып, Зверево-Дебальцево тимер юлы магистрален өҙөргә, тигән приказ алды. Һәр урында ла, бигерәк тә Чернухино станцияһында, алыштар аяуһыҙ ҡаты булды, ҡайһы саҡ улар ҡул һуғышына күсеп китте.

Чернухинола немец беҙҙең өҫкә бик көслө ғәскәрен ташланы һәм беҙ өс тәүлеккә ҡамау эсендә тороп ҡалдыҡ. Унан һуң ғына Фащевка станцияһына, Красный Кут ауылына ҡарай юл тоттоҡ. 112-се кавдивизия Фащевка эргәһендә үҙенән күпкә көслөрәк дошман көстәренә тап булды, ләкин 112-се, 55-се дивизиялар немецты Фащевканан бәреп сығарҙы, күп трофей алды, һалдат, офицерҙарын әсирлеккә төшөрҙө..."

**Сәйәрғәлиев Б. С.:**

"Дебальцево менән Чернухино эргәһендә беҙҙең патрондар бик аҙ ҡалғайны инде, етмәһә, немецтарҙың танк частары ҡамап алғайны тиһәң дә ярай. Һауа аша, юғарынан ярҙам килергә тейеш ине беҙгә, ләкин уны көтөп ала алманыҡ. Шайморатовтың оҫта командалыҡ итеүе арҡаһында ғына, һуғыш кәрәк-яраҡтарының үтә наҡыҫ булыуына ҡарамаҫтан, беҙ бер кешебеҙҙе лә юғалтмайынса, Дебальцево янында танкылар ҡамауынан сыға алдыҡ һәм Мартинскиға йүнәлдек. Дошман көн һайын һәм яңынан-яңы, һайланмыш көстәрен беҙгә, һыбайлыларға ҡаршы ташланы, ләкин бөтә тырышлыҡтары әрәмгә китте, сөнки командирыбыҙ, нисектер уның хәйләһен тойоп, уны ота ине..."

**Кузнецов М. И.:**

Командованиеның приказы буйынса беҙгә ярҙамға, Чернухиноға, мотомеханик частар килеп етергә тейеш ине, шуға күрә беҙҙең дивизия, Чернухино урамдарының береһен баҫып алһа ла, дошман менән биш тәүлек яғалашты ла ҡуйҙы. Беҙ биләгән урындарҙа ҡура-ҡаралтылар ҡыйратылып, яндырылып бөтөп, ҡоромдан, снаряд, миналар ярылыуынан күккә осҡан тупраҡтан аҡ ҡар ҡапҡараға әйләнде.

Шайморатовтың команда пункты кескенә өй мөгөрәбендә ине, ләкин өҫтәге шартлауҙарҙан бында ла ҡолаҡтар тондо, ер ҡойолдо. Шулай ҙа Шайморатов бер минутҡа ла юғалып ҡалманы, дошманға ныҡыраҡ зыян килтереү тураһында хәстәрләп, бөтә иғтибарын һуғыш барышына йүнәлтте.

Бишенсе тәүлек һүрелеүгә киткәс, частарҙы Чернухинонан икенсе урынға күсереү тураһында әмер килеп төштө. Корпус командиры генерал-майор Борисов, Чернухиноның немецтар тарафынан ҡулсаға алыныуын белеп ҡалғас, ҡойолоп төштө (был минең шәхси фекерем) һәм ғәскәрҙәрҙе Чернухинонан алып сығыуҙы Шайморатовҡа йөкмәтте. Шайморатов был бурысты бик оҫта башҡарҙы. Ул, төн ҡараңғылығынан файҙаланып, үҙенә генә мәғлүм юлдар менән тотош корпусты йыртҡыс ауыҙынан тартып алды..."

## Ҡайтыу яғына

**Ҡадиров С Р.,**

"Заданиены үтәгәндән һуң, һуғыша-һуғыша, был районды (Дебальцевоны) ҡалдырырға ҡарар ителде. Корпусты Чернухинонан сығарыр саҡта, 1943 йылдың 17 февралендә, корпус командиры генерал-майор Борисов Шайморатов дивизияһын тағы ла иң алға ҡуйырға булды. Ә бит ул Шайморатов дивизияһының ошо рейд барышында башҡаларға ҡарағанда күберәк юғалтыуҙар кисереүен белә ине. Шуға ҡарамаҫтан һәм Шайморатов та, башҡа дивизиялар командирҙары ла (генерал Якунин, генерал Чаленко) быға ҡаршы булһа ла, Борисов үҙ һүҙен һүҙ итте. Бында шуны ла әйтеп китергә кәрәк: рейд ваҡытында Борисовтың Шайморатовҡа ҡарата мөнәсәбәте бик аламаланды. Был мөнәсәбәтте, моғайын, рейдҡа китер алдынан корпус командиры итеп Шайморатовтың тәғәйенләнеүе, уның ун биш көн ошо вазифаны башҡарыуы, ә Борисовтың был ваҡытта резервта булыуы менән аңлатырға мөмкиндер.

Рейдтан сыҡҡанда ла Шайморатов дивизияһы иң алға ҡуйылды, был иһә уның ҙур юғалтыуҙар кисереүенә килтерҙе. Бигерәк тә 5-се, 6-сы, 12-се шахталарҙы һәм Петровка станцияһын алған саҡта..."

**Сәйетов С. Н.,** 7-се кавалерия корпусының 148-се гвардия айырым миномет полкы командиры:

"Корпус командирының приказы буйынса, корпус немецтар оборонаһын икеме-өсмө урында өҙөргә тейеш ине. Ошо маҡсат менән ул ике төркөмгә бүленде. Гвардия генерал-майоры Шайморатов үҙенең дивизияһы менән һул флангыла йәки корпус команди-

ры төркөмөндә булды. Ул, көтмәгәндә һөжүм итеп, немецтар оборонаһы аша тиҙ генә үтеп китергә тейеш ине. Ә икенсе төркөмдө 55-се кавдивизия һәм минең 148-се гвардия миномет полкы тәшкил итте..."

1943 йылдың 22 февралендә кис 152-се шахта тирәһендә немец танкылары менән һуғышҡанда мин Шайморатов менән бергә булдым, генерал дөйөм хәлде аңлатты, кәйефе көр ине, һәр ваҡыттағыса, һәйбәт итеп ҡырынып алған — күренеп тора: дивизияның ошоға тиклемге хәрәкәттәренә ҡәнәғәт һәм киләсәктә лә еңеүҙәргә өлгәшәсәгенә ышана ине ул. Мине ул хатта, үҙебеҙҙекеләр яғына сыҡҡас, 23 февраль байрамына ҡунаҡҡа саҡырҙы, йылы итеп хушлашып китеп барҙы. Һуңғы осрашыу ине был.

Ә 23 февраль иртәһендә Штеровка-Юлино-Широкий ауылдары тирәһендә ифрат ҡаты һуғыш башланды. Ул ҡул һуғышына тиклем барып етте..."

**Родин И. В.:**

"Юлино ҡаршыһында немецтар күп көс, техника туплағайны. Беҙҙең корпус иһә, ауыр юлдар үткәнлектән, бик хәлһеҙләнгәйне. Кешеләрҙең дә, техниканың да яртыһы ғына тороп ҡалғайны. Һуғыш кәрәк-яраҡтары бөткәйне, бомбаға тотолоуҙан аттар ҙа күп ҡырылғайны, машиналар яғыулыҡһыҙ ҡалды, үҙебеҙҙең частар менән дә элемтә булманы..."

**Кузнецов М. И.:**

"22 февралгә ҡараған төндә беҙ 152-се шахтаны алдыҡ.

22 февралдә көн буйына атыш барҙы, ул кискә генә тымды.

Төнөн, 8—9-ҙарҙа, мин Шайморатов янына индем. Ул бер шахтерҙың ҡыҫынҡы ғына өйөндә туҡталғайны. Штаб начальнигы Голенев та унда булып сыҡты. Ғәскәрҙәребеҙҙе немецтар тылынан сығарыу тураһында приказ алыу сәбәпле, Шайморатов күрһәтмәләр бирә ине. Рейдтан сыҡҡан саҡта нисегерәк хәрәкәт итеү хаҡында кәңәшләшкәс, Шайморатов штаб начальнигы Голеневҡа китергә рөхсәт итте, ә мине, шундайыраҡ ҡамауҙарҙан сығыу тәжрибәм булғанлыҡтан, алып ҡалды. Беҙҙе ниндәй ауырлыҡтар көтөүе мөмкин, шул хаҡта һөйләштек. Бында ул үҙе тураһында түгел, ә боецтар, командирҙарҙың хәл иткес мәлдә сыҙамлыҡтары, тәүәккәллектәре етерме-юҡмы, тип борсола ине, сөнки арттан да, алдан, оборона һыҙығы яғынан да ҡыҫырыҡлаған немец менән аяуһыҙ атыш буласағы көн кеүек асыҡ ине. Ә беҙҙең кешеләр, алһыҙ-ялһыҙ һуғышҡанлыҡтан, бик ҡаҡшағайны. Шуны уйлап, Шайморатов: "Бурыстарҙың иң ҡатмарлыһы — дивизияларҙы тылдан сығарыу, — тине. — Тылдан сығыу иң ҡатмарлы мәл, сөнки көтөлмәгән хәл килеп тыуыуы, ҡайһы бер кешеләрҙең, иптәштәренән айырылып, ярҙам ала алмай, үҙ алдарына тороп

ҡалыуы ихтимал. Дивизияның бер өлөшө үтеп өлгөрһә, икенсеһе һуңға ҡалыр, сөнки немецтарҙың оборона һыҙығын кинәт ябып ҡуйыуҙары мөмкин.

Үҙе хаҡында ла шуны ғына әйтте: "Әгәр мин ҡотолғоһоҙ хәлдә тороп ҡалһам, берҙән-бер сарам шул булыр", — тип, үҙ билендәге пистолетты күрһәтте. — Мин, элекке батрак, ҡарт командир, Ҡыҙыл Армияны хурлай торғаным бармы?" Шайморатов Мәскәү янында уның менән бергә һуғышҡан Доваторҙың нисек һәләк булыуы тураһында һөйләне. Шунан һуң беҙ дивизияға ҡайтып киттек. Юлда ул: "Разведканы үҙебеҙ үткәрһәк, ышаныслыраҡ булыр ине, — тине. — Ләкин, ни ҡылмаҡ кәрәк, приказ — приказ инде, уны үтәргә кәрәк".

Шайморатов Голеневты саҡыртып алды һәм буласаҡ һуғыш буйынса һуңғы күрһәтмәләрен бирҙе..."

## Юлино эргәһендә

**Сәйәрғәлиев Б. С.:**

"152-се шахта һәм Владимировка эргәһендәге ҡаты бәрелештән һуң, 1943 йылдың 23 феврале таңында дивизия Штеровкаға табан йүнәлде. Юлино-2 ауылынан 1,5 км көнбайыштараҡ, ҡалҡыуыраҡ урында, генерал-майор Шайморатов һалам өйөмө янында туҡталды



Башҡорт атлылар дивизияһы яугирҙары Брянск фронтында.

ла штаб офицерҙарына яҡыныраҡ килергә бойорҙо. Улар торған урын дивизия колоннаһы алдында ғына ине. Мин дивизия Сәйәси бүлегенең йөк арбаһы эргәһендә баҫып торғанлыҡтан, Шайморатовтың һәр һүҙе асыҡ ишетелә. "Ҡәҙерле офицерҙарым, — ти ине ул, ҡулындағы ҡамсыһын алға төбәп. — Күрәһегеҙме, унда Юлино-2 ауылы. Хәҙер беҙ уны алырға тейешбеҙ. Күпме көсөбөҙ бар, шуның менән немецҡа удар яһаһаҡ, беҙ уны, бәлки, алырбыҙ. Ул саҡта көндөҙ оборона тотоп, төнөн разведка яңы мәғлүмәт килтереп еткерһә, үҙебеҙҙекеләргә барып ҡушылыр инек. Әгәр инде, иптәштәр, ауылды алмаһаҡ, аңлашыла, партизанлыҡҡа күсергә тура килер..."

Шул ваҡыт бер нисә һыбайлы оҙатыуында колоннаны корпус командиры ҡыуып етте. Генерал-майор Борисов ине шикелле. Ул, колонна башына сығып, Шайморатовҡа яҡынлашты ла маузерын сығарҙы һәм, Шайморатовҡа янап, әрләшергә тотондо: ни өсөн, йәнәһе, колоннаны туҡтаттың, бында ни тип хәбәр һатып тораһың? Борисов үҙен тыя алмай — ул ҡыҙыңҡы ине, күрәһең. Янап, ул хәҙер үк Юлиноны алырға һәм, туҡтап тормайынса, бөгөн үк үҙебеҙҙекеләргә ҡушылырға бойорҙо.

Шайморатов үҙенән өлкәнерәк командирҙың, корпус командиры Борисовтың приказын ҡабул итте. Ул да кобураһынан пистолетын тартып сығарҙы һәм штаб офицерҙарына: "Иптәштәр! Тыуған ил өсөн! Сталин өсөн!" — тине лә Юлино ауылына ҡарай сабып китте.

Мин, сәйәси бүлек секретары булғас, документтар һалынған йөк янында тороп ҡалдым, ләкин 30 минуттан беҙ ҙә Юлино-2 урамдарына барып керҙек. Ауылда дошмандың 100-гә яҡын һалдат һәм офицеры тураҡлап ташланғайны..."

**Кузнецов М. И.:**

"Беҙҙең дивизия Юлино урамына 1943 йылдың 23 февралендә барып инде..."

**Сарыгин А. А.,** медицина хеҙмәте подполковнигы:

"Артиллерия ла, ылауҙар ҙа Юлиноға тартыла башланы. Тиҙҙән уға генерал-майор Борисов етәкселегендә корпус штабы ла килеп инде. Бында шуны аңлатып китергә кәрәк: рейд ваҡытында корпус штабы гел беҙҙең дивизия частары араһында булды, күп осраҡта дивизия штабы менән бер үк ауылда урынлаша ине, маршрутта ла 16-сы кавалерия дивизияһы штабы артынан эйәрҙе.

Дивизия штабы офицерҙары, емерек йорттарға ышыҡланыбыраҡ, беренсе сигнал буйынса уҡ тороп эшкә тотоноу өсөн, асыҡ һауала урынлашҡайны. Генерал-майор Шайморатов эргәләге өйгә инеп китте.

Шул мәлдә генерал-майор Борисов күренде. Ул килеп туҡтаны ла: "Һеҙ кемдәр? Бында ни эшләйһегеҙ?" — тип ҡысҡырынырға тотондо. Бында дивизия штабы торғанын белгәс, ирешә башланы: "Ниңә алға бармайһығыҙ? Ни эшләп минең приказды үтәмәйһегеҙ? Ҡайҙа генерал Шайморатов?" Уға Шайморатов инеп киткән өйҙө күрһәттеләр. Борисов шунда атланы. Өйҙә бик йәмһеҙ күренеш булған — был хаҡта мин дивизияның контрразведка начальнигы майор Кузнецовтан ишеттем. Иҫерек генерал-майор Борисов, корпус штабы начальнигы Сабуров һәм корпус контрразведкаһы начальнигы, ҡорал менән ҡурҡытып, генерал-майор Шайморатовты приказды үтәмәүҙә ғәйепләгәндәр.

Урамға сыҡҡас та, генерал-майор Борисов корпус штабы начальнигы Сабуровҡа: "Алға барырға, алда немецтар юҡ. Ә йҙә, Шайморатов корпус штабына ышыҡланһын", — тине.

**Кузнецов М. И.:**

"Юлиноны алғас, Шайморатовты корпус штабына саҡырттылар. Уның менән мин дә киттем. Шайморатовҡа, хәрәкәтте туҡтатмаҫҡа, оборонаны өҙөргә бойороҡ бирелде. Беҙҙең дивизия дошман оборонаһын беренсе булып емерергә тейеш. Ә разведка үткәрергә ваҡыт бирелерме һуң, тип һораны Шайморатов. Разведка башҡа частар тарафынан яһалған, беҙҙең алда немецтарҙың бәләкәй генә көстәре тора, тигән яуап алды..."

**Родин И. В.:**

"Корпус командиры немецтар оборонаһын Формандиновка ауылы эргәһендә ҡыйратырға ҡарар итте. Ләкин беҙ ҙур ҡыйынлыҡ менән 400 ат торған ике һарайҙы һәм һуғыш кәрәк-яраҡтары ғына ала алдыҡ. Формандиновкаға инеп булманы. Шунда Юлино-2 ауылының немецтарҙан таҙартылыуын, беҙҙең ҡулға күсеүен ишеттек. Шунан һуң корпус командиры Ҡыҙыл Армия частарына Юлино — Пасишная йырынтыһы аша Мало-Николаевкаға сығырға ҡарар итте. Ләкин юл бында ла ябыҡ ине..."

**Ҡадиров С. Р.:**

"Шайморатов, Юлинола туҡтап, разведка үткәрергә уйлағайны, ләкин Борисов тарафынан саҡыртып алынды, ә Борисов үҙе лә, штаб начальнигы Сабуров та был ваҡытта иҫерек булған. Ул Шайморатовҡа бер ниндәй разведкаһыҙ һөжүм башларға ҡушҡан. Шайморатовтың хәлде аңлатырға тырышыуын Борисов тыңлап та тормаған. Борисовтың приказы нигеҙендә Шайморатов 23 февраль иртәһендә, 5.25 сәғәттә, Юлино-1, 2 ауылынан Мало-Ивановкаға табан ҡуҙғалырға бойорҙо. Үҙе дивизия штабы менән ике колонна араһында барҙы (һулда — һыбайлылар менән штаб начальнигы Голенев И. И., уңда — 64-се полк командиры Фондеранцев етәкселе-

гендәге йәйәүлеләр) һыбайлыларҙың алғы рәттәре Формандиновка ауылы менән тиңләшкәс (уң яҡтан) немецтар өс яҡтан көслө ут асты. 10—15 минуттан танкылар оҙатыуында атакаға ташландылар..."

## Һуңғы ынтылыш

**Кузнецов М. И.:**

"Сәғәт алтыға алты дивизия асыҡ урынға, ҡалын ҡар баҫҡан үҙәнгә килеп сыҡты, унда немецтарҙың тимер-бетон ДЗОТ-тары менән нығытылған, бер нисә ҡат сәнскеле тимер сыбыҡ тартылған оборона һыҙығы һуҙыла ине..."

**Нагаев Г. Г.**, контрразведка яугиры:

"Немец оборонаһына яҡынлашҡанда беҙ, Кузнецов менән мин, Шайморатов эргәһендә инек. Ҡар ифрат ҡалын булғанлыҡтан, дивизия бер эҙҙән генә барҙы. Юлды беҙҙең контрразведка взводынан сержант Рахманғолов башланы, генерал үҙе етенсеме-һигеҙенсеме булып бара, майор Кузнецов — туғыҙынсы, мин — унынсы. Немец оборонаһына яҡынайыуыбыҙ булды — немецтар пулеметтарҙан, автомат һәм минометтарҙан көслө ут асты.

Иң алда барған Рахманғолов туҡтап ҡалды. Беҙ ҙә туҡтаныҡ. Генерал-майор Шайморатов, уң яҡҡа боролоп: "Дивизия, алға! Тыуған ил өсөн! Сталин өсөн!" тип команда бирҙе. Беҙ алға ынтылдыҡ. Ләкин беҙҙең, биш-ун патрондан башҡа, бер ниебеҙ ҙә юҡ ине..."

**Ҡадиров С. Р.:**

"Шайморатов үҙебеҙҙекеләрҙең хәрәкәтенә идара итеү өсөн бар тырышлығын бирҙе, ләкин бер ни ҙә килеп сыҡманы, сөнки һулдараҡ барған корпус частары һәм 15-се дивизияның айырым эскадрондары беҙҙең частар менән буталып китте..."

**Сәйетов С. Н.:**

"Мин был һуғышҡа шаһит ҡына түгел, ә унда туранан-тура ҡатнашҡан кешемен, шуға күрә бер генә нәмә әйтә алам: һуғыш һалдат өсөн дә, генерал өсөн дә аяуһыҙ булды, килеп тыуған хәл һәр кемдең ҡулына ҡорал алып, үҙен-үҙе ҡыҙғанмай көрәшеүен талап итте. Беҙҙең частар, өҫтәп кеше лә, ат та һорамайынса, Сталинградтан алып Донбасҡа тиклем дүрт ай буйына туҡтауһыҙ һуғыштарҙа булып, хәтһеҙ арығайны. Шуның өсөн дә алыштарҙың иң ахырғы осоро айырыуса ауырға тура килде.

**Нагаев Г. Г.:**

"Мин сержант Рахманғоловтың аттан ҡолауын күреп ҡалдым. Үҙебеҙ, атыша-атыша, алға барыуыбыҙҙы белдек, немецтарға

ҡурҡыу һалдыҡ, ләкин беҙҙә патрондар бөткәйне инде. Быны немецтар ҙа һиҙеп алды һәм беҙҙең өҫкә ябырылды.

Минең дә, Кузнецовтың да аты ҡоланы. Йәйәү тороп ҡалдыҡ. Майорҙың атына тейгән пуля, хужаһының быймаһы аша ла үтеп, ҡуңысын йыртҡан. Шунда иҫемә төшөп, генерал ҡайҙа һуң әле тип, ян-яғыма ҡарандым, ләкин ул ҡайҙалыр юҡ булғайны..."

**Кузнецов М. И.:**

"Атыш ҡот осҡос тиҙлек менән ҡыҙҙы. Беҙҙең дивизия дошманға ике тулҡын булып бара ине. Береһенең башында — Шайморатов, икенсеһенең алдында — Голенев. Ҡара атына атланып алған Шайморатов минән 150—200 м алыҫлыҡта ғына булғанлыҡтан, уның: "Алға, минең арттан!" — тип ҡысҡырғанын ғына ишетеп ҡалдым. Ләкин уны дошман уты ат өҫтөнән бәреп осорҙо..."

## Генералдың үлеүе

**Сәйфуллин С. З.,** рейдта ҡатнашыусы:

"Шайморатов: "Дивизия, минең арттан алға!" — тип команда бирҙе лә үҙенең ҡара айғыры өҫтөндә дошман яғына сапты. Бына ошо хәл иткес атакала, дошманға барып етергә 50—100 метр ғына ара ҡалғас, ул атынан осоп төштө.

Шайморатов булмағас, һөжүм итеүебеҙҙең рәте сыҡмаясағын күреп, беҙ, Голенев иптәштең бойороғо буйынса, 300—400 м артҡа китеп, уңға боролдоҡ. Ә унда немец оборонаһы күпкә йомшаҡ булып сыҡты. Һәм беҙ, уны өҙөп, 23 февралдән 24-нә ҡараған төндә үҙебеҙҙекеләргә барып ҡушылдыҡ".

*Бына ошолай, кавдивизия яугирҙарының бәрәүҙәре, генерал уларҙың күҙ алдында, һуңғы атакаға барғанда һәләк булды, тип раҫлай. Ләкин күпселектең фекере икенсерәк (Бына ошо хәл күп һорауҙар тыуҙыра ла инде). Һүҙ уларға.*

**Ҡадиров С. Р.:**

"Төп алыш барған ерҙән 600—700 метр уңғараҡ ҙур булмаған сауҡалыҡ бар ине (аҙағыраҡ белеүебеҙсә, Романовка уйһыулығы). Шайморатов, күрәһең, шунда ышыҡланырға уйлаған. Беҙ ҙә шунда барырға иткәйнек — минең атым йығылды, штаб начальнигы подполковник И. И. Голенев та яраланды. Атыша-атыша, яраланғандарҙы ҡурсалай-ҡурсалай, беҙ сауҡалыҡҡа барып еттек. Ләкин генерал унда булмай сыҡты. Йырынтыла немецтар тулы. Ошо сауҡалыҡтан Мало-Ивановкаға табан йырынты һуҙылып китә. Унда немецтар булыуын күргәс, генерал, моғайын, ошо йырынтыға төшкән, тик тағы немецтарға тап булған..."

**Милованов С. И.,** 7-се гвардия кав. корпусы рейдында ҡатнашыусы, запастағы полковник (Мәскәү):

“7-се кав. корпус командиры генерал-майор Борисовтың приказын үтәп, рейдтан сығыу өсөн Юлино-2 эргәһендә оборонаны йырған саҡта генерал-майор Шайморатов көсө күпкә артығыраҡ немецтар менән ауыр һуғыштар алып барҙы һәм 1943 йылдың 23 февралендә батырҙарса һәләк булды. Генерал-майор Шайморатовтың үлгән урыны — Формандиновка-2 ауылынан төньяҡтараҡ, ә Ивановский районының Штеровка ауылынан бер километр көньяҡтараҡ ҡаялы йырынтыла булыр...”

Был урынды тикшереүҙә ҡатнашҡан Өфө журналисы **К. Ғәбитов** генерал үлгән урынды ошолай тасуирлай:

“Романовский тип аталған йырынты көнбайыштан көнсығышҡа табан һуҙыла. Төньяғынан ҡаялар теҙелеп киткән. Ҡаялар араһынан Николаевскийға ҡарай юл үтә. Йырынтының ярҙары ҡыуаҡлыҡтар менән ҡапланған. Шунда уҡ һай ғына йылғасыҡ ағып ята.

Романов йырынтыһы ярҙарының бейеклеге 50—60 метрға барып етә. Генерал үлгән урындан башланып киткән иҫке окоптарҙы, ҡая артындағы тигеҙлектә теҙелгән ут нөктәләре эҙҙәрен күргәс, бер генә һығымтаға килергә мөмкин: немецтар, засадаға ултырып, Мало-Николаевкаға үтергә тырышҡан һыбайлылар төркөмөн тулыһынса ошонда тунап һалырға ниәтләнгән...”

Ошо тәңгәлдә шаһит сифатында Ворошиловград өлкәһе, Ивановский районының Штеровка ауылы кешеләренең һөйләгәндәрен килтереү урынлы булыр. Мәҫәлән, **М. Р. Николаенко** шуны иҫләй: “...Һыбайлыларҙың бер өлөшө, ҡамауҙы йырып сығып, күрәһең, таңда Штеровка поселкаһына килеп етте, Лесная урамындағы бер нисә йортто баҫып алды. Шунда йәшәгән халыҡтың әйтеүенсә, улар 700 самаһы кеше булып, командирҙары бер генерал ине...”

Шул уҡ ауыл кешеһе **Д. Ф. Головатая** быға шуларҙы өҫтәй: 22 февралдәме, 23-өндәме икән, таң һарыһында минең ихатама Совет Армияһының 12 кешеһе килеп инде. Ҡайһылары йәйәү, ҡайһылары һыбай. Күпмелер ваҡыт үткәс, ихатаға баҡса аша йырынты яғынан күгатҡа атланған ниндәйҙер начальник килеп инде (Бында шуны өҫтәп китергә кәрәк: иҫтәлектәрҙең береһендә Шайморатовтың аты күк, икенселәрендә — ҡола йәки ҡара ине, тиелә. — **Авт.**). Ишек алдында ике-өс минут ҡына булып, начальник офицерҙарға ниндәйҙер бойороҡтар бирҙе лә тағы баҡса аша Романов балкаһы буйлап юғарыға йүнәлде. Башҡалар ҙа, өйҙән сығып, генерал артынан ашыҡты.

Мин дә ихатаға сыҡтым, һарайға инеп, үрҙәге тишектән күгат өҫтөндәге начальникты күҙәтергә тотондом. Бына ул, сабып барып, Хомяков һәм Романов ҡаялары араһынан ўтте лә ярға күтәрелә башланы, ләкин, Романов ҡаяһына бер нисә метр ғына менеп өлгөрмәне, атынан ҡоланы...

Начальниктың өҫтөндә — аҡ төҫтәге ҡыҫҡа тун, башында кубанкаға оҡшаған ҡара бүрек булыуы хәтҿремдә. Үҙе мыҡты кәүҙәле, ҡуңғырт йөҙлө кеше ине.

Яраланған боецтар уның үлек кәүҙәһенә табан шыуышып китте, ләкин немецтар күренгән һәр кемгә пулеметтарҙан, автоматтарҙан көслө ут асып торҙо..."

Һүҙҙе тағы **М. Р. Николаенко** дауам итә: "Һуғыш Штеровканан 500—600 м самаһы ситтәрәк, көньяҡ-көнсығыштараҡ барҙы. Атыш туҡтағас, мин өйөмдән сыҡтым. Немецтар беҙҙе, ир заттарын, тотоп, ҡайҙалыр ҡыуа башланы. Продольная урамына барып еткәйнек, аҡмы, ҡоламы айғыр етәкләгән бер немецҡа тап булдыҡ. Немец, маһайыбыраҡ: "Ҡарағыҙ, был атта совет генералы йөрөгән, — тип ҡысҡырҙы. — Ошо атта генерал ҡасырға маташҡан. Тик беҙҙең автоматсылар уны сәпәп төшөргән..."

Петровский исемендәге завод ОРС-ы умартасыһы **А. Я. Дроботтың** һөйләгәндәре: "1943 йылдың ҡышында беҙҙең поселоктан алыҫ түгел немецтарҙың тылында бер нисә көн буйына ҡаты көрәш барҙы. 23 февралдә, сама менән сәғәт 10—11-ҙәрҙә беҙҙе, ауылдың утыҙлаған кешеһен, немец конвоирҙары Ивановка яғына алып китте. Окоп ҡаҙыталарҙыр, тип уйлағайныҡ. Юҡ икән. Немец оборонаһының икенсе һыҙығына еткәс (ул Романов йырынтыһынан үтә ине) беҙҙе туҡтаттылар. Төркөмдән мине, тағы ике кешене айырып сығарҙылар. Был икәү Успенка ауылынан ине шикелле. Өсөбөҙҙө лә Хомяков һәм Романов йырынтылары араһынан Ивановкаға табан алып киттеләр. Бәләкәй күперҙе сыҡҡас, һулға борҙолар ҙа ур өҫтөнән үткәрҙеләр. Беҙҙе туҡтатҡас, украинса һөйләшә белгән чех һалдаты, ана, ҡая өҫтөндә тиерлек ике мәйет ята, уларҙың береһе Ҡыҙыл Армия генералы булыр, тине.

Мин бик арыҡ булғанлыҡтан, йырғанаҡ аша сығырға ла, ҡаяға күтәрелергә лә хәлем юҡ ине. Шунлыҡтан конвоирға буйһонманым. Ул миңә бер нисә мәртәбә тондорҙо ла, урынымда ҡалдырып, теге ике иптәште ары алып китте. Шулай ҙа мин урынымдан — 13—15 метр аранан — ике мәйеттең (береһе, чех һалдатының әйтеүенсә, генералдың) ятҡанын күреп торҙом. Ниндәй кейемдә булғанын билдәләй алманым, ләкин бөҙрәләнеп торған ҡара сәстәре, ҡуңғырт йөҙө асыҡ күренде.

Ике кешене үлек янында ҡалдырып, мине кире алып киттеләр. Ауыл кешеләре төркөмөнә яҡынлашҡайныҡ, беҙҙән һигеҙ-ун метр ситтәрәк оборонала торған немецтарҙың шаулашҡаны ишетелде. Улар: "Бына, тот! Генерал капут!" — тип, ҡулдан-ҡулға кубанка-бүрек ташлайҙар ине. Ул ҡара төҫтә ине, дөрөҫөрәге — сепрәге әллә ҡара-күк, әллә ҡара — асыҡ ҡына әйтә алмайым..."

Тәржемәсе чехтың әйткәндәренән мин тағы шуны аңланым: генералдың бер нисә ордены, шул иҫәптән Ленин ордены булған. Ә документтары табылмаған, шунлыҡтан генералдың фамилияһын асыҡлай алмағандар. Шул уҡ тәржемәсе чех аша немец офицерҙарының, 50-гә лә етмәгән йәш кеше нисек итеп генерал булып китте икән, тип аптырағандарын ишеттем..."

Шул уҡ Штеровка поселкаһы гражданы **В. Н. Гитманский:** "1943 йылдың февраль аҙағындамы, март башындамы, немец командованиеһы беҙҙе, урындағы кешеләрҙе, үлеп ятып ҡалған яугирҙарҙы ерләү өсөн, ҡыуып килтерҙе. Беҙҙең төркөм 3—4 кешенән тора ине. Романов йырынтыһында, ҡая аҫтында, беҙ өс мәйет таптыҡ. Уларҙың береһе, яғаларындағы билдәләргә ҡарағанда, генерал-майор ине. Генералдың өҫтөндә — ҡыҫҡа тун, китель. Баш кейеме, итектәре юҡ ине. әргәһендә — таралғыһына йондоҙ төшөрөлгән яҫы ҡайыш, төрлө төҫтәге целлулоид киҫәктәренән йыйып эшләнгән мөштөк һәм сәс тарағы. Китель элмәктәре ысҡындырылған. Кителдә, күкрәк тәңгәлендә, бер нисә ордендың эҙҙәре тороп ҡалған, тик ордендарҙың үҙҙәре генә юҡ ине. Кеҫәләре аҡтарылған һәм унда ниндәй ҙә булһа документтың, фотокарточканың йә иһә ҡуйын дәфтәренең булыуы мөмкин түгел ине.

Генерал тулы кәүҙәле, ҡуңғырт йөҙлө, сәстәре ҡара, танауы осло, ләкин танау тишектәре киң".

Генералдың тышҡы билдәләренә, наградаларына ҡағылышлы тағы бер шаһитнамә. Уны шахтер **Я. Т. Романенко** килтерә: "1943 йылдың февраль аҙағында Дебальцево станцияһы һәм Городище әргәһендә, артабан Ивановский районының немец колониялары районында бер нисә көн ҡаты һуғыштар барҙы. Атыштарға ҡарағанда, немецтар беҙҙекеләрҙе ҡамауға ала ине. Һуғыш Городище янында барған саҡта мин төрмәлә инем әле — немецтар ултыртып ҡуйғайны. Беҙҙе төрмәнән Дебальцево концлагерына ҡыуа башланылар. Мин шунда ҡастым да Штеровкаға атайым янына ҡайттым... Ҡайтһам, атайымдың өйөндә бер яралы боец ултыра. "Әле генә генералыбыҙҙы үлтерҙеләр, кем дә кем генералдың документтарын, ордендарын алып, беҙҙең хәрби частарға тапшыра, шуға ҙур награда буласаҡ", — тине ул. Боец рус милләтенән түгел ине. Беҙ, монголдыр, тип уйлағайныҡ, ул, юҡ, монгол түгел, ә башҡортмон, тине. Шул боец менән беҙ Романов балкаһы менән

үргә киттек. Ивановканан алып барған юлды аша сыҡҡайныҡ, юлдан 100—130 м самаһы арыраҡ, һуҡмаҡтың уң яғында мәйет ятҡанын күрҙек. "Бына шул инде беҙҙең генерал", — тине боец. Фамилияһын нисектер үҙенекенсә әйтте. Рус фамилияһы түгел ине ул. Генералдың өҫтөндә аҡ ҡыҫҡа тун, һарыҡ тиреһенән тегелгән күкрәксен ине, гимнастеркаһы йәшкелт төҫтә, эске кейеме йылы, йоҡа туҡыманан. Кеҫәләре әйләндерелгән, унда бер төрлө лә документ юҡ ине, түшендәге ордендары ла. Генерал урта буйлымы, әллә саҡ ҡына бейегерәк кеше инеме. Тулы кәүҙәле. Ҡара һөрөңкө битле. Сәстәре ҡуңғырт, бөҙрәләнеп тора. Баш кейеме юҡ ине, аяғында — хром итектәр.

Ауыл кешеләренең, айырым әйткәндә, Хрещенаның әсәһе Ольга Андреевна Глущенконың әйтеүенсә, миңә шул да мәғлүм булды: генералдың алты-ете ордены булған, уларҙы генералды үлтергән немец алып ҡайтҡан. Ул саҡта минең үкел атайым Глушенко Данила Ивановичтың өйөндә немец штабы урынлашҡайны. Хрещена, штабҡа байраҡ, 57 мең һум аҡса, бер нисә хат, фотокарточкалар килтерҙеләр, тине. Ә бына генералдың документтары тураһында бер ниндәй ҙә һүҙ булманы..."

Генералдың наградалары, документтары тураһындағы мәсьәләне асыҡлау өсөн тағы бер иҫтәлеккә мөрәжәғәт итәйек. Уны рейдта ҡатнашҡан Мордва АССР-ы кешеһе **Чадин И. С.** ҡалдырған.

"Ауыр яра алған комбатыбыҙ, беҙ ҡамауға эләктек, тине. Тиҙҙән мин дә яраландым. Аңыма килеп, Штеровка ауылының бер өйөнә шыуышып индем.

Ошо өйҙә ята инем, ике немец офицеры килеп инде. Береһе русса һөйләшә, икенсеһе уға эйәреп маташа. Шул насар һөйләшкәне минән: "Понимаеш?" — тип, усындағы ордендарҙы күрһәтә. Мин хәҙер уларҙың икеһен генә хәтерләйем. Береһе Ленин ордены, икенсеһе Ҡыҙыл Байраҡ ордены ине. Минең: "Аңламайым", — тип яуап ҡайтарыуыма офицер мине урыныма йыға һуҡты, икенсеһе ниҙер мығырҙаны ла, былар өйҙән сығып китте.

Квартира хужаһы был ордендарҙың кемдеке булыуын белергә тырышып йөрөүҙәрен аңлатты. Шул уҡ хужа немецтарҙың бер генерал-майор кавалеристы атып үлтереүҙәре, ордендарҙың шул генералдан йолҡоп алыныуын, әммә бер ниндәй ҙә документтарының табылмауы тураһында әйтте. Шунлыктан ҡотороноған эт һымаҡ йөрөйҙәр, тине ул..."

Штеровка ауылының юғарыла һанап кителгән кешеләренең һөйләүенә таянып, М. Шайморатовтың үҙ бурысына ни хәтлем яуаплы ҡарағанын, үҙенең ҡулы аҫтындағы дивизияның номерын, исемен йәшерергә, уның ҡайҙа булып, ҡайҙа йүнәлеүен сер итеп һаҡларға тырышыуын тойомларға мөмкин.

"...Совет ғәскәрҙәре беҙҙең өлкәне азат иткәс, мин һуғыш ҡорбандары мәйеттәрен тәртипкә килтереүҙә лә ҡатнаштым, — тип иҫләй **В. Н. Гитманский.** — Штеровка поссоветы рәйесе Троцко иптәштең ҡушыуы буйынса, беҙ А. Я. Дробот менән икәүләп Романов балкаһынан өс кешенең — генералдың, капитан һәм лейтенант Носенконың — үлек кәүҙәләрен тачкаға тейәп, поселкаңың түбәнге баҡсаһына килтерҙек"

Мәйеттәрҙе тәрбиәләүҙе, зыяраттарға урынлаштырыуҙы ойоштороп йөрөгән поссовет рәйесе И. Т. Троцко генералдың табутын һуңғы тапҡыр асып ҡарай һәм унда урта буйлы, тулы кәүҙәле, ҡара сәсле хәрбиҙең ятыуын күрә. Ярайһы ғына ваҡыт үтеп киткәнлектән, йөҙө танырлыҡ булмай, әлбиттә.

Бына ошо мәйеттең Шайморатов булыуы-булмауын йәнә бер мәртәбә асыҡлау өсөн Башҡортостандан барған комиссия ағзалары Петровский исемендәге завод шахтаһы электригы **В. Н. Гитманский** менән дә әңгәмә уҙғара.

— Һеҙ генерал тип белгән кешенең ниндәй милләттән булыуы мөмкин? — тип һорай улар.

Яуап шулай була:

— Өҙөп кенә әйтеүе ҡыйын. Ләкин уның урыҫ милләтенән булмауы күренеп тора ине. Быныһын яҡшы хәтерләйем.

— Башта Романов йырынтыһында күмелгән кешене һеҙ танып инегеҙме? — тип, уға бер төркөм кеше төшөрөлгән фотоны күрһәтәләр. Владимир Николаевич, оҙаҡ уйлап тормайынса, Шайморатовҡа төртөп күрһәтә.

## Ҡайһы бер һығымталар

Шулай итеп, рейдтан сыҡҡанда Башҡорт кавалерия дивизияһы һәм уның командирының ҙур фажиғәгә осрауында бер ниндәй ҙә шик ҡалмай. Штеровка поссоветы үҙ территорияһында вафат булған яугирҙарҙы ерләгәндә иҫәп алып барған булып сыҡты. Ошо документтан күренеүенсә, поселок Советы 7'туғандар ҡәберлегендә һәм 25 айырым ҡәберҙә барлығы 556 кешене ерләгән. Бынан тыш, кавалерия корпусы ҡамауҙан сыҡҡан саҡта, һуғыш яланында ҡаты яраланып ятып ҡалған бик күп һалдат, офицерҙар райондағы төрлө йорттарҙың сарҙаҡтарында, мөгәрәптәрендә үҙҙәренә урын тапҡан. Мәҫәлән, Петровский исемендәге заводтың 39-сы барагы иҙәне аҫтында 17 ауыр яралы яугир ятҡан, ә барлығы завод территорияһында немецтарҙан 100 кеше ҡасып йәшәгән.

Был хәтлем оло фажиғәнең төп сәбәптәре нимәлә? Һүҙ ҙә юҡ, һуғыштың ҡағыҙға яҙылмаған үҙ закондары була. Күп операциялар аҙағына хәтлем уйланылып та, ҡайһы ваҡыт теләгәнсә генә килеп

сыҡмай. Пулялар ҙа ҡорбанын һайламай: ябай һалдаттың да, ҙур командирҙың да ғүмерен берҙәй ҡыя. Шулай ҙа, был хәҡиҡәтте яҡшы аңлаһаҡ та, Шайморатовты башҡорт халҡының күренекле генералы булғанлыҡтан да, бик ололоҡлағандан да түгел, асығыраҡ яуап тапҡы килә: уны меңәрләгән ғәскәрҙең иң алдына ҡуймаҫҡа һәм ут аҫтына индермәҫкә, яраланып ятып ҡалһа, кәүҙәһен алып сығырға булмай инеме ни?

Башҡорт халҡы тарихынан беҙ яҡшы хәбәрҙарбыҙ: башҡорт ирҙәре борон-борондан һуғыш яландарында ыҙғарланған кешеләрҙе дошман ҡулына ҡалдырмаған — был сифатты урыҫ генералдары ла билдәләй килгән, шуның өсөн дә башҡорт ғәскәрен йәлеп итергә тырышҡан. Ә был юлы ул йола ни өсөн онотолған, һәм беҙ хәҙер йәмһеҙерәк күренештәр тураһында һөйләргә мәжбүрбеҙ? Бында нимәһелер әлегә хәтлем әйтеп бөтөлмәгән, ниндәйҙер йомаҡ асылмай ҡалған.

Һорау артынан һорау... Тотош дивизияға килгәндә лә шул уҡ хәл.

Тарихсы Т. Х. Әхмәҙиевтың яҙыуынса, 112-се кавдивизияның рейдҡа инер алда, 1943 йылдың 11 февраленә, 45 процент ҡына кешеһе, 35 процент ҡына аты булған. Ни өсөн дивизия яртылаш килеш кенә башҡа дивизияларҙан бер көн алда рейдҡа инеп киткән? Шул хәтлем дә яуаплы эште башҡарып сығыу өсөн уға ни өсөн хисаплы ғына һуғыш ҡоралы бирелә? Йүнле-рәтле аҙыҡ менән дә тәьмин ителмәй? 3-сө гвардия армияһы (армия генералы Д. Д. Лелюшенко) корпусты ҡамап алған һәм ҡулсаны ҡыҫа барған немец ғәскәрҙәренә нилектән ҡамасауларға уйламаған, ҡул аҫтында бер танкыһы ла булмаған Башҡорт кавдивизияһын асыҡ яланда бомбаға тоттороуға кәртә ҡуймаған һәм, ахыр килеп, был үлемесле урындан китергә рөхсәт һораған корпус командирына саҡ ҡына ла үҙаллылыҡ бирмәгән? Аңлашылмай. Үҙ сиратында Борисов та ярым-йорто ғына тороп ҡалған Башҡорт дивизияһын һаман ут аҫтына этәргән, аттарҙың көрт йырып саба алмауын күрә тороп та, әллә иҫерек булып, күрмәгән, ни өсөн Шайморатовты ҡабаландырған? Ниңә алданыраҡ разведка үткәреүҙе тыйған?

Был “ниңәләр” ифрат күп йыйылып китә.

Иң аптырарлыҡ нәмә шул: 8-се корпус етәксеһе Борисовтың Шайморатовҡа ҡарата булған мөнәсәбәте.

Очеркты уҡыусы кавдивизияның сәйәси бүлеге начальнигы урынбаҫары С. Ҡадировтың хәтирәһенә иғтибар иткәндер, моғайын. Ул, рейдҡа әҙерләнгәндә корпус командиры итеп М. Шайморатовтың тәғәйенләнеүе, ә М. Борисовтың резервта булыуы хаҡында әйтеп үтә. Ләкин корпус юлға сығыр алдынан ғына ҡапыл

“рокировка” яһала: корпус командиры итеп — Борисов, ә дивизия командиры итеп Шайморатов ҡуйыла. Тиҙҙән бер үк званиела булаcаҡ ике командир араһында бәхәс тыуҙырырлыҡ мая һалып ҡуйыла һымаҡ кабул ителә был. Һәм, ысындан да, рейдта ҡатнашыусыларҙың күбеһенең хәтерләүенсә, Борисов аҙым һайын Шайморатовҡа бәйләнә, һағыҙаҡ һымаҡ йәбешеп алып, теңкәһенә тейә, етмәһә, эскелек менән шөғөлләнә. Ғүмер баҡый “әрме һурпаһын” эскән, уставты иң ҡаты закон итеп күреп өйрәнгән Шайморатовтың үҙ командирының приказын шик аҫтына алырға йә иһә үтәмәҫкә хаҡы бар инеме? Юҡ, әлбиттә. Уның башҡа сараһы юҡ.

Уныһы шулай. Ләкин бит шаҡ ҡатырлыҡ хәл: немец оборонаһына бер үк шарттарҙа килеп терәлгән ике командирҙың береһе дошман ныҡынған урынға барып инһен дә шунда ятып үлһен, ә икенсеһе — шунан алыҫ та түгел, ҡулсаны йырып сыҡһын, имеш. Ләкин бында тағы бер сәйер нәмә бар: ни өсөндөр атаканан һуң корпус командирының да һәләк булыуы, хатта Штеровкала ерләнеүе хаҡында хәбәр тарала. Әммә һуңынан бөтөнләй икенсе факттар асыла. Башҡортостан хөкүмәте комиссияһы туплаған документтар араһында беҙ, ғәжәпләнеп, 1947 йылдың 8 октябрендә Штеровка поссоветына адресланған бер хатты уҡыйбыҙ. Унда СССР Ҡораллы Көстәре министерствоһының Кадрҙар буйынса Баш идаралығы, күрәһең, шундайыраҡ имеш-мимеш хәбәрҙәргә асыҡлыҡ индерергә тырышып, шуны белдерә: “Генерал Борисов 1943 йылдың февралендә үлеүселәр араһында юҡ. Уның кәүҙәһе Штеровка территорияһында ерләнгән тигән мәғлүмәт дөрөҫ түгел”. Ул ғына ла түгел, С. Ҡадировтың “1970 йылда “Ағиҙел” журналының 5-се һанында яҙып сығыуынса, Борисов 23 февралдә “әсирлеккә алынды. Ә һуғыш тамамланғас, хатта Мәскәүҙә, Фрунзе исемендәге Генераль штаб академияһында уҡып йөрөй”. Мәғлүмәт ысын икән, был эскесе генерал, бәлки, рейдтың маҡсатын юҡҡа сығарыу өсөн генә ебәрелгәндер, тигән шик тыуа. Хаин булмаған хәлдә лә, генерал Борисовтың ҡыланыштарында рус армияһында борон-борондан күҙәтелгән яуапһыҙлыҡ, тейешһеҙ мәлдәрҙә лә кәйеф-сафа ҡорорға тырышыуҙар һәм мосолман милләтле яугирҙарға тәкәбберерәк ҡарау йәки бөйөк державалыҡ ағыуҙары күҙгә бәрелеп тора.

...Шайморатов менән һуңғы атакаға барған яугирҙарҙы тыңлағанда бер һорау тыуа: ни өсөн улар Шайморатовтың атын ҡара-көрән төҫтә ине, ти, ә башҡалар, бигерәк тә Штеровка кешеләре, күк ине, тип иҫләй? Был мөғжизәне, бәлки, ябай ғына аңлатып булалыр? Ниңә һуң әле атака барышында генералдың ат башынан ҡолап төшөүен уның үлеме менән генә бәйләргә? Бәлки,

пуля уның үҙенә түгел, ә атына килеп тейгәндер? Ҡара аты ауһа, генералдың шунда уҡ икенсе, аҡ ат тотоп китеүе лә мөмкин дәһә!

Бына шундайыраҡ фараз итеүҙәрҙе нығытып ҡуйыу йә, киреһенсә, юҡҡа сығарыу өсөн, тағы бер ике шаһитты тыңлайыҡ. Уларҙың береһе — медицина хеҙмәте подполковнигы **А. А. Сарыгин** (Татарстан). Бына уның аңлатмаһы: “Генерал-майор Шайморатов “Аттарға, минең арттан алға!” тип команда бирҙе лә беренсе булып атына һикереп менде. Шунда уҡ дивизия штабы Юлинонан юртып сығып китте. Корпус штабы үҙенең подразделениелары менән беҙҙең колоннаға ҡушылды... Тиҙҙән колонна 16-сы кавдивизияның алдынғы подразделениеларын ҡыуып етте. Немецтар тураһында, минең белеүемсә, бер ниндәй ҙә мәғлүмәт юҡ ине. Ваҡиғалар ҡапыл ҡуйырып китте. Колонна, диагональ буйынса һуҙылған шоссе юлды аша сығып, километр ярым самаһы ер үткәс, алда һәм уңда, 400—500 метр арыраҡ, дошмандың 6—7 автомашинанан торған төркөмө күренде. Машиналар тирәләй йүгерешергә тотондолар, шунда уҡ пулеметтарҙан, автоматтарҙан көслө ут астылар. Шуның артынса уҡ колонна алдында — пулеметтан, һул яҡтан өс-дүрт орудиенан да ата башланылар. Арттан да, уңдан да миналар һыҙғырырға тотондо. Кешеләр, аттар ары-бире һуғылды. Немецтар бик яҡындан тондора ине. Ул колоннаға утты кешеләр, аттар күберәк тупланған урынғараҡ, сәпәне. Һыбайлыларҙың күпселеге, үҙән буйлап һибелеп, кирегә боролдо, **ҙур булмаған төркөм иһә һулға, сауҡалыҡ менән ҡапланған йырынты яғына ташланды.**

Мин, бер яралы һалдатҡа ярҙам итәйем тип, атымдан төштөм. Минең янда ат етәкләүсе генә тороп ҡалды. 1—1,5 минут үтеүгә тирә-йүндә, үлек кәүҙәләрҙән һәм ялан буйлап сапҡан аттарҙан башҡа, бер нәмә лә юҡ ине инде. Мин кире сигенгән һыбайлылар артынан ашыҡтым. **Һулға айырылып киткән төркөм дә күҙҙән юғалды. Минең иҫәпләүемсә, генерал-майор Шайморатов та шунда булырға тейеш ине.**

10—15 минуттан мин артҡа киткән дивизия һәм корпус штабтары ҡалдыҡтарынан торған төркөмгә барып ҡушылдым. Юлда мине дивизия штабы начальнигы полковник Голенев һәм дивизия штабының оператив бүлеге начальнигы майор Черников ҡыуып етте. Генерал-майор Шайморатовтың яҙмышын берәү ҙә белмәй ине. Уның менән бергә адъютанты һәм һаҡсылар взводы ла юҡ булды...”

Шулай итеп, дөйөмләштереп, шуны әйтергә кәрәк: Шайморатовтың ҡайһы урында үлеүе тураһында һуғыш ветерандары ике төрлө һөйләһә лә, Штеровка ауылы кешеләре “аҡ атҡа” атланған

генералдың урман эсендә һәләк булыуын яҡлай. Генералдың исемен — Шайморатовмы ул, әллә корпус командиры урынбаҫары Г. Д. Дудкомы — улар белмәй. С. Ҡадиров иһә, уның Дудко булыуы мөмкин дә түгел, сөнки генерал Дудко 18 февралдә үк әле Миус йылғаһы буйында үлеп ҡалды, тип раҫлай.

Нисек кенә булмаһын, отставкалағы подполковник А. А. Сарыгин әйтмешләй, "башҡорт халҡының батыр улы, беҙ яратҡан командир, бик шәп полководец генерал-майор М. Шайморатов әрәм булып ҡалды". Сарыгин был фажиғәнең төп сәбәбен дә атай. "Ул — корпус командиры генерал Борисовтың енәйәтсел приказы", — ти Александр Алексеевич.

Ошо фекерҙе лә иҫтә тотоп, Шайморатовты унан да яҡшыраҡ белгән кеше булмағандыр, моғайын, тип, дивизияның Махсус бүлеге начальнигы М. И. Кузнецовтың хатына ҡабаттан күҙ йөрөтөп сығайыҡ: "Мин генерал-майор Шайморатовты 1941 йылдың декабренән алып белә инем... Үлгән сәғәтенә тиклем белә инем... Бергә бөтә һуғыштарҙа ла булдым... Бөтә һуғыштарҙа ла... Йәне-тәне менән бирелгән, тоғро командир ине ул... Бишенсе тәүлек тамамланыуға киткәс, беҙҙең частарҙы Чернухинонан алып сығырға приказ алынды. Шайморатов ул саҡта тотош корпусты йыртҡыс ауыҙынан йолоп алды... Инде бурыстың иң ҡатмарлы өлөшөн үтәргә — тылдан дивизияны сығарырға кәрәк, тине ул. Шул мәлдә көтөлмәгән хәлгә юлығыуың мөмкин... дивизияның бер өлөшө сығып китер, ә икенсе өлөшө өлгөрмәҫ, дошман оборонаһындағы өҙөклөктөң ҡапыл ябылып ҡуйыуы ихтимал..."

Үкенескә ҡаршы, шулай килеп сыға ла.

*1999 й.*

# XIV. Ир ҡанатҡайҙары ат була

Бынан бер нисә йыл элек тыуған ауылымдан хат килеп төштө. Яҡташым: “Исмаһам ҡайтып китер инең, бер ҙә һөйләшеп ултырырлыҡ кеше ҡалманы, теге... ней ҡустыға барһаң, ат һөйләй ҙә ат һөйләй”, — тип яҙа ине. Аптырап ҡалдым: ә мин Өфөнән ниндәй генә хәбәрҙәр алып барыр инем икән һуң? Баш ҡала урамдарында төрлө маркалы машиналар күбәйҙе, бурҙар өйҙәргә төшә, ҡайһы бер түрәләр хәрәм аҡсаға һаман байыу өҫтөндә, сәйәсәттә лә ығы-зығы һис тынмай, тиеремме? Быны тыңлауҙан ауылдаштарыма ни файҙа? Ә бына ат...



50-се йылдарҙа беҙҙең “Марс” колхозында (Учалы районының Аҙнаш, Ҡужай, Шәрип ауылдары, шаяртып әйткәндә — “АҠШ”-та) Мозал тигән бик кире бер ат була торғайны. Теҙгенде берәй үжәтерәк кеше ҡулына эләккәнен тойҙомо, шунда уҡ алып ҡасыр ине — кеше арбанан осоп ҡалғанын һиҙмәй ҙә ҡала. Йәки бына тағы бер алаша: ул, ҡырҙа тыныс ҡына утлап йөрөгән еренән, Хәйбулла тигән ҡартты шәйләнеме, тышаулы булыуына ҡарамаҫтан, тегене баҫтырырға тотона, хатта ки бер мәл бабайҙы тешләп, уны ҡолағынан мәхрүм итте. Бына шундай хикмәттәрҙе Ҡужай ауылында мәрәкә итеп күп һөйләй торғайнылар.

Мин бынан шуны әйтмәксемен: яҡташым, һөйләшерлек нәмә юҡ тип, бик яңылыша ахырыһы. Бөгөн, һәр кем техника менән ҡаңғырған заманда,еребеҙҙең төп матурлығы, ҡеүәте булған ат хаҡында һөйләргә әҙер торған кешеләр бар икән, тимәк, ауылдың йәне әле һүнмәгән, башҡорт тормошо һүрелмәгән. Быға һөйөнөргә генә ҡала.

Бына шулай, ауылдаш ағайҙың хаты мине күптән инде артта тороп ҡалған йылдарға әйҙәп алды ла китте. Мин шул йылдарҙағы хәтирәләр ярсыҡтарына һәм инде олоғайғас ҡулға килеп эләккән яҙма ҡомартҡылар осмоттарына бер аҙ байҡау яһамаҡсымын.

**Ҡужай.** Миңә әле алты ғына йәш. Ҡыш. Сатлама һыуыҡ. Тышта, тәҙрә ҡапҡастарын туҡмап, буран ҡоторона. Урамда, бик

ҡараңғы булһа ла, ир-егеттәр, бер ҡарлыҡкан тауышҡа буйһоноп, "айт-два"ға баҫырға өйрәнә. Һуңынан белеүемсә, күрше урыҫ ауылынан бер "әфисәр" килеп, 40—50 йортлоҡ ҡына ауылдан фронтҡа китәсәк кешеләрҙе әрме һөнәрҙәренә өйрәтеп йөрөгән икән.

Бер көндө шул кешеләрҙең өсәүһеме-дүртәүһеме, оҙон юлға сығыр алдынан беҙгә инеп, күҙҙәре зәғиф булғанлыҡтан бында тороп ҡаласаҡ атайымдың үҙҙәренең бала-сағаһына күҙ-ҡолаҡ булып тороуын һорап, хушлашып китте. Уларҙың күбеһен (Ҡужайҙан ғына ла улар 43 кеше ине) мин шул көндән һуң күрмәнем. Һыуға төшөп юғалғандай булдылар. Һәм, тәбиғи, уларҙы, әллә инде ситкә сығып йөрөмәгәндәре өсөнмө, әллә "руссалары" ла самалы булғанғамы, һуғыштың тәүге көндәрендә үк әрәм булып ятып ҡалғандарҙыр тип, ҡыҙғанып йөрөгәйнем...

Йәштәре олораҡ ир-аттың, атҡа менеп яуға китеүе хаҡында мин тәүләп оло юл өҫтөндә ултырған Туңғатар ауылында Вафа Мөхәмәтшинанан ишеттем. Ул бына ни һөйләгәйне: "Туңғатарҙан Башҡорт кавалерия дивизияһына Сиражетдинов Сәлим, Ғәйнуллин Кәрим, Сабитов Вәлиулла, Ҡарамышев Зәйнуллалар алынды. Уларҙы Учалыла йыйғандар икән. Унан беҙҙең аша Миәс станцияһына ҡурай тартып үттеләр. Ҡәйнәм менән беҙ, хушлашып ҡалайыҡ тип, тышҡа йүгереп сыҡтыҡ. Урамда һығыт-илаш. Ҡәйнәм тәкбир әйтергә тотондо. Һуҡыр ҡайным беҙҙең арттан: "Курвалар, атҡа менгәшеп, һеҙ ҙә китегеҙ!" — тип ҡысҡырып ҡалды. Бик китер инең дә бит, колхоздағы эштәрҙе кемгә ҡалдыраһың? Үҙе дөм һуҡыр, үҙе хәлһеҙ ҡарт, алйыуынан асыуын беҙгә төшөргәндер инде..."

Башҡорт кавалерия дивизияһы составына алыныусылар араһында "АҠШ"-тан уҡытыусы, колхозда тәүге комсомол ячейкаһын ойоштороусы Мәсәғүтов Абдрахман, күршеләр булып йәшәгән Заһретдинов Ғәйнетдин, Нәжмиев Мөхәммәт, Ғарипов Ғәлиулла, уларҙан байтаҡка йәшерәк Сәйетов Юлдыбай, Аҙнаштан Шамил Сәйфуллин, Шәриптән Искәндәр Мәҡсүтов, Шәриф Башаров, фронтта уларға ҡушылған Мәҡсүтов Ғабиҙуллалар булған. Уларҙың бик аҙы ғына әйләнеп ҡайтты, тик үкенес хәл, ваҡыт тапмаған булып, уларҙан да күп нәмәне һорашып ҡалынманы.

**Район үҙәге Учалы.** Һуғышҡа оҙатыуҙың тәүге осорон ул саҡта хәрби комиссар булып хеҙмәт иткән полковник А. Щекунов бына нисек хәтерләй: "...Бөтә өйрәтелгән кешеләр хәрби частарға 1941 йылдың майында уҡ ебәрелгәйне. Хәҙер иһә, мобилизация планы буйынса аттарҙы, ылауҙарҙы, водителдәре менән тракторҙарҙы, машиналарҙы ла ебәрергә кәрәк ине. Аттар партияһын комплектлау айырыуса ауыр барҙы, сөнки Ҡыҙыл Армия фондына ҡараған ат-

тар, нигеҙҙә, өйрәтелмәгәйне, уларҙы тотоу, бигерәк тә вагондарға тейәү, ауырға тура килде... Хәҙер мин шуны әйткем килә: Учалы районында өс йылдан ашыу эшләп, мин Ҡыҙыл Армияға саҡырылыуҙан баш тартҡан йәки хәрби частарҙан ҡасҡан кешеләрҙе осратманым. Киреһенсә, уларҙың үҙҙәре теләп Тыуған илебеҙҙе һаҡларға китергә ашҡынып тороуҙарын күҙәтергә тура килде".

**Өфө.** Башҡорт кавалерия бригадаһын комплектлау 1942 йылдың ғинуарында тамамлана. Уның составында башҡорттар 81,5 процент тәшкил итә. 1905—1915 йылдарҙа тыуғандар — 70 процент — йәғни 27—37 йәшлек ирҙәр, 67 проценты — колхозсылар. Ике башҡорт дивизияһына 4550 ат бирелә.

**Брянск фронты.** "Марс" колхозынан беренсе булып һуғышҡа киткәндәр һыуға төшкән кеүек зым-зыя юҡ булды, тигәйнем башта. Бик хаталанғанмын икән. Киткәндәрҙең береһе лә бахыр булып ятып ҡалмаған. Элекке уҡытыусы Абдрахман Мәсәғүтов, һаман шул тәрбиәүи эшен ҡалдырмай, парторг булып йөрөгән, Юлдыбай Сәйетов — полк комсоргы, Шамил Сәйфуллин — дивизия штабы эргәһендә элемтә офицеры, Ғәйнетдин Заһретдинов ветсанитар булып йөрөгән. Әүештән Нотфулла Хәйбуллин миномет батареяһында тоҫҡаусы, Ялсығолдан Сираж Багаев данлыҡлы минометсы булған. Был яугирҙарҙың барыһының да дандары әлеге шул үҙебеҙҙең башҡорт аттарына барып тоташа. "Башҡорт дивизияһында" тигән очерк яҙғанда Константин Симонов дөрөҫ фекер йөрөтә: "Күпте күрә, һәр урында була егет менән уның аты. Уралда — бейек тауҙар, Урал аръяғында — бик киң яландар. Үҙ ерҙәре һәм үҙ һыуы өсөн һуғыша егет һәм уның аты." Воронеж эргәһендә үк ҡаты һынауҙарға дусар ителгән башҡорт ир-егеттәре лә, уларҙы арҡаларына ултыртҡан саптарҙар ҙа, ярһып, бер бөтөн булып, дошмандары өҫтөнә ташланған. Өндәшә генә алмаған малҡайҙар. Өндәшә алһалар, тере ҡалһалар икән, алғы һыҙыҡта ниндәй фажиғәләргә тап булғандарын бәйән итерҙәр ине дүрт аяҡлы йылғыр яугирҙар, күп нәмәләргә күҙҙәребеҙҙе асырҙар ине. Хәйер, барыбер асмаҫтар ине, сөнки улар, кеше һымаҡ кире әйләнеп ҡайтманы, кеше тип аталған "дуҫы" тоғро юлдаштарын ҡайҙалыр олаҡтырып китте.

Ишембайҙа әле булһа бер риүәйәт йөрөй. Районның "Башҡортостан" тигән колхозында ҙур бәйгеләрҙә бер атты ла алдына сығармаған Һарат исемле айғыр булған. Ләкин һуғыш сыҡҡас, уның янбашына "РККА" тип тамға һуғып, яуға оҙатҡандар. Күпмелер ваҡыт үткәс, ҡарайҙар: Һарат тыуған яғына ҡасып ҡайтҡан. Тоталар, кире оҙаталар. Айғыр тағы ҡайтып килә. Уны

яңынан теҙгенләйҙәр, арҡанлайҙар, тағы фронтка оҙаталар. Шунан һуң ғына ул башҡаса күренмәй. Бәлки, үлеп ҡалғандыр.

Нисәнсе йылдалыр Учалыла ла бер хәбәр таралды: йәнәһе лә, кемдер ("Байрамғол" совхозынан булһа кәрәк), Сталинград урамдарында һуғышып йөрөй торғас, элек ауылда үҙе егеп йөрөгән атына барып тап булған. Ат та таныған тыныс ваҡыттағы хужаһын, кешнәп, ынтылып ҡуйған, һалдат малҡайҙың башынан ҡосаҡлап алған һәм, дуҫын тамуҡтан ҡотҡарырға теләп, ситкәрәк алып барып ҡуйған.

**Брянск.** Фронт гәзите редакторы батальон комиссары В. Портновтың Шәрип ауылынан киткән Искәндәрҙе "ҡаһарман Мәксүтов" тип яҙып сығыуы асыҡланды. Унда һүҙҙең ни турала барыуы аңлашылып тора, тик йәл, гәзит йыртылып, унда "яуға, кавалеристар!" тигән һүҙҙәрҙән башҡа бер ни ҡалмаған. Әммә яҡташыбыҙҙың ҡыйыулығын гәзит кенә яҙмаған булып сыҡты. Мәҫәлән, М. М. Шайморатовтан һуң дивизия менән етәкселек итәсәк генерал-лейтенант Г. А. Белов үҙенең "Ҡаһарманлыҡ һәм данлы юл" тигән китабында, М. Шайморатовтан дивизия частарын тикшереп сығығыҙ, тигән күрһәтмә алғас, 275-се кавалерия полкына барыуын һөйләй. Ул офицерҙарҙан бер-бер артлы Т.Т. Кусимов, С.Р. Әлибаев, Ш. Г. Ғайсин һәм боецтарҙан Имам Ғәлимов, 4-се эскадрон элемтәсеһе Искәндәр Мәксүтов менән таныштыра. "4-се эскадрон Малые Борки эргәһендә ауыр оборона һуғыштары алып бара ине, — тип яҙа генерал. — Искәндәр полк штабынан үҙ подразделениеһына ҡайтып килгән. Шул саҡта күрә: дошмандың ҙур ғына көсө эскадрон торған урынды уратып алған. Эскадрон тылында немецтар пулемет урынлаштырған. Тимәк, артҡа китеп булмаясаҡ, тип уйлап ҡуя Искәндәр һәм юлды урап шыуышып китә. Бына пулеметҡа барып етергә бер нисә тиҫтә метр ғына ҡала. Хәҙер бер тын алырға ла бер ынтылыуҙа пулемет расчетын юҡ итергә. Йә, инде кәрәгегеҙҙе алығыҙ!

Эскадрон командиры өлкән лейтенант Фәрүәз Сабитов быға, әгәр Мәксүтов булмаһа, эштең ни менән бөтәсәген белеп булмай ине, тип өҫтәй. Һүҙ юҡ, Мәксүтов оло наградаға лайыҡ, һәм ул уны алды ла — Ҡыҙыл Байраҡ ордены менән наградланды".

Генералдың был һүҙҙәрен һуңынан дивизия командирының сәйәси эштәре буйынса урынбаҫары Сабир Ҡадиров та раҫланы һәм миңә ошондай хат яҙып ебәрҙе: "Үҫеп ултырған бойҙай араһынан шыуышып барып, Искәндәр, башта бер, унан икенсе пулемет расчетын юҡ иткән һәм, дошман пулеметынан үҙҙәренә ут асып, 67 гитлерсыны үлтергән". С. Р. Ҡадиров И. Мәксүтовты Башҡорт кавалерия дивизияһында иң беренсе булып орден алыусы

ине, — тип иҫәпләй. Булһа булыр, “Ватандаш” журналының 1997 йылдың 11-се һанында тарих фәндәре кандидаты Т. Әхмәҙиев Башҡорт кавалерия дивизияһының документтарын баҫтырып сығарҙы. Ундағы бер документта бына ни тиелә: “Брянск фронты Хәрби советы 1942 йылдың 31 июлендәге приказы менән айырыуса ҙур батырлыҡтар күрһәткән яугирҙарҙы орден-миҙалдар менән бүләкләне: Ҡыҙыл Байраҡ ордены менән — ун, Ҡыҙыл Йондоҙ ордены менән 30 кешене, “Батырлыҡ өсөн” миҙалы менән 30 кешене”. Тәүге ун кеше араһында, ысынлап та, 275-се кавалерия полкы сабельнигы И. Х. Мәксүтовтың да исеме бар (177-се бит).

**Ҡужай.** Бөтә колхоз фронт мәнфәғәттәре менән йәшәй. Май, йөн тапшырыуҙы арттырырға, тигән бойороҡтар бер-береһен ҡыуалай. Халыҡ, балаларының ауыҙынан өҙөп, фронттағы аталары, ағаларына бүләктәр йыя... Күп йылдар үткәс кенә мин башҡорт кавдивизияһының фәҡәт халыҡ иҫәбенә төҙөлгәнен белдәсәкмен. Дәүләт фондынан бер тин бирелмәгән. Әгәр Өфө моторҙар эшләүселәре, сменаларынан һуң ҡалып, дивизия аттары өсөн ауыҙлыҡтар, өҙәңгеләр, дағалар етештерһә, күп ҡалалар тачанкалар, йөк арбалары эшләгән, район промкомбинаттары ҡыҫҡа тундар, бүрек теккән, быйма баҫҡан. Ә бына беҙҙең бәләкәй генә “Марс” колхозында... Ҡужайҙа иң ҙур өйҙәрҙең береһе — беҙҙеке. Төпкө бүлмәнең иркен булыуын күреп, колхоз рәйесе Ярмөхәмәт, ҡырға сыға алмаған ҡарсыҡтарҙан звено ойоштороп һәм минең өләсәйҙе “старший” итеп тәғәйенләп, уларға кейеҙ баҫырға ҡушты. Һәм бына инәйҙәр, тау-тау йөн тетеп, уны бөтә иҙән киңлегенә түшәп, өҫтөнә самауыр-самауыр ҡайнар һыу һибеп, кейеҙ баҫырға тотондо. Еүеш булғанлыҡтан ифрат ауыр, ҙур йәймә һымаҡ нәмә хасил булғас, уны саҡ күтәреп, юғарыға һәндерәгә элеп ҡуялар. Кейеҙҙән бер нисә көн һары һыу һарҡып торасаҡ. Артабан уны ҡайҙалыр ваҡ өлөштәргә киҫәсәктәр, серге эшләйәсәктәр, ҡамытҡа, нөйәткә ҡулланасаҡтар. Барыһы ла ат өсөн, еңеү өсөн.

**Фронт.** Тәүге сынығыу алыу. Воронежға һөжүм әҙерләнеүе билдәле булғас, Көньяҡ-көнбайыш һәм Брянск фронттары араһындағы өҙөклөккә 8-се кавалерия корпусы индерелә. Ошо корпусҡа буйһонған Башҡорт кавалерия дивизияһына Алешки — Малые Борки — Святоша һыҙығын биләргә һәм уның флангыһын һаҡларға ҡушыла. Оборона фронты 12 километрҙан ашыу. Бер дивизия өсөн ғәҙәттән тыш ҙур ара был. Һәр кавалерия полкында ҡылыслы дүрт эскадрон (120—130 кеше). Тик оборонаға уларҙың 75—90-нын ғына йәлеп итергә мөмкин”.

(Г. А. Белов. Ҡаһарманлыҡ һәм данлы юл. Иҫтәлектәр. Башҡ. китап нәшриәте. 1978).

“Дивизия яугирҙарының башҡорт халҡына мөрәжәғәте”нән. Уға полк командиры Кусимов менән комиссар Әлибаев ҡул ҡуйған. 31.10.1942: “Ҡәҙерле иптәштәр! Беҙ фронтҡа киткәндә, һеҙ, ерәнес дошманды еңеү өсөн көсөгөҙҙө лә, тормошоғоҙҙо ла йәлләмәгеҙ, тип наказ биргәйнегеҙ. Был бурысты беҙ намыҫ менән үтәргә тырышабыҙ. Бына ҡурҡыу белмәгән иптәштәребеҙҙең ҡайһы берҙәре. Кесе лейтенант Абдрахман Янбаев үҙ пулеметынан 70 фашисты дөмөктөрҙө. Сәйфи Солтангәрәев, Искәндәр Мәксүтов, Миңлеғужа Шәрипов, Миңлислам Нарынбаев тиҫтәләрсә, йөҙҙәрсә немец оккупанттарын теге донъяға оҙатты...”

(Р. Өмөтбаев. Генерал Күсимов. Өфө. “Китап”. 1995. 138-се бит.)

**“Марс” колхозы.** Ауыл фронт мәнфәғәттәре менән йәшәһә лә, был хәстәрлектәрҙең ауылсараҡ үҙенсәлектәре лә юҡ түгел. Бына ошонда рус яҙыусыһы Анатолий Ивановтың “Вечный зов” романындағы конфликттар иҫкә төшә. Алыҫ Көнсығышта барған синфи көрәш, һуғыш башланғас, ауылдан фронтҡа күсә. Тәү ҡарамаҡҡа, яҙыусының шундай сюжет ҡороуы яһалмалыҡ һымаҡ ҡабул ителә. Әммә ысынында ундай күренештәр аҙым һайын осрап тора икән. Бына бер хат. Мин 60-сы йылдарҙа әле, Искәндәр Мәксүтовтың батырлығы тураһында тәү тапҡыр район гәзитендә яҙып сыҡҡас, уға ҡарата Искәндәрҙең ҡыҙы Хәснә Ҡорамшина, әсенеп, үҙ фекерен белдергәйне. “1945 йылдың 9 майын беҙ Еңеүҙе Шәрип ауылы идараһы алдында ҡаршыланыҡ, — тип яҙа ине ул. — Шул көндө райондан килгән бер ағай, колхоз рәйесе Ярка (Ярмөхәмәт. — Авт.) быуай менән бик ҡаты һөйләшеп, уның өйөнән нимәлер алып, инәйем Рәфиҡәгә тапшырҙы. Баҡтиһәң, ул атайым тураһында яҙылғанды инәйемә бирмәй йөрөткән икән. Гәзит киҫәктәргә ҡырҡылып бөткәйне. Атайым тураһында уҡып, йыйылған халыҡ иланы, инәйемде ҡотланы... Ярай әле, ярты-йорто булһа ла, атайым тураһында аҙаҡ һеҙ яҙып, инәйемә ҡартлыҡ көнөндә бер аҙ ярҙам тейҙе. Шулай ҙа йөрәк яраһы бөтәшмәй беҙҙең. Ҡайһы бер кешеләр уландарынан посылкалар алды, ҡайтып килгәндәре рәхәтләнеп йәшәп ята, ә беҙгә ауыл Советынан бер ипле, йылы һүҙ ҙә ишеттергәндәре юҡ. Ниңә Мәксүтов Искәндәр Хисам улын исемлектәрҙә иң алдынғы итеп ҡуймайҙар? Әллә заманында дошманды аяуһыҙ ҡырғанға яратмайҙармы? Ҡужай ауылынан, ана, Сиҙыҡ ағай Ғарипов, Шәрип ауылынан Өмөрғолов Сираж, Ялсығолдан Багаев Сираж, Абҙаҡтан Күсәев Шамил ағайҙар ҙа атайымды яҡшы хәтерләй. Ниңә был хаҡта яҙмайҙар?”

Һуғыш осороноң ғына түгел, бәлки, унан һуңғы әсенешле көндәребеҙгә, хәтеребеҙҙең тоҡор булыуына ишара ине был хат.

**Брянск фронты.** Искәндәр Мәҡсүтов, Сираж Багаев, Мәсәғүт Абдрахмановтарҙың батырлыҡ күрһәтеүе Воронеж эргәһендәге тәүге алыш барышында булған. Дивизияның архив документтарына таянып, тарих фәндәре кандидаты Т. Әхмәҙиев бына ни яҙҙы: "2 июлдә өс полкҡа яҡын пехотаһы, артиллерия полкы булған немецтар 80 танк һәм авиация ярҙамында корпус позицияһына ташланды. 112-се кавалерия дивизияһының дошман менән үлемесле яғалашыуы башланды. Ул гитлерсыларға ҙур юғалтыуҙар килтерҙе. Уның һөжүме туҡтатылды. 2 июлдән алып 9 июлгә тиклем дивизия частары дошмандың 320 һалдатын һәм офицерын, 50-нән ашыу пулеметын, 12 орудиеһын юҡ итте. Ләкин Башҡорт кавалерия дивизияһы ла ҙур юғалтыуҙар кисерҙе: 560 кеше яраланды һәм хәбәрһеҙ юғалды, 180 ат үлде һәм яраланды". ("Ватандаш", 1997, 11. 177-се бит.)

Үрҙә һанап кителгән яугирҙарҙың үҙ-үҙҙәрен аямауҙарына бер миҫал булһын тип, һүҙҙе алғараҡ ебәреп булһа ла, Сираж Багаевтың дивизияла беренсе булып Герой исеме бирелгән А. Атаев тураһында 70-се йылдарҙа һөйләп ҡалдырғанын иҫкә алам. Ләкин, ҡайһы бер ваҡиғаларҙы бутап ҡуйыуым бар тип, уның хәтирәһен С. Р. Ҡадировтың яҙғандары менән алмаштырам. "Усть-Белая Калитва дошмандан тартып алынды, — тип бәйән итә һуғыш ветераны. — Дивизия Төньяҡ Донецтың көнбайыш ярында нығынды, тағы сая һуғыштар башланды. Лейтенант Атаев командалығындағы ҡурҡыу белмәгән ыласындар шахтерҙар ҡасабаһы өсөн ике тәүлек буйына көрәште, мөһим ҡалҡыулыҡты баҫып алып, дошмандың атакаларын кире ҡағып торҙо. Уларға ярҙамға Шайморатов Фондеранцев полкынан сержант Сираж Багаев (Ялсығолдан) взводын ебәрҙе. Ҡалҡыулыҡтың көньяғында урынлашҡан тимер юл станцияһы аша үтеп, боецтар ошо бейеклек өсөн алыш башланы, шунда байтаҡ гитлерсыларҙы дөмөктөрҙө. Ләкин ярҙам һуңланы. Атаевсы геройҙар үҙ позицияларын бирмәйенсә һәләк булды. Уларҙың ҡаһарманлығы хөрмәтенә сержант С. Багаев ҡалҡыулыҡ өҫтөнә ҡыҙыл әләм алып барып ҡаҙаны". (С. Кадыров. "Орел Урала". Уфа. Башк. книжн. изд-во. 1985. С. 78).

**Тағы фронт.** 1942 йылдың 3 ноябрендә М. Шайморатов ВКП(б)-ның Башҡортостан өлкә комитетына хат яҙа: "Дивизия бик күп ат юғалтты. Бөгөнгө көндә 1000 боец атһыҙ тороп ҡалды. Шуға күрә, әгәр мөмкин булһа, Башҡортостан халыҡ хужалығы иҫәбенән аттар составын тулыландырыуығыҙҙы үтенеп һорайбыҙ".

**Өфө.** 1942 йылдың 30 декабрендә Ҡыҙыл Армия кавалерияһының генераль инспекторы вазифаһын башҡарыусы генерал-майор Обухов та, 112-се Башҡорт кавалерия дивизияһының

“Көньяҡ-көнбайыш фронтта ҙур юғалтыуҙарға осрауы һәм уны тулыландырыу кәрәклеге” хаҡында хәбәр итә. Рядовой, кесе һәм сәйәси составҡа 1000 кеше, халыҡ хужалығынан 1500 кавалерия аттары ебәреү талап ителә, тиелә хатта. Партияның өлкә комитеты һәр районға, шул иҫәптән Учалы районына ла, әмер артынан әмер ебәрә. Уның ҡарарын үтәмәү мөмкин түгел. Тик бына кавалерияға ярарлыҡ аттарҙы ҡайҙан алырға?

Әлбиттә, юғары талаптарға яуап бирерлек толпарҙарҙың күп өлөшөн республиканың ат заводтарынан алғандарҙыр, шулай ҙа бында төп сығанаҡ булып элеккесә ауылдар иҫәпләнгәндер, тип уйларға кәрәк. “В атаке конники” тигән китабында (Башҡ. китап нәшриәте. Өфө. 1983. 31-се бит.) И. Сотников та: “Фабрика һәм заводтарҙа, колхоз һәм совхоздарҙа кешеләрҙе һайланылар, **иң яҡшы аттарҙы бүлделәр**” тип яҙа.

**Ҡарағужа ауылы.** “Иң яҡшы аттар!” Был талапҡа ниндәйҙер кимәлдә журналистика ветераны, 30-сы йылдарҙа репрессияға эләгеп, күп ғүмерен һөргөндә үткәргән Хөснә Юлдыбаеваның иҫтәлектәрендә яуап табыла һымаҡ. Уның хәтерләүенсә (“Ураҡ һәм сүкеш” гәзите. 19.09.1972.), 30-сы йылдарҙа Учалы районындағы “Ленин” исемендәге колхоздың төп нигеҙен йылҡысылыҡ тәшкил иткән була. Бында аттың иң ҡулайлы транспорт сараһы ғына түгел, ә ит, ҡымыҙ етештереү сығанағы икәнлеген дә яҡшы аңлайҙар, — ти ул. — Бына ни өсөн йылҡысылыҡҡа ҙур иғтибар бирәләр, көтөүсе итеп иң егәрле кешеләрҙе ҡуялар... Беҙҙең яҡтарҙа тоҡом эштәре насар ҡуйылғайны. Йылдың-йылы бер үк айғырҙарҙы файҙаланыу өйөрҙәрҙең мөшкөлләнеүенә килтерҙе. Белгестәрҙең кәңәшенә ҡолаҡ һалып, колхоз таҙа башҡорт тоҡомло аттар һатып алырға булды. Һәм бына оло йәштәге ике-өс колхозсы, ә улар менән бер нисә йәш егет, арҡаларына тоҡсай аҫып, Йылайыр районына сығып китте.

Ат бағыусы яҡташтарымдың үҙҙәрен йәлләмәйенсә эшләүе тейешенсә баһа алды: беҙҙең колхоз Мәскәүҙә Бөтә Союз Ауыл хужалығы күргәҙмәһендә ҡатнашты, өлкән көтөүсе Ғәлим Шәмиғолов М. И. Калининдың ҡулынан Хеҙмәт Ҡыҙыл Байраҡ ордены алып ҡайтты”.

Тимәк, һуғышҡа тиклем республикала аттар үрсетеү буйынса етди шөғөлләнгән төбәктәр булған һәм тап бына улар, кавалерия дивизияһын даими тулыландырып тороу ихтыяжы тыуғас, төп таяныс булған, тип әйтә алабыҙ.

**Фронт.** Башкавдивизияның Махсус бүлегенең элекке начальнигы майор М. Кузнецовтың БАССР Юғары Советы Президиумына тапшырған аңлатмаһы һаҡланған (БР-ҙың Үҙәк дәүләт архивы.

Р-3097). Чекист бына ни яҙа: "Сталинград эргәһендә хәрәкәттәр тамамланғандан һәм Ворошиловград янында боевой бурыстарҙы үтәгәндән һуң, 16-сы кавдивизия 7-се кавкорпус составында дошман тылына рейдҡа китте. Унда ул ифрат ауыр, ҡышҡы шарттарҙа көсөргәнешле һуғыштар алып барҙы, гитлерсыларҙың тере көсөнә, техникаһы һәм коммуникацияһына ғәйәт ҙур зыян килтерҙе. Немец командованиеһы, уның тылында хәрәкәт иткән беҙҙең частарҙы тармар итергә ынтылып, бер нисә уҡсы дивизияһын, танк частарын ташланы, авиацияһын ебәрҙе, ләкин беҙҙең дивизия, дошман тылынан сыҡҡанға хәтлем уға бер туҡтауһыҙ емергесударҙар яһап торҙо".

Беҙ инде бөгөн шулай уҡ генерал-лейтенант Г. А. Беловтың хәтирәләренән дә дивизияның асылда аҙыҡ-түлекһеҙ, буш арбалар һөйрәтеп, танк-ниһеҙ, самолетһыҙ гитлерсылар территорияһына инеп китеүе, унда заманының иң ҡеүәтле техникаһы менән ҡоралланған частары менән һуғышып йөрөүе, дошманға ҡурҡыныс тыуҙырыуы, уны ҡыйратыуы хаҡында хәбәрҙарбыҙ. Бына ошонда бахыр аттарҙың башҡорт тормошонда ни тиклем мөһим роль уйнауына йәнә һәм йәнә бер тапҡыр хайран ҡалабыҙ. Һуғышта барлығы күпме ат ҡатнашҡан — бындай мәғлүмәт йыйылмаған ахырыһы. Шулай ҙа беҙгә тарихсы Ә. Ә. Хисмәтуллиндың Республика дәүләт архивында тапҡан мәғлүмәте билдәле. "1944 йылдың 1 июненә тиклем фронтҡа 72.412 ат оҙатылған", — ти ул ("Совет Башҡортостаны", 22.06.1991).

**Ҡужай.** Ҡыҙыл Армияға байтаҡ ат китһә лә, "Марс" колхозы һуғыш йылдарында уға ҙур ҡытлыҡ кисерҙе, тимәҫ инем мин. Бәлки улар, кәүҙәгә мөһабәт булмағанлыҡтан, кавалерияға ярамағандыр ҙа. Әммә улар колхоздың данын һуғыш тамамланғас күтәреп ебәрҙе: 40-сы йылдар аҙағында Аҙнаш, Ҡужай, Шәрип ауылдары ("АҠШ") ат үрсетеү буйынса беренсе урынға сыҡты — халыҡ Маҡтау ҡағыҙы алып ҡыуанды. "Марс" колхозының был уңышы үрҙә иҫкә алынған Ҡарағужа ауылына, уның ат ҡарау оҫталарына бәйле ине булһа кәрәк.

**Ҡарағужа.** Минең шәхси архивымда, ҡайтанан баҫтырып сығарыуға бер ҙә сәбәп булмағанлыҡтан, бик күптән бирле бер яҙма ҡомартҡы һаҡланып килә. Ул танылған башҡорт яҙыусыһы Али Карнайҙың "Ғәлим Шәмиғолов" тигән очеркы. Әҫәр Ҡарағужа ауылы кешеһе, үрҙә Хөснә Юлдыбаева ла иҫкә алған Шәмиғолов тураһында. "Ҡаҙ ҡанатҡайҙары ай аҡ була, ир ҡанатҡайҙары ат була", тигән йырҙан башланған был дүрт-биш битлек яҙма кеше менән ат араһында була торған мөнәсәбәткә бағышланған. Шунан сығып, әйтергә мөмкин: Башҡорт кавалерия дивизияһын тулылан-

дырыу өсөн Ҡарағужа ауылы ҙур көс һалған. Шуныһы ла иғтибарға лайыҡ: 1935 йылда ошо төбәктең йылҡысылығы хаҡында хайран ҡалған әҙип, һуғыш уты тоҡанғас, Башҡорт кавалерия дивизияһында сыҡҡан "Ҡыҙыл атлылар" гәзитенең мөхәррире була.

Беҙ Али Карнайҙың "Ғәлим Шәмиғолов" тигән очергынан өҙөктәр генә килтерәбеҙ.

"...Ат менән дуҫлыҡ төрлөсә була. Атты төрлөсә яратырға мөмкин. Ҡайһы берәүҙәр атты егергә, һыбай йөрөргә бик яраталар. Ләкин шул уҡ атты ҡарауға, тәрбиәләүгә килгәндә, ул аттан алыҫыраҡ йөрөргә тырыша. Ындай кеше үҙенең ауылынан утыҙ километр алыҫлыҡта торған ергә ат менән ике сәғәт, сәғәт ярымда барып етергә ярата, шуның менән күкрәк киреп маҡтанып ҡуя, әйтерһең, шундай шәп тиҙлек менән ат түгел, үҙе сапҡан! Әйтерһең, ул үҙе атҡа ултырмаған, ә ат уға ултырып барған, бындай кеше шул тиклем ғорурлана һәм ҙур хеҙмәт күрһәткән кеүек ҡылана. Ә инде шул атты тәрбиәләүгә, иркәләүгә килгәндә, ундай кеше был эште башҡаларға тапшырыуға әҙер тора. Бындай кеше ат туҡмаусы булыуы менән атаҡлы була, күҙенә ни салынһа, атҡа шуның менән һуға. Сыбыртҡы менән аттың башын шыйылдатып туҡмай, дуға менән аттың арҡаһына, мондаһына һалып ебәрә.

Ғәлим ундай кеше түгел. Учалы районы "Ленин" колхозының (Ҡарағужа ауылы) тоҡом йылҡыһы фермаһының бригадиры Ғәлим Шәмиғолов ундай кешеләрҙән түгел.

Һеҙ Ғәлим менән аттар тураһында һөйләшкәнегеҙ бармы? Ул был турала айырым бер тойғо менән киң йылмайып һөйләй. Ул үҙен онота, ҡаршыһында тороусы кешене лә онотҡан кеүек тойола.

Хәҙер, утыҙ алты йәшкә еткәс, берәй кешенең ат туҡмауын күрһәм, иларҙай булам...

Ғәлимдең дә башҡаларҙыҡы кеүек үк яңы илде тыуҙырыу өсөн көрәш менән бәйләнгән биографияһы бар. Был ғүмере Мараҙы тигән йылға буйындағы Ҡарағужа ауылындағы лапаҡ, бәләкәй генә һәм ярлы обстановкалы өйҙәрҙең береһенән башлана. Был ғүмер, бик күп төрлө башҡа ғүмерҙәр кеүек үк, иҙелгән, наҙан, ауыр шарттарҙа үтеп, дауыллы йылдарға китә.

...Мортазин отряды менән Ғәлим, ул йылдарҙа бөтә Европа Россияһын көнсығыштан көнбайышҡа ҡарай аша үтеп, Галиция яландарын күрә. Кескәй генә, ләкин түҙемле "башкирка" менән Польша иленә барып сыға һәм бына ошо мәлдә ул ат менән бигерәк тә ныҡ дуҫлаша. Ат уны күп фронттар аша үткәрә, күп бандалар өҫтөнә алып бара һәм, Ғәлим йығылып ҡалһа, уның аяҡҡа баҫҡанын көтөп тора.

..."Ленин" колхозында уны юҡҡа ғына йылҡы көтөүенең бригадиры итеп ҡуймағандар. Ат тәрбиәләүгә ат менән дуҫ кешеләрҙе ҡуйырға кәрәк бит. Колхоз идараһында Ғәлимдең йәш ваҡытта уҡ ат ятатҡанлығын беләләр.

1934 йылдың йәйе. Ҡараңғы төн. Күкте ҡуйы болот ҡаплаған, күк күкрәй, йәшен йәшнәй. Бер аҙҙан ел, дауыл күтәрелде. Уралдағы урмандарҙы шаулатты. Ҡуйы ямғыр дауыллап яуа башланы.

Аттар тау буйындағы ағастарға ышыҡландылар, йәшендән ҡурҡып, күҙҙәрен сылт-сылт йомдолар. Улар, арҡаларынан шаулатып ямғыр ағыҙып, яҙмыштарына буйһоноп, шым ғына торҙолар, әйтерһең, улар ҡыймылдарға ҡурҡалар ине.

Тик Ғәлим генә хәрәкәттә. Ул яңы ғына тыуған ҡолондо йәненән артыҡ һаҡларға тырыша. Ул бөгөн көнө буйы бына был ҡара бейәне күҙәтеп йөрөнө. Сөнки аҙаҡҡы сиккә еткән быуаҙ бейә бөгөн айырыуса тынғыһыҙлыҡ күрһәтте. Уны күптән инде башҡа аттарҙан айырып ҡуйырға ине, ләкин һиҙмәйерәк ҡалдылар. Ҡара төндә тауҙар араһында Ғәлим йәш ҡолондо һалҡындан һәм бүренән һаҡлап алып ҡалды. Ә бүреләр, йәш ҡолон еҫен һиҙгән кеүек, тирә-яҡта бик яҡын йөрөнөләр. Тик Ғәлим яҡҡан, дөрләп янған ут шәүләһенән, уттан ҡурҡып ҡына яҡын килә алманылар. Был Үрәҙе тауы буйында тыуған ҡолонға Ғәлим ҡойоп яуған ямғыр шаулауы аҫтында "Үрәҙе" тигән исемде бирҙе.

1935 йылдың йәйендә лә шулай булды. Тоҡом бейәләре көтөүе 44 баштан тора ине. Улар 1934 йылда "Англо-араб" тоҡомо айғырҙары менән тороҡторолдолар. 43 бейә быуаҙға ҡалды. Ғәлим уларҙы бик иркәләп йөрөттө, тәрбиәләне... Бейәләр береһе артынан береһе ҡолонлай башлағас, ҡолондарҙы ҡаты ергә төшөрмәне. 43 быуаҙ бейә, ҡырҡ өсөһө лә имен генә ҡолонлап, 43 ҡолон да һау ҡалдылар, улар хәҙер шаярып-шаярып үҫәләр, үҙҙәре өрөп тултырған кеүек һимеҙҙәр. Ҡырҡ өс ҡолондоң тәндәрендә төрлө тоҡом ҡаны йөрөй, улар (...) әллә нисә быуын (...) ҡыҙыу ҡояшлы Ғәрәбстандың балаларынан сыҡҡандар. Үҙҙәренең матурлыҡтары, түңәрәк кәүҙәләре һәм туры муйынлы, кескәй башлы, матур бәләкәй ҡаты тояҡлы, бөтә донъяла маҡталған ат. Ҡарамаҡҡа унан ҡайтышыраҡ булһа ла, көслөлөгө менән дан тотҡан "англичанка" ана шул ғәрәп һылыуы менән "Англо-араб" тигән тағы ла һылыуыраҡ, тағы ла көслөрәк тоҡом барлыҡҡа килтергәндәр. Бына ул Ғәлим тәрбиәләгән ҡолондарҙың аталары. Бына шул инде "башкирка" тигән тоҡом аттары..."

Йылҡы үҫтереүҙә ҙур уңыштарға ирешеп, Ғәлим Шәмиғолов Мәскәүгә ҡунаҡҡа бара, хөкүмәт етәкселәренең рәхмәтен ишетә, орден тағып ҡайта. 1935 йылда була был. Ваҡытты иҫәпләһәң, Ғәлим ҡабул иткән ҡолондар, һөйәктәрен нығытып, електәренә май

тултырып өлгөрөп, Башҡорт кавалерия дивизияһы рейдында ҡатнашҡан булырға тейеш. Әлбиттә, шулай. Ә унан һуң...

**Фронт.** “1943 йылдың 23 февралендә сәғәт 6-ға яҡын һыбайлы дивизия асыҡ урынға, ҡалын ҡар ҡаплаған яланға килеп сыҡты. Ялан буйлап немецтарҙың тимер-бетон ДЗОТ-тары менән сыбарланған, рәт-рәт сәнскеле тимер сыбыҡ тартылған оборона һыҙығы һуҙылғайны. Алыш башланды. Һуғыш, ҡотосҡос төҫ алып, көсәйгәндән-көсәйҙе. Беҙҙең дивизия дошманға ике тулҡын булып ябырылды. Бер тулҡындың башында ҡара айғыры өҫтөндә Шайморатов елә ине...”

(Дивизия Махсус бүлегенең элекке начальнигы майор М. И. Кузнецов иҫтәлегенән. БР-ҙың Үҙәк дәүләт архивы. Р-3097).

**Ҡужай.** Һуғыш тамамланғас, беҙҙең “Марс” колхозына Өфөнән Юлдыбаев тигән ветврач килеп йөрөр булып китте. Килеүенең сәбәбе — аттарҙың ниндәйҙер ауырыу йоҡтороуында ине.

Минең танау осонда әле булһа ат йөнөнөң әсе еҫе торған кеүек. Ауылдың үрге яғында “газокамера” төҙөнөләр. “Камера” тигәнем — ҙурлығы ат бейеклегендә һәм ул һыйырлыҡ ҡына таҡта ҡоролма. Ауырыу атты шул “дауахана”ға тарткылап-этәргеләп индерәләр ҙә, башын ғына тышта ҡалдырып, эскә газ (төтөн) ебәрергә тотоналар. Ат тыпырсына, әммә нуҡтаһынан ысҡына алмай. Ян-яҡҡа һаҫыҡ еҫ тарала...

Бына ошолай күрелгән сара күп аттарҙы ҡотҡарып алып ҡалды булһа кәрәк.

Ат дауалаусы табип, юғарыла әйтеп китеүемсә, Өфөнән килгән ветврач ине. Баҡтиһәң, тыумышы менән Ҡарағужа ауылыныҡы икән. Исеме Юлдыбаев Һаҙый. Һуңынан белеүемсә, егермense йылдарҙа тыуған ауылында уҡытыусы булған, Ҡарағужала, унан Ҡаҙаҡколда комсомол ойошмаһы төҙөп йөрөгән. Башҡорт кавалерия дивизияһы составында һуғышта ҡатнашҡан. Ҡазанда Ауыл хужалығы институтын тамамлаған һәм БАССР Ауыл хужалығы министрлығының ғилми-тикшеренеү ветеринария станцияһында эшләгән. Бер һүҙ менән — ғалим. Учалы районынан сыҡҡан тәүге ғалимдарҙың береһе. Һүҙҙе алғараҡ ебәреп, тағы шуны әйтергә кәрәк: оло ҡайғы килде ауылға: Һаҙый ағайыбыҙ, аттарҙы ҡотҡарам тип Өфө менән Учалы араһында сабауыллай торғас, Миәскә етмәҫ борон йөк машинаһынан осоп, фажиғәле рәүештә үлеп ҡуйҙы. Халыҡтың ниндәйҙер тамыры өҙөлгән һымаҡ булды. Хәтерҙә шулай ҡалған.

Тағы бер хәтирә. Бер Ҡужайға килгәнендә Юлдыбаевты һуғышта шофер булып снаряд ташып йөрөгән, ә унан ҡайтҡас, КТФ мөдире итеп тәғәйенләнгән Нур ағайым өйөнә йоҡларға алып ҡайтты. Кисәңге фронтовиктарҙың хәбәрҙәре күп булып сыҡты. Ҡунаҡ ағай Башҡорт кавалерия дивизияһында хеҙмәт иткән икән.

Башта ул, ҡыҙыҡ итеп, нисек дивизиялағы һауын бейәләрҙе һауырға ғәҙәтләнеп китеүе, бричкаһы артына ағас сапсаҡ беркетеп ҡуйыуы, һауылған һөттө шуға һалып йөрөүе, ә полктар бер туҡтауһыҙ хәрәкәттә булғанлыҡтан, һөттө бешкеләп тороуҙың кәрәге лә булмауы һәм ошо юл менән анһат ҡына эшләнгән ҡымыҙ менән күпмелер ауырыуҙарҙы һауыҡтырыуы хаҡында һөйләп ултырҙы. Унан дивизияның, рейдтан сыҡҡанда көслө ут аҫтына эләгеп, ҡот осҡос һәләкәткә осрауы, фронтты өҙөп, таң атҡанда бер бәләкәй генә урыҫ ауылы ҡаршыһына килеп сығыуҙары һәм ошонда, әтәс ҡысҡырғанын ишетеп, ҡыуаныуҙан ултырып илауын иҫкә алды. Мәңгегә хәтергә уйылырлыҡ, ғибрәтле хикәйәт ине был.

Һәм бына шул яугир ағай, ниндәй һынауҙар аша үтеп тә, тыныс ваҡытта тыуған өйө алдында тиерлек үлеп ятһынсы әле!

Донъяның яйы китһә, ҡоймаҡтың майы китә, ти. 60-сы йылдарҙа ауыл еренә йылдам рәүештә "техник прогресс" үтә башлап, ат фермалары кеүек "анахронизм" ҡаты шик аҫтына алынды. Шулай ҙа атһыҙ һыйыр, һарыҡ өсөн бесән әҙерләү мөмкин түгел ине әле. Атты һаман ектеләр, әммә көҙөн үҙе йыйған бесәнде ҡышын уның ашарға хаҡы юҡ ине инде. Уларға аҙыҡ нормаһы билдәләүҙән туҡтанылар, һыуыҡ ҡырға ҡыуып ебәрҙеләр: әйҙә, бүре ашаһын. Юҡ, ниңәлер бүре лә теймәне уға, ә төлкө ашаны. Эш шунда — совхозда яңы "производство" йә иһә ҡара төлкөләр фермаһы ойоштороп, ян-яҡ ауылдарҙағы алашаларҙы үлтереп, шуларға ташланылар.

Бына минең алда 50-се йылдар аҙағындағы мәғлүмәттәр ята. "АҠШ" ингән Поляковка совхозында 1957 йылда 1530 ат иҫәпләнгән. Ә артабан уларҙың һаны былай үҙгәргән: 1200, 800, 700. 1963 йылда ни бары 600 ат тороп ҡалған.

Атты халыҡ йәшереп кенә аҫырап ҡараны — бер ни килеп сыҡманы. Ундай кешеләрҙе иң наҙан, илде артҡа һөйрәгәндәргә индереп, эҙәрлекләй башланылар. Атҡа бер ынтылыуҙа менерҙәй егеттәрҙе запас частары ла булмаған емерек-һәмерек тракторҙарға ултырттылар, ләкин совхоз тормошо быиың менән генә яйға һалынманы. Сөнки ауылдың йәне һәм йәме һурып алынғайны инде. Техниканы ла рәтләп үҙләштермәгән, аттан да мәхрүм ҡалған ауыл ирҙәре тамам эштән яҙҙы. Хәҙер инде уларҙың хәтерлерәктәренә, өй алдына сығып супайып, Юлдыбаев ише изге, ат йәнле заттарҙы иҫләп ултыраһы ғына ҡалды.

# XV. Ил улы

1992 йылда Башҡортостан китап нәшриәте “Ҡайҙан һин, Матросов?” тигән китап баҫып сығарғас та, илебеҙҙең төрлө ерҙәренән автор исеменә көтмәгән ерҙәрҙән ғәжәпләнеү ҙә, һоҡланыу ҙа белдергән телеграммалар, хаттар яуа башланы. Почта килтергән был сәләмдәр, яҙма мөрәжәғәттәрҙең береһен генә иҫкә алып үтәйек (ул Күмертау районынан килгәйне): “Кешелек донъяға яралғандан бирле бихисап һуғыштар булып үткән. Сәбәптәре лә сығып ҡына торған: ер-һыу тип тә һуғышҡандар, дин, тел тип тә яғалашҡандар, мин-мин тип тә ҡан ҡойошҡандар. Ғәҙелдәре, ғәҙел булмағандары булған. Һәр һуғыш үҙ батырҙарын тыуҙырған, тарихҡа яҙып ҡалдырған, мәңге юйылмаҫлыҡ итеп халыҡтар күңеленә уйып һеңдергән. Уларҙың ҡайһы берҙәре, айырым халыҡтарҙың төҫө, бәҫе, символы рәүешендә бөтөн кешелек донъяһына таралған. Жанна Д’Арк, Искәндәр (Александр Македонский), Александр Невский, Салауат Юлаев, Муса Мортазин, Георгий Жуков һәм, әлбиттә, Александр Матросов (Шакирйән Мөхәмәтйәнов). Ул геройҙарҙың социаль сығышы ла бер төрлө түгел: батшалар ҙа, полководецтар ҙа, халыҡ араһынан сыҡҡандары ла булған. Араларында бөтөн кешелек тарихында ҡабатланмаҫ ҡаһарманлыҡтары менән айырылып, бөтөн кешелек донъяһында миллиондарға өлгө булып мәңге яҡты, һүнмәҫ йондоҙ кеүек балҡып торғандары ла бар. Ана шундайҙарҙың береһе — һуғыштар тарихында иң ғәрәсәтлеһе иҫәпләнгән Бөйөк Ватан һуғышы тыуҙырған герой Александр Матросов (Шакирйән Мөхәмәтйәнов). Уның ҡаһарманлығы миллиондарға өлгө булды. Матросов үҙенән һуң күпме милли геройҙар тыуҙырҙы. Уның батырлығын япон, америка илбаҫарҙары менән көрәшкәндә ҡытай патриоттары ла ҡабатланы.

Советтар Союзындағы ун бер меңдән ашыу Геройҙың исем-шәрифтәрен иҫтә тотоу мөмкин дә түгел. Кемде генә тотоп һораһаң да, күп тигәндә, ун биш-егерме геройҙы ғына әйтә алыр. Һәм, әлбиттә, иң беренсе итеп Александр Матросовты иҫкә алыр. Яңы ғына теле сыҡҡан бала ла, башҡа Геройҙың исемен әйтә алмаһа ла, Александр Матросовты һис тотлоҡмай әйтер. Сөнки Матросов ябай ҙа, бөйөк тә, һәр кемдең күңеленә яҡын да.

Беҙ быға тиклем Александр Матросов менән тиңдәшһеҙ батырлыҡ яһаған совет патриоты тип ғорурлана инек. Ә хәҙер инде эҙәрмәндәрҙең ныҡышмалылығы арҡаһында ул башҡорт халҡының ғорурлығы, Салауаттан ҡала икенсе милли геройыбыҙ булып үҙ халҡына ҡайтты...”Автор, Александр Матросовтың исеме беренсе булып телгә алына, ти. Хаҡ һүҙҙәр. 1990 йылда Мәскәүҙә Сәйәси



Ш. Мөхәмәтйәновтың 1936 йылда Ивановка ауылында
С. Матросов булып төшкән фотоһы

әҙәбиәт нәшриәте “Мәңгегә теркәлгәндәр” тигән ике томлыҡ белешмә баҫып сығарҙы. Китапҡа ғәскәри частар, караптар, хәрби уҡыу йорттары составтарынан тыш, айырыуса ҙур батырлыҡ күрһәткән Советтар Союзы геройҙарының исемдәре индерелгән. Араларында генералдар, маршалдар, икешәр-өсәр тапҡыр Алтын Йондоҙ менән наградланған кешеләр бар. Барлығы 783 кеше. Иң ихтирамлы, иң танылған батырҙар. Бына ошо исемлекте, һис бер алфавитҡа ҡарамай, Александр Матросов башлап ебәрә.

90-сы йылдарға тиклем беҙ Матросовтың сығышын, ысын исемен белмәй инек. Йәнәһе лә, зәңгәр күҙле, ерән сәсле рус егете Украинала тыуған да, Совет власы биргән мөмкинлектәрҙән файҙаланып, пионер галстугы тағып, артабан комсомолда тәрбиәләнеп, балалар йортонда йәшәп, тырышып уҡыған да, һуғыш башланғас, үҙе теләп фронтҡа юллана ла, Чернушки ауылы эргәһендә батырлыҡ күрһәтеп, һәләк була. Ябай ҙа, аңлайышлы ла схема. Ысынбарлыҡта иһә Матросов үткән юл ифрат ҡатмарлы ла, ғибрәтле лә булып сыҡты. Бәлки, ул төп батырлығын бала саҡта уҡ яһағандыр, тигән фекер тыуа. Дүрт йыл буйына йәмәғәтселек, айырыуса Учалы районының Ҡунаҡбай ауылы ветерандары ярҙамында алып барылған эҙләнеүҙәр һөҙөмтәһендә А. Матросовтың ысын исеме Юныс улы Шакирйән булыуы асыҡланды.

Ҡыҫҡаса уның биографияһы шуға ҡайтып ҡала: Шакирйән 1923 (24) йылда Башҡортостандың Учалы районы Ҡунаҡбай ауылында бик тә фәҡир йәшәгән ғаиләлә донъяға килә. Был ярлылыҡ тәүге нәүбәттә атаһы Юныстың ғәрип булыуына бәйле. Ауылдаштарының хәтерләүенсә, Юныс йәш сағында уҡ ҡатыны Мөслимә (Сәфәр ауылынан Хәйбулла ҡыҙы) менән Себер яғына эш эҙләп сығып киткән була. Унда кулактарҙан туҡмалып, аяғы ыҙғарлана, күҙҙәре лә һуҡырая. Мөслимә лә ауырыуға һабыша һәм, өсөнсө баланан ҡотола алмай, Учалыла, район үҙәге дауаханаһында донъя ҡуя. Әсәһенән алты йәштә генә тороп ҡалған Шакирйән колхоз идараһында йыйыштырыусы булып эшләгән үгәй әсәһе Фәрхиямал ҡулына күсә. Дөрөҫөрәге, малай, күберәк һуҡыр атаһын етәкләп, өйҙән-өйгә йөрөй, шулай тамаҡ аҫырай. Уның бөтөн зарлы көндәре ауылдаштары алдында үтә — шуға күрә етем баланың интегеүе бөтөн Ҡунаҡбай кешеләренең хәтеренә һеңә.

1932 йылда уның ауыл мәктәбенең икенсе класында уҡып йөрөүе билдәле, фотоһы ла һаҡланған, ә сама менән 1936 йылда, үткенсе сиғандарға эйәреп, ул ауылды ҡалдыра. Йөрөтәк халыҡ менән оҙон-оҙон юлдарҙа күпме михнәт сигеп йөрөгәндер — әйтеүе ҡыйын, шуныһы ғына бәхәсһеҙ: ул бик шәп бейергә һәм гитарала уйнарға өйрәнеп ала. Яҙмыш Шакирйәнде Өфөгә алып килә, ул Балалар ҡабул итеү пунктына барып эләгә, унан башҡорт малайҙары төркөмөндә Стәрлетамаҡҡа оҙатылған булһа кәрәк (был хаҡта әлегә документ табылманы). Артабан Шакирйәндең ике-өс ай матростар араһында йөрөүе тураһында мәғлүмәт бар. Бында ул һыуҙа йөҙөргә, пароходтан һикерергә оҫтарып ала. Шул ваҡыт “Сашка”, “Саша-матрос” ҡушаматтарын үҙләштергән теремек егеттең артабанғы эҙен беҙ Ульяновск өлкәһенең Мәләкәс (хәҙерге Димитровград) ҡалаһында табабыҙ. Бында ул бер-бер артлы ике балалар йортон алмаштырып өлгөрә. Быны 1935—42 йылдарҙа Н. Крупская исемендәге 25-се балалар йортонда уҡыу-уҡытыу бүлеге мөдире булып эшләгән Е. Н. Сатышева һәм ошонда уҡ тәрбиәсе булған А. В. Миникаева-Урманова яҡшы иҫләй. Тәүгеһе, Сашаны Украинанан түгел, ә Өфө аръяғынан, ҡайҙандыр Уралдан килгәйне, тиһә, икенсеһе Сашаның мосолман малайы икәнлеген раҫлай һәм үҙенең башҡа тәрбиәселәргә бик үк “баш бирмәгән” малайҙы Ивановка балалар йортона алып барып тапшырыуы тураһында һөйләй.

Ивановкала мал ҡарашып, иген игеүҙә ҡатнашып, күгәрсен, ҡуян үҫтереү менән мауығып, байтаҡ хеҙмәт күнекмәләре алғас, инде 7-се синыфты тамамлаған егетте, һөнәр алыу өсөн, Һамар ҡалаһына алып китәләр һәм Масленников исемендәге вагон ремонтлау заводына урынлаштыралар. Үкенескә ҡаршы, ул бында

оҙаҡҡа тукталмай. Эш, йәшәү шарттары ла бик алама була. Егет Һарытауға юллана һәм ошонда, паспорты булмау сәбәпле, милиция ҡулына эләгә. 1940 йылдың 8 октябрендә Сашаны ҡаланың Фрунзе район суды, яуаплылыҡҡа тарттырып, Өфөгә, балалар хеҙмәт колонияһына оҙата.

Яңы урын, яңы шарттар. Тәртипһеҙлектәр ҙә етерлек. Күберәк ҡатын-ҡыҙҙарҙан ғына торған тәрбиәселәрҙе малайҙар тыңламай. Һәм үҙ ғүмерендә инде күпте күргән Саша көслөрәк һигеҙ-туғыҙ егеттән бер төркөм ойоштороп алып, колонияла тәртип урынлаштырырға тотона, көсһеҙҙәргә яҡлаша, яҡын-тирәләге ҡалаларға, тимер-юл станцияларына барып, колониянан ҡасҡан малайҙарҙы тотоп, кире килтереп йөрөй: эшкә күнекһендәр, уҡып белем алһындар. Был ынтылыш уға колонияла, Өфө урамдарында һәм, ғөмүмән, Тыуған илдә үҙен хужараҡ, һәр нәмәгә яуаплыраҡ тотоуҙан килгәндер, тигән һығымта яһала.

Ләкин тап бына Өфөлә саҡта Саша үҙенең "тыуған" төйәген билдәләй, хеҙмәт колонияһы етәкселәрен алдап, "мин Днепропетровскиҙа тыуғанмын", тип белдерә. Ни өсөн шулай ҡылана ул? Уның менән колонияла бергә йәшәгән кешеләр — мәсәлән, Салауат ҡалаһынан Р. Сәйфетдинов һәм Х. Бакыев, Өфөнән В. Калмыков — бының сәбәбен бик еңел аңлата: "Колония етәкселеге, кемдең ҡайҙан икәнен белеп ҡалһа, шунда уҡ ауыл Советтары менән бәйләнеш булдырып, балаларҙы тыуған ауылдарына оҙатырға тырыша торғайны. Ә кемдең аслыҡ һөргән колхозына ҡайтҡыһы килһен? Бында бит ашаталар, йоҡларға һалалар, кейемен дә бирәләр. Шуға күрә барыһы ла тиерлек адрестарын йәшерә йә бутай ине. Ә көндәр йылына башланымы — ҡасалар. Шулай йәшәнек инде..."

Ә нисек һуң Шакирйән рус булып киткән? Осрашыуҙарҙа уҡыусылар күберәк шул һорауҙы бирә. Быға бер-нисә миҫал менән генә яуап ҡайтарайыҡ.

Ивановка балалар йортонда Саша менән бергә тәрбиәләнеп йөрөгән, уның дуҫы булған Федя Хәсәновты Ульяновск ҡалаһында табып, өйөнә кереү менән үк: "Һаумыһығыҙ, Федор Иванович! Ә ни өсөн Хәсәнов?" — тип һораным. Федор Иванович көлөп ебәрҙе лә былай тине: "Мине элек Малай Иванович тип йөрөтә торғайнылар. Һуңынан ғына Федор Ивановичҡа әйләндем. Ә ысын исемем — Фәйҙрахман Хәйруллович. 1981 йылда пенсияға сыҡҡанда ғына үҙ фамилияма ҡайттым".

Шул уҡ Ульяновск өлкәһендә Сарҙаҡлы районының Иҫке Үрәнбаш ауылында Иван Иванович Әҡсәнов йәшәй. Ул Матросов Ивановка балалар йортонда булған саҡта директорҙың сәйәси эш

буйынса урынбаҫары вазифаһын башҡарған. Танышып, һөйләшеп ултыра торғас, уҡытыусы пенсионер Иван Ивановичтың да Исмәғил Ибраһимович булыуы асыҡланды.

Ошолай башҡорт, татар балаларының русҡа әйләнеү миҫалы Ульяновск, Силәбе өлкәләрендә — аҙым һайын. Һәм был асылда ҡурҡыныс хәлгә берәү ҙә — элек Димитровград ҡалаһының балалар йортонда Сашаны үҙ төркөмөндә тәрбиәләгән А. В. Урманова-Миникаева ла, директор урынбаҫары Е. В. Сатышева ла, Сашаны Өфө буйынса белгән Н. Я. Шестакова ла, Силәбе өлкәһенең Аша ҡалаһында йәшәүсе П. А. Халтурин да — ғәжәпләнмәй.

Автор исеменә килгән йөҙҙәрсә хаттың икеһен генә килтерәйек. Тәүгеһен Ҡунаҡбай ауылында тыуған, ә хәҙер Силәбе өлкәһендә йәшәгән Ҡәүи Баҡыев яҙа: “Мин Шакирйән менән Ғәзнәүиҙең 1939 йылда ауылға ҡайтҡанын хәтерләйем. Мин ул саҡта алты класты тамамлағас, үҙемде бик белемле һанай инем, үҙем русса ике-өс һүҙ ҙә белмәйем. Ә бына Шакирйән менән Ғәзнәүи, ҡараусыһыҙ булһа ла, русса оҫта һөйләшә. Мин уларға “Саша”, “Гриша” тип өндәшеүҙәренә бер ҙә аптырамайым. Мине бында, мәҫәлән, “Костя” тип йөрөтәләр. Миңә оҡшап етмәй, әлбиттә, ләкин әйтә бирһендәр, уның өсөн судлашып булмай бит инде.

1948—1950 йылдарҙа һуғышта яраланып Лоҡман ағай Ғирфанов ҡайтып төштө. Әле лә хәтеремдә: “Теге Александр Матросов тигән герой Юныс ағайҙың улы булып сыҡты бит”, — ти.”

Ә хаттарҙың быныһы Өфөнән. Һуғыш ветераны М. У. Горланов яҙа: “Шакирйәндең Александр булып китеүенә ниңә аптырарға? Был уның батырлығын кәметәме ни? Һуғышта паспорт мәғлүмәттәре кәрәк булдымы һуң? Теләгән һәр кем фамилияһын алмаштыра ала ине. Берәүҙең дә, бигерәк тә 17—18 йәштәгеләрҙең, паспорты булманы бит. Мин сит фамилия менән һуғышып йөрөгән тиҫтәләрсә кешене әйтә алам. Минең атайым, мәҫәлән, хәрби билеты буйынса 1918 йылда тыуған Әхмәров ине, ә ауылда уны Горланов тип иҫәпләнеләр. Наградаларҙы Әхмәров булып алды, Әхмәров булып үлде, ә шул фамилияны һора — ауылда берәү ҙә белмәҫ... Эш фамилияла түгел, ә кешенең үҙендә, шәхестә”.

...Саша фронтҡа китергә йыйынғанда ла элеккесә, күнеккәнсә: “Минең тыуған ерем — Днепропетровск”, — ти. Бар, эҙләп ҡара. Ләкин уның ошо шуҡлығы һуңынан бөтөн буталсыҡтарға сәбәпсе була.

Ә бит шул арала Саша форсат тыуған һайын Һамар икән — Һамарҙан, Һарытауҙан икән — Һарытауҙан, Өфөнән икән — Өфөнән Ҡунаҡбайына ҡайтып йөрөй. Һуғышҡа китер алдынан да

була ул Учалыла. Был көндө ҡунаҡбайҙарҙың күбеһе хәтерләй. Атаһы йыр сығара:

*Шакирйәнем китте, һай, һуғышҡа,*
*Учалыҡай ғына ла юл менән;*
*Китә генә торғас, ҡул болғаны,*
*Ҡалаһығыҙ, тигән уй менән.*
*Самауыр ҙа ҡойҙом, һай, ҡайнарға,*
*Ҡарағайҙан булды күмере,*
*Ғәзиз генә балам Шакирйәндең*
*Ҡыҫҡа ғына булды ғүмере...*

Шакирйәндең атаһына әйтеп киткән һүҙҙәре лә халыҡ хәтерендә һаҡланған. “Мин хәҙер фамилиямды ла, исемемде лә үҙгәрттем. Минең фамилиям — Матросов, исемем Сашка... Атай, мин һуғышҡа китәм. Әгәр үлһәм, мине Матросов Александр тип эҙләрһең”, — ти ул.

Сашаны тура фронтҡа ебәрмәйҙәр. 1942 йылдың сентябрендә ул Ырымбур эргәһендәге Краснохолм хәрби-пехота училищеһында уҡып йөрөй. Ләкин курсанттар офицер званиеһы алып өлгөрмәй — фронттағы хәлдәр ифрат ҡырҡыулашып китеү сәбәпле, уларҙы 1943 йылдың ғинуарында һуғышҡа, алғы һыҙыҡҡа оҙаталар.

Бына фронт. Аяуһыҙ ҡаты һуғыштар барған Калинин фронты. Совет ғәскәрҙәре, гитлерсыларҙы ҡыйрата-ҡыйрата, алға ынтыла. Ләкин тырышыу файҙаһыҙыраҡ: дошман ифрат көслө. Ул юл өҫтөндәге Чернушкиға беҙҙекеләрҙе яҡын ебәрмәй. Матросовтарҙың батальоны урман ситендәге асыҡ урынды йүгереп үтергә тейеш. Тик быны эшләп булмай. Күтәреләләр — шунда уҡ немец пулеметтары тырылдарға тотона. Байтаҡ егеттәр баштарын һалды ла инде. Ҡайһылары — Ырымбурҙан, ҡайһылары — Башҡортостандан. Бергә-бергә занятиеларға йөрөп, саңғыла тиҫтәләрсә километр үткән аҫыл егеттәр. Ифрат етдиҙәре, шаянырaҡтары бар — бөтөнөһө лә, илебеҙҙе һаҡлайбыҙ, тип күтәрелеп сыҡҡан. Әммә алға бара, ҡушылған бурысты еренә еткерә алмайҙар. Фашистарҙың аяуһыҙ уты киҫә лә һала. Ахыр сиктә ДЗОТ-ҡа табан Матросов шыуышып китә. Ыҡсым, еңел кәүҙәле ул. Немец уға ҡарай ата ла ата, тик йылан һымаҡ борғоланған егетте сәпкә тота алмай. Бына Матросов ДЗОТ-ҡа яҡынлаша. Биленән гранатаһын ала. Һәлмәкләп, алға ырғыта. Шартлау ишетелә. Тик... пулемет саҡ ҡына тынып тора ла, тағы ут бөркә башлай. Ә артта — Матросовтың иптәштәре. Ни эшләп ҡарарға? Һәм Матросов берҙән-бер ҡарарға килә. Һуңғы аҙымын яһай...

Шакирйән белмәй, әлбиттә, ниндәй оло эш эшләүен. Уны йылдар буйына данлаясаҡтарын, уға ғына бағышлап йырҙар йырлаясаҡтарын. Шулай ҙа һуңғы секундында тыуған Ҡунаҡбайын, баласаҡта һыу ингән Ҡандыболаҡты күҙ алдына килтергәндер, моғайын. Үлер алдынан күптәр шулай тыуған төйәген иҫләй, тиҙәр, дөрөҫ булһа. "Әгәр мин үлеп ҡалһам, атай, мине Матросов исеме менән эҙләрһең", тип киҫәтеүе лә башына килгәндер, бәлки.

Әсенешлеһе бында шул: улым герой булып үлде, тип йөрөгән Юныс та, ул беҙҙең ауыл егете ине, тип, шаулашҡан ҡунаҡбайҙар ҙа дөрөҫлөктө иҫбатлай алманы. Бәлки, мөғжизәләр тыуып, Шакирйән иҫән ҡалһа һәм ауылына ҡайтып төшһә, быны үҙе иҫбатлар ине? Юҡ, үҙе лә булдыра алмаҫ ине. Ни өсөн һин әлегә хәтлем Матросов булып йөрөнөң, ә Герой исемен алғас, Мөхәмәтйәновҡа әүерeләһең, тип бәйләнерҙәр ине. Иң юғарғы органдарҙа "зәңгәр күҙле, ерән сәсле рус егете" булып бер ҡасан да үҙгәрмәйәсәк тамға менән тамғаланғайны ул. Хәҡиҡәтте асып ҡара!

Тағы бер хаттан өҙөк: "Александр Матросовтың үҙ халҡына Шакирйән булып ҡайтыуы еңел булмаясаҡ. Әле мең төрлө ҡаршылыҡтар килеп баҫасаҡ. Хатта иң юғары инстанцияларҙың да ишектәре ябыҡ буласаҡ. Беҙ бары үҙ халҡыбыҙ көсөнә, патриотизмына, рухыбыҙ көсөнә генә таяна алабыҙ. Яу-дау кәрәк буласаҡ".

Ысынбарлыҡта шулай булып сыҡты ла. Эҙәрмәнлек эше тамамланыр алдынан айырыуса нык һиҙелде был. Башта үҙебеҙҙең "Советская Башкирия", уға эйәреп, Мәскәүҙең "Советская Россия" гәзиттәре эҙәрмән журналисты "һөрһөгән милләтселек"тә ғәйепләп сыҡты, хатта яҡын күреп йөрөгән таныштар ҙа аҫтыртын көрәш башлап ебәрҙе, янап, хаттар ырғытып китте.

Күп һыуҙар аҡты инде был ваҡиғаларҙан һуң. Ә аптырау, Шакирйән яһаған аҙымға һоҡланыу һаман үтмәй. Элекке хистәр бөгөн дә һүрелмәй, һорауҙар ҙа эйәреп йөрөй: бер нимәһе менән дә айырылып тормаған ҡәҙимге башҡорт ауылында тыуып, беҙ һулаған һауаны һулап, таныш тауҙарға ҡарап үҫкән малайҙың, яугир ҡорона ингәс, ут аҫтында ҡуҙғала алмай ятҡан иптәштәрен ҡотҡарам тип, ғүмерен бер килке лә йәлләп тормайынса, дошман өҫтөнә ташланыуы һаман таң ҡалдыра. Был батырлыҡтың нигеҙе нимәлә?

Ошо мәсьәләгә һәр кемдең үҙ ҡарашы, үҙ аңлатмаһы бар. Миндә иһә, Шакирйәндең ҡыҫҡа ғына ғүмерен тикшереп сыҡҡас та һәм уны яҡшы белгән кешеләргә һорау артынан һорау биреп яуаптарын тыңлағас та, өс-дүрт фекер төйнәлде. Улар бына нимәгә ҡайтып ҡала ине.

Ульяновск өлкәһендәге Ивановка балалар йортонда һәм Өфө хеҙмәт колонияһында Саша Матросов менән бергә тәрбиәләнгән

үҫмерҙәр беренсе сиратта уның бигерәк теремек, “бер ҙә тиктормаҫ” булыуын күҙ алдына баҫтыра. Берәүҙәр Матросовтың уҫалыраҡ малайҙар алдында бер ҡасан да ҡаушап, йомшап төшмәүен хәтерләргә тотона, икенселәр уның баҙауыраҡ, әле генә ауылдан килгән башҡорт, татар малайҙарына яҡлашыуын, рәнйетелгәндәргә, йәберләнгәндәргә ярҙамға килеүен һөйләй. Тимәк, яманға — яман, яҡшыға яҡшы булған.

Бынһы — беренсе сифаты. Икенсеһе шул: элек Саша менән йәнәш балалар йорттарында үҫкәндәрҙең хәтерләүенә ҡарағанда, ул ҡасҡан малайҙарҙы тотоп, кире колонияға алып ҡайтыуҙы үҙенең бурысы итеп ҡуйған. Аҙып-туҙып йөрөмәһендәр, бәлә-ҡазаға осрап, астан ятып үлмәһендәр, һөнәр алһындар, тигән һымаҡ. Йәғни үҙендә лә ил тойғоһо тәрбиәләгән. Ә һуғыш башланып, Чкалов (хәҙерге Ырымбур) өлкәһенең Краснохолм хәрби-пехота училищеһында бергә уҡығандарға һәм Калинин фронтындағы яуҙаштарына ризыҡ етмәгәндә, уның, әмәлен табып, ҡайҙандыр аҙыҡ килтереүен, походтарҙа башҡаларҙан алдараҡ булып сығыуын иҫләйҙәр. Бынһы инде Матросовтың тормош ауырлыҡтарына нығыраҡ күнеккән булыуынан, тиңдәштәре тураһында хәстәрлек күрергә тырышыуынан килә.

Ауылдаштары быларҙы бик үк әйтә алмай, сөнки Шакирйән Ҡунаҡбайҙа саҡта бик бәләкәй була әле. Шулай ҙа зәғиф атаһы менән өйҙән-өйгә йөрөгән сағында бәләкәс йөрәген ауыл кешеләренең изге тойғоһо менән йылыта. Моғайын, шуғалыр ҙа тыуған яҡтарын ҡурсалау теләге уның төп егетлек сифатына әүерелә.

“Ҡайҙан һин, Матросов?” тигән китап донъя күргәс, был юлдарҙың авторына республиканың төрлө мөйөштәрендә уҡыусылар менән осрашырға тура килде. Мәләүез ҡалаһында үткән ҙур кисәлә бер уҡыусы егет шундай һорау бирҙе:

— Ағай, бына һеҙ милләтем дә милләтем, тиһегеҙ. Ә Матросов тураһындағы фаразығыҙ дөрөҫләнмәһә, һеҙ шул милләтегеҙҙең күҙенә нисек ҡарар инегеҙ?

Эҙләнеүҙәрҙе һаман дауам иттергән һәм күп нәмәләргә шикләнеңкерәп ҡараған журналист өсөн ҡот осорлоҡ һорау ине был! Эйе, уйың дөрөҫкә сыҡмаһа, ят та үл инде. Ләкин бында шуны ла әйтеп китергә кәрәк: мин үҙемде һуғышта разведкаға барыусы яугир һымағыраҡ тоя башлағайным инде. Сөнки ҡаршыға таш ырғытыусылар, башланған эште бысраҡҡа буярға тырышыусылар күбәйеп китте бер мәлдә. Эҙләнеү барып сыҡмаһа, уларҙың журналисты мәсхәрәләп, иҙгеләп ташлаясағы көн кеүек асыҡ ине. Мин, шул аяныс хәлде лә йәшереп тормайынса, һорау биргән егеткә Ҡунаҡбай халҡы йыйған дәфтәр-дәфтәр дәлилдәре, Матросов

менән бергә йәшәгән кешеләрҙең хаттары, уларҙың өмөт тулы күҙ ҡараштары, йөҙҙәрсә һуғыш ветерандарының, интеллигенция вәкилдәренең, көс-ҡеүәт биреп, әңгәмәләшеп тороуҙары тураһында һөйләнем.

Йөҙҙәрсә яҡлашыусыларым бар тип, юҡҡа ғына әйтмәгәйнем. Мин беренсе сиратта шағирҙарҙы — Сафуан Әлибайҙы, Ғәзим Шафиҡовты, Һибәт Мәхмүтте, Абдулхаҡ Игебайҙы, һуғыш ветераны Муса Билаловты күҙ уңында тота инем. Өҫтәүенә бер көндө оло шағирыбыҙ Хәким Ғиләжев шылтыратты.

— Яҙғандарыңды уҡып барам, — тине ул. — Дөрөҫ юлдан бараһың. Һин минең "Ил улы"н да уҡы әле.

Шулай тине лә терефон трубкаһын һалды. Мин уйға баттым: ни өсөн "Ил улы"? Баҡһаң, ҡасандыр Хәким Ғиләжев тә Матросов темаһы менән ҡыҙыҡһынған, материал йыя башлаған һәм, бының һөҙөмтәһе булараҡ, ҙур поэма тыуған.

Поэмала төп образ — етемлектә үҫеп кеше булған, үҙендә ил хужаһы тойғоһо тәрбиәләгән һәм һуғыш ҡырында ятып ҡалған ғорур күңелле Сабир Мәрҙәнов. Шағир Матросовты Мөхәмәтйәнов тип атамаған, ләкин шул атамаға килеп терәлгән. Мин иһә, поэманы уҡып сыҡҡас, ошо ике егеттең бер-береһенә ни тиклем оҡшағанлығына хайран ҡалдым. Ғиләжев берәй документ тапҡанмы, әллә һиҙгер шағир йөрәге быны әшкәрткәнме — белеп булманы. Әммә иң мөһиме шул ине: Сабир менән Шакирйәнде бөтөн ил, бөтөн халыҡ тәрбиәләгән, ә Тыуған иленең хәле ҡыл өҫтөндә тороп ҡалғанда, йәлләмәйенсә ғүмерҙәрен биргән бер үк кеше итеп күрә башланым. "Ил улы"нда Сабир әйтә:

*Мине мал тип белдегеҙме?*
*Мин бит кеше! Шуны аңлағыҙ!*
*Ҡағыҙ яҙмыш миңә кәрәкмәй...*
*Азатлығым — тәбиғәтем минең,*
*Һуңғы һулышым да шул булыр.*

"Һуңғы һулышым да азатлыҡ булыр" — Шакирйән Мөхәмәтйәновтың да һүҙҙәре һымаҡ был.

*1992 й.*

# XVI. Батыр ғүмере — ике

Әҙәм ғүмере, ғөмүмән, бик ҡыҫҡа. Ә инде егерме йәште ғүмер тип тә булмайҙыр. Яҡты донъяға тыуып, кешенең яңы ғына аяҡ баҫҡан мәле был. Шунлыҡтандыр, моғайын, ҡайһы бер йәштәрҙең тормоштарының башында уҡ таң ҡалырлыҡ яуаплы, берҙән-бер дөрөҫ ҡарарға килә алыуы, тәүәккәл аҙым яһауы менән мәңгегә халыҡ хәтерендә тороп ҡала.

Әлегә тиклем беҙ уның хаҡында бер ни белмәй инек. Хат алыша торғас ҡына донъя йөҙөндә Александр Матросовтан башҡа, уның үлемһеҙ ҡаһарманлығын ҡабатлаған һәм инде исемдәре йәмәғәтселеккә билдәле булған яугирҙарҙан тағы бер һоҡланғыс батыр булғанлығы асыҡланды. Уның аты — Әхмәтғәли Мөхәмәҙиев.

Егерме йәшлек яугир Мөхәмәҙиевтың һуғыш юлдары бик ҡыҫҡа. 1943 йылда һуғышҡа алына. Яралана. Госпиталдә ята. Дауаланып сыҡҡас, тағы алғы һыҙыҡҡа ебәрелә. Ике ай үткәс, 1944 йылдың февралендә, иптәштәре менән разведкаға барып, ике “тел” алып ҡайта. Күрәһең, совет ғәскәрҙәренең хәл иткес һөжүмгә күсер алдынан ҡаршы яҡтың күпме көс барлығын белеү бик тә кәрәк булғандыр һәм ул дөрөҫ мәғлүмәттәр ала алғандыр, тип уйларға батырсылыҡ итәбеҙ, сөнки ошо операциянан һуң Әхмәтғәли Мөхәмәҙиевты III дәрәжә “Дан” орденына тәҡдим итәләр. Ә разведчиктар ҡараңғы февраль төнөндә тағы разведкаға китә. Командованиеның приказы ҡыҫҡа һәм бик ҡәтғи була: “контроль” өсөн йәнә немецты алып ҡайтырға.



А. Матросов (Ш. Мөхәмәтйәнов) батырлығын ҡабатлаған Әхмәтғәли Мөхәмәҙиевҡа Димитров ҡалаһында (Украина) ҡуйылған бюст

Төркөм дошман блиндажына барып юлыға.

Әҙәмде әҙәм йәлләмәгән аяуһыҙ алыш башлана. “Бөйөк Германия” дивизияһының бер остоғо ғына нығынып алған була блиндажда. Фрицтарҙың бер ефрейторын эләктереп, башҡаларын урындарында дөмөктөрөп, тиҙерәк ысҡыныу яғын ҡарай разведчиктар.

Ләкин гитлерсылар ҙа аңшай түгел — һиҙеп ҡалалар, шау ҡуптаралар, һәм... разведчиктар тоҙаҡҡа эләгә. Берҙән-бер сигенер юлды ҙур калибрлы пулеметтың уты киҫә. Ни эшләргә? Бына шунда Әхмәтғәли Мөхәмәҙиев тәүәккәллек күрһәтә лә инде: биленә танкыға ҡаршы ҡулланыла торған гранаталар ҡыҫтырып, ул үлем һирпкән ДЗОТ-ҡа ташлана.

Нисә егет улар, иптәштәренең уңышы өсөн бына ошолай күрәләтә ғәзиз баштарын һалғандар? Александр Матросовҡа (Шакирйән Мөхәмәтйәновҡа) эйәреүселәр генә лә бер нисә йөҙ. Былары күпме-аҙмы билдәлеләре. Ә билдәһеҙҙәре?

Ә. Мөхәмәҙиевтың батырлығы хаҡында беренсе тапҡыр 1986 йылда Донецк өлкәһе Димитров ҡалаһының “Советский шахтер” журналы, уның артынса Татарстандың Мамадыш ҡала гәзите яҙып сыға. Ә Башҡортостандың ниндәй ҡатнашлығы бар бында?

Хикмәт шунда: “матросовсы” Әхмәтғәлиҙең берҙән-бер ҡустыһы Минниғәли Мөхәмәҙиев Миәкә районының Новый Мир ауылынан беҙгә хәбәр ебәрҙе. Бына нимә яҙа ине ул: “Беҙҙең олатай, Миңлевафа, Дим ауылында тыуған, милләте башҡорт. 1894 йылда етем малайҙы Миәкә волосынан Мәләкәс ҡалаһына татар алпауытына батраклыҡҡа биреп ебәрәләр. Шунда ялсы булып эшләй, шунда өйләнә. Ләкин 1904 йылда ҡыҙҙары тыуғас (беҙҙең буласаҡ ҡарт инәйебеҙ Фатима), бай “әрәм тамаҡ” йәштәрҙе йортонан ҡыуып сығара. Инде ҡайҙа барып һыйынырға? Олатайым, аптырағас, Донбасҡа сығып китә һәм ошонда торорлоҡ мөйөш, тәғам итерлек ризыҡ таба, украин халҡының иғтибарын тоя...

Байтаҡ ғүмер үтә шунан бирле. 1923 йылда Әхмәтғәли донъяға килә. Атаһы — башҡорт, инәһе — татар. Әммә яҙмыштан уҙмыш юҡ, тиҙәр: 1933 йылдан алып Татарстанда бер аҙ йәшәгәндән һуң, ҙур ғаилә кире Донбасҡа китә, ләкин... Әхмәтғәли икенсе ғаиләлә булып сыға: был юлы тәҡдир биргән һәм тәрбиәләгән әсәһе — мәрйә, шулай уҡ уны ҡабул иткән атаһы — украин. Бер һүҙ менән, дүрт яҡтан — башҡорт, татар, урыҫ һәм украиндың — дүрт милләттең йылыһын тойоп үҫә ул, шахтала электрослесарь булып эшләй.

Шуны әйтәйек, Әхмәтғәли аҙ йәшәһә лә, уның биографияһы ахырына тиклем асыҡланмаған. Мәғлүмәттәр туплауҙа, батыр егеттең иҫтәлеген мәңгеләштереүҙә уның ҡустыһы Миңлеғәли Мөхәмәҙиев күп көс һала, Әхмәтғәлиҙең фронтташтары, 960-сы полк

разведчиктары Игнатьев, Бондарь, Бикбулатов, Жариковтарҙы эҙләп таба. Уға Донбасс, Татарстан журналистары ярҙамлаша. Ошо изге эште башҡарыусыларҙың береһе Димитров ҡалаһының 94-се профессиональ-техник училищеһы уҡытыусыһы Э. Чуприна бына ни яҙа: “Минең өсөн барыһы ла Димитров ҡалаһына килгәс башланды. Күршелә генә шахтер Семкиндар йәшәй ине (Федор Афанасьевич ҡатыны Ольга Васильевна менән). Нисектер бер көндө Ольга Васильевна үҙе ҡарап үҫтергән малайҙарҙы, улар араһында Әхмәтте лә хәтерләп ултырҙы. Нисек уҡыуын, нимә тураһында хыялланыуын иҫкә төшөрҙө. Әхмәттең үлеп ҡалыуына ифрат ҡайғырыуын белдерҙе... 94-се СПТУ-ға күскәс, мин коммунист С. С. Копачев ойошторған “Хәстәрлекле ҡулдар” тигән отряд эшендә ҡатнаша башланым. Киләсәктә таусылар буласаҡ йәштәр хеҙмәт ветерандарына, һуғышта үлгәндәрҙең ғаиләләренә ярҙам күрһәтә ине. Мин уларға Семкиндар һәм Әхмәт тигән улдары тураһында һөйләнем. Шунда һорауҙар тыуҙы һәм көтмәгәндә беҙ уның ҡәрҙәштәрен эҙләргә тотондоҡ. Уны элек белгән кешеләрҙе, берҙән-бер фотоһын таптыҡ...”

“Грузский ауылында туғандар ҡәберлегендә ятҡан Әхмәтебеҙгә: “Ҡәҙерле Әхмәт Мөхәмәҙиевҡа — Димитров шахтерҙарынан” тигән яҙыу яҙып, венок һалдыҡ”, — тип өҫтәгәйне артабан хат авторы.

Битараф уҡып булмай ине был юлдарҙы. Әллә инде хәҙер халыҡтарҙың үҙ-ара мөнәсәбәттәре киҫкенләшеп, ошолай, кемдең ниндәй милләттән булыуына ҡарамайынса, әҙәм затының ысын кеше сифаттарын күрһәтеүенә һыуһаныҡмы? Шулайҙыр. Э.Чуприна үҙенең хатында бына тағы нимәләр һанай: мәйет ерләнгән урамға Әхмәтғәли Мөхәмәҙиевтың исемен биргәндәр. Димитров ҡалаһында ла уның исемен йөрөткән урам бар. Әхмәтғәли эшләп киткән Г. М. Димитров исемендәге шахта эргәһендә мемориаль таҡтаташ ҡуйылған.

Халыҡ тотош ил бойондороҡһоҙлоғо өсөн ғүмерҙәрен ҡыҙғанмаған бер кемде лә онотмай әлегә. Онотмаҫҡа тейеш тә. Был илебеҙҙәге һәр милләттең иң гүзәл сифаттарының береһе.

*1992 й.*

# XVII. Ун бер яугир

Хәкимйән Әхмәтғәлин һәм уның яуҙаштары хаҡында яҙырға ултырғас та Учалы районының Сәфәр ауылынан хат килеп төштө. Эҙәрмән хәбәрсе, элек ауыл Советы рәйесе булып эшләгән Жәүҙәт Ғариповтың асыу ҡатыш яҙған сәләме ине ул. Бына нимә белдерә яҡташ: “144-се бейеклектә башланып киткән ҡан ҡойош, ошо яуҙа ҡатнашҡан ҡаһарман егеттәр тураһында күп һөйләнеләр, күп яҙҙылар. Белгәне лә, белмәгәне лә. Ҡайһы бер иптәштәрҙең тарихҡа битараф булыуы һәм ысынбарлыҡты боҙоп күрһәтеүе бик асыуға тейә. Мин иң тәүҙә татар яҙыусыһы Самат Шакирҙың Хәкимйән ағай тураһында бөтөнләй булмағандарҙы күрһәтеүен күҙ уңында тотам. Батырҙың батырлығын ҡабартып күрһәтеп, үҙҙәренә халыҡ алдында абруй ҡаҙанырға йөрөүсе етәксе иптәштәргә лә оят булырға тейеш. Мин һаман да С. Шакирҙың китабы хаҡында һүҙ йөрөтәм. Уҡыусыларымдан ғәфү үтенәм: беҙҙең башҡорт, тел асылғанда әйтеп ҡалайым, ти бит. Мин дә, шул ҡағиҙәне боҙмаҫҡа тырышып, Советтар Союзы Геройы Әхмәтғәлингә ҡағылған ваҡиғаларға туҡталып китмәксемен... Хәкимйән ағай “Алабай урманында һунарға йөрөү” (С. Шакир һүҙҙәре) түгел, ҡулына мылтыҡ та тотмаған, бик баҫалҡы, тәртипле, ғәҙәттәге ауыл малайы ине. Ләкин тормош үҙенекен итә икән: һуғышта килеп тыуған шарттар уны, өлкән сержантты, офицерҙар вазифаһына тиклем “күтәргән”. Уныһы ла ниндәй вазифа бит әле — разведка взводына етәкселек итеү! Ошо сифатында ул 144-се бейеклеккә, һуңғы ҡанлы алыш ҡырына китә...”

Асылда хат авторы тыуған яҡты, уның күренекле кешеләре тормошон өйрәнеүселәрҙең үҙ выждандарына тоғро булыу-булмауы, тарих һәм йәмғәтселек алдында күтәргән яуаплылыҡтары тураһында һүҙ ҡуҙғатмаҡсы ине. Ысындан да, уның, тәғәйен Әхмәтғәлин мәсьәләһенә килгәндә, быны эшләргә тулы хоҡуғы бар ине. Сөнки эҙәрмән Ғарипов, 1963 йылда уҡ әле Хәкимйәндең атаһы Рәхимйән бабай, инәһе Фәхерниса әбей, ҡустыһы Закирйән менән бергәләп, Латвияның Лудза ҡалаһына барып, Сунуплява ауылы кешеләре менән осрашып, унан байтаҡ мәғлүмәттәр, фотолар алып ҡайтҡайны. Күрәһең, шул саҡта күңелендә һеңдергән тәьҫораттары уға бөгөн дә тынғы бирмәйҙер. Борсолорға, тауыш күтәрергә сәбәптәр етерлек шул. Әлегә хәтлем донъя күргән мәҡәләләрҙә, мәҫәлән, Әхмәтғәлиндәр тураһында ысынлап та төрлөсәрәк яҙҙылар: уларҙы үҙебеҙҙең артиллерия утына йүнәлеш биреүселәр (корректировкалаусылар) тип тә, дошман тылына ебәрелгән истребителдәр отряды тип тә раҫланылар. Ун бер яу-

гирҙан ғына торған һайланмыш төркөмдө, бер ҡарағанда “отделение”, икенсе тапҡыр уҡығанда “взвод”, хатта ”рота” тип атаусылар табылды. Әхмәтғәлин иһә үҙе политрук та, парторг та, большевик та булып кәүҙәләндерелде. Ябай Сәфәр ауылы егетен, художестволы прозала шулай эшләнә ул тип, Ғарипов әйткәнсә, Ирәндек тауында һәм “Алабай урманында” айыу менән көрәшкән бер бәһлеүән итеп фәстерҙеләр. Эйе, төрлө ҡиәфәткә индереп һупаланылар батырҙы, әммә яҡташтарына ундай “бүрттерелгән” кеше кәрәкмәй ине. Яҙмаларҙа бер генә һәм иң мөһим нәмә — ун бер егеттең ысынлап та күмәкләп ҙур ҡаһарманлыҡка барыуы, ул саҡта СССР тип аталған дәүләттә йәшәгән төрлө милләт кешеләренең бер-береһенә ныҡлы терәк булыуы, батырлыҡтарының да нәғез яугирҙар дуҫлығына нигеҙләнеүе шикләндермәй ине.

Ошо фекерҙәрҙе иҫтән сығармай, Әхмәтғәлин төркөмөнөң ажарлығын 1944 йылдың 31 июлендә (Геройҙар үлгәс, ун көн үтеү менән) сыҡкан “Фронтовик” гәзитенә таянып ҡына тасуирлау хәйерлерәк. Бына ул мәҡәлә: “Сунуплява ауылы эргәһендә, юл буйында, ҡыр сәскәләре менән биҙәлгән яңы ҡәбер ҡалҡып ята. Бында Латвия ССР-ының азатлығы өсөн йәндәрен биргән ун батыр ерләнгән, бөйөк 1944 йылдың еңеү биттәрендә уйылып ҡаласаҡ ун яугир һөйәге. Бәләкәй зыярат янынан ябай һуғышсылар, офицерҙар үтә, орудиелар гөрһөлдәй, бер-бер артлы ылауҙар һуҙыла. Фронт һыҙығы алыҫҡа, көнбайышҡа күсте инде, тик бына ошонда, ауыл эргәһендә булған ҡаты һуғыш хәтирәләре генә юйылмай...

**Ураү юл менән.** Тәү ҡарауҙа уҡ һуш китерлек ерҙә, шау сәскәләр менән ҡапланған тау битләүҙәрендә ныҡынып алғайны немецтар. Был урындар матурын-матур ҙа, әммә яҡынайһаң, улар шунда уҡ үлемесле ут бөркөргә тотона. Беҙҙең частарҙың дәррәү һөжүмгә күсеүенән шанҡып ҡалған немецтар, ошо ауыл көлкүмергә әүерелгән хәлдә лә, был сиктән тайпылмаҫҡа ҡарар итә.

Һуғышта ваҡыт көттөрмәй. Юҡҡа сарыф ителгән бер секундтың да тотош тәүлеккә, айға торошло булыуы мөмкин. Өлкән сержант Әхмәтғәлин алдына бурыс ҡуйған офицер быны яҡшы аңлай ине: ауылды уратып үтергә, дошмандың артына сығырға һәм уның сигенеү юлын киҫергә. Отделениеға приказды үтәүе еңел булмаясаҡ, әммә аяуһыҙ ҡан ҡойоштарҙы күргән, еңеү шатлығын да, әрнеүле еңелеү мәлдәрен дә күп тапҡырҙар йөрәге аша үткәргән Хәкимйән дә был ҡарарҙың ғәҙел, дөрөҫ икәнлеген тойҙо. Немец менән әллә нисә мәртәбә йөҙгә-йөҙ осрашҡан һәм унан һәр ваҡыт өҫтөн сыҡкан егет был юлы ла дошман тылына китеүҙән шөрләмәй ине. Шуға күрә лә ул отделениеһына: “В обход!” — тип һаран ғына команда бирҙе. Һәм быны барыһы ла бер һүҙһеҙ ҡабул итте.

**Юлда.** Улар башта арыш баҫыуы аша атланы, унан, ауылды ҡырыйҙа ҡалдырып, күптән инде кеше аяғы баҫмаған урман һуҡмағына күстеләр. Бер нисә мәртәбә әле унда, әле һулда немецтарҙың эт өргәнде хәтерләткән тауыштары ишетелеп ҡалды, ләкин разведчиктар, ал-ял белмәй, алға ғына ынтылды. Уларға, бер минутты ла юғалтмай, командир картанан күрһәткән шоссе юлды "эйәрләп" алырға кәрәк ине. Ниһайәт, һорғолт саңға ҡойоноп ятҡан оло юлға баҫҡас, Хәкимйән үҙе лә һиҙмәҫтән көрһөнөп ҡуйҙы: әйтерһең, үҙеңде саҡ ҡына тынысыраҡ тоторлоҡ тыуған төйәгенә барып сыҡты ул. Ләкин тап бына ошонда хәүеф янағанын аңланы Хәкимйән, сөнки ошонан тулҡын-тулҡын булып фашист колонналары сигенә ине.

— Улар күп, беҙ ун бер бөртөк кенә, — тине Әхмәтғәлин комсорг Тоҡобай Тайғараевҡа, үҙенең хафалары менән уртаҡлашҡан һымаҡ.

— Һан менән түгел, аҡыл менән һуғышалар, — тип көлөмһөрәне тегеһе.

Отделение хәл иткес алышҡа әҙерләнде. Сержант Сыроежкин — уның бөтә подразделениела ихтирам яулағанын беләләр ине — ҡаҙаҡ егеттәренә яҡын барып, уларҙың телендә һөйләшә башланы. Һөйләшә тиеүе артығыраҡ, әлбиттә. Әммә аҙ әйтһә лә, иң кәрәкләһен еткерҙе. Һәр кем ҡолағына киртеп ҡуйҙы: беҙҙең частар килеп еткәнсе, был егеттәр шоссела төп хужа булып ҡаласаҡ. Бына юлдың теге осонда моторҙарҙың геүләүе, тәгәрмәстәрҙең шығырҙауы, дағалы итектәрҙең шаҡ-шоҡ һуғылыуы ишетелде. Немецтарҙың ашығыуы ине был.

**Алыш.** Пулемет көбәктәре эҫеп китте — ҡул тейҙерерлек түгел. Автоматтар, ут стенаһы хасил итеп, бер туҡтауһыҙ тыҡылданы. Бына шулай ҡаршыланы ун бер яугир немецтарҙың тәүге колоннаһын.

Башта нимә килеп тыуғанын аңламаны фрицтар. Кем ата? Ҡайҙан ата? Көстәре ниндәй? Ары ла, бире лә ташландылар. Ә Әхмәтғәлин егеттәре, өҙлөкһөҙ урындарын алмаштырып, уларҙың баштарын бутаны, ҙур көс менән ҡамау эсенә алырға тырышҡан һымаҡ ҡыланды. Ҡул пулеметтарының, автоматтар һәм винтовкаларҙың уты шул хәтлем берҙәм һәм көслө ине, хатта гитлерсылар шунда уҡ дүрт пулемет расчетын юғалтты. Улар салғы менән сабылған үлән кеүек түшәлде, ләкин йығылғандарҙың артынан яңылары ҡалҡып сыҡты. Дошман, һаҡланыуҙы кәрәк тип тә тапмай, атакаға күтәрелде һәм үҙ-үҙҙәрен ярһытып ҡысҡырыныуҙарын ғына белде: "Рус, бирел!"

Немецтар, үлгән һалдаттарын ашатлап, яңынан-яңы мәйет булып, яндарына тәгәрәне. Һуғыш бер нисә сәғәткә һуҙылды. Бына Әхмәтғәлин дә йығылды — пуля маңлайына килеп тейҙе. Ул сержант Сыроежкинға:

— Урынығыҙҙа торорға... Ахырғы сиккә тиклем.., — тип бышылдап өлгөрҙө лә йән бирҙе.

— Ахырғы сиккә тиклем торорға! — тип ҡысҡырҙы Сыроежкин, һәләк булған иптәшенең бойороғон ҡабатлап.

Ул отделение менән командалыҡ итеүҙе үҙ өҫтөнә алды. Яугирҙарының берәм-берәм баш һалыуын йөрәк әрнеүе менән кисерҙе. Һуғыш ҡырында күптән инде бер туғанға әүерелгән егеттәр юғала ине күҙ алдында.

Пулеметсы Ҡарабаев та ауҙы.

— Пулемет тынып тормаясаҡ, — тип ҡысҡырҙы Сыроежкинға Уразов.

Ул әлегә тиклем Ҡарабаевҡа дискылар биреп тороу менән мәшғүл ине, ә хәҙер, ике аяғынан да яраланһа ла, иптәшен алмаштырып, ут яуҙыра башланы. Ләкин немецтар яугирҙарҙы урата ине. Сыроежкин алыштың хәл иткес минуты яҡынлашҡанын аңланы, артҡа сигенеү, немецтарҙы юлдан үткәреп ебәреү тураһындағы уй башына ла килмәне уның.

— Патрондар бар әле, тимәк, көрәшергә мөмкин, — тине ҡаҙаҡ дуҫтары Абдуллаев менән Уразовҡа.

Абдуллаевтың аяғына себен булып йәнә бер пуля килеп ултырҙы. Ул ҡулынан ҡоралын ысҡындырманы, әммә атҡан тауыш ишетелмәне.

— Урун! — тип һөрәнләне Сыроежкин, хафаға бирелеп. Тик дуҫы яуап ҡайтарманы.

Сержант автоматын асырғанып ҡыҫып тотто, хатта бармаҡтары ағарып китте. Ул ярһып ҡырҙы өҫкә үрмәләгән немецтарҙы. Сыроежкин белә ине: ул отҡан һәр минут дошманға бик ҡыйбатҡа төшәсәк. Уның ҡолағына ҡайҙалыр алыҫта нимәләрҙеңдер шартлауы, кемдәрҙеңдер “ура” ҡысҡырыуы ишетелеп ҡалды. Ауылға беҙҙең пехота яҡынлаша ине булһа кәрәк. Ә унда йәшәүселәр, Ҡыҙыл Армияның тиҙерәк килеп етеүен көтә-көтә, берсә ҡурҡып, берсә тулҡынланып, тауҙағы алышты күҙәтте. Улар, баш өҫтөндә пулялар һыҙғырһа ла, оло юлдан ҡараштарын ала алманы.

**Ут тоҡанған һарайҙа.** Һуғышсылар, берәм-берәм ауғанда, ҡатын-ҡыҙҙар, күҙҙәрен йыпаҡ-йыпаҡ килтереп, эстән генә доғаларын уҡыны. Бына яугирҙарҙың тағы береһе һалынып төштө. Был инде өсөнсө тапҡыр яраланған Чутак Уразов ине. Был хәлде соҡорҙа йәшенеп ятҡан ауыл ҡарты күреп ҡалып, түҙмәне, ут

аҫтында үрмәләп барып, яралыны яҡындағы һарайға һөйрәне. Әммә гитлерсылар ҙа шәйләп ҡалды ҡартты һәм, барып, һарайға ут төрттө. Ҡоро һалам көттөрмәй гөлт итте, сайырлы таҡталар шарт-шорт янырға тотондо. Немецтар: “Рус, сыҡ, тере ҡалырһың!” — тип ҡысҡырынды. Аңына килһә лә, Уразов яуап ҡайтарманы, тереләй янып үлеүҙе хурлыҡлы әсирлеккә төшөүҙән артығыраҡ күрҙе. Латыш ҡарты ут эсенән сығып өлгөрҙө, пуля ла үҙенә түгел, металдан яһалған тәмәке ҡабына барып сәнселде. Уразовтың нисек үлгәнен күргән Сыроежкин, Шкураков һәм Андронов һуңғы патрондарына тиклем һуғышты. Ике тәүлеккә яҡын ваҡыт үтте, ә ун бер батыр торған юлдан бер немец та үтеп китә алманы. Күҙ алдында ике йөҙҙән ашыу гитлерсы ятып ҡалды...

Яугир! Көнбайышҡа табан үтешләй һин, бәлки, юл буйындағы был ҡәберҙе күрерһең. Күрһәң, ун батырҙы — рус егеттәре Сыроежкинды, Шакуров, Шкураковты, башҡорт Әхмәтғәлинде, үзбәктәр Ҡарабаев менән Уразовты, ҡаҙаҡ батырҙары Тайғараев һәм Абдуллаевты, сыуаштар Ашмаров менән Черновты — күп милләтле тыуған илебеҙҙең улдарын иҫкә ал! Улар һуңғы тамсы ҡандарына тиклем ошонда торҙолар, һин көнбайышҡа тиҙерәк барып етһен өсөн ғүмерҙәрен йәлләмәнеләр... Еңеү яулап кире ҡайтҡанда ла Геройҙар алдында башыңды эй, улар үҙҙәренең батырлығы менән Тыуған илде һөйөүҙәрен, дошманды күрә алмауҙарын иҫбатланы һәм Ҡыҙыл Армияның тағы бер данлы битен асты... **Л. Елисеев, Н.Кухальский**”.

Әхмәтғәлинселәр тураһында күп яҙҙылар, тинек. Ул баҫмаларҙан тағы нимә белеп була һуң? Үҙәк матбуғат журналисы Г. Гладкихтың “Исемһеҙ ҡалҡыулыҡ геройҙары” тигән очергында (“Ураҡ һәм Сүкеш” гәзите, 1972 йылдың 4 марты) Х. Әхмәтғәлиндең Сунуплява эргәһендәге һуғыштан өс көн алда ғына күрһәткән егетлеге хаҡында бына ниндәй юлдар табырға мөмкин. “Взвод (Әхмәтғәлин взводы. — **Р. Н.**) үҙен сигенеп барған дошманды эҙәрлекләгәндә үк танытты, — тип яҙа автор. — Немецтар Сафоново ауылы янында ныҡлы терәк пункты булдырғайны. Уларҙы урынында уҡ тар-мар итеп, алған темптарын төшөрмәйенсә, артабан хәрәкәт итергә кәрәк ине. Хәлде тулыһынса асыҡлап алғас, Әхмәтғәлин шундай ҡарарға килә: алдағы өйәңкеләрҙе урап, дошмандың уң флангыһына үтергә, ә взводтың бер өлөшө менән арт яғына сығырға һәм, артыҡ йыбанмайынса, атакаға ташланырға. Шулай итәләр ҙә. Алыш оҙаҡ бармай. Гитлерсылар ҡаршылыҡ күрһәтеп ҡараһа ла, әллә ни эш ҡыйрата алмай. Уларҙың ҡырҡлаған кешеһе ятып ҡала, иҫән ҡалған ун һигеҙе ҡул күтәрә.

Шулай итеп, Әхмәтғәлин взводы бөтөн батальон алдында торған бурысты еңеләйтте".

Артабан беҙ был яҙманан Х. Әхмәтғәлиндең күкрәген "Дан" ордены, ике "Батырлыҡ өсөн" миҙалы биҙәгәнен белеп алабыҙ. Ә иң мөһиме, Әхмәтғәлин төркөмөнөң (төркөмө, ә тулы отделение түгел! — **Р. Н.**) немецтар тылына ниндәй маҡсат менән ебәрелеүе икенсе төрлөрәк аңлатыла. Очеркта яҙылыуынса, 375-се уҡсы полк командиры подполковник Ф. П. Бочаров Әхмәтғәлингә бына ниндәй бурыс ҡуя:

— Авиаразведканың хәбәр итеүенсә, немецтарҙың ҙур төркөмө һәм транспорт машиналары оло юл менән төньяҡ-көнбайыш йүнәлешендә Рунденыға сигенә башлаған. Һеҙҙең батальонға шул ауылды баҫып алырға ҡушылған. Ә һинең взвод, Сунуплява ауылының көньяҡ-көнбайышындағы бына ошо ҡалҡыулыҡта нығынырға тейеш. Шуға тешегеҙ-тырнағығыҙ менән йәбешеп, ауыл эргәһендәге юлды контролгә алығыҙ һәм фашистарҙың юлын быуығыҙ. Немецтар унан үтә алмаһын (РФ ОМ Архивы, ф. 2, оп. 252, оп. 2 2433, д. 18).

Ә нисек, ниндәй көс менән быуырға уны? Очеркта был һорауға ла яуап бар һымаҡ. Разведчиктар ауыл эргәһендәге ҡалҡыулыҡҡа менеп йәшеренгәс тә, фашист колонналарының ҡайҙа һәм ҡайһы юлдан хәрәкәт итеүен рация аша еткерә башлай. Уларҙың сигналы буйынса, беҙҙең артиллерия күпләп сигенгән гитлерсыларҙы ергә түшәп һала. Юлда мәхшәр тыуа. Ахыр сиктә немецтар, эштең ниҙә икәнен аңлап алғас, разведчиктарға ҡаршы автоматсыларын ташлай.

Г. Гладких шулай уҡ айырым геройҙарҙың исемдәрен дә асыҡлап яҙа: Яков Шакуров түгел, ә Яҡуп Шәкүров, Михаил Шкураков, Тажбай Ҡарабаев, Василий Андронов, Матвей Чернов. Чутак Уразовты һарайға йәшереп маташҡан латыштың исеме — Пиман Рудзишь.

Ә Жәүҙәт Ғариповтың хатынан шул мәғлүм булды: Латвия халҡы, батырҙарҙың үле кәүҙәләрен йыйып, тәрбиәләп, ҡәбергә һала. Милләттәренә ҡарамай, изге кешелек бурысын үтәй. Ә инде 1963 йылда һуғыш ҡаһармандарының һөйәктәрен ҙурыраҡ урынға, халыҡ күберәк йөрөгән ергә, Лудза ҡалаһының үҙәк майҙанына күсерә. Икенсе тапҡыр ерләй. Кешеләргә, йәштәргә бер фәһем булһын, тигәндәрҙер. Әҙәм заты, мәшһүр булһа ла, ер аҫтында ята торғас, аҡрынлап онотола. Шуны уйлаптыр, ахырыһы, 1963 йылдың 7 ноябрендә латыш халҡы ил батырҙарына тағы бер оло хөрмәт күрһәтә — улар исеменә, онотмаһындар өсөн, мәғрүр һәйкәл төҙөп ҡуя. Яу батырҙарының бөтәһенә лә Советтар Союзы

Геройы исеме бирелә (үлгәндән һуң). Уларҙың исеме алтын хәрефтәр менән ҡалын-ҡалын китаптарға яҙып ҡуйыла.

Уларға тейешле булғандың бөтәһен дә бирҙе һымаҡ әле яҡты донъяла йәшәүселәр. Әммә ил өсөн баштарын һалған уландарға хөрмәт күрһәтеүҙең сиге юҡ икән. Беҙҙең ысынбарлығыбыҙ шул яғы менән матур. Әхмәтғәлинселәр менән ҡыҙыҡһыныу һаман һүрелмәй. Бына Башҡортостандың бөтөнләй икенсе, көнбайыш өлөшөндә, Дүртөйлө яҡтарында йәшәүсе Вил Ҡазыхановты ғына алайыҡ. Оло уҡытыусы, эҙәрмән журналист, 80-се йылдарҙың башында уҡ Геройҙарҙың ағай-энеләре менән хаттар алышып, күп мәғлүмәттәр тупланы, очерктар яҙҙы, Геройҙарҙы теге йәки был республикала нисек иҫкә алалар, уларҙың исемдәрен йәш быуынды тәрбиәләүҙә нисек файҙаланалар — шуның менән ҡыҙыҡһынды. Изге, уҡытыусы эше. Бер ыңғай эҙәрмән-журналист Сунуплява ауылында ерләнгән тип иҫәпләнгән Василий Андронов менән Урунбай Абдуллаевтың иҫән ҡалыуҙары хаҡында бәйән итте. Ғәжәп хәл! Баҡһаң, ауыр яралар алған һәм арыш баҫыуында ятып ҡалған Андроновты дошмандар күрмәй үткән. Ә иҫтән яҙған Абдуллаевты немецтар үҙҙәре менән алып киткән, әсир итеп тотҡан. Күп яфалар сиккәндән һуң, Урунбай тыуған яғына әйләнеп ҡайтыу• бәхетенә ирешкән һәм 50-се йылдарға тиклем Үзбәкстанда, тыуған колхозында имен-аман эшләп йөрөгән. Бына бит ул кеше яҙмышы!

Ҡыҙыҡлы табышҡа тиңләрлек тағы бер яңылыҡ. 1967 йылдың 16 апрелендә "Белорецкий рабочий" гәзитендә эшсе хәбәрсе И. Лахмостовтың "Сунуплява ҡалҡыулығының тағы бер геройы" тигән мәҡәләһе баҫылып сыҡты. Автор, АПН хәбәрсеһе Ю. Романовтың шул уҡ гәзиттә күренгән сығышына ишара яһап, һуғышта ҡатнашҡан Михаил Петрович Щербаковтың (ул Тирлән тимер прокатлау заводында эшләй ине) иҫтәлеген килтерә. Иҫтәлек шуныһы менән иғтибарҙы йәлеп итә: Щербаков, даими 1-се уҡсы батальон командиры Майор Лыщенко эргәһендә булып, радиостанцияны хеҙмәтләндергән. Уның хәтерләүенсә, һуғыштарҙың өҙлөкһөҙ барыуы арҡаһында батальонда бер роталыҡ ҡына кеше ҡалып, Сунуплява ҡалҡыулығын өс көн буйына штурмлап аҙапланған. Уны баҫып алыуы ауырға төшкән. Немецтар ҙа бер нисә тапҡыр ҡаршы атакаға күтәрелеп ҡараған, ләкин улар ҙа уңышҡа өлгәшә алмаған, артиллерия утына түҙә алмайынса, кире сигенергә мәжбүр булған. Әхмәтғәлин политрук булған ротала ни бары ун бер кеше тороп ҡалған. "Бер көндө Әхмәтғәлиндең һәм уның иптәштәренең беҙҙең арала юҡ икәнен аңланыҡ, —тип һөйләй Щербаков. — Ҡайҙа киткәндәрҙер — берәү ҙә белмәй. Майор Лыщенко, хәлде асыҡлау өсөн, Әхмәтғәлингә элемтәсе лә ебәреп ҡараны, тик өлкән сержант-

тың подразделениеһы урынында булмай сыҡты. Ул төндө беҙҙең участкала тынлыҡ ине. Исемһеҙ бейеклек тә, әйтерһең, тәрән йоҡоға сумғайны.

Минең радиостанциям, аккумуляторҙы экономиялау өсөн, өҙөк-һурыҡ ҡына эшләне. Етмәһә, үҙемдең ҡул да яраланғайны. Шулай таң атты. Ҡапыл Исемһеҙ ҡалҡыулыҡта беҙҙең пулеметтар татылдарға тотондо. Был Әхмәтғәлиндың подразделениеһы икәнен аңланыҡ. Командованиеның бойороғо буйынса, беҙ ҡалҡыулыҡҡа бер нисә тапҡыр үтергә самалап ҡараныҡ. Үтеп булманы, иптәштәргә ярҙам итә алманыҡ. Дошман асҡан ут шул хәтлем көслө ине, башты күтәрерлек тә булманы.

Ике тәүлеккә яҡын алыштылар тауҙа. Икенсе көндөң ахырында беҙ ҡалҡыулыҡта геройҙарҙың береһен генә күреп ҡалдыҡ, ул бер үҙе, яңғыҙы ғына булһа ла, ҡул һуғышына күсте... Өсөнсө көндөң таңында беҙ, юлға саҡ йырып сығып, ҡалҡыулыҡты баҫып алдыҡ. Ундағы ер, аҡтарылып, һөрөлөп бөтөп, немец һалдаттарының мәйеттәре, ҡыйратылған техникаһы менән тулғайны. Әхмәтғәлин подразделениеһы составында һуғышҡандарҙан ул саҡта бер генә кеше иҫән тороп ҡалған. Ул, яраланған бер боецты йөкмәп, һарайға алып индергән. Немецтарҙың яҡынлашыуын күреп, яралыны ҡалдырған да эргәләге һаҙлыҡҡа төшөп ышыҡланған, ләкин кире иптәштәре янына бара алмаған".

Радист Михаил Петрович Щербаковтың үҙенә килгәндә инде, "мин үлгәндәр араһында яҡташым Әхмәтғәлинды эҙләһәм дә таба алманым, ти. Хәйер, бында оҙаҡ туҡталырға тура ла килмәне шул, сөнки беҙҙең подразделение тағы һөжүмгә күсте".

Щербаков хәбәрсегә һөйләгән һүҙҙәрен уны борсоған һорау менән тамамлай: Сунуплява эргәһендәге һуғышта ҡатнашҡан Кондратьевтың яҙмышы нимә менән бөттө, иҫән ҡалған Урунбай Абдуллаев уның хаҡында бер нәмә лә әйтмәнеме икән?

Кешелек донъяһының артабан йәшәүе өсөн барған аяуһыҙ алышта, сағыу ҡаһарманлыҡ миҫалдары менән бергә, ахырынаса асыҡланмаған, беҙгә билдәле булмаған ваҡиғалар ҙа етерлек икән. Әҙәм заттарының яҡты өмөт-хыялдарын түңкәрә һуғып, яҙмыштарын да ҡәһәрле һуғыш шулай бутап бөтөрҙө инде. Бында үкенергә генә ҡала.

*1998 й.*

# XVIII. Таң атмай ҙа атмай

## Тамырыбыҙ ҡайҙа?

Был яҙмалар менән танышып, үткән тарихыбыҙға һаман ҡара яғалар, бер туҡтауһыҙ емереү эшен дауам итәләр, тип уйлауы мөмкин уҡыусыбыҙҙың. Хаталанма, тибеҙ уға. Емерәһе ҡалмаған. Барыһы ла түңкәрелгән инде. Очеркты баҫтырыуҙың ғилләһе бүтәнерәк — "демократик" матбуғатҡа эйәреп, донъяны артабан да бутау, ҡыйратыу түгел, быны өсөн әллә ниндәй аҡыл кәрәкмәй — тормошобоҙҙағы ҡара таптарҙы сүплә генә, ә тағы бер тапҡыр уйланып ҡарау, үҙ хаталарыбыҙҙан ғибрәт алыу, киләсәктә уларҙы ҡабатламаҫҡа тырышыу...

Тағы шуныһы. Үткәндәребеҙҙән тәүбә итерлек миҫалдарҙы иҫкә төшөргән һайын, ҡайһы бер уҡыусыларыбыҙ уларҙың төп сәбәбенә етергә йыбанып, бөтә ғәйепте ифрат еңел генә, әлеге лә баяғы, Коммунистар партияһына ауҙара ла ҡуя. Шуны берҙән-бер дөрөҫлөк тип һанай. Кисә трибуналарға сығып, үҙе маҡтаған социализмды ҡәһәрләй, әле яңы ғына ҡуйынында партия билеты йөрөткән атаһына, ағаһына бәддоға ҡыла, быуаттар буйына бөтә кешелек донъяһы ынтылған яҡты идеалдарҙан ваз кисә. Эске тойғоларынан иҫереп, үҙен хәҡиҡәттең төбөнә барып еттем, тип уйлай, ләкин быны менән генә үҙен бәхетле итеп һанаймы? Бик икеле. Сөнки алдағы маҡсаты билдәле түгел...

Тәүбә ҡылырлыҡ иң уҫал миҫалдарҙың береһе — матбуғатта инде ҡат-ҡат яҙылған утыҙынсы-ҡырҡынсы йылдарҙағы репрессиялар, әлбиттә. Бында ла хәҙер коммунистар ғына ғәйепләнә, хатта фашистар менән тиң ҡуйыла. Аҡылыбыҙҙы юғалтмайыҡ! Иҫебеҙҙән сыҡмаһын: тоталитар системаның беренсе ҡорбаны партия ағзалары үҙҙәре булды түгелме һуң? Бөтә донъяға танылулы тарихсы ғалим Д. Волкогоновтың иҫәпләүенсә, коммунистарҙың үҙҙәренең үк 50 проценттан ашыуы сәйәси репрессия тәгәрмәстәре аҫтында иҙелеп ятып ҡалды, йәмғиәтебеҙҙә, һарыҡ тиреһе бөркәнеп алған йыртҡыс бүреләр өйөрө өҫкә сығып, изге лозунгылар күтәргән большевиктар партияһының иң намыҫлы өлөшөн быуып ташланы.

Ҡайҙан килеп сыҡты һуң был ҡыҙыл төҫкә буянып алған ҡара көстәр? Беҙ уны Сталин тигән тәғәйен шәхес менән бәйләйбеҙ. Ләкин, хикмәт, моғайын, шул бер иблестә генә түгелдер. Ул яуыз йыртҡыстар — хәҙер "демократтар"ҙың ауыҙ-һыуын ҡоротоп маҡтаған капитализм төпкөлөндә тыуҙы түгелме һуң әле? Ҡаты ҡуллылыҡ, әҙәм затына аяуһыҙлыҡ күрһәтеп, яуызлыҡтарҙан баш тартмайынса ғына прогреҫҡа, мул тормошҡа барырға мөмкин тип кем лаф ора? Классик буржуазия гуманизмы, ул эшләгән принцип-

тар түгелме? Эйе, шулай. Замана — көслөнөкө, тигән лозунгыны ул алға һөрҙө һәм һөрә бөгөн дә.

Шуға күрә был очеркта тасуирланасаҡ ҡот осҡос яуызлыҡтарҙы мин һис кенә лә туранан-тура коммунистар эшмәкәрлеге һәм социализм идеялары менән бәйләмәҫ инем. Юҡ. Үкенескә ҡаршы, факт булараҡ, улар социалистик йәмғиәтте төҙөй башлаған осорға тап килде-килеүен, әммә улар боронораҡ, Россия феодализмы һәм капитализмы ҡарынында яралып, шунда тыуып, еңел генә беҙҙең көнкүрешкә килеп тамырланды. Ошо "мираҫ" беҙҙең бюрократик аппарат тарафынан боҙмайынса ғына үҫтереп ебәрелде.

Һүҙҙе бына ошо аңлатманан башлау дөрөҫөрәк булыр.

## Выждан ғазабы

"Мин күп йылдар буйына берәй редакцияға мөрәжәғәт итергә йыйынып йөрөнөм. Барыһын да бәйнә-бәйнә һөйләп биреү теләге менән яндым. Бөтә совет иле немец фашистарына ҡаршы һуғышҡан саҡта, тылда үҙ хөкүмәтебеҙҙең бер ниндәй ғәйебе булмаған кешеләргә ҡарата репрессия ҡулланыуы, законһыҙлыҡ күрһәтеүе хаҡында еткерергә ине уйым. Уйым шулай, ә үҙем шөрләйем: белгәндәремде, күргәндәремде башҡаларға һөйләһәм, минең өсөн бик насар бөтмәҫме икән был, тим. Аһ, был ҡурҡыу! Тик минең, йән тетрәткес фажиғәләргә шаһит булған кешенең, меңдәрсә мәйетте бер кем белмәгән урынға йәшергән кешенең, был серҙе үҙендә генә тоторға хаҡым бармы? Әгәр мин быны асып һалмаһам, һөйләмәһәм, уға тағы кем батырсылыҡ итер?.."

Бына шулай башланып китә ине көтмәгәндә минең ҡулға килеп эләккән хат. Унда кешенең ғазапланыуы ла, ҡурҡыу-шикләнеүҙәрен еңеп, ахыр сиктә ни өсөн ҡәләмгә тотоноу сәбәбе лә ярылып ята ине. Үҙенә күрә бер батырлыҡ!

"...Әйтә алмайым: минең был яҙмаларымдың файҙаһы күпмеләр. Шулай ҙа уйлайым, әһәмиәте барҙыр. Минең инде йәшем дә өлкән, һаулығым да ҡаҡшаған, мин кешеләргә әйтер һүҙемде әйтеп ҡалдырырға тейешмен".

Серен асырға тәүәккәллек иткән автор — минең күптәнге танышым Василий Дмитриевич Антипов ине. Ыҡсым кәүҙәле, һәр ваҡыт йүгерә-атлай йөрөгән был кеше 60-сы йылдарҙа 146-сы төҙөлөш тресында рәссам-биҙәүсе булып эшләй торғайны. Хәҙер, әлбиттә, пенсияла. Һәр саҡ алсаҡ булып, кеше менән йылмайып, ихлас һөйләшкәнгәме, әллә инде беҙҙең Урал тәбиғәте менән һоҡланыуын йәшермәй, уның күл-тауҙарын ләззәтләнеп картиналарға төшөргәнгәме, Василий Дмитриевичтың йөрәк төбөндә ниндәйҙер төйөр йөрөйҙөр, бөтә булмышын күптәнге ҡайғы быуалыр тип ба-

шыма ла килтермәгәйнем. Һуңғы тапҡыр урам уртаһында осраҡлы ғына осрашҡанда ла уның бар уйы шул элекке хәсрәттәре тирәһендә ураңғылаған булып сыҡты. Сөнки иҫәнлек-һаулыҡ һорашып бөтөү менән үк, ул көн тужуркаһының кеҫәләрен ҡапшарға тотондо һәм, тағы бер аҙ тора биргәс, ниндәйҙер ҡағыҙҙар килтереп сығарҙы — уларҙы янында ғына йөрөткән икән.

Ләкин ҡағыҙҙарҙа нимәләр яҙылғанын уҡығанға тиклем беҙ саҡ ҡына Василий Антиповтың бала сағы менән таныштырып үтәйек.

Василий Бәләбәй яҡтарында, бөйөк рус яҙыусыһы С. Т. Аксаков усадьбаһы эргәһендәге бәләкәй генә ауылда тыуған. Атаһы, империалистик һуғышта ҡатнашып, өс тапҡыр яралана, өс тапҡыр Георгий тәреһе менән наградлана. Ул малайҙарын, шул иҫәптән 1927 йылда донъяға килгән алтынсы балаһы Васяны ла, бик иртә атта йөрөргә өйрәтә — малай бөтә күңеле менән крәҫтиән эшенә тартыла. Тик 1934—1935 йылдарҙа ике аты, бер һыйыры, ҡалҡынып килгән тағы бер-ике тана-турпылары, һарыҡ, сусҡалары булған Дмитрий Денисовичты шул хәтлем ҙур һалым һалып "ҡатыралар", хатта ул бөтә мөлкәтен һатып та бурысын түләй алмай. Ахырҙа, уға акт төҙөйҙәр ҙә бар байлығын тартып алалар. Антиповтар бер нәмәһеҙ тороп ҡала. "Әсәйем үҙ сәсен үҙе йолҡто, беҙ, балалар ҙа, ҡайһыбыҙ һәндерә өҫтөндә, ҡайһыбыҙ мейес башында олоноҡ, ләкин бынан файҙа сыҡманы, — ти Василий. — Ҡыш әйләнәһенә ауыҙҙы күккә сөйөп йәшәнек, ахырҙа иҫке тиреләрҙе өтөп, бүрттереп, шуны бешерә башланыҡ. Бына шулай итеп, беҙҙе "Смычка" тигән колхозға инергә мәжбүр иттеләр" (һуңынан ул Куйбышев исемендәге совхоз тип үҙгәртелә. — **Авт.**)

Шунда туҡтап торайыҡ. "Мәжбүр иттеләр", — ти Василий. Булғандыр. Хәйер, өс-дүрт һыйыры, аты булған йәки аяғында ныҡ торған крәҫтиән колхоз тигән яңылыҡты тап шулай ҡабул иткәндер, тик бит бер ниндәй мөлкәте булмаған, ялланып ҡына йәшәгән һәм күпселекте тәшкил иткән ярлы-ябаға өсөн коллективҡа ойошоу, ауырлыҡтарҙы бергәләп еңергә тырышыу берҙән-бер юл булыуын да онотмайыҡсы. Ҡайһы күҙлектән ҡарайһың бит быға. Тураһын әйткәндә, беҙ бөгөн дә шул мәсьәләне хәл итергә тырышабыҙ түгелме: шәхси хужалыҡ ҡулайлыраҡмы крәҫтиәнгә, әллә элеккесә колхоздармы? Ҡайһы көскә таянып, ил байығып китер? 30-сы йылдарҙағы хәрәкәтте тәнҡитләйбеҙ, ә үҙебеҙ бөгөн дә ҡайһы юлдан китеребеҙҙе белмәйбеҙ. Шуға күрә Василий Дмитриевичтың әсенеүҙәре йөрәккә бик яҡын булһа ла, уның ғына ҡарашы йөҙ проценты менән дөрөҫ тип әйтергә беҙ батырсылыҡ итмәйбеҙ.

“Ләкин бит күмәк хужалыҡ та аслыҡтан ҡотҡармай, — тип бәхәскә инә хат авторы. — Йә иген уңмай, уңһа, дәүләт менән иҫәпләшергә етмәй. Бар ашағаныбыҙ картуф булды”.

Барыһы ла дөрөҫ. Һәм шундай миҫалдарҙы дауам иткән һайын, илдә тоталитар режимдың да көсәйә, рухты һындыра барыуын тояһың. “...Ҡытлыҡҡа ла түҙелер ине, бәлки, ләкин һуғыш башланып китте. Беҙ, үҫмерҙәр, ҡарттар менән колхоз тәртәһенә егелдек.

Хәҙер минең елкәлә — ике һеңлем, ҡустым һәм эшкә яраҡһыҙ атай-әсәйем ине. Өҫтәүенә, тиф башланды. Ауылыбыҙҙан утыҙлаған кешене гүргә алып та китте”.

Васяға ул саҡта ун биш кенә йәш тула. Шулай ҙа бәлиғ булған тиергә мөмкин. Һәр хәлдә эшселәр синыфын тулыландырырлыҡ сағы. Һәм уны, башҡа тиҫтерҙәре менән бергә ФЗО-ға оҙатырға булалар. Тик малайҙың әллә ҡайҙа тауҙар араһында ятҡан Златоусҡа ла, Черниковскиға ла барғыһы килмәй. Василий үҙенең ҡылығын дөйөм кешелек закондарынан сығып ҡына: “Мин ауыр хәлдә ятҡан атайымды, бәләкәй туғандарымды яҙмыш ҡосағына ташлап китә алмай инем”, — тип аңлатырға тырыша. Икенсенән, ул, малай аҡылы менән фекер йөрөтөп, үҙенең ашлыҡ урып, мал бағып, һуғышып мантыған илгә файҙаны күберәк килтерәсәген тоя. Шуға күрә: “Мин һис төшөнмәйем, ни өсөн ун алтыһы ғына тулған ауыл йәштәрен әллә ҡайҙа йәһәннәмгә ҡыуҙылар? — тип һорай ул. — Завод, фабрикаларға күнекмәгән ауыл балалары барыбер тыуған төбәгенә ҡасып ҡайтып бөттө бит! Ударҙы бер ни туҡтата алманы...”

Бер нәмәне, “Смычка”ла ғына түгел, ә “СССР” тигән ҙур империяла йәшәүен, Сталиндың фашизмға ғына ҡаршы түгел, ә үҙ халҡына ла ҡаршы һуғыш алып барыуын, уға тыңлаусан, башын баҫып ҡына эшләп йөрөгән ҡолдар кәрәк булыуын белмәй әлегә малай. Шуға күрә, хөкүмәт сығарған яңы указды һис ҡабул иткеһе килмәй. Завод, фабрикаларҙан торф сығарыуҙан, урман ҡырҡыуҙан рөхсәтһеҙ киткән кешеләр енәйәт яуаплылығына тарттырыла һәм 5 йылдан алып 8 йылға тиклем иркенән мәхрүм ителә, хоҡуҡ төҙәтеү-хеҙмәт колонияһына ебәрелә, тиелә унда. “Был нимә? Әҙәми затты ҡырыуҙы маҡсат итеп ҡуйған сәйәсәт булдымы, әллә икенсе төрлө күренешме? — тип хайран ҡала Василий Дмитриевич. — Рухтары ла нығынып етмәгән 15—17 йәшлек үҫмерҙәрҙе, ата-әсәләренең ризалығын да һорамайынса тартып алып, яҙмыштары менән уйнарға хөкүмәткә кем хоҡуҡ биргән? Быны аяуһыҙ һуғыш мәнфәғәте талап иткән, тиеүҙәре мөмкин. Ялған! Һуғыш ихтыяжына кәрәк булһа, мендәрсә йәштәрҙе тиктомалға төрмәләргә, лагерҙарға тыҡмаҫтар ине. Тотҡонлоҡта, торф һаҙлыҡтарында,

серәкәйле урмандарҙа тифтән, эс китеүҙән, аслыҡтан яҙаланып, йәберләнеп, ғүмерҙәре өҙөлдө күптәрҙең...”

Ялған тип, дөрөҫ тойомлай Василий. Ҡот осҡос, бөтә халыҡтың бәғеренә һуҡҡан закондар һуғыш арҡаһында ғына тыумаған. Уларға күпкә алдараҡ нигеҙ һалынған. Бына, мәҫәлән, СССР Үҙәк Башҡарма Комитетының “Дәүләт предприятиелары, колхоз һәм кооперациялар милкен һаҡлау тураһында”ғы ҡарарына М. Калинин 1932 йылдың 7 августа уҡ әле ҡул ҡуйған. “Башаҡ өсөн” тип йөрөтөлә башлаған был декрет миллиондарса ярлы һәм урта хәлле колхозсыларҙы ҡулға алыуға килтергәйне. Был кешеләр ҡара тирҙәрен түгеп иген үҫтерҙе, ләкин, дәүләт планын үтәмәйенсә тороп, уның бөртөгөн дә ала алманы. Ишелеп ятҡан баҫыу эргәһендә астан ятып үлде.

Ә судһыҙ-ниһеҙ репрессиялар системаһы һуң?

Ә һуғыш башланыр алдынан (1940 йылдың 26 августа) индерелгән “Хеҙмәт дисциплинаһын боҙоусылар тураһында”ғы закон? Уның буйынса, эшкә 20 минут һуңлау прогул тип иҫәпләнде, һуңлаған өсөн кешене (12 йәшлек балаларҙы ла) 1 йылдан алып 10 йылға тиклем ултыртып ҡуйыу ғәҙәткә инеп китте. Бындай закондар дәүләт башына һайлап ҡуйылған иң юғары әһел М. Калинин ҡултамғаһы менән нығытып ҡуйылғайны. Ә инде һуғыш баш-башҡаҡлыҡтарҙы тотошлайы менән теҙгендән ысҡындырҙы.

## Хөкөм

Ысындан да шулай. “Аргументы и факты” гәзитендә бер мәғлүмәт баҫып сығарҙылар: беҙҙең ил һуғыш башланғанға тиклем үк әле төрмә, лагерҙар селтәре менән солғап алынған булған. 1940 йылдың 1 мартында ГУЛАГ үҙе генә лә 53 лагерь, 425 холоҡ төҙәтеү-хеҙмәт колонияһы һәм бәлиғ булмағандар өсөн 50 лагерҙан торған, 528 төрлө лагерь һәм колонияларҙың һәр береһе, һуғыш ваҡытында тағы ике-өскә тармаҡланып, төрлө урындарҙа үҙенең филиалдарын аса. Асылда уларҙың һаны күпмегә барып еткәндер — хәҙер әйтеүе бик ауыр.

Һәм бына ошонда хат авторы Василий Дмитриевичтың: “Нимә был, кеше үлтереү сәйәсәте булдымы?” — тип һорауын аңларға була. Мин уны ҡасандыр ФЗО-нан, хеҙмәт фронтынан ҡасып ҡайтҡан еңел холоҡло малай һорауы итеп түгел, ә инде күп һынауҙар үткән оло йәштәрҙәге аҡһаҡалдың тормошобоҙ хаҡында әсенешле уйланыуы, хатта һуңлап булһа ла хөкүмәт сәйәсәтен хөкөм итеүе тип ҡабул итәм. Үҙәк властың кешенең барлы-юҡлы мөлкәтен тартып алыу ғына түгел, тотош халыҡты ла һис икеләнмәйенсә талауына, йәш-елкенсәкте ҡырҙырыуына, үҙ көсөнә

сикһеҙ ышаныуына — ғөмүмән, яуызлыҡҡа ҡарата нәфрәт уты бөркөлә ине уның һорауынан.

...ФЗО-ға барыуҙан баш тартҡан Вася әлегә колхоз ырҙынында тырышып-тырмашып эшләп йөрөй. Тырылдығын ойотоп, саң борҡотоп ултырған һәм бер туҡтауһыҙ көлтәләрҙе йотҡан иҫке молотилка эргәһендә йүгерә-саба һалам тарттыра. Башҡараһы мәшәҡәт бөткөһөҙ булһа ла, тирә-яҡта ҡысҡырыш, көлөш, көҙгө ураҡ мәлендә генә килә торған оло кинәнес. Ошолай дөйөм хеҙмәт емешен йыйыуҙан тыуған шатлыҡ хәтерҙән һис сығырлыҡ түгел. “Тик ҡайҙа китеп олаҡты икән хәҙер ул саҡтағы берҙәмлек, рух күтәренкелеге?” Быныһы Василий Дмитриевичтың икенсе һорауы, һәм ул уға үҙе үк яуап бирергә тырыша: бөтә бәләләрҙең башы — ул йәш-елкенсәкте тыуған тамырынан, мөхитенән айырыуҙа, ә тыңламаһа, бик аҫтына оҙатыуҙа. Илебеҙҙең төп тотҡаһы иҫәпләнгән ауылға, хужалыҡҡа иң ҙур зыян бына ошолай килтерелде, унынса. Бөйөк Ватан һуғышы йылдарында уҡ булды был.



“Таң” колонияһы тотҡондары
(В. Д. Антипов һүрәте)

Бәлки, шулайҙыр ҙа. Ләкин әлегә һуғыш дауам итә. Вася ла тыныслыҡ тапмай. ФЗО-ға бармай ҡалған малай көн дә милиция көтә. Атаһы ошо арала тамам аяҡтан яҙа, мейес башынан да төшә алмай. Туғандары ашарға һорай.

Бер көндө Антиповтарға колхоз рәйесе А. Гавчук килеп туҡтай. Ул Василийға, Бәләбәй элеваторына барып кил, ти. Ярай, Копылов тигән ят кеше менән юлға сығалар. Копылов барып еткәнсе ауыҙ ҙа асмай, игенде тапшырғас ҡына, малайға, баҙарға һуғылайыҡ, ти. Һуғылалар. Шунда малай янына милиционер килә.

— Һинме Антипов? — тип һорай.

— Эйе, мин.

— Киттек минең менән.

Шулай итеп, Вася ҡулға алына. Уны Бәләбәй төрмәһенә бикләп ҡуялар. 30—35 квадрат метр ҙурлығындағы бүлмәлә утыҙлаған кеше. Тынсыу, ҡараңғы. Ун көн үтеп киткәс кенә Васяны судҡа алып киләләр. Ғәйепләү шул: "ФЗО-нан ҡасҡан".

— Ҡасҡан тип ни, минең бит унда булғаным юҡ. ФЗО-ның бер һыныҡ икмәген дә ашағаным булманы, — тип аңлата Вася.

Судьялар көләмһерәп ҡуя — улар ҙа ни ҡылһын, юристарҙың ҡулында милиция тапшырған ҡағыҙҙар ғына.

— Һуңғы һүҙең ни булыр? — тип һорайҙар.

Вася бер үк нәмәне тылҡый: атайым сырхай, әсәйем астан үлде, ике һеңлем, бер ҡустым миңә генә ҡарап ултыра, ә өс ағайым һуғышта. Үҙенең дә фронтҡа китергә теләүен белдерә.

Василий Дмитриевич әле булһа аптырай уға ышанмағандарына. И, был ауыл кешеһенең ауанлығы! Ни хәтлем көслө уның намыҫ, выждан кеүек төшөнсәләргә инаныуы! (Хәйер, халыҡ тап ошо сифаттарға табыныуы менән көслө лә инде.) Бер нәмәне генә иҫәпкә алмай Вася: ул бит ҡәҙимге кешеләр алдында түгел, ә ҡоролош тыуҙырған һәм уның төп терәге булған санауниктар, бюрократтар ҡаршыһында баҫып тора. Уларҙың бар булмышы ла бит шундай: зар менән килгән кешене диҡҡәт менән тыңлаған кеүек йөҙҙәре, ә үҙҙәре барыһын киреһенсә эшләй. Эшләргә тейеш, сөнки улар хөкүмәт ҡоло. Ҡыҫҡаһы, РСФСР Указына таянып, үҫмерҙе, ФЗО-нан үҙ белдегенә китеүҙә ғәйепләп, бер йылға иркенән мәхрүм итәләр. Шулай уҡ, әллә Васяның фронтҡа ебәреүҙе һорауын иғтибарға алып, әллә инде колхозда тырышып эшләүен оҡшатып, язаны Ҡыҙыл Армияға алыу менән алмаштырырға, тигән ҡарар сығаралар.

Вася армияға китеүенә сикһеҙ шат. Судьялар ҙа йылмайыша һәм... уны кире камераға оҙата. Ни өсөн? Яңылыштығыҙ, мин төрмәлә ултырырға түгел, ә ил һаҡларға китергә тейеш, тип ишек туҡмай Вася. Тик юҡҡа ғына, уны берәү ҙә ишетергә теләмәй.

Буранлы төндә 150—200-ләп кешене — ирҙәр, ҡатындар, егет-ҡыҙҙарҙы — сығарып, колоннаға теҙәләр, һәм ошонда ғына 16 йәшлек үҫмерҙең ҡолағына тәү тапҡыр конвоирҙың тупаҫ, ҡарлыҡҡан тауышы килеп һуғыла:

— Инәнде шулай иткәндәр! Иҫкәртәм: һулға йә уңға бер аҙым яһаһағыҙ, атып йығам. Ишеттегеҙме?

Йоҡа ғына кейемдәге тотҡондар, көрт йырып, урам буйлап ҡала ситенә ағыла. "Ун километр самаһы юл үткәс, беҙҙе автоматтар тотҡан, эттәр эйәрткән һаҡсылар ҡаршыланы, бөтә этапты ҡамап, лагерға ҡыуып алып киттеләр... Өшөгән, арыған тотҡондарҙы Таң (Рассвет) тигән ауылдың ташландыҡ сиркәүе ҡаршы

ала. Бына ошонда, ҡаҡ иҙәндә, Михаил Шукаев тигән тиҫтере менән бер мөйөшкә һыйынып, Вася ҡалтыранып тәүге төнөн уҙғара.

..."Таң" колонияһының ниндәй булыуы, ундағы тәртиптәр, һуғыш дәүеренә һылтанып тотҡондарҙы төрлөсә йәберләү, ас тотоу тураһында оҙаҡ һөйләп тормайыҡ. Быларҙың барыһы ла, моғайын, бүтән төрмәләрҙәгенән бер нәмәһе менән дә айырылмайҙыр, тик бик үк ғәҙәти булмаған деталдәргә генә иғтибар итәйек. Тағы шуны әйтеп үтәйек: "Таң"дың был 1-се һанлы колонияһы ҡалҡыулыҡта ултыра, бейек ҡойма менән уратып алынған лагерға дүрт яҡтан дүрт юл килеп инә. Лагерҙың артҡы яғы уйһыулыҡҡа төшә — бында кәбеҫтә, ҡыяр үҫтерәләр. Зона уртаһында сиркәү күренә, уны яңы килгәндәр өсөн изолятор итеп файҙаланалар. Ай һайын ул Бәләбәй төрмәһенән 150—200 кеше ҡабул итә. Шул тиклем үк кеше бынан "теге донъя"ға китеп тора.

Сиркәү тирәһендә элек монахтар йәшәгән һәм улар уҡ лагерҙың тәүге "ҡунаҡтар"ына әүерелгән. Уҡынып ҡына донъя күргәндәрҙең ни ғәйебе булды икән? Хикмәт шунда: 30-сы йылдарҙың аҙағында троцкист, каменевсы һәм зиновьевсыларҙы, ә улар артынса "милләтселәр"ҙең яҙмышын хәл итеп бөтөргәс, йәмғиәттә тыныслыҡ урынлашҡан һымаҡ булып ҡала. Ләкин был шулай тойола ғына. Асылда иһә сәйәси тотороҡһоҙлоҡ һағалай һәм НКВД йәмғиәттә һиҙелерлек йоғонтоһо булған сиркәү әһелдәрен, партиянан ҡыуылғандарҙы, ҡалаларҙағы һөнәрмәндәрҙе үҙҙәренең "оппоненты" итеп һайлап алып, уларҙы эҙәрлекләй башлай.

## Ҡолдар

"Таң"ға килгәндең икенсе генә көнө. Тотҡондарҙың Туймазы эргәһендәге Түбәнге Троицкий буҫтау фабрикаһы өсөн ағас ҡырҡырға яраҡлымы-түгелме икәнлеген асыҡлау өсөн, уларҙы медицина комиссияһынан үткәрәләр. Ләкин тотҡондарҙың күбеһе ҡарала алмай, сөнки саманан тыш хәлһеҙҙәр. "Ғәжәпкә ҡаршы, аяғымда саҡ ҡына баҫып торһам да, мине яраҡлы тип таптылар",— ти Василий Дмитриевич. — Шулай итеп, сама менән 100 кешене һайлап алдылар. Ирҙәр бер тиҫтә самаһы ғына: Ануфрий Панков, минең йәштәш Анатолий Букреев, Василий Никифоров, Мәннәнов, Сәлихйәнов, Баранов... Күпселеге — 17 йәшлек һәм унан саҡ ҡына өлкәнерәк ҡыҙҙар, оло ҡатындар: Алла Зарамянских, Антонина Панова, Рәйсә Латипова, В. Бушуева. Йәш ҡатындарҙың күптәренең ирҙәре һуғышта, ҡайһы берҙәренеке инде һәләк тә булған. Ә бына шул һуғыш яугирҙарының бисәләренә, торф йәки заводтарҙы ҡалдырған, саҡ ҡына сменаға һуңлаған өсөн "енәйәтсе" исемен

күтәреп, үлем лагерҙарында каторга үтергә тура килә. Бында Свердловск өлкәһендә торф сығарған ерҙән киткән 19 йәшлек Таисия менән Мария Фисенко ла бар ине. Һуңғыһы, Мария, ауырлыҡтарҙы күтәрә алмай, шунда яҡты донъя менән хушлашты.

Өсөнсө көн. Медицина комиссияһын үткән кешеләргә, ИТК-1 ҡапҡаһынан сығарғас, алтышар йөҙ грамм сейле-бешле ҡара икмәк тотторҙолар. "Был һеҙгә юлығыҙға ризыҡ", — тип иғлан иттеләр. Ә Түбәнге Троицкиға тиклем ара — 75 саҡырым. Арып талсыҡҡан кешеләр, ҡалын ҡар йырып, конвоирҙарҙың һүгенеүе аҫтында алға ынтылды. Йығылғандар урындарынан тора алмай ятып ҡалды.

...Бер нисә көн мин урман ҡырҡырға йөрөнөм. Диләнкә лагерҙан ике километрҙа ғына булһа ла, юл ифрат ғазаплы ине. Сөнки кешеләргә тауға күтәрелергә кәрәк. Ул бик текә. Атлап барырлыҡ түгел, тубыҡланып, йөгөнләп, эт шикелле дүрт аяҡлап артылаһың үргә. Ә һаҡсылар ҡыҙыҡ күреп көлә — уларға нимә: кейемдәре йылы, ҡорһаҡтары тулы.

Ағастарҙы бысып ауҙарыу ғына түгел, ботаҡтарынан таҙартырға, тураҡларға, бер урынға өйөргә кәрәк. Ә ағас туң, еүеш, ауыр, ҡулдан шыуып тора.

Норманы бигерәк тә беләктәрендә аҙ ғына ла көс булмаған ҡыҙҙарға үтәүе мөмкин дә түгел. Ә үтәмәгәс, икмәкте лә 450 грамға тиклем кәметәләр. Бер тапҡыр күрәм: хәлдәре ҡалмаған Мәннәнов менән Сәлихйәнов, бысҡыны тарта алмайынса, ағасҡа арҡыры төшөп яттылар. Һаҡсы уларға тороп баҫырға, эшкә тотонорға ҡушты. Береһенең ауыҙына наган көбәген тығып, аҡыра башланы: "Үлтерәм, ҡәбәхәт, һин шулай ҙа былай!" Ләкин атмай, ҡолағына ғына тондора. Мәннәнов йығыла. Һаҡсы уға торорға, усаҡ янынан ситкәрәк күсеп баҫырға һәм ҡыбырҙамай торорға ҡуша. Тишек салбар, йыртыҡ фуфайка һәм сабата кейгән йәш егеткә был һис тә ҡыҙыҡ түгел — ул аяҡ-ҡулдарын туңдыра. Кеше менән ошолай ҡыланыу уларҙы "еләҫләү" тип атала.

Урман эше бер кемгә лә кәрәкмәгән һымаҡ тойола Васяға, сөнки ҡырҡылған ағас әрҙәнәләре Түбәнге Троицкий буҫтау фабрикаһы ише тағы тиҫтәләгән фабрикаға етерлек була. Уны бер кем дә ташымай — утын нисек әҙерләнгән, шул көйө сереп ята бирә. Бына ошолай, урман да, уның менән бергә кешеләр ҙә аҡрынлап юҡҡа сыға.

Кем барактан сыға алмай, надзирателдәр уларҙы һикеләренән төшөрөп, типкеләп, эштән баш тартты тип, аҙыҡ нормаһын 300 грамм икмәккә генә ҡалдыра. Асығыуҙан кешеләр шешенә, хәжәт итә алмай интегә, йә аҙыҡ эҙләп, сүп-сар араһында ҡаҙына.

Ләкин Туймазы эргәһендәге урманда эт тормошон тасуирлаған Антипов шуны белмәй ине: быға тиклем үк әле, егерменсе йылдарҙа ла, төрмә һәм лагерҙарҙа 60 мең кеше ултыра (араларында, әлбиттә, контрреволюционерҙар ҙа булғандыр. Ләкин бит күбеһе — ябай халыҡ!) Минең ҡайҙалыр уҡығаным бар: хөкөм ителгәндәр бөтә илдә таратыу өсөн гәзиттәр ҙә сығарған, бөйөк актерҙар ҡатнашлығында спектаклдәр ҙә ҡуйған. Айырым лагерь кимәлендә, бәлки, был һәйбәт күренештер — тормоштоң бер ҡайҙа ла туҡталмауын күрһәтә ул. Әммә ошо факттың тотош ил күләмендә ғәҙәти күренешкә әүерелеүе СССР-ҙың дөйөм лагерға әйләнә барыуын да аңлата: халыҡты бушлай эшләтеп, өнһөҙ-тынһыҙ ҡолға әүерелдереү, рухи яҡтан иҙеү, кәмһетеү, иң ахырҙа, кеше буйһонорға теләмәһә, уны физик яҡтан юҡ итеү — бына ошо хәл тетрәндермәй, ғәжәпләндермәй ҡалмай. Ниндәй ҡоролош һуң ул, үҙ халҡын үҙе "ашаған?" Иң аҡыллы ғалимдарҙың әйтеүенсә, бәлә партияла түгел, ә НКВД-ның партия өҫтөнән контроллек итә башлауында, язалау органдарының ябай коммунистарҙы ла, Политбюро ағзаларын да бер ниндәй рөхсәтһеҙ ҡулға алыу мөмкинлегендә. Фажиғә — илдәге реаль властың ҙур булмаған, ләкин ифрат нәфселе төркөм ҡулына күсеүендә.

"Кеше маймылдан яралған, — тип раҫлай Чарльз Дарвин. — Әммә лагерҙа кешене эт хәленә төшөрҙөләр, — ти Василий Дмитриевич. — Мин дә бик ныҡ бирештем. Барак стенаһына тотонмайынса йөрөп булмай ине инде.

Тағы медкомиссия килде, ул, урманда эшләргә яраҡлымы-юҡмы — шуны билдәләп, кешеләрҙе категорияларға бүлеп сыҡты. Мин һуңғы категорияға — теге донъяға әҙерләнеүселәр төркөмөнә эләктем. Шуға күрә беҙҙе, саналарға тейәп, кире "Таң"ға алып ҡайттылар".

## Ҡәбер соҡорҙары

Василийҙы лагерь етәкселегенә саҡыртып ала. "Һинең срогың ҙур түгел, мәйеттәрҙе ерләрһең", — тиҙәр уға. Был эште башҡарған өсөн кейендерергә, яҡшыраҡ ашатырға вәғәҙә итәләр. Вася нимәлер асыҡларға тип ауыҙын асыуы була, шунда уҡ ҡырт киҫәләр:

— Һорау бирергә рөхсәт ителмәй!

Эйе. Артыҡ ҡыҙыҡһыныу ярамай ине бында.

...Был юлдарҙы яҙған саҡта минең ҡулға "Шпигель" журналында баҫылып сыҡҡан обер-лейтенант Хайнд Дитер Майерҙың иҫтәлеге килеп эләкте. Һуғыш ветераны бына нәмәләр яҙа ине: "Ерләүселәр итеп тәғәйенләнгән хәрби әсирҙәр көрәк, лом ярҙа-

мында туң ерҙе кимерҙе. Ҡәбер әҙер булғас, мин үлектәр тейәлгән һуңғы йөктө ҡаршыланым. Урындағы халыҡ әйткәнсә, "ит ташыған" был йөктө ике тиҫтәләгән совет хәрбиҙәре һөйрәтеп килә ине. Уға рәт-рәт итеп сыр яланғас үлектәрҙе өйгәндәр. Аяҡ-ҡулдары сана япҡағынан һәленеп килә. Уларҙы бушатыу башланды. Боҙ булып туңған мәйеттәр бөгөлмәгәс, уларҙы шул көйөнсә ергә ташланылар..."

Фашистарҙың әсирлеккә төшкән совет һалдаттарын ниндәй михнәттәргә дусар итеүен беҙ әҙәбиәттән уҡып яҡшы беләбеҙ һәм, уларҙың бар тәбиғәте шулай инде, тип кенә уйлайбыҙ. Ә бына үҙ илебеҙҙә үҙ власыбыҙҙың халыҡ өҫтөнән шундай уҡ сәйәсәт уҙғарыуы аҡылға һыйҙырырлыҡ түгел.

...Васяға зонаға инергә һәм сығырға рөхсәт иткән пропуск тотторалар. Ошо ваҡыттан алып ул һәр төндө бер үк эш башҡара. Лагерь халҡы йоҡларға ятып, тынлыҡ урынлашҡас та, ул ылау менән зонаға инә һәм дежурный надзиратель оҙатыуында үлектәр ятҡан йорт алдына барып туҡтай. Моргтан һәр ваҡыт бер кеше килеп сыға һәм арбаға (ҡыш көнө — санаға), өс-дүрт, ҡайһы саҡта биш мәйет килтереп һала. Мәйеттәр һәр ваҡыт шәрә була. Уларҙың өҫтөнә һалам ташлайҙар. Вася ҡапҡаға йүнәлә. Йөктө, кергәндәге кеүек үк, тағы ентекләп ҡапшап ҡарайҙар, һалам аша үлектәрҙе штык менән сәнскеләйҙәр һәм Васяны сығарып ебәрәләр.

Вася, ҡурҡып, бер ҡасан да арбаға ултырмай. Ат менән йәнәшә бара, уны ташландыҡ урынға, тиҙәк түккән яҡҡа атлата. Бында бер ниндәй тәре-маҙар ҙа, башҡа билдәләр ҙә юҡ. Вася яңы балсыҡ өйөмөн генә эҙләй — соҡорҙо кемдәрҙер алдан ҡаҙып, әҙерләп ҡуйған булырға тейеш. Ул соҡорҙо барып таба, арбаһын ҡапыл ғына бороп, мәйеттәрҙең бөтәһен дә бер юлы ауҙара ла, йылдам ҡыбырҙап, күмә башлай. Шунан кире ат аҙбарына ҡайта, кухняла тамаҡ ялғап ала ла, уға ғына билдәләнгән мөйөшкә инеп, йоҡларға ята. Унан бер кем бер ни һорашмай. Үҙе лә өндәшмәй. Бер кем менән аралашмай. Көн дә бер үк шөғөл: арба, үлектәр һәм соҡор. Бер километр бараһың, бер километр ҡайтаһың. Шунан — йоҡо.

Юҡ, йоҡо түгел, ә торғаны бер яза. Васяның мейеһен бер үк һорауҙар маҙаһыҙлай: кемдәрҙе күмеп йөрөй ул — үҙ үлемдәре менән үлгәндәрҙеме, әллә үлтерелгәндәрҙеме? Ни өсөн яланғастар? Ниңә, алдан һөйләшеп ҡуйған кеүек, үлектәр өсәү-дүртәү йә бишәү була? Артыҡ та, кәм дә түгел.

Вася шул уҡ Бәләбәй районының Бикет ауылы кешеһе Ануфрий Панковты яҡшы хәтерләй. Ул һуғыштан яраланып ҡайтҡан. Егерме һигеҙ йәшлек был фронтовикты колхоз председателе итеп

һайлап ҡуялар. Лəкин председатель, нисəлер килограмм иген урлауҙа ғəйепләнеп, ошо лагерға килеп эләгə.

Элекке фронтовиктарҙан бында Кесе Бəлəбəйҙəн Василий Никифоров, Кирилловканан Павел Кичигин да колония тотҡонона əүерелə. Əле яңы ғына яугир булған Кичигин, танкыһы эсендə янып, биттəре тотошлай ямаулыҡтарҙан торған була. Һуғыштан ғəриплəнеп ҡайтҡанлыҡтан, ул эшлəй алмай, ҙур мохтажлыҡ кисереп йəшəй һəм... колхоздың бер нисə килограмм икмəгенə ҡул һуҙа. Ил һаҡсыһы бына ниндəй хəлгə төшə. Əлбиттə, уны ла йəлләмəйҙəр — биш йылға ултыртып ҡуялар.

“Уның тауышы матур тенор ине, — ти Василий. — Концерт һымаҡ нəмə ойоштороп, уның шундай йөкмəткеле йыр йырлағаны хəтерҙə: ел олой торбала, бесəй мырлай бүлмəлə. Ҡарт əсəйем, тынысйоҡла, улың ҡайтыр, ҡайғырма... Əмин эсемдəн генə, бына һиңə, ҡайттың, тип уйлайым... Миңə əйтеүе ҡыйын: шулай уҡ ғəйепле инеме икəн танкист Кичигин?

Ун ете йəшлек Михаил Гаранинды ла онота алмайым. ФЗО-нан киткəн өсөн ул бер йылға хөкөм ителгəйне, лəкин өс ай эсендə туберкулез элəктерҙе. Ахырҙа уны ҡайтарып ебəрҙелəр, һəм ул ике айҙан үлеп ҡалды”.

Ни өсөн йəштəрҙе шулай ҡырҙылар, бының маҡсаты ниндəй ине? Ваҡыты-ваҡыты менəн Вася шул хаҡта уйлана һəм үҙенə-үҙе яуап бирə: күрəһең, хөкүмəткə шулай кəрəктер. Бəлки, илдə халыҡ артыҡтыр. Ашатырға икмəк етмəйҙер. Шулай икəн, ниңə халыҡты, үҙ иркенə ҡуйып, ҡайтарып ебəрмəҫкə? Нисек тə үҙҙəренə ризыҡ табыр ине бахырҡайҙар. Үкенесҡə ҡаршы, аяғын һуҙыр хəлгə еткəн кешелəрҙең ни ҡəҙере бар, уны бер кем дə ауылына алып барып йөрөтмəҫ бит инде.

Йөрəген өйкəгəн һорауҙарға яуап таба алмайынса, Вася тау үренəн алыҫтарға ҡарап тора. Ҡояш байыған яҡта ҡалын урманлы тауҙар теҙелеп киткəн. Улар артында — Васяның тыуған ауылы, туғандары. Малайҙың бөтə күңелен бошонҡолоҡ билəп ала. Хəсрəт өҫтəп, көндəре лə боҙолдо: ямғыр һибəлəй ҙə һибəлəй. Яуын тымыуға күк йөҙөн ҡара сəүкəлəр ҡаплап ала. Улар алыҫ юлға йыйынғандай. Ығы-зығы килə ҡоштар, тауыштары ла əллə ниндəй тупаҫ.

Вася үлектəрҙе сүплеккə ташыуын ғына белə. Һыуыҡ көсəйеп, ерҙе туңдырһа, арбаның дыңғырҙауы тирə-йүнде яңғырата.

— Ҡурҡыныс булғандыр инде, ə? — тип һорайым.

— Үлектəрҙең һуғышмауын, тешлəшмəүен аңлаһам да, йөрəк өшөй торғайны. Тирə-яғымда бит ҡараңғылыҡ, тып-тын, бер кем юҡ. Мыжыҡ ямғыр яуа ла аяҡ аҫты лас-лос килə. Шартлап ағас бо-

тағы һына ла, йөрәкте өҙөп, ниндәйҙер ҡош ҡысҡырып ҡуя... Ҡот осҡос һөнәр ине был. Минең эште атымдан башҡа берәү ҙә күрмәй, бер кем шаһит түгел... Хәйер, хаталанам. Ә мине оҙатып ҡалыусылар? Бына ошо хаҡта уйлай торғас, шөбһә тыуҙы: мине лагерҙан иҫән-һау сығармаясаҡтар. Шигемде оло йәштәрҙәге Горелов тигән бер тотҡон да (ул Ивановка ауылынан ине) көсәйтеп ебәрҙе. Һин бынан ҡас, тип кәңәш бирҙе.

"Бына тағы төнгө ун бер етте. Ғәҙәттәгесә, морг янына килеп туҡтаным. Лазарет йортонан ҡара кейемдәге шул уҡ ағайҙар килеп сыҡты, бер ни өндәшмәй, санаға дүрт яланғас үлекте ырғытты. Мәйеттәр шаҡылдап килеп төштө. Ирҙәр уларҙы типкеләп рәтләп сыҡты ла өҫтәренә һалам ташланы. Был юлы мәйеттәр миңә ниңәлер айырыуса аҡ булып күренде, берәһе хатта таныш һымаҡ тойолдо. Ҡапҡанан сыҡҡас, түҙмәнем, һаламды шыуҙырып, саналағы үлектәрҙе ҡарай башланым. Берәһе, ысынлап та, таныш булып сыҡты — был минең ике туған апайымдың ире Кирилл Ширяев ине".

Ҡот осҡос хәл! Юл буйына, Кирилл нисек лагерға килеп эләкте икән, тип баш ватып бара Вася. Һуңынан ғына беләсәк ул: Кирилл да ғәйепһеҙгә хөкөм ителгән.

— Еҙнәне ерләргә кәрәк, минән башҡа бер заты ла юҡ ине уның был минутта, — тип һөйләй Вася. — Әҙер соҡорҙо эҙләргә тотондом. Ҡар яуа, ел аяҡтан йығырға самалай, күҙҙе томалай, һәм мин, һиҙмәй ҡалдым, соҡорға үҙем ҡолап төштөм. Бына ҡайҙа ул ҡурҡыу!

Ҡәберҙән нисек сығырға? Егеттең буйы 160 сантиметр ғына. Беләгендә көс юҡ. Стеналарҙы соҡор ине — туң. Аяҡ терәр ине — тая. Оҙаҡ тора Вася, төнгө күк йөҙөнә ҡарашын төбәп. Ә юғарыла буран уйнай, ҡоторона, үлектәр сананан ҡулдарын һонған кеүек тойола... Ҡәберҙе ҡар тултырғанын көтөргәме? Юҡ, туңып үләсәкһең. Иң һуңғы сиктә уй килә Васяға, арҡаһын — бер стенаға, аяҡтарын икенсе стенаға терәп, аҡрын ғына үргә шыуышырға. Шулай итә лә ул. Тик кире ҡолай. Яңынан үрмәләй. Аҙаплана торғас, барып сыға. Мәйеттәрҙе ауҙара һәм, санаға дилбегә бәйләп, тағы түбән төшә, Кирилды салҡан әйләндереп, һаҡлыҡ менән күмә башлай.

Был төндө Вася ашханаға бармай. Ҡасырға ҡарар итә.

Срогын тултырырға 32 сәғәт ҡалды тигәндә, декабрь төнөндә Вася лагерҙы ҡалдыра. Бер ай самаһы төрлө ауылдарҙа йәшенеп йөрөй ҙә 1944 йылдың 22 ғинуарында Өфөгә, хәрби комиссариатҡа килә һәм уны фронтҡа ебәреүҙәрен һорай. Бер ниндәй докумен-

ты булмаған Василий Антиповты күп уйлап тормай призывниктарға ҡушалар ҙа армияға оҙаталар...

В. Д. Антиповтың яҙмаларына аңлатма биреүҙе туҡтатып, шуны хәбәр итәйек: Тоцк хәрби лагерында булғандан һуң, Антипов ете йылға яҡын Совет Армияһында хеҙмәт итә, ғәриплек алып, тыуған ауылына әйләнеп ҡайта. Дүрт малай үҫтерә һәм уларға, күргән ғәҙелһеҙлектәрҙе һис онота алмайынса, берҙән-бер кәңәш бирә: "Һаулығығыҙҙы ҡайғыртығыҙ. Кемдер берәү һеҙгә ярҙам итер тип өмөт итмәгеҙ. Беҙҙең илдә ғәҙеллек табыу өсөн бик йыраҡ әле".

Бына шундай фәлсәфә. Ауыр һығымта.

Шулай ҙа уға һаман бер нәмә тынғы бирмәй. "Таң" колонияһында меңдәрсә ғәйепһеҙ кешеләрҙең ҡайҙа күмелгәнен минән башҡа берәү ҙә белмәйҙер, моғайын, — тигән уй борсой ветеранды. — Мин был ҡайғы тулы урынды күҙҙе бәйләһәләр ҙә барып табыр инем".

## Күп йылдар үткәс

В. Д. Антипов бәйән иткән ваҡиғалар ҡасандыр, ҡайҙалыр ситят ерҙәрҙә булған кеүегерәк ҡабул ителде. Был тойғо, Бәләбәй районы журналистары менән һөйләшкәс, тағы көсәйә төштө, сөнки "Таң"дағы фажиғалар хаҡында улар ҙа бигүк хәбәрҙар түгел ине. Ҡала мэрияһында беҙ шуны ғына белә алдыҡ: район үҙәгенән ун биш саҡырым самаһы ситтә ятҡан Таң ауылы хәҙер шул уҡ исемдәге совхоз-техникумға ҡарай, бында һыйыр малы һимертәләр икән. Шунда барып, меңдәрсә ҡолдарҙың ғүмерҙәре өҙөлгән урында булып, лагерь эҙҙәрен күрге килде. Булһа әгәр... Ә, бәлки, барыһы ла Антиповтың фантазияһы ғыналыр?

...Сәфәргә кискә табан сыҡтыҡ. Ҡапыл ҡар яуырға, буранһыта башланы. Шунда уҡ ҡараңғыланды. Юлдың ике яғынан да ағаслыҡ бөркәнгән тауҙар, тәрән шырлыҡтар һуҙылды. Уларҙың ҡайһыларын әйтте икән Антипов: арестанттар саҡ үрмәләп менгән үр тегеһеме, әллә быныһымы?

Үркәстәрҙе урата-урата, боҙло юлда тая-тая, йырынтыларҙы саҡ үтеп, ахыр сиктә Таңға барып етәбеҙ. Аҡҡа буялған таш йорт алдына барып туҡтайбыҙ. Бында кесе предприятие тип аталған хужалыҡтың контораһы икән. Баҡһаң, унда эшләгән ҡатындарҙың аңлатыуынса, беҙ элекке лагерҙың лазареты эргәһенә туҡталғанбыҙ. Йорттоң икенсе яғынан китапхана һәм клубҡа ишек уйғандар.

Конторала эшләүселәр элекке хоҡуҡ төҙәтеү һәм хеҙмәт колонияһының өйөн, унан арыраҡ ҡарайып ултырған ике ҡатлы ағас складты күрһәтә. Икенсе яҡта, текә ярға яҡынраҡ урында, тағы



Степан Михайлович менән Александра Фоминична Галушколар

бер йорт. Ярым емерек, бер стенаһы алынған. Элек ашхана булған икән. Таш кәрәк булғас, ауыл халҡы йортто шартлатып ҡараған, тик бынан бер ни килеп сыҡмаған — таштан да, ағастан да йорттар бында мәңгелек итеп һалынған.

Йылға яғына атлаған һайын, ниндәйҙер соҡор, траншеялар күбәйә, унда-бында бетон ватыҡтары, стена ҡалдыҡтары... Боронғо фажиғәләр эҙҙәре. Ерҙәге ярыҡтарҙан әрнегән, һыҡтаған тауыштар ишетелеп ҡалған һымаҡ.

Элекке лагерь зонаһына терәлеп, ауыл башлана. Урам осондағы ҡыҙыл кирбестән һалынған гараж яғына төртөп күрһәттеләр. Унда С. М. Галушко йәшәй, ул бөтәһен дә һөйләр, тинеләр.

Өй тирәләй тапанып, уның хужаһын эҙләнек. Степан Михайлович аҙбарҙа булып сыҡты. Мал ҡарап йөрөй икән. Танышып, тышҡа, яҡтыға саҡырып сығарып, ҡайҙа күпме барак, ҡайҙа ниндәй оҫтахана булыуын, Антипов биреп ебәргән план менән сағыштырып, һорашырға тотондоҡ. Антиповтың көн дә дүрт-биш мәйетте ерләүен йәки бер йыл эсендә 1.5 мең самаһы кеше үлеүен әйткәйнек, Степан Михайлович төҙәтеп ҡуйҙы: “Мең ярым ғынамы икән? Күберәк!” Василий Антипов йәшенеп бер үҙе генә ерләп йөрөгән тигәнгә лә Степан Михайлович, 43-сө йылда, бәлки, шулай булғандыр, ә бына аҙағыраҡ үлектәрҙе тотош бер команда ташыны, тип ҡуйҙы.

— Ә ҡәберлек үҙе ҡайҙа?

— Ана, ауылдың теге яғында. Ҡәберлек тә түгел инде, бер ниндәй билдә ҡуйылмаған тигеҙ ер.

Барып, фотоға төшөрөү өсөн һуң ине инде — төн булып китте.

Степан Михайлович өйөнә саҡырҙы. Ҡатыны, Александра Фоминична ҡаршы алды. Баҡһаң, А. Ф. Стоцкая колония хаҡында күберәк белә икән, сөнки бында һатыусы, һуңынан склад мөдире булып эшләгән. Ә бында ошолай килеп эләккән: фин һуғышынан ҡайтҡан ирен шофер итеп бында ебәргәндәр. Ләкин йәш ғаиләнең килеүе генә булған, Ватан һуғышы башланған, һәм Стоцкаяның ирен тағы фронтҡа алып киткәндәр. Тиҙҙән ул вафат булған, ә кәләше бында торған да ҡалған.

Степан Михайлович — Стоцкаяның икенсе ире. Ул “Таң”ға отделение командиры сифатында 1952 йылда ғына килгән. Ә 1953 йылды, И. Сталин донъя ҡуйыу менән үк, лагерҙы япҡандар. Ләкин Степан Михайловичтың да, Александра Фоминичнаның да колония тормошо тураһында һөйләрлек һүҙҙәре күп ине.

Өшөп килгән ҡунаҡтар алдына эҫе аш ҡуйып, улар хәтирәләргә бирелде. Арттарындағы стенала Ленин һүрәте күренгән һәм терһәккә терһәк ҡуйып ултырып алған хужалар был минутта миңә ныҡлы фронт хасил иткән һымаҡ тойолдо.

— Лагерҙы 1938 йылда асҡандар шикелле, — тине улар. — Башта бында монастырь булған. 58-се статья буйынса тәүге сәйәси тотҡондар сифатында монашкаларҙы ултыртып ҡуйғандар. Улар урман ҡырҡты. Бәләкәй сроклылар — бер килограмм бәрәңге, бер килограмм иген өсөн хөкөм ителгәндәр — мең самаһы кеше ине. Барыһын да яралы һалдаттар ҡарауыллайны.

— Ә кеше күп үлдеме?

— Күп. Балалары менән ултырған ҡатын-ҡыҙҙар ҙа бар ине бит. Бына шуларҙы ерләнеләр. Башта былай ғына, өйөм-өйөм итеп, ә һуңынан — табуттарға һалып.

— Шулай ҙа күпме кеше харап булды тип уйлайһығыҙ?

— Күп, бик күп.

— Ә ни өсөн үләләр ине һуң? Язаланылармы, туҡманылармы? Ана, Антипов ни ти, мәйеттәрҙе алып китер алдынан ҡапҡа төбөндә сәнскеләп тә ҡарағандар бит?

— Китсәле! Юҡты... Буш һүҙ! Аслыҡ ине бит, ҡырылдылар инде, ни эшләйһең. Ә кешеләрҙе йәберләү булманы, юҡ. Беҙҙең лагерь һәйбәт ине. Тәртипле лагерь ине.

Әңгәмә талғын ғына барҙы. Ахырҙа шуны әйтергә тура килде:

— Һеҙ, Александра Фоминична, ғәфү итегеҙ, лагерҙағы хәлдәрҙе тыныс ҡына һөйләйһегеҙ ҙә һөйләйһегеҙ. Былар барыһы ла һеҙҙең өсөн күнегелгән, ғәҙәти булғанғалыр инде, эйеме?

— Ғәҙәти тип ни... Ә артыҡ нимә булды һуң?

— Юҡ, һеҙ күҙ алдына килтерегеҙ: "Таң"да — бер лагерь булһын, ти, эргәлә генә, Ново-Троицкиҙа, тағы бер лагерь... Улар бит бөтә Башҡортостан, ул ғынамы, бөтә Рәсәй киңлектәрен тултырған. Был һәйбәт күренешме ни?

Мин ул саҡтағы властарҙымы, йә иһә бөтә матбуғатта фашланған "казарма социализмын" ғәйепләгән фекерҙәр ишетермен тип көткәйнем колонияның элекке хеҙмәткәрҙәре ауыҙынан. Юҡ, һүҙ бөтөнләй икенсе төҫ алды.

— Тоталар ҙа, милиционерҙар шулай ҙа былай булған, тиҙәр. Бурҙар өсөн насар булғандарҙыр инде. Урлашмаһындар. Шул хаҡта уйлап та ҡуймайҙар... Әйтегеҙ, улай икән, ни өсөн хәҙер тәртип тә, бер нимә лә юҡ? Йәштәр эшләргә теләмәй? Ә? Ана урам тибеп йөрөйҙәр. Ниңә уларға көстәре етмәй? Ниңә енәйәтселек көсәйҙе?

А. Стоцкая ҡыҙып китте. Күренеп тора, ул беҙгә ҡаршы һөжүмгә күсте. Хәҙерге тормоштоң бөтә кире яғын ҡунаҡтарҙың йөҙөнә бәрә башланы. Ни әйтәһең инде яуапҡа? Уның һүҙҙәрендә лә ҙур хәҡиҡәт бар. Ләкин шул уҡ ваҡытта Александра Фоминичнаның, ниндәй генә ҡаты, ҡанһыҙ власть булмаһын, үҙ мөхитенән, ҡоро дисциплина тигән төшөнсәгә генә табынып, ҡоллоҡ хисенән айырылырға теләмәүе аңлашыла ине. Хәйер, бер Александра Фоминична ғынамы ни? Беҙ үҙебеҙ ҙә, танырға теләмәһәк тә, күберәк шул ҡанға һеңешкән ҡоллоҡ рухын яҡлап маташабыҙ түгелме ҡайһы ваҡыт? Александра Фоминична ла ҡунаҡтарҙы аҡылға ултыртҡан һымағыраҡ тота башланы үҙен һәм уларҙы урамға оҙатырға сыҡҡас та күтәрмәнән ҡысҡырып ҡалды:

— Бер кемде лә йәберләмәнеләр колонияла, юҡты һөйләмәһендәр! Бөтәһе лә һәйбәт булды! Тәртип булды лагерҙа!

Минең юлдаштарымдың береһе генә, әҙәп һаҡлап һәм В. Антиповтың яҙғандарын яҡлағандай:

— Һин үҙең тотҡон булмағанһың шул, — тип үҙ алдына һөйләнеп ҡуйҙы.

Александра Фоминична быны ишетмәне.

*1992 й.*

# XIX. “14 сәғәт 25 минутта...”



Гв. полковниғы И. И. Ғөмәров.

**Тарих һөйләй:** “Берлин операцияһы иң күп ҡан түгелгән һуғыштар рәтенә инә. Үлгәндәрҙе лә, яраланғандарҙы ла һанағанда, юғалтыуҙар 352.475 кешегә барып етә (үлгәндәр — 78.291, “санитар юғалтыуҙар” йәки яраланғандар, контузия алғандар, янғандар һ.б. — 274.184 кеше). Был һандарға Берлин өсөн һуғышҡан ике поляк армияһын да ҡушырға кәрәк: кире ҡайтҡыһыҙ юғалтыуҙар — 2.825, “санитар юғалтыуҙар” — 6.087 кеше” (“Известия”, 23.06.1995).

Аяныс хәл. Дүрт йыл буйына һуғышыу артта ҡалған, Берлиндың яҙмышы ла хәл ителгән, уның мотлаҡ беҙҙеке булырға тейешлеге билдәле, әммә Советтар Союзының иң юғарғы хәрби етәкселеге, уны, бер ниндәй ҙә юғалтыуҙарға ҡарамайынса, мөмкин тиклем йәһәтерәк баҫып алыу өсөн ярыш ойоштора: төньяҡ-көнсығыш тарафтан маршал Г. К. Жуковтың 1-се Белоруссия фронты, көньяҡ-көнбайыштан маршал И. С. Конев командалығындағы 1-се Украина фронты бер-береһе менән болашмаҡ һөжүм башлай. Кем өлгөрә, кем тиҙерәк Берлин уртаһына барып етә һәм Рейхстаг башына байраҡ ҡаҙай — бөтә көс шуға буйһондорола. 1-се Белоруссия фронтының 3-сө удар армияһы штабында ашығыс рәүештә бер түгел, туғыҙ Еңеү Байрағын тегеп, буяп ҡуялар. Бындай байраҡтар, әлбиттә, И. Конев ғәскәрҙәрендә лә әҙерләнә. Шуға күрә һис ғәжәпләнерлек түгел: ошо уҙышмаҡ һөҙөмтәһендә ҡыҙыу һуғыш барғанда ике фронт ғәскәрҙәре араһында буталсыҡтар ҙа килеп тыуа һәм шул арҡала Рейхстаг башына беренсе булып кемдең Байраҡ ҡаҙауы бөгөнгә хәтлем бәхәсле булып ҡала килә.

1945 йылдың 20 апрелендә маршал Г. Жуков 2-се гвардия танк армияһы командующийы генерал С. Богдановҡа приказ бирә: “Һәр корпустан иң яҡшы берәр бригада алып, Берлинға табан ебәрергә һәм улар алдына шундай бурыс ҡуйырға: 21 апрелдә иртәнге сәғәт

дүрттән дә ҡалмайынса һәм бер нимә менән дә иҫәпләшмәйенсә, ҡала биҫтәһенә үтеп инергә һәм, Сталин иптәшкә доклад яһау өсөн һәм матбуғатта белдереү баҫтырыу өсөн, кисекмәҫтән миңә ошо хаҡта хәбәр итергә...”

С. Богданов армияһында күптән инде һыналған, “бер нәмәгә ҡарамайынса” һәм ҡурҡмайынса эш итә ала торған командир — ул подполковник И. Ғөмәров. Уның танк полкынан да шәберәге юҡ. **(Иҫкәрмә:** Ғөмәров Исхаҡ Иҙрис улы, 1912 йылда Баймаҡ районының Үрге Мәмбәт ауылында тыуған, башҡорт, Өфөлә йәшәп, 1993 йылда вафат булып ҡалды. — **Авт.)**

Беҙ Советтар Союзы Геройы исеменә күрһәтелгән, әммә уны ала алмаған тәүәккәл һәм тура һүҙле был батырҙың тормошон яҡтыртыуҙы бында маҡсат итеп ҡуймайбыҙ. Шулай ҙа, һүҙ ыңғайында ғына булһа ла, уның Берлин урамдары һуғышында үҙен нисек тотоуын, Еңеүгә ниндәй өлөш индереүен саҡ ҡына күҙаллау өсөн, фронтовик-яҙыусы **М. Мержановтың китабынан** хронологик рәүештә айырым юлдарҙы ғына килтерәбеҙ (“Так это было”, М., Политиздат, 1983).

“Беҙ көн буйына үҙ “эмка”быҙҙа фронт буйлап барҙыҡ. Юлда полк командиры Ғөмәровтың Горбатов менән батальондар алып барған ҡыҙыу һуғыштар тураһындағы һөйләшеүе хәтерҙә тороп ҡалған.

— Ғөмәров тәжрибәле, үҙ эшен белгән офицер, — тине Горбатов (**Иҫкәрмә:** яҙыусы Борис Горбатов. — **Авт.**). — Ул һәр һуғышты алдан, бик оҫта планлаштырып ҡуя. Ул үҙе — Рослый корпусының Антонов дивизияһынан. Иҫеңдәме, Краснодар эргәһендә Рослыйҙы ҡаршылағайныҡ? Ул ана шул инде. Бына ҡайҙа килеп сыҡҡан!.. Ә Ғөмәров, ҡасандыр ете йыллыҡ һуғыш ваҡытында урыҫ армияһының да ошо юлдан үтеүен һөйләгәйне...” (13-сө бит.)

20 апрелдә иртә менән дивизия полктары алғы позицияға сыҡты һәм Претцель өсөн һөжүм башланы. Кунерсдорф бушап ҡалды. Көн үҙәгендә минең янға артиллерия погондары таҡҡан полковник килде:

— Хәбәрсе һеҙ булаһығыҙмы? Улай булғас, әйҙәгеҙ, минең арттан... Хәҙер орудиеларҙан Берлинды тәмей башлаясаҡтар.

— Берлинды? (15-се бит).

“21 апрель Берлиндың төньяғынан һөжүм иткән беҙҙең ғәскәрҙәргә уңыштар юлдаш ине... Генерал С. Богдановтың 2-се гвардия танк армияһы Берлиндың төньяҡ-көнсығыш өлөшө буйлап бара ине инде. 5-се удар армияның алдынғы частары — подполковник И. Ғөмәров полкы — Нойенхагенға барып инде...” (25-се бит).

“24 апрель. Берлин яна. Һуғыш хәҙер тулыһынса урамдарға күсте... Төнөн Берлиндың Трептов паркы тирәһендә Берзарин армияһы йылға аша сыкты...” (60-сы бит). Шпрее йылғаһында ҡалған берҙән-бер күпергә һөжүм итеү шул тиклем ҡапыл һәм көслө булды ки, хатта бөтә төр ҡоралдарҙан бер туҡтауһыҙ атып ятҡан гитлерсылар ҙа артыҡ ҡаршылыҡ күрһәтә алманы. Йылға аша башҡаларҙан алда генерал И. Рослый корпусы сыға, ә унда, корпуста, И. Ғөмәровтың 1050-се полкы беренсе ине. Беҙ шунда саптыҡ...

Кискә табан Трептов паркындағы плацдарм беҙҙең ҡулға күсте. Ғөмәров полкын элекке позицияһына, йылғаның көнсығыш ярына алып ташларға маташыу бер нигә лә килтермәне...” (61—62-се биттәр).

Юғалтыуҙар күп булһа ла, совет ғәскәрҙәре, һөжүм итеүҙәрен һаман киңәйтә барып, шул уҡ көндә ҡаланың үҙәк секторы плацдармында һуғыш йәйелдереп ебәрә.

“Хәл иткес көндәр яҡынлаша. Оло еңеүгә Шпреелағы, Трептов паркындағы, Тельтов каналындағы һ.б. уңыштар илтә ине...

— Трептов паркы — ул инде Берлиндың үҙәге, — тип ҡыуанды генерал Н. Берзарин, беҙ кисен уның янына барып ингәс, киләсәктә беҙ ошондай геройҙарыбыҙға һәйкәл ҡуясаҡбыҙ...” (64—65-се биттәр).

“29 апрель. Хәҙер, совет ғәскәрҙәре ҡаланың ҡыҫынҡы үҙәк өлөшөнә барып ингәс, һуғыштар тағы ҡатмарланып китте, көсөргәнешлек артты. Командирҙарға һәр урында эргәһендәге орудие, танк менән бергәләп эш итһен өсөн кисекмәҫтән ҡарар ҡабул итә белеү кәрәк ине...

Беҙ генерал Рослый корпусына ашыҡтыҡ. Ул хөкүмәт кварталдарына һөжүм итә һәм, башҡаларға ҡарағанда, империя кәнсәләренә еткәйне тиерлек... Бында майҙан аша ҡапыл ғына ташланып та бер ни хәл итерлек түгел — алда тотош ут, орудиелар, минометтар, автоматтарҙың һәр төрөнән, фаустпатрондарҙан төрлө яҡлап аталар. Шуға күрә полк командиры И. Ғөмәров флангыларҙы ҡуҙғатырға приказ бирҙе. Һөҙөмтәле булды был. Көн һүрелеүгә Ғөмәров һәм Радаев полктары уң яҡта, Вильгельмштрассела, иң ситке өйҙө баҫып алды, хәҙер гестапо бинаһына ҡырындан ут асырға мөмкинлек тыуҙы...

Ғәскәрҙәр империя кәнсәләренә һәм Бранденбург ҡапҡаһына яҡынлашты, ә ул Рейхстаг эргәһендә генә...

Шулай ҙа “Гиммлер йорто” өсөн барған алыш ул көндөң иң үҙәгендә ине. Ҡыҙыл кирбестән һалынған был алты ҡатлы йорт

Рейхстагҡа ҡыялаш ҡына ултыра. Штурм башлау өсөн бик уңайлы урын...” (120—122-се биттәр).

“Был йорт өсөн ике полк — 150-се дивизиянан Зинченконың 756-сы полкы һәм Шаталиндың 380-се полкы — һуғышты. Уңыш еңелеү менән алмашынып торҙо... Кискә табан С. Неустроев менән М. Давыдов батальондары йорттоң күпселек өлөшөн яулап алды. К. Самсонов батальоны иһә төньяҡ-көнсығыштан беренсе ҡатҡа барып инде...” (123—124-се биттәр).

Бына ошонда М. Мержановтың яҙғандарына ялғап, 80-се йылдарҙа Башҡортостандың **Октябрьский ҡалаһында булған бер осрашыуҙы** иҫкә алып китергә кәрәк.

Октябрьский ҡалаһы йәштәре һуғыш ветерандарын — II дәрәжә Кутузов орденлы 150-се Идрица-Берлин уҡсы дивизияһы 469-сы полкының штаб начальнигы урынбаҫары өлкән лейтенант И. И. Рыжковты (Харьков ҡалаһынан), шул уҡ полкта штаб начальнигының разведка буйынса урынбаҫары, отставкалағы подполковник М. Н. Николаевты (Башҡортостандың Яңауыл районынан), уҡсы взвод командиры, отставкалағы өлкән лейтенант Л. П. Литвак һәм тағы ла бер нисә яугирҙы — ҡунаҡҡа саҡырғайны. Ветерандар, ғәҙәттәгесә, хәтирәләре менән алышты. Һуңынан был юлдарҙың авторына ҡунаҡтарҙың береһе **Л. П. Литвак менән әңгәмәләшеп** ултырырға форсат тейҙе (**Иҫкәрмә:** Л. П. Литвак Ҡурган өлкәһенең Щучье ҡалаһында йәшәй, хаҡлы ялға киткәнгә тиклем уҡытыусы булып эшләгән. — **Авт.**).

— Леонид Петрович, һеҙҙең взводтың Рейхстаг бинаһына беренселәрҙән булып инеүе беҙгә мәғлүм. Ә уға тиклем, 29 апрелдә, нимәләр булды, ҡыҫҡаса шул хаҡта һөйләһәгеҙ ине.

— 29 апрелдә беҙ “Гиммлер йорто”нда туҡтауһыҙ һуғыш алып барҙыҡ. “Эсэс” һалдаттары, күпләп ҡырылыуҙарына ҡарамаҫтан, ныҡ ҡаршылыҡ күрһәтте. Бүлмәләр әле бер, әле икенсе ҡулға күсте. Һуғыш көнө буйы барҙы, һәм фашист Германияһының Эске эштәр министрлығы йорто 30 апрелгә ҡараған төндә генә тулыһынса беҙҙең ҡулға күсте. Һуғыш бер аҙға ғына тынып ҡалды.

— Ошо минуттарҙа һеҙҙең взвод егеттәре нимәләр кисерҙе икән?

— Һуғышты тиҙерәк бөтөрөү теләге ине уларҙа. Бик арығайны һалдаттар. Минең взвод икенсе ҡаттағы бер бүлмәгә йыйылды. Кем ҡайҙа башын терәне, шунда уҡ йоҡоға талды. “Саҡ ҡына ял итеп алһын һалдаттар”, — тигән йыр бар бит. Беҙгә ҡарата сығарылған кеүек ул. Әммә командирҙарҙың хәл итәһе нәмәләре был минутта ла муйындан ашҡайны.

— Һеҙ алдағы һөжүм тураһында әйтмәксеһегеҙме?



Октябрьский ҡалаһындағы осрашыу. Һуғыш ветерандары, һулдан уңға: икенсе — отставкалағы подполковник М. Н. Николаев, өсөнсө — отставкалағы өлкән лейтенант Л. П. Литвак.

— Эйе. Ҡарайым, беҙҙең янға, ашығып, рота командиры лейтенант Греченков килеп етте. Егеттәр нисек, тип һорай. Тәгәрәшеп ятҡан иптәштәремә күрһәтәм. Мин батальон командиры янында булдым, ти Греченков. Беҙҙең батальон һәм беҙҙең ротаға Рейхстагты штурмлау бурысы йөкмәтелә, ти. Мин ышанманым. "Их һин, ышанмайым!.. Һинең взвод беренсе булып күтәреләсәк".

Аҫҡа, подвалға төштөк. Арғы башта берҙән-бер тәҙрә күренә. "Бына ошонан башлаясаҡбыҙ һөжүмде", — ти командир. Ҡарайым: "Гиммлер йорто"на терәлеп үк майҙан башлана. Ул әле томан, янғын төтөнөнән күренмәй ҙә. Ул майҙанда ниндәй нығытмалар бар, Рейхстаг ҡайһы яҡта — белгән юҡ. Мәғлүмәттәр бик аҙ ине. Бер нимәгә генә шикләнмәйбеҙ: Рейхстаг бик нығытылған булырға тейеш, уның өсөн һуғыш аяуһыҙ буласаҡ.

— Рейхстагты алыу тураһында фильмдар бар бит. Уларҙа штурм дөрөҫ күрһәтелгәнме?

— "Берлиндың еңелеүе" тигән фильмда тап әле мин әйткән тәҙрә төшөрөлгән дә инде. Тиҙҙән беҙ ысынлап та приказ алдыҡ, һәм Рейхстагты штурмлау башланды..."

Леонид Петрович менән булған әңгәмәне туҡтатып тороп, **М. Мержанов китабынан** империя кәнсәләрендә ниҙәр булғанын дауам итерәйек:

"Ләкин атыштар һаман бара ине әле. Батальондың сәйәси бүлеге начальнигы урынбаҫары Алексей Берест Гиммлерҙың кабинеты-

на барып сыҡҡан — ҡыйратылған буш бүлмә, ләкин унда ишеге ярым асыҡ сейф ултырғанын күреп ҡала ул, ә эсендә — сәғәттәр, сәғәттәр. Әллә шаяртып, әллә ысынлап, Берест эргәһенән үтеп барған һалдатҡа ҡысҡыра:

— Керегеҙ — сәғәт таратам!.." (124-се бит).

Шул мәлдә "Гиммлер йорто"ноң аҫҡы ҡатында митинг башлана. Һалдаттар, төркөм-төркөм булып, Рейхстагты нисек алыу тураһында кәңәшләшә.

Рейхстагҡа беренсе булып һөжүм итергә тейеш булған 150-се дивизияның 756-сы, 674-се полктары, 171-се дивизияның айырым частары алдында үтә ҡатмарлы бурыс тора.

Алда — траншеялар, ҡатмарлы доттар системаһы. Майҙан арҡыры һыу тулы соҡор һуҙылған. Йорт баштарынан төрлө калибрҙағы орудиелар үлем сәсә. Ошо "тамуҡ" аша нисек тә булһа үтергә, иҫән-һау ҡалырға һәм тимер-бетон нығытмаға әүерелдерелгән Рейхстагты алырға, башына Еңеү байрағы ҡаҙарға".

— Мин тегеләй-былай, һулға ике-өс метр, унан уңға борола-борола шыуышырға бойорҙом, —тип һөйләне миңә һуңынан Греченков. — Ҡот осҡос уттан беҙ шулай ғына ҡотола ала инек. Мин үҙем һәм тағы Литвак ине шикелле трансформатор будкаһына ышыҡландыҡ... Ҡайҙалыр яҡында ғына капитан Маковтың добровольцтар төркөмө хәрәкәт итә ине..." (145—147-се биттәр), (**Иҫкәрмә:** капитан Маков — Ғ. Заһитов, Л. Бобров, И. Мининдарҙан торған төркөм командиры. Уларҙың араһынан 136-сы пушка-артиллерия бригадаһының пост начальнигы өлкән сержант Заһитов Ғәзи Ҡазыхан улы — сығышы буйынса Башҡортостандың Мишкә районынан була. **Үҙәк Архивтан алынған документта** уның батырлығы тураһында бына ни тиелә: "...30 апрелдә Заһитов иптәштәре менән бергә Рейхстагтан 100 метр алыҫлыҡта үткән, картала билдәләнгән каналды таба һәм был хаҡта радио аша 79-сы корпус командованиеһына еткерә.

Рейхстагты штурмлаған саҡта Заһитов унда беренсе булып үтеп инә, әммә ошо саҡта күкрәгенән пуля тишеп үтә. Яраланған өлкән сержант Заһитов менән сержант Минин Рейхстаг башняһына менә һәм тәүге Еңеү байрағын урынлаштыра. Рейхстагты штурмлаған сағында күрһәткән ҡаһарманлығы өсөн Заһитов иптәш Советтар Союзы Геройы исеме бирелеүгә лайыҡ.

1 май, 1945".

Ошонда уҡ уны юғары исемгә тәҡдим итеүселәрҙең 136-сы бригада командирынан алып 3-сө удар армия командующийына тиклем — исемдәре һәм ҡултамғалары ҡуйылған. Әммә 1-се Белоруссия фронты командующийының 1945 йылдың 18 майындағы

576-сы приказы нигеҙендә Заһитов менән уның иптәштәре Ҡыҙыл Байраҡ ордены менән генә наградлана. — **Авт.**)

Хәҙер инде **Л. Литваҡҡа һүҙ бирәйек.**

— Леонид Петрович, ә штурмдың нисек башланыуын һеҙ нисек хәтерләйһегеҙ?

— Орудиелар эшкә тотоноу менән, Король майҙаны шунда уҡ снарядтар шартлауына күмелде. Ер тетрәгән кеүек булды. Уңайыраҡ ваҡытты һайлап, команда бирәм: "Әҙерләнергә... киттек!" Егеттәр, йылдам ғына тәҙрә тупһаһы аша һикереп, бер-бер артлы китә торҙо. Йөрәк тулай. Ут аҫтына сержант Василий Лосенковтың отделениеһы, улар менән бергә минең урынбаҫар өлкән сержант Николай Досычев китте. Унан сержант Зуевтың отделениеһы ҡуҙғалды. Өсөнсө отделение командиры сержант Федоренкоға ҡысҡырам: "Туҡтамаҫҡа! Үҙең иң арттан барырһың!", һәм мин дә һуңғы һалдаттар менән бергәләп, ышыҡ урынды ҡалдырам. Алда — билдәһеҙлек...

Ут аҫтындағы һәр аҙым — йүгерһәң дә, шыуышһаң да — барыбер, үҙе бер батырлыҡ. Һәр хәрәкәт ауырлыҡ менән бирелә. Етмәһә, ысын нығытмаға әүерелгән Рейхстаг алдына тәрән канау йырып ҡуйылғайны. Эсе тулы һыу, йылғанан ағып төшкән. Алда тағы нимәләр бар, дошмандың көсө күпме — асыҡларға кәрәк ине; ләкин быны ғәҙәттәгесә, элемтәселәр ярҙамында ғына эшләрлек түгел. Тураһын әйткәндә, улар алға үтә алмаясаҡ. Тимәк, бар ышаныс — үҙебеҙгә, һәр кем, бер килке лә туҡтап тормайынса, тик алға барырға тейеш. Хәлде фәҡәт урынына барып еткәс кенә асыҡларға мөмкин".

**Тағы М. Мержанов китабынан:** "...Һөжүмде көсәйтә барып, көндөң икенсе яртыһында Рейхстагҡа беренселәр булып өлкән лейтенант К. Я. Самсонов, капитан С. А. Неустроев, майор В. И. Давыдовтарҙың батальондары бәреп инә." Улар араһында байраҡ алып барыусы М. А. Егоров менән М. В. Кантарияны һаҡлауҙы тәьмин итергә тейеш булған беҙҙең яҡташ Миңлеғәле Николаев һәм Рейхстагҡа уң яҡтағы ишектән барып ингән Л. Литвак взводы егеттәре лә була... "Греченков ротаһы йорттоң көньяғынан барып инде. Юлдарында подвалы тәпәш кенә өй тап булды. Рота командиры, иҙән аҫтына төшкәйне, немец полковнигын осратты. Ул урыҫса белә икән.

— Бында беҙҙең медицина бүлеге, — ти, — мин һеҙҙе ҡотлайым һәм Рейхстагҡа ер аҫтынан барырға тәкдим итәм. Һалдаттарығыҙҙы үҙем оҙатасаҡмын.

Греченков һәм Литвак бер-береһенә ҡарап ҡуйҙы... Был ваҡытта Литвак һәм Лужников взводтары Рейхстагтың "парламент ише-

ге" янында ине инде. Ишектәр асыҡ булып сыҡты. Тап бына ошо ишектән ябырылып инеп киттеләр: Литвак, Лужников, Досычев, Лысенко, Такнов, Булатов, Бородулин, Гавришев, батальон парторгы өлкән лейтенант Исаков...

— 30 апрелдә 14 сәғәт 25 минутта беҙ Рейхстагҡа инә торған төп ишек янындағы ситке колоннаға байраҡ элдек, — тип һөйләне миңә Михаил Еремин.

Рейхстагтың икенсе яғынан шундай уҡ флагты 150-се дивизиянан Рәхимжан Ҡашҡарбаев ҡаҙаған һ.б. һ.б...

14 сәғәт 25 минутта Сьянов ротаһы артынан Греченков ротаһы Рейхстагҡа барып инә. Берест, Егоров һәм Кантария ла үҙ байраҡтарын ишек эргәһендәге колоннаға беркетә..." (149—152-се биттәр).

— Ә Рейхстагҡа нисек барып индегеҙ? — Был һорау тағы Л. Литвакҡа.

— Беҙҙең артиллеристар икенсе тапҡыр атыуҙы туҡтатҡас ҡына. Йорт эсенә ҡасҡан гитлерсылар тиҙ генә иҫтәренә килә алманы, ә беҙҙең ҡыҫым шул тиклем ҡапыл булды — рота шунла уҡ Рейхстаг эсенә барып инде һәм ҡул һуғышы башлап ебәрҙе... Бына ҙур зал. Автоматтарҙан ата-ата, дошманды унан ҡыҫырыҡлап сығарҙыҡ. Ләкин улар бер туҡтауһыҙ әллә ҡайҙан килеп сыға торҙо. Һуңынан ғына белеп ҡалдыҡ: подвалдарҙа булған икән улар. Күптәрен шунда, иҙән аҫтына, бикләй алдыҡ.

Ул-был итергә өлгөрмәнек, рядовой Демьян Добриянскийҙың: "Парк аша немец танкыһы килә!" — тигән тауышы яңғыраны. Хәүефле ине был: әгәр "фердинанд", уңайлы урын һайлап, тәҙрәгә атып өлгөрһә, залда бөтә нәмә шартлаясаҡ ине. Ләкин егеттәр ПТР-ҙан атырға тотондо, беҙҙең артиллеристар ҙа мәргәнлеген күрһәтте: уларҙың бер нисә снаряды танк расчетын юҡ итте... Иркен тын алып, пилотка менән битемде һөрттөм: ҡара тиргә батҡайныҡ.

**Артабан М. Мержанов яҙа:** "Был көндө ғәҙәти хәлдәргә һыймаған ваҡиға булып алды. Емергес орудиеларҙан атыуға яуап итеп, бер заман эргәләге йорттоң аҫтынан аҡ флаг күренде. Полк командиры утты туҡтатырға бойорҙо. Уның әмере һалдаттарға ныҡ тәьҫир итте, улар, күрәһең, һуғыш бөтөнләйгә туҡтаны, хәҙер дошман ҡоралын ҡабул итергә бараһы ғына ҡалды, тип уйлағандыр... Шул арала ер аҫтынан аҡ флаг күтәргән бер төркөм немец офицерҙары килеп сыҡты. Улар подполковник Ғөмәровтың КП-һы урынлашҡан йортҡа йүнәлде... Уларҙы батальон командирҙары Михайлов, Шаповаловтар ҡаршы алды.

— Парламентерҙар үҙҙәренең шәхси ҡоралдарын тапшырып, Геббельс ҡул ҡуйған мандаттарын күрһәткәс, беҙ уларҙы Дания илселегенең иҙән аҫтында урынлашҡан полк командирына алып барҙыҡ, — тип һөйләне миңә Шаповалов. — Полковник Эдер, обер-лейтенант Зегер һәм бер һалдаттан башҡалары, Ғөмәров янына инде... Беҙ уға (урыҫса белгән Эдерға. — **Авт.**) бер нисә һорау бирҙек. Шул иҫәптән Гитлер хаҡында ла.

Беҙ ярайһы уҡ йәнле һөйләшеү алып барҙыҡ, шунан ишек асылды, парламентерҙар сығып китте, ә беҙгә уларҙы урам аша сығыр урынға оҙатып ҡуйырға ҡушылды...

Һуңыраҡ, шул уҡ көндө, подвалдан тағы аҡ флаг күренде, яңынан утты туҡтатырға бойороҡ бирелде.

Ғөмәровтың команда пунктына парламентерҙар килде. Был юлы улар үҙҙәренең парламентерҙар икәнен раҫлаған асыҡ пакет һәм Жуковҡа адресланған икенсе, ябыҡ пакет килтергәйне. Конвертҡа “Жуков” урынына “Шуков” тип яҙылғайны.

Һәм тағы армия командующийы Берзариндың бойороғо буйынса уларға ҡайтып китергә тәкдим ителде...

Шунда уҡ атыш ҡыҙып китте.

Ләкин өсөнсө тапҡыр ҙа күренде аҡ флаг. Был юлы полковник фон Дюффинг Гитлерҙың адъютанты генерал Бургдорфтың хатын килтергәйне...” (152—155-се биттәр). Унда немец армияһы командованиеһы, үҙҙәренең атышыуында немец телен белмәгән ҡайһы бер һалдаттарҙы ғәйепләп, совет ғәскәрҙәре етәкселәренән ғәфү үтенә ине. Полковникты кире ҡайтарып ебәрәләр.

1 майға ҡараған төндә немецтар, радио аша утты туҡтатыуҙы үтенеп, сәғәт 24-тә Потсдам күперенә тағы парламентерҙар ебәрәсәген иғлан итә. Генерал Ганс Кребс менән полковник фон Дюффинг йәнә Ғөмәров полкы ҡаршыһына сыға. Ғөмәров уларҙы Темпельхофҡа, генерал Чуйков КП-һына оҙата. Улар килтергән хатта Гитлерҙың яҡты донъянан китеүе, уның васыяты буйынса бөтөн властың Дениц, Геббельс һәм Борманға күсеүе белдерелеп, Борман менән Сталин араһында бәйләнеш булдырыу тураһында һорала ине.

— Соколовскийға әйтегеҙ, — ти И. Сталин, — бер ниндәй һөйләшеү булмаясаҡ. Һүҙһеҙ капитуляция ғына...

“Берлин гарнизоны капитуляция яһаны. Ҡоралдарын һалған гитлерсы частар күренде. Рейхстаг подвалдарынан, яңылышмаһам, ике мең самаһы фашист сыҡты. Бына ул, сәстәр үрә торорлоҡ хәл! Был көндө Берлинды алыусылар өсөн һуғыш тамамланды. Беҙ беренсе булып “Еңеү” тигән һүҙҙең ни тиклем татлы һәм ҡәҙерле икәнен тойҙоҡ”.

Рейхстагтың нисек алыныуы, йорттоң һәр ҡаты, һәр бүлмәһе өсөн барған һәм күп ғүмерҙәрҙе ҡыйған алыштар хаҡында унда ҡатнашҡан кешеләр күп яҙған. Был хаҡта мемуар әҙәбиәттә лә мәғлүмәттәр етерлек тупланған. Беҙҙең маҡсат иһә — ошо ғәйәт ҙур алышты дөйөм фон итеп кенә алып, ҡаһарманлыҡтар тулы бер көндөң бер бәләкәй генә деталенә, атап әйткәндә, Л. Литвактың ҡулындағы сәғәткә туҡталыу.

Литвак уны Октябрьский ҡалаһына килгәндә, осрашыу ваҡытында студенттарға күрһәткәйне. Шул хаҡта ентекләберәк һорашыу хәжәте тыуғас, беҙ Леонид Петровичты, хаттар яҙыша торғас, Ҡурган өлкәһенең Щучье ҡалаһынан таптыҡ.

“Сәғәт тарихы былай, — тип яҙҙы Литвак бер хатында. — 1 майҙа Рейхстаг эсендә булды был. Минең взвод әле генә эсесовсыларҙың тағы ла бер һөжүмен кире ҡаҡты — беҙҙе бер залдан ҡыҫырыҡлап сығармаҡсы ине улар. Эргәмдә — гитлерсыларҙы тиҫтәләрсә тапҡыр кире ҡаҡҡан һәм хәлдән тайған иптәштәрем. Мин пилоткам менән битемде һөртөштөрөп тора инем, янымa бер һалдат килеп баҫты. “Иптәш лейтенант, — тине ул. — Рейхстагты алыу иҫтәлеге итеп һеҙгә ошо сәғәтте тапшырырға рөхсәт итегеҙ”. Әйтте лә һалдат шунда уҡ юҡ булды. Бер ни һорап өлгөрмәнем, йөҙөнә лә яҡшылап иғтибар итмәнем, сөнки залдың тәҙрә урындары бөтәштерелгәйне, ә атыш алып барыу өсөн ҡалдырылған тишектәрҙән яҡтылыҡ саҡ-саҡ ҡына үтә. Һалдат тотторған бәләкәй генә төргәкте кеҫәгә һалдым да был хаҡта шунда уҡ оноттом.

Берлинда атыштар тымғас, беҙҙе Рейхстагтан сығарып, ял бирҙеләр. Туйғансы йоҡлап алдыҡ, үҙебеҙҙе тәртипкә килтерә башланыҡ. Шунда ғына, кеҫәлә ниндәйҙер әйбер барын иҫкә төшөрөп, аҡ ебәктән тегелгән тоҡсайҙы тартып сығарҙым. Тегеүен һүтеп ҡараһам, ысынлап та, — сәғәт! Ҙур ғына, циферблаты ҡара, юғарғы яғына латин хәрефтәре менән “Зенит” тип яҙылған. Корпусы — тутыҡмай торған аҡ ялтыр металдан, маятниктың үҙәге — алтындан. Пружинаһын борғайным, сәғәт йөрөп китте. Энә алып, ҡапҡасына яҙып ҡуйҙым: “1945. Берлин. Май. 1-го. V-го. Литвак. Номер часов: 8404087. Н.”.

Бында шуныһы ҡыҙыҡлы: фашистарҙың ысын-ысындан ҡаҡшамаҫ нығытмаға әүерелдерелгән, стенаһындағы һәр сантиметры үлем сәскән һуңғы бастионды тиҙерәк алырға дәртләндереп, Еңеү көнөнөң бер иҫтәлеге булып ҡалһын, тип, сәғәтте ниндәйҙер бер һалдат таратып йөрөгән. Был тарихи ваҡиғаны **“Рейхстаг өҫтөндә — Байраҡ”** тигән китабында генерал-полковник В. М. Шатилов та иҫкә ала:

“...Яр буйлап ауыр пулеметтар һәм ваҡыты-ваҡыты менән орудиелар атыуын дауам итте. Беҙ йәһәт кенә уңға боролдоҡ та күпер аҫтына төштөк. Бында үҙебеҙҙең бер нисә боецҡа тап булдыҡ.

— Иптәш генерал! — тигән ҡарлыҡҡаныраҡ тауыш туҡтатты мине. — Сәғәт алыуығыҙҙы үтенәм.

Боролоп ҡараным: ҡырынмаған, фуфайка кейгән һалдатты күрҙем... “Трофейсы. Етмәһә, оятһыҙ икән”, — тигән уй йүгереп үтте башымдан.

— Мин үҙ белдегем менән түгел, — тине һуғышсы үпкәләгән тәүҫ менән. — Мине старшина Игнатов ебәрҙе. Кемдәр Рейхстагҡа бара, шуларға сәғәт тапшырырға ҡушты. Штурм башланған ваҡытты хәтерләр өсөн, тимәк.

— Быныһы башҡа, — тип, мин үҙ хатамды төҙәтергә ашыҡтым. — Улай икән, ҡабул итәм. Рәхмәт. Фамилияғыҙ нисек һеҙҙең?

— Рядовой Кобелев!..”

“...1971 йылдың декабрендә генерал миндә ҡунаҡта булып китте, — тип яҙҙы миңә икенсе хатында Л. Литвак (Иҫкәрмә: һүҙ ыңғайында шуны әйтеп үтергә кәрәк: Леонид Петрович Совет Армияһынан 1947 йылда ғына демобилизациялана. Тәүҙә музыкант булып эшләй, ләкин, һуғышта алған контузияһы ҡамасаулай башлағас, эшләргә урта мәктәпкә күсә). Культура һарайында ҡала халҡы менән осрашыу ойоштороҡ, Василий Митрофанович Шатилов Берлин өсөн барған һуғыштар, совет яугирҙарының нисек Рейхстагты штурмлауы хаҡында һөйләне. Бына ул бина эсендәге һуғыштарға күсте, унан һуң ниндәйҙер һалдаттың уға сәғәт бүләк иткәнен иҫләргә тотондо һәм: “Ҡыҙғанысҡа ҡаршы, ул сәғәтте мин һеҙгә күрһәтә алмайым бит әле”, — тип һүҙен тамамланы. Сөнки сәғәтен ул Ленинградтағы Октябрь революцияһы музейына тапшырған икән... Шул мәл мин генералды бүлдем дә, ул ҡомартҡы миндә лә бар, тинем һәм генералға сәғәтемде алып күрһәттем. Василий Митрофанович бик ғәжәпкә ҡалды...”

“Һалдаттың генералды наградлауы” хаҡында В. М. Шатилов, ҡыҙыҡ күреп, дивизия ветерандарының дөйөм йыйылышында ла һөйләне, — тип иҫкә ала Литвак өсөнсө хатында. — Генерал һүҙен тамамлап та өлгөрмәне: “Һеҙ әйткән старшина Игнатов мин булам!” — тип, залда берәү күтәрелде. Генерал бер аҙға аптыраышта ҡалды, һәм: “Ҡайҙа, күренегеҙ әле, иптәш Игнатов! — тип, уны үҙенең янына саҡырҙы”.

Был иҫтәлек бүләктәре тағы ла кемдәргә тапшырылған, ул яугирҙарҙың ҡайһыһы иҫән — әйтеүе ҡыйын. Ҡояшлы 1945 йылдың 30 апрелендә совет һалдаттары Берлиндың йөрәге Рейхстагҡа бәреп инә. Сәғәттәрҙең теле был мәлдә 14 сәғәт 25 минутты күрһәткән. Ә тағы ла 7 сәғәт 25 минут үтеүгә, Рейхстаг өҫтөндә Еңеү байрағы елберҙәргә тотона.

# XX. Һулыған сәскәләр



Тәүҙән үк аппаҡ ләлә сәскәләре күңелдәрҙе пакландырып ултырһын, улар шиңә төшөүгә ҡыҙыл розалар ҡалҡып сыҡһын, ә быларына алмашҡа, тағы моң, зауыҡ өҫтәп, күк ҡыңғырау сәскәләре моронлаһын тип, ҡара ҡәбер өҫтөнә өс төрлө орлоҡто услап-услап һиптеләр. Маҡсат шулайыраҡ ине: көндәр бер аҙ имшеп, ер йылына башлау менән үк улар алмаш-тилмәш моронлар ҙа, тотош йәй әйләнәһенә, хатта ҡара көҙ килгәнсе күҙҙең яуын алып ултырыр. Шулай оҙон ғүмерле үҫентеләрҙе ярата торғайны Ирек. Шуны иҫкә төшөрҙө әсә кеше һәм Ирек яратҡан сәскәләрҙе сәсеп ҡуйҙы. Әммә орлоҡтар имен-аман шытып сыҡһа ла, үҫентеләрҙең ғүмере ҡыҫҡа булды. Ер аҫтында ятҡан ғәзиз улының ғүмере кеүек. Йәй башланып, июль айы ла тамамланып өлгөрмәне, ниндәйҙер бер яуыз йән, ҡаланан ситтәрәк урынлашҡан зыяраттың кәртәләре аша үтеп, ҡәберлектәге бөтөн сәскәләрҙе лә имгәтеп киткән. Матурлыҡты хайуандарса аяҡ аҫтына һалып тапаған.

Төн ҡараңғылығында кем ҡылған был яуызлыҡты? Учалы ҡалаһы халҡы төрлөсә фараз ҡылды, күрәләтә хаслыҡ эшләй алыуына нәфрәтләнде. Егеттең әсәһе генә һиҙенде был вәхшилекте кемдең эшләгәнен. Ләкин йөрәге һулҡылдап һыҙлаһа ла, өндәшмәне.

Беҙ ҙә бында, яуыздың исемен асыҡлап, уны фашлауҙы маҡсат итеп ҡуймайбыҙ — егеттең йәберләнгән рухы, уның әхирәттәге йорто — ҡәбере — енәйәтсенең үҙенең дә йөрәген ғазапламай булмаҫ. Хәҙер төшөнә кермәһә лә, ул һуңыраҡ йән ғазапланыуҙары кисерәсәк. Яугир ир-егеттәр иҫтәлеген хөрмәт итә белмәгән, иң изге тойғолар билдәһе булған сәскәләрҙе һулытҡан бәғерһеҙлек тураһында ғына һүҙебеҙ...

Тәү тапыр был егет хаҡында мин уның элекке пионервожатыйы Гөлнара Насированан ишеткәйнем. Ҡасандыр элек уның отрядында булған, һуңынан, үҫкәс, Афғанстанда хеҙмәт иткән һәм шунда һәләк булып ҡалған яугирҙың фотоһын ҡулына алыу менән үк ҡыҙҙың күҙҙәренә эркелеп йәш тулды. Нимәләр иҫенә төштө икән?

— Әле лә хәтеремдә, — тине элекке вожатый, — ҡайҙа булмаһын, хатта сафта ла өндәшмәй генә ағастан ниҙер юнып бара торғайны. Ҡулы ипле ине малайҙың.

Ипле ҡуллы. Тимәк, һөнәрмән малай. Мин уның ағасты бәке менән соҡоп, һырлап эшләгән, ниндәйҙер образдар тыуҙырырға ынтылған, хатта береһе ҡала музейына ҡомартҡы итеп ҡуйылған, башҡалары иптәштәренә бүләк итеп таратылған әйберҙәрен күрҙем. Уның оҫталыҡҡа, ижад итергә ынтылыуы һүрәт эшләүенән дә, үҙе бәйләгән йөн шарфтан да, үҙ аллы мандолинала, пианинола уйнарға өйрәнеүенән дә, ул йыйған электр гитаранан да күренә. Ул Сергей Есенин, Владимир Фирсов шиғырҙары менән мауыҡҡан.

Ошо баһаларҙы уҡығас та, ҡайһы берәүҙең күҙ алдына иләҫ-миләҫерәк, хистәр менән генә йәшәгән егет һыны килеп баҫыуы мөмкин. Юҡ, улай түгел икән.

Афғанстан фажиғәһен йәшереп, ваҡытында гәзит-журналдарҙа яҙмай килһәк тә, хәбәр ятмай бит ул: бына Учалы ҡалаһынан килгән Ғариф Әхмәтйәнов, Нәдим Ғөбәйҙуллин, Ахун ауылынан Әҙһәм Зәйнуллин, Комсомольск ҡасабаһынан Урал Шәмиғолов миҙал менән наградланды; Абҙаҡ ауылы егете Марат Зарипов менән Учалы ҡалаһынан Алик Аллаяров "Ҡыҙыл Йондоҙ" ордены алған.

Былары ғорурландыра, батырлыҡ хаҡында һөйләй. Ләкин һуғыш еңеүҙәрҙән генә тормай шул, ул күберәк ҡайғы, хәсрәт килтерә. Учалы урамдарында ла зәғифләнеп ҡайтҡан егеттәр күренә, цинк табуттар ҙа килә башланы.

1980 йыл — Учалы ауылы егете Фәнил Әхмәтшин, 1984 йыл — Ахундан лейтенант Илһам Вәлишин һәләк булып ҡалды. 1985 йылдың көҙөндә Баттал ауылынан бер юлы Рәфис Шакиров, Илгиз Бирғәлин, тағы бер ай үтеүгә — Уральск егете Рәмил Сәғетдинов баштарын һалды. Ни өсөн?

Был арала ҡала профтехучилищеһында уҡыған Ирек Моратов бик уйсан төҫ менән йөрөй. Дуҫтары Андрей Сальников, Камил Йосопов менән бергәләп, йорт алдына баҫып, гитара сиртеп, моңайып тороусан булып китә. Ғүмере буйы художестволы үҙешмәкәр түңәрәгенә йөрөгән әсәһе, аптырап: "Мәҙәниәт һарайына барыр инегеҙ. Ансамблегеҙҙе ташланығыҙмы ни?" — тип тә

ҡарай. “Унда барып ни эшләйек”, — ти Ирек, моңайып, һәм, өйгә инеп, яратҡан шағиры В. Фирсов китабын аса.

Әсә, Фатима Әхмәтовна Моратова, тағы уйға сума: малай үҫте, бәлки, берәй ҡыҙға күҙе төшөп йөрөйҙөр? Тик ниңә шулай бойоға? Төшөнкөлөккә бирелә тиер инең, уҡыуы һәйбәт бара, училищеһында маҡтайҙар... Дуҫтар тағы йыйыла ла эргәләге урман яғына сығып китә. Унда ни эшләй торғандарҙыр?

Бер көндө әсәһенең өҫтәлдә биттәре асылған ҡалын дәфтәргә күҙе төшә: күсереп шиғырҙар яҙылған, һүрәттәр эшләнгән. Автомат тотҡан һалдат һындары бар. Десантсылар, шикелле. Әсә уфтанып ҡуя: малайының уйы шул тирәлә урала, тимәк. Йәше етә шул. Армияға алып китһәләр, үҙе, эскесе ир янында ҡалып, нисек йәшәр? Малайын ҡайһы яҡҡа — көнбайышҡамы, көнсығышҡамы алып китерҙәр? Әгәр көньяҡҡа булһа? Йөрәге ҡыҫып-ҡыҫып алһа ла, ул хафаланыуын ситкә ҡыуа. Барыһы ла һәйбәт бөтөр кеүек.

Тик һуңынан, улын ер ҡуйынына биргәс кенә, ҡала ситендәге ҡарағайлыҡҡа барып әйләнә әсә, шунда ғына барыһын да аңлай: бына ни өсөн йөрөгән икән улар: Ирек, Андрей, Камил ҡарағайлыҡ араһына! Саңғы юлы буйында өс турник күрә ул. Береһе — тәбәнәгерәк буйлы Андрейҙыҡы, тип аңлаттылар. Икенсеһе — Камилдыҡы. Өсөнсөһө — иң бейеге — Иректеке. 1 метр 93 сантиметр булып үҫеп киткәйне шул балаҡай. Шунда ғына дәфтәрҙәге десантсылар һындары, десантсыларҙың теге йәки был осраҡта ни эшләргә тейешлеге тураһындағы яҙыуҙары күҙ алдына килеп баҫа. Шунда ғына бойоғоп йөрөүе һәм бер көндө уҡыуҙан ҡайтып, ҡайғылы тауыш менән: “Их, нисек әрәм була егеттәр, әсәй!” — тигәне иҫенә төштө.

Ул саҡта улы әйтте лә бөттө, тип уйлағайны. Ә юҡ икән. Ант иткән, күрәһең. Үҫмерҙәр үҙҙәрен хеҙмәткә әҙерләгән, мускулдарын ныҡытҡан. Быларҙы Ирек, әсәһен йәлләп, йәшерен эшләгән.

Хәҙер инде был өс егеттең хәрби комиссариатҡа барып, Афғанстанға ебәреүҙәрен һорап йөрөүҙәре лә билдәле. Фәҡәт Афғанстанға, башҡа бер ергә лә түгел!

— Тәүҙә шоферҙар курсында уҡығыҙ, — тигәндәр комиссариатта.

Сварщик-электромонтажсы булып эшләй башлаған Ирек автомәктәпкә инә. Тамамлай. Хәрби комиссариатҡа өсөнсө тапҡыр ғариза алып бара. Ошондай уй төйөнләнә: яугирҙың үҙ ҡулы менән яҙылған үтенесе, кешенең үҙен-үҙе күрәләтә ут-ҡойон эсенә этәреүе һәм дошмандан йәберләнгән, ҡанлы йәштәре менән илаған афған балаларын ҡурсаларға тырышыуы — бына ошо түгелме ни иң ҙур батырлыҡ? Иң оло кешелек сифатын кем биргән уға: әсәһеме, йөҙ

ҙә бер йәш йәшәгән һәм һуңынан Ирек менән бер үк көндө ерләнгән өләсәһеме? Әллә ул сифат, ғаиләһендә ғауғаланып йәшәгән атаһының ҡылыҡтарына ҡаршы бер протест булып үҫеш алдымы икән? Бәлки, интернационализм тойғоларын ул уҡыған 30-сы профтехучилище коллективы, бигерәк тә Афғанстанда хеҙмәт итеп ҡайтҡас, тәрбиәсе-мастер булып эшләгән С. С. Сафиуллин тәрбиәләгәнме?

Һәр хәлдә Ирек Моратовтың юлында тәрбиәселәр араһынан да, күршеләре тирәһендә лә һәйбәт кешеләр байтаҡ осрай.

Өс дуҫтан Иректе генә алалар Афғанстандағы сикләнгән совет ғәскәрҙәрендә хеҙмәт итеүгә. Унан хаттар килә башлай. "Бөгөн, көньяҡҡа килгәнемә теүәл алты ай булды. Тәүҙә бөтәһе лә тамуҡтағы кеүек тойолдо", — тип яҙа ул һәм шунда уҡ үҙен төҙәтеп ҡуйыуҙы кәрәк һанай: "Юҡ, мин шаяртам ғына, әлбиттә". Артабанғы хаттарында ла уның әсәһен йәлләгәне һиҙелә: "Хеҙмәтем элеккесә һәйбәт бара, кәйефем дә элеккесә шәп. Эшем бер ҙә ҡатмарлы түгел. Учалы АТП-һында сварщиктар нисек эшләй, беҙ ҙә шулай автомобиль металын бер ҡырҡабыҙ, бер йәбештерәбеҙ. Шөғөлләнгән урыныбыҙ — күләгә. Һыу ҙа эргәлә генә..." Ошолай тыныс ҡына яҙа-яҙа ла тағы хафаланыуын белдереп ҡуя: "Мин Учалыға Чернобыль балаларын эвакуациялап килтергәндәр икән, тип ишеткәйнем. Шул дөрөҫмө?"

Ул һәр хатын, өйҙәгеләрҙе тынысландырып, өмөтләндереп тамамлай: "Мин ҡайтырмын һеҙҙең янға, әсәй. Айгөл, өләсәй, ҡулдарым менән һеҙгә баҡса үҫтереп бирермен. Шикләнмәгеҙ, мин ҡайтырмын".

Әммә һалдат яҙмышы үҙенекен итә. Иленә уның үле кәүҙәһе генә ҡайта. "Командование, партия һәм комсомол ойошмалары тәрән ҡайғы менән һеҙгә шуны еткерә: һеҙҙең улығыҙ — водитель, рядовой Моратов Ирек армияла хәрби бурысын үтәгәндә, антына тоғро булып, ныҡлыҡ һәм батырлыҡ күрһәтеп, ҡаты яра алды һәм вафат булып ҡалды... Ул интернациональ һәм илебеҙҙең көньяҡ сиктәрен һаҡлау буйынса үҙ бурысын аҙағынаса үтәне".

Ләкин әсә күңеле борсола. Ирек армияға киткәнгә тиклем үк эле күрше Рысай ауылы егете Ирек Ибраһимовтың һәләк булыуы тураһында хәбәр ишетелгәйне. Быныһы 6-сы табут ине инде. Ә етенсеһе үҙ балаһыныҡы булыр тип ул саҡта башына ла килтермәгән. Тик күңелде алдап буламы ни: мәйетте алыҫ яҡтарҙан килтергән көндө аяҡтары үҙенән-үҙе хәрби комиссариат яғына атланы...

Бөтә ҡала халҡы оҙатты йәш яугирҙы һуңғы юлға.

Иректең ҡыҫҡа тормошонан тағы бер деталь: армияға киткәнсе ул урамда имгәнеп ятҡан көсөктө өйгә алып ҡайтып дауалағайны. Шул эт, Ирек ер ҡуйынына бирелгәс тә, зыяраттан китмәй ике көн буйына шыңшып ултырҙы.

Бына хәҙер инде Учалы ҡала музейына инәйек. Стеналарҙағы фотоһүрәттәргә иғтибар итәйек. Бер урында — Граждандар һуғышы ветерандары, икенсе урында — 1937—1938 йылдарҙа шәхес культы ҡорбандары булған тәүге уҡытыусылар, арҙаҡлы кешеләр... Йәнәш — 1941—1945 йылғы фронтовиктар... Йәки унынсы һәм утыҙынсы йылдар аҙағындағы, ҡырҡынсы йылдар башындағы яугирҙар. Илдең фажиғәле өс осорона ҡағылышлы фотолар, исемдәр... һәм бына, шуларға өҫтәлеп, 80-се йылдар ҡорбандары...

Хәйер, Ирекҡә арналған бер мөйөштө (бында уның гитараһы, башҡа шәхси әйберҙәре ҡуйылған) хисапҡа алмағанда, яңы быуын ҡорбандарына арналған стенд әлегә юҡ. Күрәһең, был ваҡиғалар үҙҙәренең яңылығы менән аҡылға һыймай, хәтер һаман һайлана. Ул, ә батырмы һуң улар, ветеранмы, түгелме, тип битараф бизмәнгә һалып үлсәмәксе. Мәҫәлән, Өфө учреждениеларының береһендәге һөйләшеү иҫкә төшә. Ярайһы уҡ ҙур вазифалы бер нисә иптәш үҙ-ара фекер алыша: Афғанстанда булып ҡайтҡандарҙы һуғыш ветерандарына тиңләп буламы-юҡмы, йәнәһе. “Баш вата” торғас, шундай һығымтаға килделәр: юҡ, уларҙы ветеран тиергә иртәрәк әле.

Ошолай, ситтән тороп, еңелсә генә аҡыл һатыусан иң изге тойғоларҙы йәберләүгә лә күп ҡалмай һәм, үкенескә ҡаршы, быны раҫларлыҡ күренештәр ҙә юҡ түгел. Күптән түгел Учалы хәрби комиссариатына Сәфәр ауылынан, ғәрлегенә түҙә алмай, бер апай килеп инде. Илауының сәбәбе шунда: Афғанстандан үлеп ҡайтҡан улын ерләгәс тә, ул, һуғыш ветерандары өсөн һатыла торған аҙыҡ-түлек иҫәбенән сәй һатыуҙарын һорап, магазинға барған. Кеше ҡайғыһын уртаҡлашыу урынына, уға: “Үлгән кешегә ниндәй сәй?!” — тип, йөҙөнә бәреп сығарғандар.

Ғүмер ил ҡушыуы буйынса кешеләрҙең бәхете, именлеге өсөн ҡыйылған. Йәш ир-егеттәр, батырҙарҙың тағы бер быуынын хасил итеп, элек-электән изге һаналған Хәрби Устав талаптарына тоғро ҡалып, һәләк булған. Беҙ хәҙер торғонлоҡ осоронан мираҫ булып ҡалған кәмселектәр хаҡында тамаҡ ярып ҡысҡырабыҙ. Ә ниңә һуң әле уның киреһе — кешене кеше иткән, донъяның тотҡаһы булған һәм Корчагиндар, Матросовтар (Шакирйән Мөхәмәтйәновтар) фиҙакәрлегенең бөгөн дә йәшәүен раҫлаған миҫалдар тураһында ишетелер-ишетелмәҫ кенә мыңғырҙайбыҙ? Ни өсөн уларҙың туғандарын, әсәләрен кәмһетеүгә тиклем барып етәбеҙ?

Бынан ун биш йыл самаһы элек Учалы ҡалаһы етәкселәре үткәргән бер йыйылыш иҫкә төшә. Хужалыҡ түрәләре ауыл урамдарын төҙөкләндереү хаҡында һүҙ алып бара. Бер вәкилдең үҙ ауылындағы ҡапҡалары емерелгән, сереп, ергә һеңеп ултырған бер нисә өй боҙа ине кәйефен. Шунда район Советы рәйесе был ҡомартҡыларҙы бульдозер менән гөрҙөрөргә тәҡдим итте. Барыһы ла көлөп ебәрҙе. Тик бер нәмәне генә иҫтән сығарғайны рәйес: матур йорттарҙа ҡулында колхоз техникаһын тотҡан һәм көстәре ташып торған механизаторҙар, шоферҙар, йә иһә хәлле ветерандар йәшәй, ә ярым емерек өйҙәр иһә йә улдары, йә ирҙәре һуғышта ятып ҡалған ҡарт әсәләрҙеке ине.

Ул быуын кешеләре хәҙер инде ҡалманы ла тиерлек. Уларҙың урынын бөгөнгө фронтовиктарҙың әсәләре алды. Донъя хәлдәре шуны талап итте. Тарих — тарих инде ул, ләкин уның менән бергә ғәҙелһеҙлек тә ҡабатланырға тейешме ни?

Был шикләнеү шуның өсөн тыуа: ул армияға алынғас, ғаилә башлығы өйҙө ташлап сығып китә. Киткән — бөткән. Быныһы — уның эше. Ләкин ниңә, аҙаҡ килеп, ыҙғыш ҡуптарып йөрөргә, ҡыҙы ла шунда торған квартираға дәғүә итергә? Иң уңайлыһы бында — тарҡалған ғаиләгә ике бүлмәле квартираны икегә бүлеп биреү ине. Әммә, Ф. Моратова, ошо хаҡта ҡала Советына күпме генә мөрәжәғәт итһә лә, һәләк булған яугир әсәһенә ярҙам итергә ашыҡманылар...

Эш, әлбиттә, квартирала ғына түгел. Бөтә фронтовиктарға ла, уларҙың әсәләренә дөйөм ихтирам күрһәтеүҙә. Үҙ-ара һәйбәт мөнәсәбәт булдырыуҙа. Шунһыҙ кеше кеше була алмай.

*1988 й.*

# XXI. Күңелдәрҙе тоташтырған нурҙар

Ни өсөн һис иҫтән сыҡмай һуң әле был һорау? Уның күңелгә инеп урынлашыуына инде, моғайын, әллә нисә тиҫтә йыл булалыр, ә яуап һаман табылмай. Тик бына яңыраҡ, осраҡлы ғына ике ҡатындың һуҡранған һүҙҙәрен ишеткәс кенә, хәтирәмдең шул хәтлем оҙаҡ йәшәп килеүенең сәбәбен аңланым. Ҡатындарҙың береһе: "Һуғыш йылдарында ашарға аҙығы, кейергә кейеме булманы, ә барыбер татыу, күңеллерәк йәшәнек, һәр нәмәбеҙ уртаҡ булды", — ти ине. "Хәҙер бит юҡ нәмәнең үҙе юҡ, зарланырға ятраһаҡ та, — тип эләктереп алды икенсеһе. — Ә һаман һытыҡ йөҙ менән йөрөйбөҙ. Күрше-күләндең хәлен дә белгән юҡ".

Хәл белешмәү генәме! Урамға сыҡ — этеш-төртөш. Абайламаһаң, йыға һуғып китерҙәр. Өйөндә телевизор тоҡандырһаң да шул уҡ хәл: ыҙғыш-талаш. Ни булды был донъяға?.. Ә шулай ҙа аптырарлыҡ бер ни юҡ: аҙым һайын, көн дә байлыҡ һәм нисек тә булһа күберәк аҡса табыу тураһында һүҙ йөрөтә торғас, ҡуйған "маҡсатыбыҙға" ирештек шикелле. Халҡыбыҙҙың быуаттар буйына тәрбиәләп килгән йолалары, ғөрөф-ғәҙәте, әҙәп, әхлаҡ тигән төшөнсәләр юҡҡа сығарылып, ул ғына ла түгел, һуңғы йылдарҙа социалистик идеалдарҙы ла һепереп түгеп, Тыуған илгә хеҙмәт итеү тураһында һүҙ әйтергә лә тартына башланыҡ. Кеше рухын күрәләтә ярлыландырыуға тура юл тотток бына ошолай.

Шуға күрә лә үҙебеҙҙең таутүбән йылдам тәгәрәүебеҙгә ҡаршы исмаһам саҡ ҡына кәртә булып торорлоҡ тотҡалар эҙләйбеҙ һәм күңел төбөндәге яҡты хәтирәләрҙе нығытырға тырышабыҙ, шикелле.



Социалистик Хеҙмәт Геройы
Р. М. Ниғәмәтуллин.

## Ғорурлыҡ

Туҡһанынсы йылдарға тиклем 1 Май, 9 Май тантаналарын ойоштorған һайын, Учалы ҡалаһының үҙәк майҙаны аша, ал байраҡтар йылғаһының ташҡынланып үтеүе

хәтергә һеңеп ҡалған. Ошо гүзәл ағымды күҙәтеп торған тамашасылар яҡшы беләт: һәр йылдағыса, иң алдан СССР Дәүләт Оборона Комитетының Ҡыҙыл байрағы ялҡынланып үтәсәк. 70-се йылдарҙа ул тау-байыҡтырыу комбинатының иң алдынғы экскаваторсыһы, Социалистик Хеҙмәт Геройы Р. М. Ниғәмәтуллиндың көслө ҡулдарында бара торғайны. Һуңғараҡ, Рамазан Муллағәлиевич юғары кимәлдәге Юғары Совет депутаты итеп һайланғас һәм ҙур трибуналарҙа тора башлағас, байраҡ икенсе, йәшерәк ҡулдарға күсте. Әммә, йылдар үтеп, эшселәр быуындары алмашынһа ла, батырҙар күркенә әүерелгән ҡомартҡының абруйы кәмемәне.

Ошо юлдарҙы яҙҙым да ҡапыл кемдеңдер, тағы яһалма шаушыу, парадтар тураһында яҙа икән был журналист, тип, ҡыйыш йылмайыуын күҙ алдына килтерҙем. Юҡ, улай ғәйепләргә ашыҡмайыҡ: ниндәй парад булһын, ти! Байраҡтарҙың ни өсөн һуң әле ҡыҙыл булыуын иҫкә алайыҡ. Эйе-эйе, тап бына шуның өсөн, ҡорбан ҡанына оҡшаған өсөн дә тамашасыларҙың күҙҙәре майҙанда иң тәүҙә һуғыш иҫтәлеге булған байраҡты эҙләй торғайны.

Таусылар йәшермәйенсә ғорурланды ошо хәрби ҡомартҡы менән. Ләкин уларҙың юҡ-юҡ та маҡтанырға тотоноуы башҡаларҙың сәменә тейҙе. 80-се йылдарҙың башында, мәҫәлән, тау-байыҡтырыу комбинаты менән ҡала йәмәғәтселеге араһында, тағы асығыраҡ әйткәндә, предприятиеның хеҙмәт даны музейын ойоштороусы Хәмзә Ғилманов менән районның тыуған яҡты өйрәнеү музейы директоры Сәләх Ғиззәтуллин араһында байраҡтың ҡайҙа торорға тейешлеге тураһында ҙур ғына бәхәс тыуҙы. Берәүһе уны ҡулдан ысҡындырмаҫҡа тырышты, икенсеһе үҙе эргәһенәрәк күсерергә итте. Тәүгеһе, награда рудник эшселәренә бирелгән, тине. Район йәмәғәтселеге иһә награданы бөтә учалыларҙыҡы итеп күргеһе килде. Ике яҡтың да дәғүәһе ғәҙел ине.

Быны раҫлау өсөн бер-ике миҫалға мөрәжәғәт итәйек.

Учалы районы хеҙмәтсәндәре һуғыш башланғандың тәүге айында уҡ Оборона фондына 52 мең һумдан ашыу аҡса йыйып тапшыра. Беренселәр араһында беҙ Ильинка (Учалы рудникгына күрше урынлашҡан) приискыһы старателдәре, өсәр көнлөк эш хаҡын биргән Ильинка мәктәбе уҡытыусылары, өс көнлөк эш хаҡын ай һайын тапшырып торорға ҡарар иткән Мостафин (ошо мәктәп директоры) ғаиләһе, Поляковка ауылы эшселәре исемдәрен, саҡ ҡына һуңыраҡ Ҡыҙыл Армия өсөн ҡышҡы кейемдәр йыйыу эшен башлап ебәргән Бөйҙө рудникгы кешеләрен күрәбеҙ. Учалы рудникгында В. И. Ленин исемендәге артель был ваҡытта төҙөлмәгәйне әле...

1942 йыл. Ауыл тормошонан бәләкәй генә бер күренеш. Урал тауҙарына һыйынып ҡына ултырған Ҡужай ауылы. Урам ур-

таһынан, шығыр-шағыр арба һөйрәп, ат бара. Уҡытыусы Ғәлимйән Мөслимов әле бер, әле икенсе ҡапҡа эргәһенә туҡтап, фронт файҙаһына әйбер йыя. Йөк өҫтөнә малай ултырып алған. Ул ергә төшмәй, сөнки, берҙән, бәләкәй; икенсенән, ҡулына ҡыҫып тотҡан ҙур этәстең ысҡынып китеүенән ҡурҡа. Тере этәсте лә кемдер фронтҡа ярҙам итеп сығарып биргән. Башҡа нәмәһе булмаған, күрәһең.

Бына шуның ише байлыҡ 1942 йылда байтаҡ йыйылған районда: 1045 бейәләй, 783 ойоҡбаш, 173 фуфайка, 182 быйма, 339 ҡыҫҡа тун. Посылкалар 1213-кә етте, тинеләр. Колхоздар ошо йылда ғына ла Оборона фондына 10306 бот иген, завод эшселәре өсөн 976 бот аҙыҡ-түлек оҙатты.

Бынан тыш, Оборона фондына, Хәрби займ фондына йөҙҙәрсә мең һум аҡса бирҙеләр, займ облигациялары алдылар.

Ошо ифрат ҡатмарлы эшкә баһа Совет хөкүмәтенең ВКП(б)-ның Учалы район комитеты секретары Назиров исеменә ебәргән (1943 йылдың апреле) телеграммаһында әйтелә:

“Ҡыҙыл Армия өсөн ҡоралдар эшләүгә 6667612 һум йыйнаған, Оборона фондына иген тапшырған, Ҡыҙыл Армия һуғышсыларына йылы кейемдәр, посылкалар һәм заводтарыбыҙ эшселәренә аҙыҡ-түлек ебәргән Учалы районы хеҙмәтсәндәренә минән туғанлыҡ сәләме һәм Ҡыҙыл Армия рәхмәтен еткерегеҙ.

И. Сталин”.

6 миллион 667 мең һум! Әйтеүе генә еңел. Әммә был хәтлем байлыҡтың байтаҡ өлөшө хәҙер инде үҙ көсөнә инеп өлгөргән Учалы руднигына тура килә. Бында шик юҡ. Телеграмма алыуға аҙна ла үтмәй, Оборона Комитеты исеменә рудник начальнигы В. С. Гонцов, партия бюроһы секретары Х. А. Шәфиев, старателдәр артеле председателе В. А. Абдрахманов, стахановсылар Иртегов, Нурмөхәмәтовтар ҡул ҡуйған хат китә:

“И. Сталинға.

“Башзолото” тресының Учалы рудниғы старателдәре “Башҡортостан истребителе” самолеттары эскадрильяһын төҙөү өсөн 120 мең һум аҡса тапшыра. Бынан тыш, В. И. Ленин исемендәге артель старателдәре танк төҙөү өсөн 12 килограмм алтын бирә, уға “Башҡортостан старателе” тигән исем ҡушыуығыҙҙы һорайбыҙ”.

Шул көндө тағы митинг була, старателдәр тағы Башкомандование фондына 6 килограмм алтын, Сталинград ҡалаһын аяҡҡа баҫтырыуға 13 мең һум аҡса индерә. Бынан тыш, рудник ярты йыл эсендә туплаған 500 мең һумлыҡ экономияһын да Башкомандование фондына тапшырырға ҡарар итә.

1943 йылдың сентябре. Район хеҙмәтсәндәре азат ителгән Ворошиловград өлкәһенә көтөү-көтөү һарыҡ, һыйыр малы, сусҡа оҙата. Уны Учалы кешеләре ил буйлап үҙҙәре ҡыуып алып китә. Бындай хәлдең Рәсәй тарихында ҡасан булғаны бар икән? Интернациональ ярҙам күрһәтеүҙе оҙаҡҡа һуҙмайынса Вәлиев, Абдуллин, Аллаяров, Сафин, Романов, Ғатауллин, Бикбаевтарҙан торған район комиссияһы ойоштора. В. И. Ленин исемендәге артель иһә шул уҡ маҡсат менән, бер ниндәй хаҡ алмайынса, 4 килограмм алтын тапшыра.

1943 йылдың ноябре. "Советтар Союзының алтын-платина промышленносының иң яҡшы руднигы" исемен алған Учалы руднигы Ҡыҙыл Армияға булышлыҡ итеү йәһәтенән уның иҫәбенә йәнә 18 килограмм затлы металл, 65 мең һум аҡса индерә. Календарҙа — әлегә 1943 йылдың аҙағы ғына. Алда дошманды өңөндә дөмбәҫләгәнгә тиклем теп-теүәл ун алты ай бар. Ҡара тирҙе сығарырлыҡ, үкенескә ҡаршы, ризыҡҡа һаран көндәр теҙмәһе оҙон әле киләсәктә. Унан һуғыш ҡалдырған емереклектәрҙе бөтөрөү осоро башланасаҡ. Улар яңынан-яңы байлыҡ: тонна-тонна ҡиммәтле металл, йөк-йөк иген, көтөү-көтөү мал талап итәсәк. Ә ул ауыр йөктө тартҡан был кешеләр кемдәр ине һуң? Шул уҡ В. И. Ленин исемендәге алтын артелен алайыҡ: унда эшләгән 1500 кешенең 1200-е ҡатын-ҡыҙ ҙа 14—17 йәшлек үҫмер малай була. Илдең ҡоллоҡҡа төшөү ҡурҡынысы торғанда, улар бөгөнгө һымаҡ забастовка ла күтәрә алмай ине, әлбиттә. Әҙәм ышанмаҫлыҡ ҡыйынлыҡтарҙы еңде улар.

Һүҙҙең аҙағында шуны ғына өҫтәргә ҡала: Бөйөк Ватан һуғышы йылдарында фиҙакәр хеҙмәт күрһәткәне өсөн "Башзолото" тресының Учалы руднигына 1945 йылдың февраль айында СССР Дәүләт Оборона Комитетының күсмә Ҡыҙыл байрағы тапшырыла. Ә һуғыш тамамланғас, ВЦСПС-тың һәм СССР Төҫлө металлургия министерствоһының ҡарары менән ул ошо предприятиела мәңге һаҡлауға ҡалдырыла. Ундай ҙур наградаға лайыҡ булған коллективтар республикала күп түгел. Ленин орденлы 26-сы завод — хәҙерге Өфө моторҙар эшләү производство берекмәһе, Өфө нефть эшкәртеү заводы, "Башнефтестрой" тресы — хәҙерге "Туймазынефтестрой" тресы һәм, инде әйтелгәнсә, Учалы руднигы.

## Ике "фәрештә"

Учалы руднигында бына инде 50 йылдан ашыу һаҡланған был тарихи ҡомартҡы хаҡында һүҙ сыҡҡан һайын, уның нисек килтерелеүе менән ҡыҙыҡһыналар. Байраҡтың тотош Ватан бүләге икәненә, әлбиттә, берәү ҙә шик тотмай, әммә һәр нәмәнең дә бит башлауысыһы була: берәү тәҡдим индерһә, икенсеһе ҡағыҙ тултыра,

өсөнсөһө награданы тапшыра — ваҡыт үткәс, быларын да хәтер һандығына һалып ҡуйыу мөһим.

Учалыла был хаҡта белергә тейешле кешеләрҙең хәтере насарыраҡ булып сыҡты. Шуны ғына әйттеләр: 1945 йылдың башында "Эшләпә" ҡасабаһында митинг булған — шул сәбәпле шахта эшен бер аҙға туҡтатып торғандар. Награданы рудник етәкселәренә ниндәйҙер ике офицер тапшырған. Икеһе лә Советтар Союзы Геройы. Тик исемдәре кем, ҡайҙан килгәндәр — был хаҡта белеүсе юҡ ине.

Һуғыштың әле һаман ҡыҙыу барған сағында булған ошо ваҡиға үҙе бер мөғжизә, әкиәт һымағыраҡ ҡабул ителә. Ни өсөн тиһәң, хәҙер, тыныс тормошта ла бит, поездар, автобустар елдереп йөрөп ятҡанда, ҡайһы бер наградаларҙы почта аша ғына һалып ебәрәләр.

Бынан байтаҡ йыл элек район журналистары ошо серҙе асыҡларға тырышып ҡарағайны, тик бынан бер ни килеп сыҡманы. Шулай йылдар үтте. Баҡһаң, үрҙә телгә алынған экскаваторсы, Социалистик Хеҙмәт Геройы Р. М. Ниғәмәтуллин ғына, хәрби комиссариаттар менән яҙышып, эҙәрмәнлек эшен дауам иткән, һәм бына бер мәл ул байраҡ тапшырыусыларҙың береһен табыуын хәбәр итте. Шуны дәлилләп, ул конверт эсенә үҙенә килгән хатты ла һалып, миңә Өфөгә ебәрҙе.

"Һаумыһығыҙ, Рамазан иптәш һәм Һеҙҙең ғаиләгеҙ, — тип яҙа ине әлегә билдәһеҙ кеше. — Мин һеҙҙең хатығыҙҙы алдым, бик ҙур рәхмәт иҫкә алыуығыҙға... Мин һеҙгә яҡын арала бара алмам, бик олоғайҙым, бер ҙә таҙалыҡҡа туйып булмай... Әлеге көндә иптәшем менән икәү генә йәшәп ятабыҙ, һигеҙ бала тәрбиәләнек — биш малай, өс ҡыҙ. Төпсөк улыбыҙ армияла, яҙға ҡайта тип торабыҙ. Инде башҡа балаларыбыҙ төрлөһө төрлө яҡта, үҙ ғаиләләре бар. Бер улым 21 йәшендә электр тогына тотоноп үлеп ҡуйҙы, электрик булып эшләй ине. Быйыл ҡыҙымдың иптәше — кейәү кеше — ҡыҙғаныс үлем менән үлеп ҡалды. Шулай итеп, ҡайғылары ла булып тора".

Ҡәҙимге, хәл-әхүәл белдереп кенә яҙылған хат ине был. Әммә күҙгә әллә ни бәрелеп бармаған юлдарҙа тормоштоң әсеһен-сөсөһөн сағылдырған, мәғәнә тулы ябай һүҙҙәр теҙелгәйне. Хаттың аҙағына ҡарайым: С. Ғәлимйәнов.

Ике йылдан һуң Р. Ниғәмәтуллин тағы бер хат алды. Сәлимйән ағай Рамазандың да Герой Йондоҙо йөрөтөүенә кинәнес белдерә, уның фекерҙәш, бер үк физик эш кешеһе булыуын тойомлап, һаман үҙенең ғаилә хәлдәрен, инде төпсөк малайҙарының да армия хеҙмәтен тултырыуын, эш башлауын хәбәр итә ине.

Әлегә тиклем күктән төшкән фәрештә кеүегерәк хыялда ғына йәшәгән Герой офицерҙың ошолай үтә лә ябай һүҙҙәр менән ҡәҙимге тормошто тасуирлауы аптыратты башта. Икенсенән, быға

хәтлем бер-береһен һис белмәгән ике ҡарт яугирҙың үҙ-ара бик тиҙ аңлашыуы һоҡландырҙы. Ирекһеҙҙән минең дә улар араһында булғым, уларҙың уй-хәстәрҙәрен уртаҡлашҡым килде. Өҫтәүенә, Герой хаҡында һөйләү өсөн уның хаттары ғына етмәй ине. Ярай әле, отставкалағы полковник Б. И. Мутовиндың Мәскәү хәрби нәшриәтендә баҫылған “Бөйөк һынауҙар аша” тигән китабы табылды. Унан бер өҙөк килтерәйек:

“Өлкән лейтенант Г. Кузнецов ротаһы контратаканы кире ҡаҡты һәм дошманды эҙәрлекләй башланы. Кинәт флангынан пулемет юлды киҫте. Яугирҙар ергә һылышты. Кузнецов янына ҡыҙылармеец С. Ғәлимйәнов шыуышып килде һәм дошман пулеметы расчетын юҡ итергә рөхсәт һораны. Кузнецов тиҙ генә яуап бирмәне. Һуғышсының ҡурҡыныс аҙымға барыуын белә ине ул. Ләкин, Сталинград янында бынан да ҡурҡынысыраҡ хәлдәр булыуын иҫкә төшөргәс, өлкән лейтенант ризалығын бирҙе. Яугирға өс йөҙ метрға яҡын араны шыуышып үтергә тура килде. Пулеметҡа бер нисә аҙым ҡалғас, ул гранаталарын алды. Өсөһөн ырғытты. Пулемет тынды. Ғәлимйәнов тәүәккәл рәүештә алға ташланды һәм фашистарға автоматтан һиптерҙе. Бер нисә гитлерсыны юҡ итеп, ул пулеметты ҡулға төшөрҙө һәм үҙ ротаһына алып ҡайтты.

..."Коммунар" колхозы өсөн барған һуғышта өлкән лейтенант Г.Кузнецов ротаһы алға сыҡты. Был ваҡытта дошмандың йәйәүле ғәскәре һәм танкылары бомбардировщиктар ярҙамында полкка тағы ташланғайны. Кузнецов ротаһы уның тылында тороп ҡалды. Ҡамау эсендә һалдаттар һуңғы патрондарына ҡәҙәр батырҙарса һуғышты. Күптәр һәләк булды. Командир ҙа ҡаты яра алды. Ул, бер нигә ҡарамайынса, ҡамауҙан сығырға приказ бирҙе. Приказ үтәлде. Яугирҙар өс тәүлек буйына үҙебеҙҙекеләргә юл ярҙы. Һәм был ваҡыт эсендә ҡыҙылармеец Ғәлимйәнов командирын күтәреп алып барҙы. Кузнецов унан үҙен ҡалдырып китеүҙе ҡат-ҡат талап итте, иҫән ҡалған башҡалар менән ҡамауҙан сығырға бойорҙо, тик тегеһе тыңларға теләмәне. Өсөнсө төн аҙағына улар, дошмандың алғы һыҙығына барып етеп һәм бар көстәрен туплап, фашистар өҫтөнә көтмәгәндә ташланды, ғауға ҡуптарҙы һәм, шунан файҙаланып, үҙҙәренең полкы урынлашҡан ергә сыҡты”.

С. Ғәлимйәновтың батырлыҡ яһауы тураһында юлдар — ошолар. Ләкин үҙен күрмәйенсә һәм һөйләшмәйенсә тороп, бынан ғына Геройҙың кем икәнен белеү мөмкин түгел. Бына ни өсөн миндә Асҡынға барып килеү хәжәте тыуҙы. Төп ҡыҙыҡһынған һорауҙар шул: Сәлимйән ағайҙарҙы, ауыр һуғыш ваҡыты тип тормай, Учалыға кем ебәргән, уның янындағы тағы бер хәрби кеше кем булған, аслы-туҡлы йәшәгән шахтерҙар араһында “күктән төшкән фәрештәләр” ниндәй хистәр кисергән?

...Төлгөҙбаш район үҙәге булған Асҡындың эргәһендә генә кеүек, әммә унда барып етеүе ярайһы уҡ михнәтле икән. Юл оҙонлоҡтан түгел был, ә ифрат һикәлтәле булыуынан, тәгәрмәс аҫтында һары балсыҡ ише-леп ятыуынан. Шулай ҙа “уазик”, бейек түмәрҙәрҙе, сереп ауған ағас олондарын уратып-уратып бара торғас, бәләһеҙ-ниһеҙ Төлгөҙбаш урамына барып инде.

Юҡ, тәүҙә уйланғанса, ул бер ҙә бөлөнгән, урман эсендә юғалып ҡалған ауыл түгел икән. Һуңғы йылдарҙа республика хөкүмәте тарафынан күрһәтелгән ярҙам үҙенең ыңғай һөҙөмтәләрен биргән: күп кеше, бура бурап йә өйөн таҡта менән көпләп, сағыу буяуҙарға буяп, баҡса үҫтереп, матур итеп йәшәп ята.



Советтар Союзы Геройы
С. Ғ. Ғәлимйәнов.

Тәҙрә йөҙлөктәре семәрләп эшләнгән, һәр ерҙә егәрле ир ҡулы тойолған ҙур йортҡа боролабыҙ. Ҡунаҡтарҙы көтөп кенә торғандай, шунда уҡ ҡапҡа асыла һәм ҡулына биҙрәләр тотҡан теремек ҡарт пәйҙә була.

— Һаумыһығыҙ, Сәлимйән ағай! Һеҙгә Урал аръяғынан сәләм килтерҙек.

— Рамазанданмы әллә? — Бер аҙ ҡаушап төштө ағай, ләкин үҙен тиҙ генә ҡулға алып, килгән кешеләрҙе эскә инергә саҡырҙы.

Таҙа итеп һеперелгән ихата. Һулда — өй дәүмәлендәй мунса, ян-яҡҡа тамаша ҡылып торорлоҡ бейек күтәрмә, ә өйгә инһәң — ҡояш нурҙары уйнаған, түшәме бейек бүлмәләр.

— Бына шулай донъя күреп ятҡан булабыҙ инде, —ти хужа баҫалҡы ғына.

— Һәйбәт, бик һәйбәт.

Ағай тиҙ генә үҙенең өҫ-башына күҙ йүгертеп алды һәм:

— Былай килешмәй, өҫтөмдө алыштырайым әле, — тип, ҡайҙалыр инеп юғалды. Күп ваҡыт үтмәне, орден-миҙалдарын тағып алған ҡарт яугир, йәнәш ултырып, ҡатыны менән ярыша-ярыша, үткәндәрен һөйләргә тотондо. Ағайҙың тулҡынланыуы әлегә үтеп бөтмәгән, фекерҙәр тарҡауыраҡ, хәбәр ебе өҙөлөп-өҙөлөп ҡуя: әле һуҙ был юлдарҙың авторы йәшәгән яҡҡа оса, әле һуғыш дәүерендәге хәлдәр тирәһендә уралғылай. Иртәнсәк ҡамыр

ишәйтеп, уны мейескә тығыу менән мәшғүл булған Сәлимә апай ҙа шөғөлөн туҡтата ла әңгәмәне һуғыштан икенсе тарафҡараҡ борорға итеп ҡарай һәм, ни өсөндөр, балаларының стенаға элеүле фотолары эргәһенә барып "куна": үткән тормоштарының иң ҡәҙерле, иң инандырырлыҡ күренештәре итеп күрһәтергә тырыша ине булһа кәрәк ул. Дөрөҫө лә шул инде.

Мин бит үҙем дә әлегә хәтлем һис белмәгән Төлгөҙбашҡа ниндәйҙер документтар тикшерер өсөн генә килмәнем: Сәлимйән ағай Ғәлимйәнов хаҡында белергә теләгән нәмәләр Асҡынға килгәнсе үк асыҡланып бөткәйне инде. Моғайын, төп теләгем элеккеяугирҙың уй-фекерен белеү, булмышын күреп, күҙ ҡарашын тойоп, ниндәйҙер фәһем алып ҡайтыу булғандыр һәм, ысынлап та, теләгем шунда уҡ ҡабул булды: ҡарттарҙың бер-береһен бүлеп, тормош мәшәҡәттәрен нисек еңеүҙәре, район етәкселәренең дә уларҙы ҡайғыртып тороуы, Сәлимйән ағайҙың, Советтар Союзы Геройы булһа ла, ғүмер баҡый көрәк тотоп, колхозда ябай эш башҡарыуы тураһында һөйләгәндәрен тыңлап ултыра торғас, йәнгә аңлатып булмаған рәхәтлек таралды. Кешенең кешегә тартылыуынан, аралашырға, хәбәрләшергә тырышыуынан килгәндер был.

— Иптәшемдең исемен онотҡанмын, — тине Сәлимйән ағай, үкенеп. — Белемем бик түбән ине шул, өс синыф ҡына тамамлағайным.

— Безценный түгелме һуң? — тип хәбәргә ҡушылды шунда Сәлимә апай.

— Дөрөҫ! Фамилияһы — Безценный ине шул. Бер көндө икебеҙҙе Өфөлә штабҡа (хәрби комиссариатҡа булырға тейеш.— **Авт.**) саҡырып алдылар ҙа, задание биреп, юлға оҙаттылар. Поезд менән Миәс ҡалаһына барып еттек. Ҡараһаҡ, беҙҙе пар аттарҙа ҡаршы алырға килгәндәр. Малҡайҙар елдерә генә! Юл оҙон булһа ла (100 саҡырым самаһы. — **Авт.**), "Эшләпә"гә (эшселәр ҡасабаһы) тиҙ барып еттек. Күктән осоп төшкән аҡҡоштар кеүек булдыҡ инде. Күп колходарҙы күрһәттеләр, шахтаға алып барҙылар. Бер хеҙмәт геройының өйөндә ҡунаҡта булдыҡ. Артель рәйесе Мөхәмәтдин Ғәниев менән фотоға төштөк.

— Ә байраҡ тапшырыу нисек булды?

— Митинг яһанылар. Шахта туҡтап торҙо. Безценный сығып һөйләне. Урыҫса. Мин — үҙебеҙсә. Унан мин байраҡты шахта башлығына тотторҙом.

— Ни өсөндөр икегеҙ ҙә офицер һымаҡ тороп ҡалған халыҡ хәтерендә?

— Юҡ, мин ниндәй офицер булайым, ти.

Һүҙҙе тағы Сәлимә апай эләктереп ала:

— Офицер тигәндәре шул Безценный инде. Өлкән лейтенант. Ул Өфөлә шул уҡ хәрби училищела уҡытты.

— Һеҙ уны нисек хәтерләйһегеҙ?

— Ундай нәмәләрҙе генә ҡатын-ҡыҙ хәтерләй инде ул.

— Туктағыҙ, һеҙ быны нисек беләһегеҙ әле?

— Мин училищеның буфетында эшләй инем. Минең әхирәт ҡыҙыма күҙе төшөп, шуның янына килеп йөрөй торғайны ул.

Үҙе бер ҡыҙыҡ тарих булып сыҡты был.

Инде ике йылдан ашыу ғәйәт көсөргәнешле һуғыштар алып барған Ҡыҙыл Армияға яңынан-яңы көстәр, командирҙар талап ителәә. Ә махсус уҡытылған кадрҙар етешмәй. Ахырҙа Башкомандование үҙенең иғтибарын ут-һыу кискән тәжрибәле һалдаттарға йүнәлтә: нисек тә шуларҙан командирҙар яһарға. Советтар Союзы Геройы исемен алырға өлгөргән С. Ғәлимйәнов та ошо һайлап алынған егеттәр араһына эләгә. Мәскәүгә, унан Чкалов ҡалаһына уҡырға ебәрәләр. Бында килгәс, төркөмдәр төҙөлгәнсе, Ғәлимйәнов, Ҡаҙансыға ҡайтып киләйем тип, рөхсәт һорай. Уға отпуск бирәләр, һәм Сәлимйән, оҙаҡ уйлап тормай, яратып йөрөгән ҡыҙына өйләнеп китергә була. Унан Өфөгә уҡырға китә. Артынса йәш кәләше юлға сыға. Ҡыш көнө. Буран... Бесән тейәлгән санаға эйәреп, Сәлимә, көрт йыра-йыра, ҡайһы көндәре биш-алты саҡырым ғына ер үтеп, Аҫҡындан Өфөгә саҡ барып етә.

Сәлимәне ире уҡый башлаған училище ашханаһына эшкә урынлаштыралар. Шулай итеп, курсанттарҙың да, уҡытыусыларҙың да тормошо уның күҙ алдында үтә.

...Кеше ғүмере эреле-ваҡлы сәхифәләр теҙмәһенән торалыр. Ғәлимйәновтың тормошо ла ифрат биҙәкле, ә ваҡиғалар оло тарих хасил итерлек.

1937—38 йылдарҙа С. Ғәлимйәнов Алыҫ Көнсығышта, Хәсән күле эргәһендә әрме хеҙмәтен үтеп өлгөрә. Хәрби бурысын тултырғас, уға тыуған яғына ҡайтып китергә мөмкин була ла бит, тик шул ваҡыт Оборона министры Тимошенконың приказы сығып, демобилизацияланған ҡыҙылармеецтарҙың кейемдәрен һалдырып алып ҡалғас, Сәлимйәндең кәйефе ҡырыла: нисек инде ул тыуған ауылына әләм-һәләм кейемдә ҡайтып төшөргә тейеш? Ғорур була был егет: тота ла вербовка буйынса Амурҙағы Комсомольскиға юллана, эске эштәр ғәскәрҙәрендә хеҙмәт итә башлай. Ләкин яҙмыш үҙенекен итә — дөрөҫөрәге, илебеҙгә гитлерсыларҙың баҫып инеүе бөтөн Ғәлимйәновтарҙың тормошона ҡырҡа үҙгәрештәр индерә.

Әйтәйек, Сәлимйәндең 1941 йылға тиклем шул уҡ Алыҫ Көнсығышта хеҙмәт иткән ҡустыһы Нәғимулла һуғыш башланыу менән Көнбайышҡа фронтҡа ебәрелә. Унан бер генә хат килә. "Башҡаса, ағай, осраша алмабыҙ, ахырыһы", — тип яҙа ул, белгәндәй. Ысынлап та шулай килеп сыға — ул һуғышта хәбәрһеҙ ғәйеп була. Ҡустыһының фажиғәһе тураһында Сәлимйән һуғыш тамамланғас ҡына ишетә: Нәғимулла, 1941 йылдың 6 сентябрендә

үк ҡамауҙа ҡалып, фронт аша үҙебеҙҙекеләр яғына сыға алмай. Смоленск өлкәһенең бер ауылында оккупацияла ҡала, немецтарҙың хәрби лагерына барып эләгә һәм шунда һәләк була.

Сәлимйән Ғәлимйәнов үҙе лә, тыуған ауылына һуғыла алмайынса, тура фронтҡа үтеп китә. Ул, 2-се Украина фронтына эләгеп, Сталинград эргәһендә һуғышып йөрөй һәм һаңғыраулығы арҡаһында ауылда ҡалған ҡарт атаһының да армияға алыныуын, тап ошо мәлдә 1-се Украина фронтына эләгеп, Сталинград урамдарында атышып йөрөүен башына ла килтермәй. Уның шул көйгә, ут ҡулсаһынан сыға алмай, ҡала эсендә үлеп ҡалғанын аҙаҡ ҡына ишетә.

Тағы бер яҡын ҡәрҙәше — ике туған ҡустыһы Ш. Васиков — был көндәрҙә Кавказ тауҙарында алыша. Оҙаҡ ҡына ваҡыт гитлерсыларҙы бейек тау юлынан үткәрмәй торғандан һуң, патрондары тамам бөткәс, үҙен дә, уны уратып алған фашистарҙы ла ҡулында ҡалған һуңғы гранатаһы менән шартлата. Был батырҙың даны, һуңынан китаптарға яҙылып, бөтә ил буйынса таралаҫаҡ, күптәрҙең йөрәген тетрәтәсәк...

Безценный хаҡында иһә Төлгөҙбашҡа килгәнсе бер ни ҙә билдәле түгел ине. Уның ҡайҙан булыуын юлдашы Сәлимйән ағай ҙа, Сәлимә апай ҙа әйтә алманы. Шул көйгә Ғәлимйәнов ағайҙың һуғыш ҡағыҙҙарын, бүләк китаптарын ҡараштырып ултыра торғас, көтмәгәндә бер асыш яһаныҡ.

Сәлимйән ағай ҡасандыр Мәскәүҙән, СССР Оборона министрлығынан бүләк алған икән. Советтар Союзы Геройҙары тураһында белешмә булып хеҙмәт иткән ике томлыҡ китап ине ул. Алфавит буйынса 137-се битте асабыҙ. Бына бит ул — Безценный Виктор Николаевич. 1924 йылдың 20 июлендә Донецк өлкәһенең Дмитриевск, хәҙерге Макеевка ҡалаһында, хеҙмәткәр ғаиләһендә тыуған. Украин. 1950 йылдан бирле КПСС ағзаһы. 1941 йылда тулы булмаған урта мәктәпте тамамлаған. Совет Армияһына 1942 йылда алынған. 1943 йылда Өфө хәрби-пехота училищеһын тамамлаған. Советтар Союзы Геройы исеме 1943 йылдың 30 октябрендә бирелгән. Һуғыштан һуң өлкән лейтенант Безценный запаста була, тыуған яғында йәшәй. Ленин ордены, миҙалдар менән наградланған. 1976 йылдың 2 декабрендә вафат була.

Бында бер нәмәгә иғтибар итергә кәрәк: өлкән лейтенант В. Н. Безценный 193-сө уҡсы дивизияның 65-се армияһы 865-се уҡсы полкында хеҙмәт итә. Днепр йылғаһын Гомель өлкәһенең Лоев ҡасабаһы эргәһендә йөҙөп сыға. Уның етәкселегендәге взвод, уң яҡ ярҙа нығынып алып, башҡа подразделениелар йылға аша сыҡҡансы уларға ут менән ярҙам итеп тора.

С. Ғ. Ғәлимйәнов иһә 7-се гвардия армияһының 78-се уҡсы дивизияһы 225-се полкында була, Днепр һыуын Днепропетровск

өлкәһенең Домоткань ауылы эргәһендә сыға. Тимәк, уларҙың икеһенең дә батырлығы бер үк йылғаға бәйле, “Алтын Йондоҙ” менән наградланыу ваҡыттары ла ун көнгә генә айырыла.

Эйе, батырлыҡҡа — батырлыҡтың, ҡәрҙәшлеккә — ҡәрҙәшлектең, берҙәмлеккә берҙәмлектең шулай тап килеп тороуы күп булды шул үткән көндәребеҙҙә. Шуға күрә лә еңеп сыҡҡаныбыҙҙыр инде бөтә ҡыйынлыҡтарҙы. Тарихыбыҙҙағы еңеүҙәребеҙ ҙә, уңышһыҙлыҡтарыбыҙ ҙа, шатлыҡтарыбыҙ менән ҡара көндәребеҙ ҙә бер төйөнгә төйнәлгәйне.



Советтар Союзы Геройы
В. Г. Безценный.

...Ул тиклем оҙаҡ та ултырманыҡ беҙ әңгәмәләшеп. Әммә Ғәлимйәновтар өйөнән күңел яҡтырып сыҡты. Әллә инде элекке еңеүҙәрҙән ҡалған хәтирәләр йоғонто яһаны, әллә инде етешлекте расҫлап, Сәлимә апайҙың ҡабарып бешеп ултырған икмәгеме, әллә ҡарттарҙың үҙҙәренең юлаусыға бик ихлас тороуы шулай тәьҫир иттеме — моғайын, барыһы ла бер юлы булғандыр.

...Аҫҡынға барыуым, унан Төлгөҙбашҡа үтеүем 1994 йылда ине. Әле бына ишетәм: йылы икмәк бешереп, йылмая-йылмая беҙ мосафирҙарҙы һыйлаған Сәлимә апай донъя ҡуйған икән — ауыр тупрағы еңел булһын. Сәлимйән ағай иһә Екатеринбург өлкәһенә улы янына йәшәргә киткән: яңы урын, Уралдың саф һауаһы уға һаулыҡ-сәләмәтлек өҫтәһен. Мин Геройҙың алыҫ йылдарҙа алтын сығарыусыларға тапшырып киткән Ҡыҙыл байрағына күҙ һалам: ул музей түрендә, алтын уҡаларын ялтыратып, ғорур баҫып тора. Уны күргәс, Төлгөҙбаш иҫкә төшә, Сәлимйән ағай һәм Сәлимә апай менән һөйләшкәндә алынған тәьҫорат күңелемдә йылыта. Һаман йылыта.

*1994—1998 йй.*

## Аҙаҡҡы һүҙ

Уҡыусым! Һин, башлыса, ауыр тойғолар менән һуғарылған яҙмаларҙың һуңғы биттәрен ябып ҡуйҙың. Мин уларҙы башта “очерктар” тип атағайным. “Очерктар” булғас, тасуирланған ваҡиғаларға, унда ҡатнашҡан геройҙарға һоҡланыу белдерергә тейеш инем. Ләкин һөйләгән хәбәрҙәрем икенсерәк йүнәлеш алды. Шуғалыр ҙа, моғайын, ҡулъяҙманы нәшриәткә тапшырғанға тиклем уҡып сыҡҡан иптәштәр уны “публицистика” тип атау яғында булды. Ҡайһы берәүҙәр “тарихи хроника”, икеҫнселәр — “бәләкәй күләмдәге документаль повестар”, өсөнсөләр “көндәлек яҙғандағы кеүек уйланыуҙар икән”, тип тә атаны. Минең үҙемә ҡалһа, яҙмаларҙың ниндәй жанрҙа башҡарылыуы бик үк мөһим түгел ине. Мин теге йәки был ваҡиғаларҙың уртаһында ҡайнаған, буласаҡ геройҙарымды яҡындан белгән кешеләрҙең иҫтәлектәренә, хаттарына таяныптып, “эсемдәге”н асып бирергә тырыштым. Ә “эстәге” борсолоуҙар, хафаланыуҙар күберәк үҙемдең астрология буйынса ун ике йондоҙлоҡтоң 7-се билдәһенән булыуымдандыр, тием. Мәғлүм ки, “үлсәүҙәр” кем менән булһа ла низағлашыуҙы, ирешеү-талашыуҙы яратмай, юҡ тигәндә лә, бәхәстәрҙән ситкә тайпыла. Шәхси, ҡәҙимге тормошта ла, тотош ил кимәлендә лә. “Ғәҙел булмаған” һуғыштарҙы ғына түгел, “ғәҙел” тигәндәрен дә йөрәге ҡабул итмәй, сөнки уларҙың ҡайһыһын ғына алма — бөткөһөҙ ҡорбандар, ҡайғы-хәсрәт килтерә. Ә яу-дауҙарҙың иң дөрөҫ тигәне лә ғәҙәттәге ике ябай күршенең нимәнелер бүлешә алмайынса, асылда нәфселәрен, мин-минлектәрен тыя алмай шунып өсөн генә еңмешләнеүенә, хаслашыуына оҡшаған.

Борон замандарҙан килә был. Берәй хан, икенсеһен килеп баҫып, көслөк менән мал-тыуарын талап алып китһә, икенсеһе, дошманының артынан барып, ҡатын-ҡыҙҙарын, бала-сағаһын ҡыуып килтерә. Йылдар буйына туҡтау белмәгән ыҙғыш тыуа.

Бер кенәз, икенсеһенән көлөп, ғәм алдында намыҫына тейә. Тегеһе, үс алам тип, ҡоралға тотона, ғәскәр туплай. Йәнә үлтереш башлана.

Бер халыҡ, башҡаларға бик үк инәлмәйем, үҙаллыраҡ йәшәп ҡарайым, тип, пландар ҡора. Ләкин икенсеһенә был оҡшамай, әле генә минең ҡул аҫтында буйһоноп йәшәгән ҡәүем минең хоҡуҡтарыма тейә, тип бәлә һала һәм тегеһенең башы өҫтөндә ҡылыс уйнатырға тотона. Һөҙөмтәлә Чечнялағы кеүек ҡот осҡос һуғыш, ҡан ҡойош башлана. Меңәрләп-меңәрләп әҙәм заты яҡты донъя менән хушлаша.

Шул ҡәһәрле һуғыштарға кәртә ҡуйып булмаймы ни? — Шундай бер ҡатлыраҡ һорау ҡуйып маташты китап авторы.

Милләттәрҙең үҫеш тарихында социаль тетрәнеүҙәр ҡабатланып, инҡилабтар, ихтилалдар булып тороуын, синыфтарҙың ҡайһы бер мәсьәләләрҙе ҡорал ярҙамында ғына хәл итеүен белһә лә шул һорауҙы бирҙе ул. Сөнки уларҙың фаталь йәки ҡотолғоһоҙ булмағандары ла, уйындан уймаҡ булып сыҡҡандары ла етерлек.

Быуаттар буйына күргәндәребеҙ, ишеткәндәребеҙ ҙә раҫлай быны.

Үткән Бөйөк Ватан һуғышында ғына ла, уны башлап ебәреүгә үҙе лә сәбәпсе булған Советтар Союзы 20 миллион кеше юғалтты. Европала гитлерсылар тарафынан төҙөлгән Дахау, Бухенвальд, Маутхаузен, Майданек кеүек концлагерҙарҙа 4 миллиондан ашыу кеше ғүмере өҙөлгән. Бындай ҡот осҡос енәйәтселеккә артабан бер ҡасан да (бер ҡасан да!) юл ҡуйылмаясаҡ, тип белдерҙе донъя йәмәғәтселеге. Әммә өс ай ҙа үтмәне — Америка Ҡушма Штаттары Япония өҫтөнә атом бомбаһы алып барып ташланы — 300 мең кеше һәләк булды. Ә һуң беҙҙең үҙебеҙҙә, Тоцк лагерында һәм Силәбе өлкәһендә, атом энергияһын теҙгенләй алмауҙан йәндәрен биргәндәр һәм икенсе төрлө зыян күргәндәр кәм булдымы ни?

Бындай фажиғәләр беҙҙең өсөн мәңгелек һабаҡ булырға тейеш ине. Юҡ, элек нисек булған, бөгөн дә хакимдар халыҡ зарына ҡолаҡ һалып бармай. Һуғыш суҡмарҙары, уйланып та тормай, үҙҙәренән көсһөҙөрәк илдәргә баҫып инә, халыҡтың ғүмерен ҡыя. Батшалар һаман үҙ файҙаһына низағлаша, ә халыҡтар уларға эйәрә һәм... ҡырыла ла ҡырыла.

Автор бында бөтөн кешелек донъяһы  тураһында һүҙ алып барманы, теманы ныҡ тарайтып, үҙебеҙҙең тарихтан ғына миҫалдар эҙләне. Ләкин бында, сағыштырмаса бәләкәй генә географик урында ла, аяныс хәл-ваҡиғалар — аҙым һайын. Шуға күрә автор, мөшкөл хәлебеҙҙе белә тороп та, элек ата-бабаларыбыҙ күрһәткән батырлыҡтар менән бик үк маһаймай, күберәк донъяуи мәсьәләләр менән шөғөлләнһәк, балалар үҫтерһәк, йәштәрҙе һуғыштарҙан ҡурсалаһаҡ, дөрөҫөрәк булмаҫмы, ти. "Дошман"дың башын сабам тип күтәргән ҡылысыңды ҡара ергә йә иһә түңгәккә сап, шуның менән асыуыңды ҡайтар, тип саҡыра ул.

...Рәт-рәт теҙелеп, алһыуланып торған офоҡҡа ҡарап, ҡайҙалыр алыҫҡа, зәңгәрләнеп ятҡан һыу даръяһына табан китеп барабыҙ. Ә күҙҙәребеҙ йәш менән тулы. Сөнки артыбыҙҙан меңәрләгән мәйет оҙатып ҡала. Аяҡ аҫтында ла ергә һеңгән ҡәберҙәр, ҡәберҙәр. Беҙ быуаттарҙан ҡалған һөйәктәрҙе тапап үтәбеҙ. Эргәбеҙҙә иҫке харабалар һерәйешкән. Тарихыбыҙҙың был осоронан да ошондай емереклектәр һәйкәл булып ҡалыр микән ни?.. Аҙымдарыбыҙ йыл-

дам түгел — ауыр баҫабыҙ. Сафтарыбыҙ ҙа һирәгәйә бара. Ә ҡайҙа барабыҙ? Белгән юҡ.

Ғазаплы юлыбыҙҙа осраған ҡоралы "дошмандар" ғына ғәйепләме икән һуң беҙҙең кәмеүебеҙҙә? Бәлки, фажиғәләр кисереүебеҙҙә үҙебеҙҙең дә ғәйеп барҙыр? Уйлашайыҡ шул хаҡта. Бәхетле тормош, ысын гражданлыҡ кешеләргә тәкәбберлек, маһайыу аша килмәй бит. Гражданлыҡ — ул сабырлыҡ тәрбиәләү, башҡаларға ҡарата көс ҡулланмау, яман көстәргә эйәрмәү, һуғыштарға ерәнес уятыу.

...Бер мосафир, пәйғәмбәр ғәләйһис-сәләмгә килеп:

— Эй, Мөхәммәт, ҡиәмәт ҡасан була? — тип һораған, имеш.

Ғәләйһиссәләм һорауға һорау менән яуап биргән:

— Ә ҡиәмәт булмаһын өсөн нимә эшләнең?

— Күп ғибәҙәт ҡылдым, тип әйтә алмайым, әммә Аллаһы Тәғаләне һәм һине бик яраттым, — тигән әҙәм балаһы.

— Кеше яратҡаны менән бергә булыр, — тигән быға Рәсүлулла.

Уның һүҙҙәрен: һеҙ һанауһыҙ ниғмәттәр биргән өсөн Алланы яратаһығыҙ, уның илсеһе булған мине, Мөхәммәт пәйғәмбәрҙе лә яратаһығыҙ. Ләкин бит бөтөн кешеләрҙе лә Аллаһы Тәғалә яратҡан. Шунлыҡтан барлыҡ кешеләр ҙә үҙ-ара татыу йәшәһен, бер-береһе менән мөнәсәбәттәре күркәм булһын, — тип аңларға кәрәк. Ер йөҙөндәге бөтөн кешеләр ҙә бер ата — Әҙәмдең, һәм бер әсә — Һауаның балалары. Шуны онотмайыҡ.

Йөкмәткеһе

Шәхес яҙмышы — ил яҙмышы. . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . .5
I. Гелән атлығып тороу кәрәкме?. . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . .8
II. “Ҡалды ла, ау, тыуған еребеҙ”. . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . 23
III. Баймаҡтағы ҡанлы енәйәт. . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . 34
IV. Өҙөлгән моң. . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . 51
V. Ҡорбанғәлиевтарҙың яҙмышы. . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . 65
VI. Ҡыҙыл партизандар. . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . .76
VII. Ете орден кавалеры. . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . 91
VIII. Янғыҙ яуҙы ҡайтармай. . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . .95
IX. Дау дауыл тыуҙыра. . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . .101
X. Алты ҡырлы Мортазин. . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . 119
XI. Йөрәк яраһы. . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . .138
XII. Милләтебеҙ инәһе. . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . .143
XIII. Башҡорт һыбайлылары фажиғәһе. . . . . . . . . . . . . . . . . . . .154
XIV. Ир ҡанатҡайҙары ат була. . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . 174
XV. Ил улы. . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . 187
XVI. Батыр ғүмере — ике. . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . .196
XVII. Ун бер яугир. . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . 199
XVIII. Таң атмай ҙа атмай. . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . .207
XIX. “14 сәғәт 25 минутта”. . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . 224
XX. Һулыған сәскәләр. . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . .235
XXI. Күңелдәрҙе тоташтырған нурҙар. . . . . . . . . . . . . . . . . . . . .241
Аҙаҡҡы һүҙ. . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . 252

*Литературно-художественное издание*

**НАСЫРОВ Рауф Хаевич**

**Сабля хороша в ножнах**

Исторические очерки. Публицистика
(на башкирском языке)

Мөхәррире *С. Шәрипов*
Рәссамы *А. Васил*ов
Корректоры *Т. Насирова*

Лицензия № Б 848344, бирелгән 15.05.2000. Баçырға ҡул ҡуйылды 28.02.2000. Ҡағыҙ форматы $60 \times 84^{1}/_{16}$. Офсет ҡағыҙы № 1. Гарнитура Таймс. Ҡалҡыу ысул менән баçылды. Шартлы баçма табаҡ 14,88. Иçәп-баçма таб. 16,0. Тиражы 3000 дана. Заказ № 1326.
Хаҡы ирекле. Әҙер диапозитивтарҙан баçылды.

Өфө полиграфия комбинаты. 450001, Өфө, Октябрь проспекты, 2.

